# МИНЕН ГҮЗӘЛ ДИНЕМ

# 2



IslamicBook
Make Room For The Life

ИМАН НИГЕҘҘӘРЕН ӨЙРӘНӘМ

# МИНЕҢ ГҮЗӘЛ ДИНЕМ

**Әҙерләүселәр**

Рәжәб ӨЗДИРӘК - Фаруҡ СӘЛМАН - Нәзиф ЙЫЛМАЗ

## ИМАН НИГЕҘҘӘРЕН ӨЙРӘНӘМ

**ӨФӨ - 2020**

**Баһалаусылар:**
А.З. Салеев
Р.Р. Фасхудинов
К.Л. Жагипаров
Р.Ш. Мамедов

**Башҡорт теленә тәржемә итеүселәр:**
Әминә Мусина, Резеда Суфиянова
**Әҙәби редактор:**
Әҙибә Ғәҙел
**Дини редактор:**
Айҙар Хәбибуллин
**Дизайн:**
Рәсим Шакир улы

ВСЕ ПРАВА ЗАЩИЩЕНЫ
ISBN: 978-5-6043332-8
ИЗДАТЕЛЬСТВО ООО "МИР ЗНАНИЙ" 2020

**Книги можно заказать:**
Тел. 8(968)7693443
Веб-сайт: www.islamicbook.ru
mirznaniy571@mail.ru

IslamicBook
Make Room For The Life

# *Инеш һүҙ*

**Б**еҙгә гүзәл Ислам динен биргән Раббыбыҙға сикһеҙ рәхмәттәребеҙ булһын! Бөтә тормошо менән беҙгә Ислам дине хәҡиҡәтен еткергән, барлыҡ рәсүлдәрҙең Әфәндеһенә һәм һуңғы Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә, ғаиләһенә һәм Уның сәхәбәләренә Аллаһтың рәхмәте һәм сәләме булһын!

Һөйөклө балаларыбыҙ!

Аллаһҡа мөхәббәт – динебеҙҙең төп асылы. Хаҡ Тәғәләбеҙ йөрәктәребеҙҙә һөйөү өсөн бар ҡылған. Ул динебеҙҙе, Пәйғәмбәребеҙҙе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Ул һөйгәндәрҙе һөйөүебеҙҙе һәм улар юлынан барыуыбыҙҙы теләй.

Мөхәббәт күңелдә ярала, аҙаҡ ғәмәлдәребеҙҙә күренә. Иң бөйөк мөхәббәт – Аллаһҡа мөхәббәт – шулай уҡ күңелдә ярала. Был мөхәббәт беҙҙе яҡшылыҡ юлына баҫтыра, Аллаһтың ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылыуға этәрә. Беҙ ҡылған игелектәр һәм ғибәҙәттәр ул мөхәббәтте һәм иманды көсәйтә.

Һөйөклө балалар!

Пәйғәмбәребеҙ ҡабыҙған иман нуры, быуындан-быуынға күсеп, беҙҙең көндәргә килеп етте. Һәр быуын, хәленән килгәнсә, шул дингә ярашлы йәшәргә һәм уны киләһе быуындарға тапшырырға тырышты. Шул рәүешле Ислам ғилемдәре инсандан инсанға, күңелдән күңелгә күсеп, беҙҙең көндәргә килеп етте.

Һәммәбеҙҙе лә яралтҡан, Үҙенең Һөйөклө Илсеһе Мөхәммәт Мостафаны (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм гүзәл динебеҙҙе барлыҡҡа килтергән Аллаһу Тәғәләне ныҡ яратыуығыҙҙы беҙ беләбеҙ. Беҙ ҙә һеҙҙе бик тә яратабыҙ һәм һеҙҙең, балаларыбыҙҙың, динебеҙҙе ентекләп өйрәнеүегеҙҙе теләйбеҙ.

Һеҙ – беҙҙең киләсәгебеҙ. Беҙҙең ҡулдағы бөтә матди һәм рухи ҡиммәттәр оҙаҡламай һеҙҙең ҡулға күсәсәк, улар өсөн яуаплылыҡ та һеҙҙең өҫтә буласаҡ. Яратҡан Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡабыҙған иман нурын беҙҙән ҡабул итеп, һеҙ уны артабан алып китәсәкһегеҙ. Шулай булғас беҙгә, оло быуынға, һеҙҙе был изге эшкә әҙерләү бурысы йөкмәтелгән. Оҙайлы тарихы булған динебеҙҙе иң камил сүрәттә беҙ һеҙгә тапшырырға тейешбеҙ. Был юлдағы тырышлығыбыҙ – Аллаһу Тәғәләгә мең шөкөр – тәүге емештәрен бирҙе.

«Минең гүзәл динем» серияһынан «Ғибәҙәт ҡылырға өйрәнәм» тип аталған тәүге китапта беҙ ғибәҙәт, тәһәрәт, тәйәммүм, намаҙ, ураҙа, зәкәт, хаж һәм ҡорбан хаҡында

һөйләнек. Ә «Иман нигеҙҙәрен өйрәнәм» исемле китапта һеҙгә Аллаһҡа, фәрештәләргә, илаһи яҙмаларға, пәйғәмбәрҙәргә, әхирәткә һәм тәҡдиргә инаныу тураһында аңлаттыҡ.

Был китапты әҙерләгәндә, элек нәшер ителгән китаптарҙы файҙаландыҡ һәм уларға ҡағылышлы бөтә тәнҡит һүҙҙәрен күҙ уңында тотоп эшләргә тырыштыҡ. Рухи ғилемгә эйә булыу хеҙмәтенә ҙур теләк һәм кинәнес менән тотоноуығыҙҙы бик теләйбеҙ. Ошо маҡсаттан сығып, был китапта беҙ шундай материалдарҙы файҙаландыҡ:

• Гүзәл динебеҙ хаҡында яратып һәм ҡыҙыҡһынып уҡыр өсөн, һәр теманы бәләкәй генә хикәйәләрҙән башланыҡ.

• Динебеҙҙең сығанағы һәм нигеҙе булған Ҡөрьән аяттарына һәм Пәйғәмбәребеҙ хәҙистәренә иғтибарығыҙҙы йәлеп итеү өсөн, беҙ уларҙы рамкалар менән айырҙыҡ.

• Динебеҙҙең бер генә әмере һәм тыйыуы ла алъюҫыҡҡа бирелмәгән. Әгәр уларҙың мәғәнәһен һәм файҙаһын белһәк, беҙ динебеҙ ҡанундарын тағы ла нығыраҡ яратып үтәйәсәкбеҙ. Бына ни өсөн һәр ғибәҙәт асылында ятҡан хикмәт һәм файҙаны аңлатып биреүҙе беҙ кәрәкле тип таптыҡ.

• Аңлайышлыраҡ булһын өсөн, ҡайһы бер темаларҙы һорауҙар һәм уларға яуаптар рәүешендә бирҙек.

• Һүрәттәрҙе яратыуығыҙҙы белеп, байтаҡ иллюстрациялар ҡулландыҡ.

• Һеҙҙең рухи донъяғыҙҙы Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Уның сәхәбәләре һәм Исламдың бөйөк эшмәкәрҙәре тураһындағы иҫтәлектәр менән байытырға тырыштыҡ.

• Уңайлы булһын өсөн, ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе таблица һәм схемалар рәүешендә бирҙек.

• Һеҙ алған белемдәрегеҙҙе тикшереп ҡарай алһын өсөн, һәр бүлем һуңында һорауҙар урынлаштырҙыҡ.

• Устарығыҙҙы күккә төбәп, Аллаһу Тәғәләгә доға ҡылыр өсөн, беҙ Һөйгән Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уҡыған доғаларҙы урынлаштырҙыҡ.

Үҙ доғаларығыҙҙа ошо китапты әҙерләүҙә ҡатнашҡандарҙы ла онотмаҫһығыҙ, тип өмөтләнәбеҙ һәм “Минең гүзәл динем” серияһынан “Иман нигеҙҙәрен өйрәнәм” тип аталған китап менән яңғыҙығыҙҙы ҡалдырабыҙ.

Йөрәктәрегеҙ - Иман, тормошоғоҙ – Ислам, күңелегеҙ Ихсан менән тулһын. Фәрештәләр юлдашығыҙ булһын, яҡшы кешеләр – яҡын дуҫтарығыҙ, ә Аллаһу Тәғәлә - ярҙамсығыҙ. Йәннәт юлдары асыҡ булһын һеҙгә…

Аллаһ һәр саҡ һаҡлап торһон һеҙҙе!

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

## ДИН / 9


Хикәйә: ТАҺИР ҺӘМ МАҺИР ....10
Кеше һәм дин....15
Беҙгә дин нимә бирә?....18
Хикәйә: ҠУЛЛАНЫЛМАҒАН ҺАБЫН ....22
Ислам - хаҡ динебеҙ....24
Шиғыр: ҠӨРЬӘН БАҠСАҺЫ....26
Ислам дине үҙенсәлектәре ....27
Пәйғәмбәребеҙ r - Ислам динендәге иң күркәм үрнәк....30
ҺОРАУҘАР....33


## ИМАН / 35


Хикәйә: АЛЛАҺҠА ЫШАНҒАНМЫН ИКӘН, ӘММӘ БЫЛ ХАҠТА БЕЛМӘГӘНМЕН......36
Иман ....39
Хикәйә: УНЫҢ ТОРМОШО ШУЛАЙ ҮҘГӘРӘ....42
Дин күҙлегенән ҡарағанда кешеләр ....45
Дин мәсьәләләрендә нимәгә иғтибар итергә тейешбеҙ? ....47
Хикәйә: ПӘЙҒӘМБӘРҘӘН r ҠЫУАНЫСЛЫ ХӘБӘР.... 49
Иманыбыҙҙы нығытыр өсөн, нимә эшләргә тейешбеҙ? ....50
Шиғыр: ИҢ ИЗГЕ ҺҮҘ....54
Хикәйә: ҺОРАУҘАР БИРӘ БЕЛГӘН КЕШЕ....57
Беҙгә иман нимә бирә ....60
Пәйғәмбәребеҙҙең r ихлас иманы ....63
Хикәйә: АҠ КЕЙЕМДӘГЕ БИЛДӘҺЕҘ КЕШЕ ....65
Иман шарттары ....66
ҺОРАУҘАР....67


## АЛЛАҺҠА ИНАНЫУ / 71


Хикәйә: АЛЛАҺҠА ЫШАНҒАН МАЛАЙ....72
Һәр әҫәр авторына ишаралай ....74
Шиғыр: ӘГӘР АЛЛАҺ ТЕЛӘҺӘ....76
Хикәйә: ӘБҮ ХӘНИФӘНЕҢ ЯУАБЫ ....77
Эске һәм тышҡы донъяның камил тәртибе ....79

Хикәйә: ӨС ҺОРАУҒА БЕР ЯУАП ... 81
Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне сифаттары аша танылйбыҙ ... 83
Аллаһтың сифаттары ... 84
Хикәйә: ҺӨТ ҺАТЫУСЫНЫҢ ҠЫҘЫ ... 86
Раббым! Мин Һине таныып, бөтә йөрәгем менән Һиңә инанам ... 91
Хикәйә: ЕГЕТТЕҢ ИМАНЫ ... 93
Иң Гүзәл Исемдәр (Әсмәүл – Хүснә) Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнеке ... 96
Аллаһҡа иман беҙгә нимә бирә ... 99
Аллаһҡа мөхәббәт ... 102
Ғибәҙәтебеҙҙең асылы – доға ... 104
Хикәйә: МИН ҺЕПЕРҘЕМ, Ә ҺИН ҺЫУ ҠОЙ ... 106
Мосолман булыуыбыҙ беҙгә нимә йөкләй? ... 108
Хикәйә: КЕМ ҠОТҠАРЫР? ... 109
Пәйғәмбәребеҙ r Аллаһты ныҡ яратҡан ... 110
ҺОРАУҘАР ... 113

## ФӘРЕШТӘЛӘРГӘ ИНАНЫУ / 115

Хикәйә: ФӘРЕШТӘ ТАУЫШЫ ... 116
Күренгән һәм күренмәгән заттар ... 118
Фәрештәләргә инаныу ... 119
Фәрештәләргә инаныу беҙгә нимә бирә ... 123
Фәрештәләр мөьминдәр өсөн доға ҡыла ... 127
Хикәйә: ФӘРЕШТӘЛӘР, ШАЙТАН ҺӘМ КЕШЕ ... 129
Шайтан ... 132
Пәйғәмбәребеҙ r һәм фәрештәләр ... 135
ҺОРАУҘАР ... 139

## ИЛАҺИ ЯҘМАЛАРҒА ИНАНЫУ / 141

Хикәйә: ХЫЯЛ ДИҢГЕҘЕНӘ СУМ ... 142
Кеше Илаһи Яҙмаларға мохтаж ... 145
Илаһи Яҙмалар ... 146
Тәүрат ... 147
Зәбүр ... 147
Инжил ... 148
Изге Ҡөрьән ... 148
Илаһи Яҙмаларҙың ҡиммәте ... 149
Әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең китап менән танышайыҡ ... 152
Изге Ҡөрьәндең ҡоролошо ... 152

Тәүге илаһи вәхи ........ 153
Изге Ҡөрьәнде яҙыу һәм ятлау........ 155
Изге Ҡөрьәнде бер Китапҡа туплау ........ 155
Изге Ҡөрьәндең даналарын таратыу........ 156
Изге Ҡөрьәнде уҡыу ҡиммәттәре........ 156
Ҡөрьән Кәримдең төп фекерҙәре........ 158
Пәйғәмбәребеҙ r һәм Изге Ҡөрьән........ 162
ҺОРАУҘАР ........ 165

## ПӘЙҒӘМБӘРҘӘРГӘ ИНАНЫУ / 169

Риүәйәт: ПӘЙҒӘМБӘРҘӘР - Аллаh илселәре........ 170
Беҙгә юл күрһәтеүселәр........ 175
Пәйғәмбәрҙәр һәм уларҙың сифаттары ........ 176
Пәйғәмбәрҙәрҙең дингә өндәүҙә дөйөм уртаҡлыҡтары ........ 178
Пәйғәмбәрҙәргә инаныуҙың ҡиммәте ........ 179
Пәйғәмбәрҙәр тормошо ........ 182
Әҙәм пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм)........ 182
Нух пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) кәмәһе ........ 183
Ибраһим пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ........ 187
Йософ пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ........ 189
Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм)........ 190
Юныс пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) - балыҡтың әсире........ 193
Ғайса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм)........ 197
Мөхәммәт пәйғәмбәр r ........ 199
Пәйғәмбәребеҙ r менән алдағы пәйғәмбәрҙәр ........ 202
ҺОРАУҘАР ........ 205

## ӘХИРӘТКӘ ИНАНЫУ / 209

Хикәйә: БЕҘ ЯРАТҠАНДАРЫБЫҘ МЕНӘН ОСРАШАСАҠБЫҘ........ 210
Мәңгелек тормош ҡапҡаһы........ 213
Донъяуи ниғмәттәр ........ 214
Фани донъя - сәйәхәт........ 214
Донъяуи ниғмәттәр ваҡытлыса бирелә........ 214
Ерҙәге тормош – ул имтихан........ 215
Фани донъя – ул әхирәт баҫыуына сәселгән орлоҡ ........ 215
Тормош сәйәхәте ........ 216

Хикәйә: ВАФАТ БУЛҒАН БЕРЕНСЕ КЕШЕ....218
Әхирәт дәүерҙәре ....222
Ахрызаман (Ҡиәмәт Көнө)....223
Яҙғы йәнләнеү ....224
Терелеү (Бәғс)....225
Ғәмәл китабын тапшырыу....227
Хисап....227
Үлсәү (Мизан) ....228
Кәүҫәр шишмәһе ....228
Күпер (Сират) ....229
Тамуҡ (Йәһәннәм)....229
Ожмах (Йәннәт) ....231
Хикәйә: КЕШЕ АҠСАҺЫ....232
Аллаһтың сикһеҙ мәрхәмәте һәм шәфҡәте....234
Әхирәткә инаныуҙың ҡиммәте ....235
ҺОРАУҘАР ....236

## ТӘҠДИР (ҠАДӘР) / 239

Хикәйә: БЫНА ОШОНДА ЯҘЫП ҠУЯМ! ....240
Тәҡдир һәм уның үтәлеше ....244
Хикәйә: ЯҘМЫШТАН УҘМЫШ ЮҠ ....246
Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ғилеме һәм тәҡдир ....249
Кешенең ихтыяр азатлығы ....249
Хикәйә: АЛЛАҺТЫҢ ТӘҠДИРЕНӘН УНЫҢ ТӘҠДИРЕНӘ ҺЫЙЫНАМ ....251
Хеҙмәт, ризыҡ һәм Аллаһҡа тәүәккәл итеү ....252
Ике тапҡыр емеш биргән үҫенте ....253
Сәбәп һәм нәтижә ....254
Хеҙмәт һәм тәүәккәл итеү ....254
Хикәйә: АРЫҪЛАН МЕНӘН ТӨЛКӨ....257
Тәҡдиргә инаныуҙың ҡиммәте ....260
Пәйғәмбәребеҙҙең ﷺ тәҡдир һәм яҙмышҡа шөкөр итеү хаҡындағы нәсихәте ....262
ҺОРАУҘАР ....265





# АЛЛАҺҠА АЛЫП БАРҒАН ЮЛЫБЫҘ:
# ДИН

- *Кеше һәм Дин*
- *Дин беҙгә нимә бирә*
- *Ислам диненең үҙенсәлектәре*
- *Пәйғәмбәр Әфәндебеҙ - Динебеҙҙәге иң гүзәл Үрнәк*





# ТАҺИР һәм МАҺИР

Янартауҙың итәгендә генә бер күркәм ҡала торған. Был ҡалала ағалы-ҡустылы Маһир менән Таһир йәшәгән. Ғалимдар әйтеүенсә, тиҙҙән матур ҡаланы юҡҡа сығарыу менән янап, харабаларға әйләндереп, янартау урғыла башларға тейеш. Гүзәллеге юғалмаясаҡ икенсе ҡала барлығына Таһир ышанған. Маһирҙың инде емереклектәргә әйләнәсәк урында йәшәгеһе килмәгән. Шуға күрә ағалы-ҡустылы был икәү ҡаланы ташлап китергә ҡарар итә. Таң һарыһынан юлға сығалар. Күпмелер ара үткәндән һуң, юлдар икегә айырыла. Юл тармағында улар бер ғалимды осрата һәм унан ҡайһы юлдың яҡшыраҡ булыуын һораша. Ғалим уларға:



«Юлдың уң тармағы күркәм, хозур ҡалаға илтә. Әммә был юлда иҫкәртеүсе һәм тыйыусы ҡағиҙәләргә һәм тамғаларға иғтибарлы булырға, уларҙы үтәргә кәрәк. Әгәр уң юлды һайлаһағыҙ, һеҙгә әмерҙәрҙе үтәп, тыйылғандарынан тыйылыу кәрәк була. Һеҙ үткән урындарығыҙҙы таҙалыҡта һәм тәртиптә ҡалдырырға һәм дә был юлдағы кешеләрҙе борсоуға һалмаҫҡа тейеш булаһығыҙ. Нимә рөхсәт ителгән, тик шуны ғына ашап-эсергә мөмкин. Был юлдың һәм уның эргә-тирәһенең хужаһы барлығын һис кенә лә онотмағыҙ. Әгәр, юл ҡағиҙәләренә һәм билдәләренә иғтибарлы булып, уларҙы үтәһәгеҙ, һеҙ юл ауырлыҡтарына тарымаясаҡһығыҙ һәм матурлығын күҙ алдына ла килтермәгән ҡалаға етәсәкһегеҙ.

Юлдың һул тармағында бер ниндәй ҙә ҡағиҙәләр ҙә, ҡанундар ҙа юҡ. Нимә теләйһегеҙ - шуны эшләй, нисек теләйһегеҙ - шулай ҡылана алаһығыҙ. Әммә был юл хәүефле. Теләһә ҡасан һеҙгә юлбаҫарҙар һәм ҡырағай йәнлектәр ташланыуы ихтимал. Һеҙҙең мөлкәтегеҙҙе йәки ғүмерегеҙҙе тартып алыуҙары мөмкин,» - тип кәңәш биргән.

Ғалимдың һүҙен тыңлағандан һуң, Таһир менән Маһир бер аҙ ваҡыт уйланып тора. Таһир уң юлды һайлай. Шулай итеп, уның ғүмере һәм мөлкәте яҡлаулы буласаҡ, үҙе хәүефтән һаҡланырға өйрәнәсәк. Ышанычлы юлды һайлап, ул һау-сәләмәт һәм имен-аман теләгән урынына барып етәсәк.

Маһирҙың ундай ауырлыҡты үҙ өҫтөнә алғыһы килмәй. Еңел һәм иркен йәшәп, нисек теләйһең шулай сәйәхәт итеп булғанда, ниңә ниндәйҙер ҡағиҙәләргә буйһонорға? Уның фекеренсә, тыныслыҡ - теләгәненсә йәшәүҙә. Әгәр ҙә ҡурҡыныстар йә юлбаҫарҙар менән осраша, уларҙан ҡасасаҡ. Шуға күрә ул, ныҡышып, һул юлдан барырға өгөтләй. Таһир уның яңылышыуын, был юлдың аҙағы көрсөккә илтеүен аңлатып ҡарай. Уң юлдағы ҡағиҙәләр уларҙың тормош хәүефһеҙлеге һәм сәләмәтлеге өсөн кәрәк бит. Ысын бәхет һәм тыныслыҡ ошо сәйәхәттең ҡағиҙәләренә, тәртибенә буйһоноуҙа икәнен нисек кенә ағаһына аңлатырға тырышмаһын, тегеһе уны тыңламай. Ахырҙа улар хушлашып айырыла.

Азатлыҡты тойған Маһир, ҡыуанып, юлға сыға. Ул бит бер ниндәй ҡағиҙәләргә буйһонорға тейеш түгел. Маһир үҙе теләгәнсә эшләгәненә шатлана, күңелле итеп ҡалҡыулыҡтарҙы үтә, йырындарҙы аша сыға. Нимә таба - шуны ашай, үҙенә һәм тирә-яҡ мөхиткә зыян килтергәненә иғтибар итмәй. Бер заман ул тип-тигеҙ киң дала юлы буйлап китә. Ошо дала буйлап барғанда, ҡапыл ниндәйҙер тауыш ишетә. Ни күрә? Бәләкәй генә урмандан атылып сыҡҡан арыҫлан туп-тура уға табан сабып килә. Ҡото осҡан Маһир нишләргә белмәй ҡаса башлай. Әммә арыҫлан уны ҡыуып етеп килә. Алдында ул бығаса бер ҡасан да осратмаған ғәләмәт ҙур ҡоҙоҡтарҙы күрә. Арыҫлан инде уны тоттом тигәндә, ул бер ҡоҙоҡҡа етә һәм ҡурҡышынан шунда һикерә.

Ҡоҙоҡ шул тиклем ҙур, хатта диуарҙарында ағастар үҫә. Ҡолаған ваҡытта Маһир береһенә йәбешә, арыҫландың ауыҙынан ҡотолоу ҡыуанысынан бер аҙға күҙҙәрен йомоп тора, тәрән һулыш ала. Әммә шатлығы ҡыҫҡа булып сыға. Күргәне - ҡот осмалы. Аҫҡа ҡараһа, ни күрә? Аждаһа, ауыҙын ҙур асып, уның ҡолап төшөүен көтә. Өҫкә ҡараһа – унда арыҫлан. Ә ул эләгеп торған ағастың олонон береһе аҡ, икенсеһе ҡара ике сысҡан кимерә. Тик был ағас ниндәй ҡыҙыҡ! Унда бөтә төр емеш-еләк бар. Төрлө-төрлө еләк-емеште күреп, Маһирҙың ауыҙ һыуы ҡорой.

Аҫта – аждаһа, өҫтә – арыҫлан! Ә ағастың ботаҡтарын туҡтауһыҙ сысҡандар кимерә. Хәле тураһында уйламаҫҡа тырышып, Маһир йәнә юлда үҙен нисек тотһа, шулай ҡылана башлай. Күңел әрнеүенә иғтибар итмәй, нәфсеһе

ҡушҡанға буйһона. Емеш-еләктең файҙалымы, зарарлымы икәнен ҡарап тормай - ҡулы еткәндең барыһын да ашай. Тиҙҙән Маһир ниндәй ҡот осҡос хәлдә ҡалғанын бөтөнләй онота. Алмаш-тилмәш ҡапҡан татлы емештәрҙең тәме арҡаһында, ул ҡабаттан үҙен тыныс һәм бәхетле итеп тоя. Ә асылда ул бөтә яҡтан да ҡурҡыныс менән уратып алынған. Уны бәхетһеҙ финал көтә: өҫкә менһә – арыҫланға, аҫҡа төшһә, аждаһаға ризыҡ буласаҡ. Башҡа юл юҡ. Эләгеп торған ағасын иртәме-һуңмы сысҡандар кимереп бөтәсәк.



Ни эшләргә тейеш һуң? Нисек сығырға был хәлдән? Ашаған



ризығының файҙалымы, әллә зарарлымы, ашарға яраҡлымы, әллә яраҡһыҙмы икәнен белмәйенсә, бәхеткә ирешә аламы? Ҡанундарҙы сығарыусының талаптарын, ҡағиҙәләрен һанға һуҡмайынса, ни теләйһең барыһын да эшләргәме? Былай ҡотолоу мөмкинме ни?

Ә хәҙер, Маһирҙы ҡалдырып, ҡустыһына барайыҡ. Таһир менән ни булғаны ҡыҙыҡмы? Теләгән урынына имен-аман барып еттеме икән?

Таһир уң юлды һайлай, сөнки ҡағиҙәләр һәм ҡанундарға ярашлы сәйәхәттең хәүефһеҙ

булғанына ышана. Ҡайҙалыр сикһеҙ ирек булыуы хаҡында уйламай. Ҡанун-ҡағиҙәләрҙе танымай йәшәгәндәр үҙенә лә, башҡаларға ла зарар, зыян ғына килтергәнен бик яҡшы төшөнә ул.

Тормошондағы иң яҡшы юлды һайлаған Таһир үҙенә йөкмәтелгән барлыҡ бурыстарҙы үтәй. Юл билдәләренә иғтибарлы була. Ҡушылғандарҙы үтәй, тыйылғандарҙан тыйыла, хәүеф-хәтәрҙән ҡотолоу юлдарын өйрәнә.

Ахырҙа Таһир, ағаһы кеүек, киң һәм тигеҙ туғайға барып сыға. Алыҫтан уны арыҫлан баҫтырғанын күреп ҡала, ләкин Таһирҙың, ағаһы һымаҡ, ҡото осмай. Ул шуны яҡшы белә: был туғайҙың хужаһы бар һәм ошо арыҫлан уға буйһона, әгәр унан ярҙам һорап мөрәжәғәт итһә, арыҫландан ҡотоласаҡ. Тик тәүҙә мөмкин булған ҡотолоу сараларын ҡулланып ҡарарға кәрәк. Арыҫландан ҡасып, диуарҙарында ағастар үҫкән бер ҡоҙоҡҡа һикерә егет. Ҡолаған саҡта, ботаҡтарҙың береһенә йәбешеп өлгөрә. Ағаһы ырғыған ҡоҙоҡтағы кеүек, бында ла ағасты береһе аҡ, икенсеһе ҡара ике сысҡан кимерә. Өҫтә - арыҫлан, ә аҫта – аждаһа. Ағаста мең төрлө емеш үҫә. Әммә ләкин быңдай ҡурҡыныс менән осрашҡан Таһир нимә эшләргә кәрәклеген белә. Юл күрһәткән тамғалар күркәм ҡалаға эләгергә теләүсенең ошондай һынауҙы үтергә тейешлеген хәбәр иткәйне. Был үҙәндең, был ҡоҙоҡтоң, был аждаһаның һәм был арыҫландың хужаһы барлығын һәм ул хужа уны һынағанын да аңлап тора.

Таһир юлдағы кеүек үк иғтибарлы булырға тейеш. Ҡоҙоҡтоң ағасындағы емештәр – ул йүнәлгән ҡалалағы еләк-емештең өлгөһө. Уларҙың ҡайһы берҙәре йоҡлатыу ғәмәленә эйә, ә йоҡомһораҡҡан емештәрҙе ашау тыйыла. Емеш ашау – тотоноп торған ағасынан йығылып, үҙенде хәүефкә дусар итеү тигән һүҙ. Шуға күрә Таһир барлыҡ еләк-емеште түгел, үҙенең көсөн һаҡлар өсөн, рөхсәт ителгәндәрен генә ашарға тейеш. Юлдағы бер тамға был ҡоҙоҡта туннель булыуын, ошо ағас менән шул матур ҡаланы тоташтырыуын күрһәтә ине. Туннелде табып, ҡалаға барып етер өсөн, уға көс талап ителә. Таһирға был ҡоҙоҡтан алып сығыусы туннелде табырға һәм бөтә тереклек Хужаһынан ҡотолорға ярҙам итеүен һорарға тейеш.

Таһир туннелде эҙләй башлай. Ул, хәленән килгәнсә, бөтә тырышлығын һала. Сығыу юлын эҙләй һәм ихлас күңелдән бөтә тереклек Хужаһынан үтенә: «Әй был биләмәләрҙең Хакимы! Мин һинең бойороҡтарыңа буйһондом. Дөрөҫ юлдан барырға тырыштым. Тыйғаныңдан тыйылдым. Бер кемгә лә зыян һалманым. Хәҙер мин Һинең ярҙамға мохтаж. Һинән өмөтләнеп ярҙам һорайым.»

Таһирҙы үтенесе өмөтләндерә, көс бирә. Һәм ахыр сиктә, тырыша һәм ялбара торғас, сығыу юлын таба. Юл аждаһаның ауыҙына йәшерелгән икән. Таһир ишекте аса. Алдында һушты алырлыҡ хозур баҡса пәйҙә була. Ул ҡалдырып киткән ҡаланан күпкә күркәмерәк  был ҡала. Таһир, сабырлыҡ күрһәткәне һәм ҡағиҙәләрҙе үтәгәне, Хужаһын, бөтә тереклекте Яралтыусыны үтенеп ярҙамға саҡырғаны өсөн, бүләкләнә. Барып еткән ҡалаһында сикһеҙ бәхеткә сума.

## БЫЛ ХИКӘЙӘЛӘГЕ СИМВОЛДАР НИМӘНЕ САҒЫЛДЫРА?

Был хикәйәлә кешенең тормошондағы ваҡиғалар ҡайһы бер символдар ярҙамында аңлатыла. Әйҙәгеҙ әле, был символдарҙың мәғәнәһен ҡарайыҡ:

**Таһир** - үҙенең аҡылын дөрөҫ йүнәлештә ҡулланған, Раббыһына инанған, Ул урынлаштырған ҡағиҙәләргә эйәргән ихлас мөьминде аңлата.

**Маһир** - насар ҡылыҡтары ғәҙәтенә ингән, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә урынлаштырған ҡағиҙәләрҙе үтәмәгән, үҙенең нәфсеһенә буйһонған кәфер кешеләрҙе сағылдыра.

**Уң юл** – Иман һәм Ислам юлы. Аллаһ, урынлаштырған ҡағиҙәләрҙе күрһәтә. Аллаһ беҙгә эйәреүҙе талап иткән, Ҡөрьән күрһәткән юл. Ул Ислам диненең йәшәү рәүеше.

**Һул юл** – Аллаһ оҡшатмаған юл. Шайтан күрһәткән иманһыҙлыҡ һәм бойһонмаусанлыҡ юлы. Беҙҙең күркәм динебеҙ Ислам шелтәләгән, Аллаһҡа буйһонмай йәшәүҙе алға һөргән йәшәү рәүеше.

**Киң һәм тигеҙ туғайлыҡ** – беҙ йәшәгән донъя.

**Ағас** – һәр кешенең тормошо, йәшәгән ғүмеребеҙ.

**Аҡ һәм ҡара сысҡан** – аҡ сысҡан көндөҙ, ҡара сысҡан төндөң символы. Көн артынан төн үтеп, улар кеше ғүмерен ҡыҫҡарта.

**Арыҫлан** – кешенең үлеме. Кешене фани донъянан, бөтә яратҡанынан һәм бөтә шатлыҡтарынан айырған үлем хәҡиҡәте.

**Аждаһа / ишек** – ҡәберлекте аңлата. Ҡәбер - киләһе тормошҡа ишек. Ҡөрьән күрһәткән юлдан атлаған мөьминдәр өсөн һынау булған, был тормоштан асыла торған ожмах баҡсаһына ишек. Иҙелеүҙән ҡотолоуҙың, тыныслыҡ һәм бәхеттең башы ул. Кемдәр Аллаһҡа һәм киләһе тормошҡа ышанмай, улар өсөн – төрмә һымаҡ ҡыҫыҡ урын.



**Ағастағы емеш-еләк** – донъяуи байлыҡ. Уларҙың барыһы ла - артабанғы рәхәт тормоштоң өлгөһө. Ысын байлыҡ – киләһе тормошта, әхирәттә. Кем был донъяның ниғмәттәренә алдана, кем уға хушһынып, әхирәт тураһында онота, үҙенә зыян килтерә, сөнки улар Аллаһ ҡаршыһындағы күпкә күркәм ниғмәттәрҙе юғалта. Ә кемдәр донъяның файҙалы байлыҡтарын ғына ҡуллана, улар сикһеҙ йәннәт рәхәтлектәрен татыясаҡ.

**Ағаста үҫкән меңдәрсә төрлө емеш-еләк** Аллаһтың көс-ҡеүәтен күрһәтә. Раббыбыҙ кешегә бер тупраҡтан мең төрлө ниғмәттәр үҫтерә.

*Әгәр кемдер, Таһир кеүек, мөьмин булып, динебеҙ ҡушҡанса йәшәһә, сикһеҙ сәғәҙәткә ирешер, йәннәткә инер.*

*Кем дә кем, мәҫәлән Маһир кеүек, гүзәл динебеҙҙең ҡағиҙәләренә ҡаршы барһа, сикһеҙ бәхетен һәм йәннәтте юғалтып, йәһәннәмгә юлланыр.*

# КЕШЕ һәм ДИН

Кеше – был донъяға килгән, рухтан һәм тәндән торған зат. Тәнебеҙ - матди яғыбыҙҙы, ә рух күңелебеҙҙе күрһәтә. Рух – беҙҙе башҡа заттарҙан айырып тора, кешеләргә генә хас сифаттар бирә.

Рухыбыҙҙы күҙҙәребеҙ менән күреү, ҡулдарыбыҙ менән ҡағылыу, һиҙеү ағзалары ярҙамында тойоу мөмкин түгел. Рухыбыҙ һәм тәнебеҙ араһындағы бәйләнеш, электр тогы һәм лампочка араһындағы бәйләнеш кеүек: электр тогын күреү мөмкин түгел, әммә лампочка тоҡанған саҡта, беҙ уның булыуын аңлайбыҙ. Лампочканың электр тогынан тыш тоҡаныуы мөмкин булмаған кеүек, кеше лә рухтан башҡа йәшәй алмай.

Кәүҙәбеҙ - машина, ә рухыбыҙ уның шоферы кеүек. Машинаға яғыулыҡ ҡойоп, беҙ шоферҙы ашаттыҡ, тип раҫлай алабыҙмы? Әлбиттә, бындай раҫлау иҫәрлек буласаҡ, сөнки беҙ бик яҡшы беләбеҙ: машина - яғыулыҡҡа, ә шофер ризыҡҡа мохтаж. Кешене ашатып-эсереп, уның күңел ихтыяжын ҡәнәғәтләндерҙек, тип уйлау - тағы ла зурыраҡ иҫәрлек. Шулай түгелме?

Тәнебеҙ кеүек, рухыбыҙҙың дә үҙ ихтыяжы бар. Тәнебеҙ аслыҡ, сарсау, өшөү кисерә. Тәнебеҙ ризыҡҡа, һыуһын ҡандырыуға һәм йылыға мохтаж. Ә рухыбыҙ шатланып, әсенеп, ҡайғы һәм бәхет кисереп йәшәй. Рухыбыҙ бәхет һәм күңел тыныслығына мохтаж.

Рухыбыҙ һәм тән төҙөлөшө менән дә, туҡланыуы менән дә бер-береһенән айырыла. Тупраҡтан яһалған тәнебеҙ - физик туҡланыуға, ә материал булмаған ижад емеше - күңелебеҙ - рухи аҙыҡҡа мохтаж. Тәнебеҙҙең ихтыяжын тупраҡта үҫкән ризыҡтар ярҙамында ҡәнәғәтләндерәбеҙ. Ә рухыбыҙ ихтыяжын әхлаҡи ҡиммәттәр, Аллаһҡа инанып, табынып, доға ҡылып, үҙ-ара ярҙамлашып, изгелек һәм мәрхәмәт менән ҡәнәғәтләндерәбеҙ. Бары шулай итеп кенә рухыбыҙ мохтаж булған күңел тыныслығы һәм бәхеткә ирешәбеҙ.



Рух һәм тәнде Аллаһ беҙгә ваҡытлыса ҡулланыу өсөн биргән. Аллаһ тәнебеҙ

һаулығын һаҡлауыбыҙҙы теләгән кеүек, шулай уҡ рухыбыҙҙы изгелектә тотоп, яуызлыҡтан һаҡлауыбыҙҙы теләй. Ә был тик дин ярҙамы менән генә мөмкин.

**Бөтәһен дә яралтыусы – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә.**

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙ йәшәгән ғаләмде камил тәртиптә тота. Ерҙе һәм күктәрҙе һәм унда булғандарҙы яралтҡан, мөғжизәле донъя ҡорған. Донъябыҙҙы тауҙар, үҙәндәр, урмандар, йылғалар һәм диңгеҙҙәр менән биҙәгән һәм ғаләмдә һоҡланғыс тигеҙлек һәм тәртип урынлаштырған. Был камил тәртип миллиард йылдар дауамында өҙлөкһөҙ һаҡлана. Көн һәм төн алмашынып тора, һәр иртә ҡояш көнсығыштан ҡалҡа һәм көнбайышта бата. Йыл миҙгелдәре бер-береһен алмаштыра. Барлыҡ ғаләмдәге мәхлүктәр Аллаһ урынлаштырған ҡанундарға буйһона һәм үҙҙәренә йөкмәтелгән вазифаларҙы кәмселекһеҙ үтәй. Тупраҡҡа ташланған орлоҡ шыта, үҫеп сыға һәм, уңыш биреп, кешеләрҙең, хайуандарҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә. Хайуандар тыуа, үҫә һәм яратылмыш маҡсатына ярашлы тормоштарын дауам итә. Ҡыҫҡаһы, бөтә ғаләмдә күркәм тигеҙлек хөкөм һөрә.

Ғаләм кешегә хеҙмәт итеү өсөн яралтылған. Был донъя һарайы уның өсөн биҙәлгән. Ә бихисап байлыҡтар бирелгән кеше үҙе нимә өсөн юҡтан бар ҡылынған һуң? Уның был донъялағы бурысы ниндәй?

**Яралтыусыбыҙҙы танып, тура юлды табыу өсөн бирелгән аҡыл – бөйөк ниғмәт.**



Кеше йыһандағы башҡа мәхлүктәрҙән айырылып тора - ул аҡыллы йән эйәһе итеп яралтылған. Аҡыллы йән эйәһе итеп яралтылғас, уға фекерләү һәм ғәмәл-

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Күктәрҙең һәм Ерҙең яралтылыуында, төн менән көндөң бер-береһен алыштырыуында, кешеләргә файҙалы йөктәр тейәгән кәмәләрҙең диңгеҙҙәрҙе ярып йөҙөүендә, Аллаһ күктән индереп, йәнһеҙ тупраҡты йәнләндергән ямғырҙа, Ер йөҙөндә һәр төрлө йән эйәһен булдырыуҙа, елдәрҙе һәм Ер менән Күк араһында йөҙөп йөрөүсе, Аллаһтың һәр әмеренә буйһоноусы болоттар тураһында фекер йөрөтөүсе халыҡ өсөн (Аллаһтың барлығын һәм берлеген) раҫлай торған байтаҡ дәлилдәр бар».

(Бәҡара сүрәһе, 164-се аят)

ҡылыҡтарын һайлау ирке бирелгән. Кеше үҙенең аҡылы ярҙамында дөрөҫ һәм яҡшы булғанды һайлай, насар һәм яманынан ситләшә ала. Ә был инде кешенең үҙ ҡылыҡтары өсөн яуаплы булыуын аңлата.

**Пәйғәмбәрҙәр – юлыбыҙ күрһәткесе, Аллаһтың һәм Уның берлеген хәбәр итеүселәр.**

Аллаһ беҙгә аҡыл биреүе менән бергә пәйғәмбәрҙәрен дә ебәргән. Пәйғәмбәрҙәр - кешеләргә дөрөҫ юлды табырға ярҙам итеүсе юл-

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Беҙ кешене ҡатнашма яралғынан яһаныҡ. Уны һынап ҡарар өсөн, ишетеү, күреү һәләте бирҙек. Хаҡтыр, Беҙ уға тура юл күрһәттек. Теләһә, шөкөр ҡылыусы булыр, теләмәһә кәферлекте һайлар».

( Инсан сүрәһе, 2-3-се аяттар)

башсылар. Хөрмәтле Әҙәм ғәләйһис-сәләм - беренсе кеше һәм тәүге пәйғәмбәр.

Аҡылды дөрөҫ файҙаланыусылар - пәйғәмбәрҙәрҙең етәкселеген ҡабул итеп, Аллаһҡа иман килтереп, Уның Берлегенә инаныусылар. Кешелек тарихында аҡылын һәм һәләтен игелек ҡылыу өсөн ҡулланмаған, пәйғәмбәрҙәр өндәүен ҡабул итмәгәндәр ҙә булған. Был кешеләр, тура юлдан тайпылып, Аллаһ урынына тәбиғәт стихияларына, рухтарға һәм боттарға табынған.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Һөйөнөслө хәбәрҙәр ташыр өсөн, киҫәтеүсе хәбәрҙәр еткерер өсөн, пәйғәмбәрҙәр күндерҙек...»

(Ниса сүрәһе, 165-се аят)

**Дин – беҙҙе был донъяла һәм мәңгелектә бәхеткә алып бара торған юл.**

Аллаһ ғаләмде яралтҡан һәм кешегә уны хеҙмәткә ҡуйған. Башҡа мәхлүҡтәрҙән айырмалы рәүештә, Ул кешегә инаныу, ғәмәл ҡылыу азатлығын биргән. Кеше шулай яралтылған: ул изгелек тә һәм яуызлыҡ та ҡыла ала. Раббыбыҙ - сикһеҙ мәрхәмәт Эйәһе - кешеләрҙең бөтәһенә лә бихисап ниғмәт биргән, шул уҡ ваҡытта һайлау азатлығы мәсьәләһендә лә ярҙамсыһыҙ ҡалдырмаған. Тоғро юлды һайлау мөмкинлеге итеп, Аллаһ уға аҡыл бүләк иткән. Бынан тыш пәйғәмбәрҙәр ебәргән, яҡшылыҡҡа юл асыусы, яманлыҡтан аралаусы, бәхетле булырға мөмкинлек биреүсе ҡағиҙәләр һәм ҡанундар индергән. Кеше бәхете ошо Илаһи ҡанундарға һәм ҡағиҙәләргә йәшерелгән. Әгәр кеше уларҙы өйрәнеп һәм ҡулланып йәшәһә, тормош гармонияһына ирешәсәк, ике донъялыҡта ла тыныслыҡ табасаҡ.

Аллаһ тарафынан төшөрөлгән, кешегә был донъяла һәм мәңгелектә бәхетле булыу мөмкинлеген биргән был ҡағиҙәләр менән ҡанундар дин тип атала.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Һин (ий, Мөхәммәд) Аллаһҡа тоғро буларак йөҙөңдө тура дингә тура тот. Ул кешеләрҙе ошо дин өсөн яралтты».

(Рум сүрәһе, 30-сы аят)



# БЕҘГӘ ДИН НИМӘ БИРӘ

**ДИН**

- Контролһеҙлек һәм маҡсатһыҙлыҡ хистәренән арындыра.
- Яралыуыбыҙ, үлем һәм үлгәндән һуңғы тормош тураһындағы һорауҙарыбыҙға яуап бирә.
- Аллаһҡа нисек ғибәҙәт ҡылырға тейешлегебеҙҙе өйрәтә.
- Кешеләр һәм ғаләмдәге бөтә мәхлүктәр менән мөнәсәбәттәрҙе тәртипкә һала.
- Әхлағыбыҙҙы яҡшырта.
- Фани донъялағы һәм мәңгелек донъялағы бәхеткә юл күрһәтә.

Аллаһ бер нәмәне лә бушҡа ғына яралтмаған, шулай уҡ беҙҙе лә – кешеләрҙе – күҙәтеүһеҙ ҡалдырмаған. Беҙҙе был донъяла йәшәргә өйрәтеү, барлыҡҡа килеүебеҙҙең маҡсаты тураһында хәбәр итеү өсөн, Ул динде төшөргән. Динебеҙ буйынса, барлыҡҡа килеүебеҙҙең төп маҡсаты - Аллаһты Раббыбыҙ итеп таныу һәм Уға ғибәҙәт ҡылыу. Ошо маҡсатҡа ярашлы ғүмер иткәндә генә, тормошобоҙҙоң мәғәнәһе бар. Был тормошҡа килеүебеҙҙең маҡсаты барлығын белеү һәм ошо белемгә ярашлы йәшәү беҙҙе **маҡсатһыҙлыҡ һәм контролһеҙлек хистәренән арындыра**. Дин йөрәгебеҙҙәге рухи бушлыҡты тултыра.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Кеше үҙен, һис сикләүҙәрһеҙ йәшәргә хаҡлымын, тип һанаймы әллә?»

(Ҡиәмәт сүрәһе, 36-сы аят)

- Мин кем?
- Ни өсөн был донъяға килдем?
- Минең менән үлгәндән һуң нимә булыр?

Үҙ-үҙебеҙгә ошо һәм ошоға оҡшаш һорауҙарҙы биреп, был донъяға килеүебеҙ сәбәптәре тураһында барыбыҙ ҙа уйланабыҙ. Аҡыл бирелгән йән эйәһе булараҡ, ғаләмдә үҙ урыныбыҙ тураһында белергә теләйбеҙ. Әммә аҡылыбыҙ, башҡа һәләттәребеҙ кеүек үк, сикле, был һорауҙарға яуап таба алмай. Аллаһ барыһын да яралтҡан һәм әлеге яуаптарҙы Ул ғына белә. Шуға күрә **яралыуыбыҙ, йәшәүебеҙ һәм үлемебеҙ, үлгәндән һуңғы тормошобоҙ тураһындағы һорауҙарыбыҙға** Аллаһ тарафынан ебәрелгән дин генә **яуап бирә ала**.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Аллаһ кемдең изгелек ҡыласағын һынап ҡарар өсөн, үлемде, йәшәйеш-тормошто бар итте».

(Мөлк сүрәһе, 2-се аят)

Беҙ аҡылыбыҙ менән Аллаһтың барлығын һәм Уның Берлеген аңлайбыҙ. Уның биргән сикһеҙ нигмәттәрен уйлап, был нигмәттәрҙе Биреүсегә рәхмәтле булырға тейешлегебеҙҙе беләбеҙ. Ләкин Раббыбыҙға рәхмәтебеҙҙе иң гүзәл сүрәттә, дөрөҫ итеп нисек еткерергә, нисек Уға ғибәҙәт ҡылырға кәрәклекте белмәйбеҙ. Бары дин генә беҙҙе **Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылырға өйрәтә**, сөнки Раббыбыҙ ниндәй ғибәҙәттәр Уға һөйөүебеҙҙе, хөрмәтебеҙҙе һәм булған мохтажлығыбыҙҙы яҡшыраҡ еткерә алыуын белә. Ҡасан һәм нисек был ғибәҙәттәр ҡылынырға тейешлеген белә һәм дин ярҙамында был хаҡта хәбәр итә.



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Гәрсә уларға: Аллаһҡа, уның диненә ихласлыҡ менән иман килтереп, изгелек ҡылып, намаҙҙарҙы ҡалдырмайынса, дөрөҫ уҡырға, зәкәт бирергә кәрәк, тип әйтелде. Иң дөрөҫ дин - ошо дин!».

(Бәйинә сүрәһе, 5-се аят)

Был донъяла беҙ үҙебеҙ генә йәшәмәйбеҙ. Донъяны икенсе кешеләр һәм башҡа мәхлүктәр менән бүлешәбеҙ. Шуға күрә төшөнәбеҙме-юҡмы, әммә ғәмәлдәребеҙ башҡа йәнле һәм йәнһеҙ мәхлүктәргә йоғонто яһай. Уратып алған кешеләргә һәм тирә-яҡ мөхиткә файҙа килтерергә тырышырға кәрәк. Дин иң күркәм йәшәү рәүешен күрһәтә, нимә яҡшы, ә нимә насар, нимә дөрөҫ, ә нимә дөрөҫ түгел икәнен өйрәтә. Кешеләрҙе хөрмәт итергә, уларға ҡарата ғәҙел булырға, хайуандарға яҡшы ҡарарға, тирә-яҡ мөхитте һәм үҫемлектәр донъяһын һаҡларға, ҡыҫҡаһы, барлыҡ мәхлүктәрҙең хоҡуҡтарын хөрмәт итергә өйрәтә. **Башҡа кешеләр һәм йыһандағы бөтә мәхлүктәр менән мөнәсәбәттәребеҙҙе тәртипкә һала.**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Хаҡтыр, Аллаһ ғәҙел булырға, изгелекле булырға, ҡәрҙәштәрегеҙгә ярҙамсыл булырға бойорҙо. Зина ҡылыуҙы, тыйылған эште эшләүҙе һәм кешеләргә золом ҡылыуҙы тыйҙы. Бәлки, һеҙ, ниһайәт, аҡылға килерһегеҙ тип, ул һеҙҙе киҫәтә».

(Нәхел сүрәһе, 90-сы аят)



Дин беҙгә һәр ваҡыт һәм һәр ерҙә Аллаһтың күҙәтеүе аҫтында икәнлегебеҙҙе төшөндөрә. Беҙ Уны күрмәһәк тә, ул беҙҙе күрә, әжәлдән һуң барыһы өсөн дә беҙҙән һорау алынасаҡ, тигән ышаныс һала. Бөтә эске донъябыға ҡағылған был рухи контроль беҙҙе насар ҡылыҡтарҙан алыҫайта һәм әхлағыбыҙҙы яҡшырта.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Лоҡман улын өгөтләп: «Әй, улым! Ғәмәлдәрең хәрдәл (гәрсис) бөртөгө хәтле генә булып, ул да тау ҡаяһына йәки күктәргә йәки ер аҫтына йәшерелгән булһа ла, Аллаһ уны һинең ҡаршыңа сығарып ҡуйыр. Хаҡтыр, Аллаһ иң нескә-йәшерен эштәрҙе лә күреп-белеп тора, Ул бар нәмәнән дә хәбәрҙар».

(Лоҡман сүрәһе, 16-сы аят)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Йәә, Раббым, беҙгә донъяла ла яҡшы тормош бир, Әхирәттә лә беҙҙе йәннәткә урынлаштыр. Беҙҙе йәһәннәмендән ҡотҡар!»

(Баҡара сүрәһе, 201-се аят)

Байҙар ҙа, ярлылар ҙа йыш ҡына эске бер бушлыҡ һәм борсолоу кисерә. Кешеләрҙең бер өлөшө, был рухи бушлыҡты тултырыу өсөн, хәмер һәм наркотик кеүек дөрөҫ булмаған ысулды ҡуллана. Уйын һәм күңел асыуҙар уларҙы бәхетле итәсәк, тип һанай. Кеше менән Аллаһ араһындағы бәйләнеште иғтибарға алмай. Үлем һәм мәңгелек ғүмер тураһындағы хәҡиҡәтте онота. Ләкин яңғыҙлыҡта ҡалып, хәҡиҡәтте иҫкә алғанда, ялған бәхет тураһындағы барлыҡ фекерҙәре юҡҡа сыға. Был осраҡта кешегә ысын бәхет юлын табыуы мөһим. Дин - ул ошо юлды күрһәтеүсе иң камил сара. Дин - Аллаһ менән кеше араһында бәйләнеш булдыра. Үлемдең ғүмерҙең аҙағы түгел, ә яңы башланғысы икәнен иҫенә төшөрә. Күңелебеҙҙә Аллаһҡа һөйөү уята. Беҙҙе бөтә донъяға мөхәббәт күҙе менән бағырға өйрәтә. **Был донъялағы һәм мәңгелектәге бәхеткә юл күрһәтә.**



# ҠУЛЛАНЫЛМАҒАН ҺАБЫН

Ҡаланың оло-кесеһе хөрмәт иткән Хәсән ағай икенде намаҙын Үҙәк Мәсеттә уҡығандан һуң, ауыр аҙымдар менән баҙарға ингән ерҙә урынлашҡан мөфтиәткә атланы. Муниципалитет һатыу рәттәренә илткән урамдарға бурса (брусчатка) һалып сығырға ҡарар иткәйне. Баҙар уртаһындағы майҙандағы асфальт ҡутарылған да, эргә-тирәһе төҙөлөш майҙансығына әйләнгән. Бер нисә көндән баҙар элеккегә ҡарағанда матурыраҡ булыуына һөнәрселәр ҡыуанған арала, ҡапыл ғына ҡойған ямғыр һатыу рәттәрен бысраҡ йылғаға



әйләндерҙе. Һөнәрселәрҙең был хәлгә нык ҡына күңелдәре ҡырылһа ла, ни эшләйһең инде! Хәсән ағай кибеттәр алдындағы мәрмәр таштар буйлап атлай, ә таш түшәлмәгән ерҙәрендә бысраҡ юлға төшөргә мәжбүр. Кейемен бысратмаҫ өсөн, һаҡ ҡына барҙы, бер ыңғайы һөнәрселәрҙе сәләмләп, уларҙың йәшәйеш-көнкүрештәре тураһында һорашты. Ә электрик Нәжиптең оҫтаханаһына еткәс, теге уны үҙенең оҫтаханаһына саҡырҙы:

- Үтеүегеҙҙе һорайым, мөғәллим! Беҙҙә сәй эсеп алығыҙ! Йома намаҙында, кешеләр әгәр дингә тотонһалар, ҡотоласаҡтары хаҡында шундай яҡшы итеп аңлаттығыҙ. Өҫтәүенә минең һеҙгә бер нисә һорауым да бар. Әгәр ашыҡмаһағыҙ, рәхим итеүегеҙҙе һорайым!

- Мөфтиәттә йомошом бар, тик улай уҡ ашығыс түгел. Әйҙәгеҙ, сәй эсеп, бер аҙ әңгәмәләшеп алайыҡ.

Нәжип оҫтаның күршеһе һабын ҡайнатыусы Ҡаҙым намаҙ менән мәсеттә өнәп етмәй. Мөғәллимдең тауышын ишетеп, ул да электриктың оҫтаханаһына килде. Нәжип оҫта сәй тәҡдим иткән саҡта, Ҡаҙым оҫта әңгәмәгә ҡушылды:

- Мөғәллим! Һеҙ, дин кешегә тыныслыҡ һәм бәхет килтерә, тип әйтәһегеҙ. Әммә шулай булыуға ҡарамаҫтан, күпме ваҡыт үтһә лә, донъя тулы яуыз кешеләр.

- Улым! Һин тәрән һәм ауыр мәсьәләгә ҡағылдың, - тине Хәсән ағай һәм күҙҙәренең ҡырыйы менән генә һабын ҡайнатыусыға ҡараны, аҙаҡ уның яғына ныҡлы боролоп, әле генә үтеп киткән бысраҡ кейемдәге кешегә күрһәтеп:

- Һабындың донъяға билдәле булыуына инде йөҙ йыл. Һабын бысраҡты таҙарта, тиҙәр. Ләкин һаман да донъяла бысраҡ та күп һәм бысраҡ кешеләр ҙә күп. Шулай түгелме ни? - тип һораны.

Һабын ҡайнатыусы шунда уҡ ҡаршы килде:

- Шулай, әммә һабындың файҙаһы ҡулланған мәлдә генә. Кем ныҡышмалы рәүештә бысрана, уға һабын нимәгә!»

Хәсән ағай ошо мәлдә файҙаланды. Бөтәһен дә үҙ урынына ҡуйыу ваҡыты еткәйне. Ул:

- Һин хаҡлы: кем бысрана, уға нимәгә һабын? Һабын ҡайнатыусы уның менән ни эшләй ала? Улым! Дин дә бына шулай уҡ. Уның менән йәшәп, әгәр йәшәйешеңә әйләнһә, донъяға изгелек килтерә. Ә ныҡышмалы рәүештә тыйылғанға һәм гонаһҡа ташланғандар менән дин нимә эшләй ала?



# ИСЛАМ - ХАҠ ДИНЕБЕҘ

Аллаһ тарафынан ебәрелгән, Уға ғына инанырға һәм табынырға бойоролған дин хаҡ дин тип атала.

**Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә генә дини ҡанундарҙы урынлаштыра ала.**

Аллаһ - ғаләм киңлектәрендә йондоҙҙарҙы яралтыусы һәм төпһөҙ океан һыуҙарында төрлө тере организмдарға ғүмер биреүсе. Ғалимдар көн һайын йыһандағы тереклектең яңы үҙенсәлектәрен аса. Һәммәбеҙгә мәғлүм, компьютерҙы проектлаусы инженер уны барыһына ҡарағанда ла яҡшыраҡ белә. Кешене яралтҡан Аллаһ лә беҙҙе барыһынан да яҡшыраҡ белә. Уға физик һәм рухи мохтажлыҡтарыбыҙ билдәле. Шуға күрә беҙҙе был донъяла һәм мәңгелектә бәхетле иткән иң дөрөҫ ҡанундарҙы, йәғни динде Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә генә урынлаштыра ала. Унан башҡа бер кем дә диндәге төп ҡанундарҙы урынлаштырыу, үҙгәртеү, ғәмәлдән сығарыу хоҡуғына эйә түгел.



**Бөтә пәйғәмбәрҙәр алып килгән хаҡ диндең дөйөм атамаһы – Ислам.**

Пәйғәмбәрҙәр – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән алған бойороҡтарҙы кешеләргә еткереүселәр. Улар дингә өйрәткәндәр һәм үҙҙәре лә дин ҡушҡанса йәшәгәндәр. Әҙәм ғәләйһис-сәләм - беренсе кеше һәм тәүге пәйғәмбәр. Ә уға хәбәр ителгән дин - ул Аллаһтың Берлегенә ышаныу, йәғни **тәүхид**. Аллаһ тарафынан кешеләргә үәхи аша ебәрелгән хаҡ диндәрҙең дөйөм атамаһы - Ислам. Аятта асыҡ әйтелгән: «Хаҡ дин, Аллаһ дине - Ислам» (Ғимран сүрәһе, 19-сы аят).

Кешеләр тарих һуҙымында ваҡыты-ваҡыты менән тура юлдан тайпылғандар. Хаҡ дин өйрәткән иман принциптарын һәм әхлаҡи таҙалыҡты боҙғандар. Хаталы инаныуҙарҙы һәм боҙолған әхлаҡи төшөнсәләрҙе төҙәтеү өсөн, Аллаһ пәйғәмбәрҙәр ебәргән. Пәйғәмбәрҙәр үҙ халҡына Аллаһтан башҡа илаһ юҡлығын һәм тик Уға ғына табынырға кәрәклеген аңлатҡан. Вафат булғандан һуң, мотлаҡ хисаплама бирергә тура киләсәген хәбәр иткәндәр. Иман нигеҙҙәре, ғәҙеллек, намыҫ һәм үҙ-ара ярҙам итеү кеүек пәйғәмбәрҙәр өйрәткән әхлаҡи ҡиммәттәр бер ҡасан да үҙгәрмәгән.

**Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Берлегенә инанырға бойормаған диндәр - ялған.**

✍ Аллаһтан булмаған уйҙырма диндәр - ялған.

✍ Шундай диндәр ҙә бар: Аллаһ Тәғәләнән төшөрөлһә лә, һуңынан кешеләр уны боҙған. Улар мифтар һәм ялған инаныуҙар менән буталып бөткән. Ул диндәрҙең иман нигеҙҙәренә һәм ғибәҙәттәренә күп үҙгәрештәр индерелгән. Был диндәрҙең бөтә асылы боҙолған.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

«Минең һәм башҡа пәйғәмбәрҙәрҙең хәлдәре, берәүҙең бик матур өй төҙөгәне кеүек. Төҙөлөш тамамлана, әммә йорттоң мөйөшөндә бер кирбес үлсәмендәй буш урын ҡала. Аҙаҡ кешеләр был йортто ҡарайҙар һәм күргән етешһеҙлеккә аптырап әйтәләр: «Шул кирбес ҙурлығы урын буш ҡалмаһа ине!» Бына мин етмәй ҡалған шул кирбес хәлендәмен. Мин иң һуңғы пәйғәмбәр булып килдем».

(Бохари, Мәнәкиб, 18).

Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Бөгөн һеҙҙең динегеҙҙе мөкәммәл иттем, һеҙгә тигән нифмәтемде тамам иттем һәм һеҙҙең өсөн әҙерләнгән Ислам динен хуп күрҙем».

(Мәидә сүрәһе, 3-сө аят)

Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Исламдан башҡа дин эҙләгән кешенең ҡылғандары ҡабул булмаҫ, ул Әхирәттә лә хәтәр зыянға-язаға дусар буласаҡ».

(Ғимран сүрәһе, 85-се аят)

# ҠӨРЬӘН БАҠСАҺЫ

Мин Ҡөрьәндең йәшел баҡсаһына керәм,
Гүйә, йәннәт баҡсаһында емеш тирәм.
Күңелемдә ғәжәп бер яҡтылыҡ арта,
Хәсрәттәрем юҡҡа сыға, шатлыҡ ҡайта.

Әйтерһең дә, Кәүҫәр һыуын уртлап эсәм,
Тәнгә ләззәт биргән саф һыуҙарҙы кисәм.
Күҙҙе ҡамаштырыр күркәм ерҙәр гиҙәм,
Еләҫтән дә еләҫ елдәр наҙын һиҙәм...

Һәр бер йортҡа Ҡөрьән инә күрһен.
Пак ямғырҙар Ер йөҙөнән ҡара
хәсрәттәрҙе йыуһын.
Күңелдәрҙе сафландырған Раббым нуры,
Фәрештәләр беҙгә һәр саҡ юлдаш булһын.

Әнисә Таһирова

# ИСЛАМ ДИНЕ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

**Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тарафынан кешелеккә төшөрөлгән һуңғы дин – Ислам. Бына динебеҙҙең бер нисә мөһим үҙенсәлеге:**

**1. Ислам – бөтә дәүерҙәргә һәм һәр кешегә төбәлгән универсаль дин.**

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәләм) Ҡиәмәт Көнөнә ҡәҙәрге бөтә кешелеккә ебәрелгән. Ул алып килгән дин бөтә кешеләрҙең ихтыяжына яуап бирә. Ислам ата-әсәләргә яҡшы мөғәмәлә итергә, барлыҡ мәхлүктәргә мәрхәмәтле һәм шәфҡәтле булырға, исрафтан һаҡланырға, сауҙаны намыҫлы алып барырға; ниндәй генә хәл булһа ла, ғәҙел булырға өйрәтә. Ислам урынлаштырған ошо һәм ошоға оҡшаш принциптар - бөтә кешелек мохтаж булған төп ҡиммәттәр.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Беҙ һине бөтөн кешеләргә бары тик һөйөнөслө хәбәр бирер өсөн һәм киҫәтер өсөн генә күндерҙек».

(Сәбә сүрәһе, 28-се аят)



**2. Ислам – еңел дин. Кешенең хәленән килгәнде генә бойора.**

Ислам дине кешеләр үтәй алмаҫтай йөктө йөкмәтмәй. Мәҫәлән, аяғында баҫып тора алмаған сырхауҙар намаҙҙы ултырып уҡый ала. Кеше тәһәрәт алырға һыу таба алмаһа, һыу урынына тәйәммүм ҡылырға мөмкин (тупраҡ йәки ҡом менән һөртөнөү). Оҙайлы сәйәхәткә сыҡҡан кеше, сәфәре Рамаҙан айында ла дауам итһә, ураҙаны тотмайынса кисектерә ала.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Аллаһ бер кемгә лә көсө етмәҫлекте йөкләмәҫ».

(Бәҡара сүрәһе, 286-сы аят)

**3. Ислам кешене байға һәм ярлыға, көслөгә һәм көсһеҙгә бүлмәй.**

Ислам кемдеңдер сығышын, телен, тиреһенең төҫөн өҫтөнлөк сәбәбе итеп күрмәй. Тимәк, Хөкөм алдында барыһы ла тигеҙ. Йәмғиәттә ниндәй генә урын биләмәһен, берәү ҙә өҫтөнлөк хоҡуғына эйә түгел. Хаж – Исламда барыһы ла бер тигеҙ икәнлеген күркәм рәүештә күрһәтеп тора. Хаж ваҡытында миллионлаған кеше, аҡ ихрам кейеп, иңгә-иң тереп, бер ниндәй айырмаһыҙ һәм өҫтөнлөкһөҙ ғибәҙәт ҡыла.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

«Әй, кешеләр! Белегеҙ, ғәрәп – ғәрәп булмағандан, ғәрәп булмаған ғәрәптән өҫтөн түгел. Һәм аҡ тәнле кеше - ҡара тәнленән, ҡара тәнле аҡ тәнленән өҫтөн түгел. Ысын өҫтөнлөк – тәҡүәлектә».

(Хушлашыу хөтбәһенән)

**4. Исламдың маҡсаты – кешене фани һәм икенсе донъяла бәхетле итеү.**

Ислам, кешене был донъяның ниғмәттәре менән файҙаланып, улар аша ожмахҡа ирешергә өйрәтә. Мәңгелек донъялағы ғүмер өсөн фанилыҡтан, фани ғүмер өсөн мәңгелектән баш тартыуҙы ислам дөрөҫ түгел тип һанай.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Аллаһтың һиңә биргән мөлкәтенән (саҙаҡа, зәкәт) биреп, Әхирәт көнөнә әҙерлән. Донъялағы өлөшөңдө лә онотма».

(Ҡасас сүрәһе, 77-се аят)

**5. Ислам таҙалыҡҡа ҙур әһәмиәт бирә.**

Исламдағы ғибәҙәттәр физик һәм рухи пакланыуҙы тәьмин итә. Мәҫәлән, тәһәрәт, ғөсөл, намаҙ, ураҙа һәм зәкәт кешене физик һәм рухи бысраҡтан таҙарта.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Һис шикһеҙ, Аллаһ тәүбә итеү-селәрҙе һәм таҙарыныусыларҙы ярата».

(Бәҡара сүрәһе, 222-се аят)

**6. Исламдағы бойороуҙар һәм тыйыуҙар кешенең тәбиғәтенә тура килә.**

Ислам эскелекте, зинаны, ҡомарлы уйындарҙы, ялғанды, йәберләүҙе, законһыҙлыҡты тыя. Изгелек эшләргә, бер-береңә ярҙам итергә, ғәҙел булырға, ата-әсәйгә яҡшы ҡарарға, ярлыларға һәм етемдәргә хәстәрле булырға ҡуша.



Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Пәйғәмбәр уларға изге ғәмәлдәр ҡылырға ҡуша, уларҙы яманлыҡтан тыя, хәләлде рөхсәт итә, ә харамды тыя».

(Ағраф сүрәһе, 157-се аят)

## Исламдың үҙенсәлектәрен ошолай һүрәтләп була:

**ИСЛАМ ДИНЕНЕҢ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ**

1. Ислам - барлыҡ кешелеккә төшөрөлгән универсаль дин
2. Ислам дине кешеләр үтәй алмаҫтай йөктө йөкмәтмәй
3. Исламда раса менән кластар бүленеше юҡ
4. Ислам фанилыҡ һәм мәңгелек араһындағы тигеҙлекте һаҡлай
5. Ислам физик һәм рухи таҙалыҡҡа әһәмиәт бирә
6. Ислам яҡшы һәм файҙалыны рөхсәт итә, ә насар һәм зарарлыны тыя

# ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘ r -
# ИСЛАМ ДИНЕНДӘГЕ ИҢ КҮРКӘМ ҮРНӘК

Кешеләрҙе Ислам динен өйрәтергә ебәрелгән яратҡан Пәйғәмбәребеҙ r - үҙенең **йәшәү рәүеше менән бөтә кешелеккә үрнәк**. Уның ғәмәл-тәртибе, бөтә ҡылығы һәм күркәм холҡо - Изге Ҡөрьән китабындағы илаһи талаптарға тулыһынса тап килә. Ул кешеләргә дин буйынса нисек йәшәргә кәрәклеген өйрәтә.

Пәйғәмбәребеҙ r **динебеҙҙәге рөхсәт ителгән һәм тыйылған мәсьәләләрҙе үтәүгә бик талапсан ҡарай**, шәхес һәм йәмғиәт өсөн файҙаһыҙ ғәҙәттәрҙән тыйыла. Ә мосолмандарға һәр ваҡыт дини ҡанундарҙы теүәл үтәргә һәм урта юлдан барырға кәңәш итә.

Бер ваҡыт Пәйғәмбәребеҙ r янына өс сәхәбә килгән һәм унан өҫтәмә ғибәҙәттәр тураһында һораша башлаған. Пәйғәмбәребеҙҙең өҫтәмә ғибәҙәттәре тураһында ишеткәс, үҙҙәренең ғибәҙәттәрен кәм күреп, былай тип әйткәндәр: «Беҙ кем дә, Рәсүлуллаһ кем? Уның бөтә үткән һәм киләсәк гонаһтары ярлыҡанған». Береһе әйткән: «Ҡалған ғүмеремдең ахырына ҡәҙәр бөтә төндәремде намаҙҙа үткәрәсәкмен». Икенсеһе: «Ә мин ғүмерем буйына һәр көнөмдө ураҙа тотоп үткәрәсәкмен, бер көнөмдө лә ураҙа тотмайынса ҡалдырмайым». Өсөнсө сәхәбә вәғәҙә иткән: «Ә мин әлегә тере һәм һау-сәләмәт сағымда, ҡатын-ҡыҙҙан алыҫыраҡ буласаҡмын һәм бер ҡасан да өйләнмәйәсәкмен». Күпмелер ваҡыттан һуң, улар янына Пәйғәмбәребеҙ r килгән дә әйткән: *«Һеҙме*



Бер ваҡыт Пәйғәмбәребеҙ r сәхәбәләре менән ултырғанында, ҡулына таяҡ алып, ерҙә тура һыҙыҡ һыҙған һәм ҡыҙыҡһынып күҙәткән сәхәбәләренә:

«Был Аллаһтың тура юлы», - тип әйткән.

Һуңынан йәнә үндан һәм һулдан ике һыҙыҡ һыҙған да:



«Ә былары шайтандың юлдары», - тигән.

Аҙаҡ үҙенең мөбәрәк ҡулдарын һыҙыҡтың үҙәгенә һалған һәм ошо аятты уҡыған:

«Һис шикһеҙ, был - минең тура юлым. Ошо юлдан китегеҙ. Башҡа юлдан китмәгеҙ, сөнки ул юлдар һеҙҙе Аллаһ юлынан айырыр. Гонаһтарҙан һаҡланырһығыҙ тип, Аллаһ һеҙгә ошоларҙы әмер итте». (Әнғәм сүрәһе, 153-сө аят)

Әхмәд ибн Хәнбәл, III, 397

*әле шуны-шуны һәм шуны-шуны әйтеүселәр? Мин һеҙҙе киҫәтәм! Аллаһ менән ант итәм, арағыҙҙа мин Аллаһтан иң нык ҡурҡыусы һәм Уны итәғәт итеүсе. Әммә мин ҡайһы берҙә өҫтәмә ураҙалар тотам, ә ҡайһы берҙә тотмайым. Төндәрен намаҙ ҡылам һәм йоҡлайым. Ҡатын-ҡыҙҙар менән никахлашам. Кем Сөннәтемдән баш тарта – ул минең өммәтемдән түгел».* (Бохари, «Никах», 1)

Пәйғәмбәребеҙ r **тормошонда осраған проблемаларҙың һәммәһен динебеҙгә ярашлы талаптарға таянып хәл итә**. Унан берәй нимә һораһалар, йә иһә кешеләр араһындағы проблеманы сискән сағында, мөрәжәғәт иткән тәүге сығанағы Изге Ҡөрьән була. Динебеҙ – еңел дин, ти, һәм, төрлө мәсьәләләрҙе хәл иткәндә, еңел юлдарға өҫтөнлөк бирә. Сәхәбәләренә, тормоштарында осраған мәсьәләләрҙе сискәндә, динебеҙ нигеҙендәге ҡанундарға таянырға кәңәш итә.

Пәйғәмбәребеҙ r **өсөн дине ғүмеренән дә ҡәҙерлерәк була**. Дин хаҡына ҙур-ҙур ауырлыҡтар кисерә ул. Аллаһ юлындағы ауырлыҡтарҙы оло сабырлыҡ менән үткәрә.

Исламға килеүҙең тәүге йылдарында динде ҡабул итмәгән боттарға табыныусылар Пәйғәмбәребеҙҙе r нык ҡыҫырыҡлай, күп тапҡырҙар үлем менән янай. Пәйғәмбәребеҙҙе r һәм уға инанғандарҙы аслыҡҡа дусар итәләр, ҙур ҡаршылыҡтар тыуҙыралар. Таиф ҡалаһында уға таш ташлап, хатта мөбәрәк аяҡтарын ҡанаталар. Иман килтереүселәр күпме ғазап, яфа кисерә! Ауырлыҡтарға дусар булыуына ҡарамаҫтан, Пәйғәмбәребеҙ r Исламда йәшәүен, Исламды аңлатыуын һәм өйрәтеүен туҡтамай.

***

**Пәйғәмбәребеҙ r динде дөрөҫ аңлай һәм уны тормошҡа ашырған өлгөлө быуын тәрбиәләй.** Уның гүзәл динебеҙгә саҡырыуын ҡабул иткән һәм һәр саҡ янында булғандарҙы сәхәбәләр тип атайҙар.

Яһиллыҡ дәүеренең шаһиты булған сәхәбәләр диндең берҙән-бер ҡотолоу юлы булғанын төшөнә. Гүзәл динебеҙ ярҙамында яһиллыҡтан, золомлоҡтан, тулы хоҡуҡһыҙлыҡтан арыналар. Улар үҙ миҫалында кешелеккә диндә нисек йәшәргә кәрәклеген һәм дә дини йәмғиәт ниндәй булырға тейешлеген күрһәтә. Ҡиәмәт Көнөнә ҡәҙәр бөтә кешелек өсөн улар өлгөлө быуынға әйләнә, шул сәбәпле улар йәшәгән дәүер «именлек дәүере» (ғасрус-сәғәҙәт) тип атала.

Тыныс йәшәр, динде тотоу мөмкинлеген булдырыр өсөн, мөхтәрәм сәхәбәләр бик күп көрәшә. Иман тулы йөрәктәре юлдарында осраған бөтә ҡаршылыҡтарҙы еңергә ярҙам итә. Улар ҙа, Пәйғәмбәребеҙ r кеүек үк, яза-михнәттәрҙе оло сабырлыҡ менән үткәрә. Ҡайһыларын ҡыҙыу ҡомға һалалар, ҡайһыларын ҡамсы аҫтында диненән баш тартырға мәжбүр итәләр. Әммә Ислам диненең дошмандарына был ғына әҙ тойола, улар иҡтисади бойкот иғлан итә. Мосолмандарҙың бөтә булған сауҙаһы һәм бәйләнештәре тартып алына. Теүәл өс йыл дауамында сәхәбәләр Пәйғәмбәребеҙ r менән бергә ыҙалы көндәр кисерә. Аслыҡтан үҙҙәренең

Пәйғәмбәребеҙ r, үҙенең пәйғәмбәрлеген иҫбатлап, бер мөғжизә лә күрһәтмәгән хәлдә лә, сәхәбәләр быуынын тәрбиәләүе лә пәйғәмбәрлегенең дәлиллегенә етер ине.



Ислам диненән алдағы дәүер «яһиллыҡ дәүере» тип аталған. Ул ваҡыттарҙа Ғәрәбстан ярымутрауындағы ҡәбиләләр араһында эске бәрелештәр һәм ҡан ҡойғос һуғыштар күп йылдар дауам иткән. Кешеләр һәр ваҡыт шомланып, ҡурҡып йәшәгән, ғүмерҙәре һәм мөлкәттәре гел хәүеф аҫтында булған. Байҙар ярлыларға насар ҡараған, көслө көсһеҙҙәрҙе ыҙалатҡан. Иреклеләр ҡолдарҙы башҡа һыймаҫлыҡ яҙаларға дусар иткән. Ислам дине килгәс, был ғәҙелһеҙлеккә сик ҡуйыла. Ислам дине кеше булған өсөн кешене баһалаған цивилизацияға нигеҙ һала.



эстәренә таш бәйләп йөрөйҙәр. Үлән, япраҡтар һәм киптерелгән тире киҫәктәре ашап, тере ҡалырға тырышалар. Бөтә мөлкәттәрен, тыуып-үҫкән тыуған яҡтарын ҡалдырып күсенергә мәжбүр булалар. Әммә улар диндең тәмен татып өлгөргән була, шуға күрә ҡайһы берҙәре йәндәрен фиҙа ҡыла, ләкин бер ҡасан да баш һалмай. Ислам дине килтергән изгелекте Ер йөҙөнә таратыу өсөн, мөлкәттәрен дә, ғүмерҙәрен дә йәлләмәй. Уларҙың Йәсир, Сүмәййә, Хәмзә һәм Мусғаб (разыйаллаһу ғәнһүм) кеүек ҡыйыуҙары Аллаһ юлында һәләк була. Иҫән ҡалғандары, Ислам дINENең күркәмлеге тураһында кешеләргә һөйләр өсөн, донъя буйлап тарала. Сәхәбәләр гүзәл динебеҙ өсөн үҙ-үҙҙәрен ҡорбан итеү сәбәпле, динебеҙ бөгөнгө көнгә ҡәҙәр һис бер үҙгәрешһеҙ килеп еткән.

***

Аллаһ, Ислам динен бүләк итеп, беҙгә хөрмәт күрһәткән. Йөрәгебеҙгә иманды урынлаштырып, уны яраттырған. Иманһыҙлыҡты, яуызлыҡты һәм гонаһ ҡылыуҙы беҙҙең өсөн сирҡаныс ҡылған. Пәйғәмбәребеҙ r беҙгә Ҡөрәнде һәм үҙенең тормош өлгөһөн ҡалдырған. Ул: *«Мин һеҙгә ике нәмә ҡалдырам. Әгәр уларға нык тотонһағыҙ, юлдан тайпылмаҫһығыҙ. Аллаһтың Китабы һәм Уның Илсеһенең Сөннәте»,* - тип әйткән.

Әгәр Аллаһ биргән шул байлыҡты тейешенсә баһалап, Пәйғәмбәребеҙ r кәңәштәренә эйәрһәк, ул сағында динебеҙгә күркәм рәүештә өйрәнеп, насар ҡылыҡтарҙан тыйылып, ғибәҙәттәребеҙҙе камил рәүештә ҡыла аласаҡбыҙ. Тик шул саҡта ғына яҡшы мосолмандарға әйләнәсәкбеҙ.

# ҺОРАУҘАР

## Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Кеше рух | | алып барыусы юлбашсылар булған. |
| 2 | Рух тәнебеҙгә кешегә хас сифаттар бирә | | ғүмеренән дә ҡәҙерлерәк булған. |
| 3 | Кеше, аҡылын файҙаланып, | | һәм дә беҙгә иң күркәм тормош өлгөһөн күрһәтә. |
| 4 | Пәйғәмбәрҙәр кешеләрҙе тура юлдан | | мөрәжәғәт иткән универсаль дин. |
| 5 | Динебеҙгә ярашлы, яратылыуыбыҙҙың төп маҡсаты - | | тыш яуаплылыҡ йөкмәтмәй. |
| 6 | Нимә насар, ә нимә яҡшы икәнен дин өйрәтә | | дөрөҫ һәм матур булғанды һайлай ала. |
| 7 | Ислам - ул һәр дәүергә һәм һәр кешегә | | менән тәндән тора. |
| 8 | Ислам дине кешеләргә мөмкинлектәренән | | кешенең тәбиғәтенә тура килә. |
| 9 | Ислам диненең бойороҡтары һәм тыйыуҙары | | һәм башҡа мәхлүҡтәрҙән айыра. |
| 10 | Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өсөн дине | | Раббыбыҙҙы таныу һәм Уға хеҙмәт итеү. |

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ:

**(тәүбә итеүселәрҙе / һынау / әҙәпһеҙлекте / йәшәйеш / яҡшылыҡ / тамуҡ / Ислам / таҙарыныусыларҙы / динегеҙҙе / изгелек )**

«Йәә Раббыбыҙ! Был донъяла һәм мәңгелек тормошта ........ бир һәм дә беҙҙе .................. ғазаптарынан арала!»

«Хәҡиҡәттә, Аллаһ .................... һәм .................... ярата».

«Бөгөн һеҙҙең өсөн .................... төшөрөүҙе тамамланым һәм, һеҙгә Мәрхәмәтемде аҙағына еткереп, .................... дине сифатында хуп күрҙем».

«Аллаһ .................... һәм үлемде яралтҡан, эштәрегеҙ буйынса кем яҡшыраҡ икәнен .................. өсөн».

«Аллаһ ғәҙел булырға бойора, .................... ҡылырға, туғандарҙы бүләкләргә һәм һәр .................. яуызлыҡты һәм законһыҙлыҡты тыя. Аҡылығыҙға килеүегеҙгә өмөтләнеп, Ул һеҙҙе өгөтләй».

# ҺОРАУҘАРҒА ЯУАПТАР

## Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ:

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Кеше рух | 4 | алып барыусы юлбашсылар булған. |
| 2 | Рух тәнебеҙгә кешегә хас сифаттар бирә | 10 | ғүмеренән дә ҡәҙерлерәк булған. |
| 3 | Кеше, аҡылын файҙаланып, | 6 | һәм дә беҙгә иң күркәм тормош өлгөһөн күрһәтә. |
| 4 | Пәйғәмбәрҙәр кешеләрҙе тура юлдан | 7 | мөрәжәғәт иткән универсаль дин. |
| 5 | Динебеҙгә ярашлы, яратылыуыбыҙҙың төп маҡсаты - | 8 | тыш яуаплылыҡ йөкмәтмәй. |
| 6 | Нимә насар, ә нимә яҡшы икәнен дин өйрәтә | 3 | дөрөҫ һәм матур булғанды һайлай ала. |
| 7 | Ислам - ул һәр дәүергә һәм һәр кешегә | 1 | менән тәндән тора. |
| 8 | Ислам дине кешеләргә мөмкинлектәренән | 9 | кешенең тәбиғәтенә тура килә. |
| 9 | Ислам диненең бойороҡтары һәм тыйыуҙары | 2 | һәм башҡа мәхлүктәрҙән айыра. |
| 10 | Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өсөн дине | 5 | Раббыбыҙҙы таныу һәм Уға хеҙмәт итеү. |





## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ:

1. изгелек - тамуҡтың
2. тәүбә итеүселәрҙе – таҙарыныусыларҙы
3. динегеҙҙе – Ислам
4. ғүмерҙе – һынар
5. изгелек – әҙәпһеҙлекте





# ДОНЪЯЛАҒЫ ХОЗУРЛЫҠ ҺӘМ ӘХИРӘТТӘГЕ ЙӘННӘТ ЮЛЫНЫҢ АСҠЫСЫ – ИМАН

- *Кәлимәи Тәүхид һәм Кәлимәи Шәһәҙәт*
- *Иман йәһәтенән инсандар*
- *Иманға ҡағылышлы мәсьәләләрҙә нимәгә иғтибар итергә?*
- *Иманыбыҙҙы нығытыр өсөн, нимә эшләргә?*
- *Иманыбыҙ беҙгә нимә бирә*
- *Пәйғәмбәребеҙҙең* r *ихлас иманы*





# «АЛЛАҺҠА ЫШАНҒАНМЫН ИКӘН, ӘММӘ БЫЛ ХАҠТА БЕЛМӘГӘНМЕН»

Ул ваҡытта миңә егерме йәш тә юҡ ине. Данлыҡлы Харуния ҡайнар сығанағына сәфәр ҡылырға булдыҡ.

Бормалы таулы юлдар буйлап йөрөргә күп шоферҙар баҙнат итмәй ине ул саҡта. Беҙ, бер нисә ғаилә, микроавтобус табып, үҙебеҙ менән йөкләргә ҡаралды һәм башҡа кәрәкле әйберҙәр алып, юлға сыҡтыҡ. Күпмелер ваҡыттан һуң, тирә-йүне һоҡланғыс йәшеллектең бөтә төҫмөрҙәре менән биҙәлгән таулы юлда инек. Йәшел ҡарағайҙар араһынан ҡыр сиңерткәләренең көйҙәрен тыңлап, артыбыҙҙан саң болоттары ҡалдырып, аҡрын ғына алға ҡуҙғалдыҡ. Аллаға шөкөр, ҡаршыбыҙға килгән башҡа машиналар булманы. Юлдың ҡайһы өлөштәре шул тиклем тар булып сыҡты, унан ике машина үтә алмаҫ ине. Ҡайһы



бер боролмаларҙа микроавтобус тәгәрмәсенән ырғыған таштар тарлауыҡ упҡынының төбөнә оса. Ниһайәт машинабыҙ, оҙон юлды үтеп, тигеҙ юлға сыҡты. Бер аҙҙан түбәнгә төшә торған ер башланырға тейеш ине. Асыҡ тәҙрә аша тулы күкрәк менән тауҙың саф һауаһын һуланым һәм был күренеш, был сәйәхәттең һис ҡасан тамамланмауын теләнем. Шул арала күҙемә ҡыҙыҡлы нәмә эләкте. Ғәжәпкә ҡалдым. Йәнә бер, йәнә, йәнә ҡараным, үҙемде тота алмай ҡысҡырып ебәрҙем:

- Йәә Аллаһ! Бынау ҡарағайға ҡарағыҙ әле! Иң текә ҡаяның сусағына тамырҙарын йәйгән. Ҡаяла бер ус тупраҡ та юҡ хатта.

Ҡыуанысымды белдергәндә, минән алдараҡ ултырған оло йәштәге ир-егет, минең ғәжәпләнеүемә бер аҙ асыуланып һораны:

- Шунан ни булған? Был урындарҙа күп ағастар шундай.

- Нисек инде «ни булған»? Аллаһтың ҡөҙрәтенә ҡарағыҙ! Ғәләмәт ҙур ҡаяның сусағында бик күркәм ҡарағайҙы яралтҡан!

- Йөрәккәйем! Аллаһтың һәм Унының ҡеүәтенең ни ҡыҫылышы бар бында?

- Яҡшы, ләкин бының икенсе төрлө булыуы мөмкинме? Кем был ҡарағайҙы шул мөмкин булмаған урында үҫтерә ала?

- Бер кем дә түгел, улым! Ни өсөн мотлаҡ яралтҡан кемдер булырға тейеш? Былар барыһы ла артта ҡалған һәм үтә ябай фекерҙәр.

- Әгәр ул ҡарағайҙы шул урында Аллаһ яралтмаһа, кемдең эше һуң?

- Мәҫәлән, күҙ алдыңа килтер: суҡышындағы ҡарағай орлоғо менән ҡош осоп барған, ошо ҡая тапҡырынан осҡан саҡта төшөрөп ебәргән. Ә орлоҡ, ҡаяға эләгеп, шунда тамыр ебәргән. Хәҙер тамырҙарының ярҙамы менән ағас үҫә, нығына.

- Барыһы ла шулай, һеҙ әйткәнсә булһа, быларҙың барыһын да Яралтыусы юҡмы ни?

- Юҡ, әлбиттә... Хәҙерге дәүерҙә ниндәйҙер Яралтыусы барлығына ышаныуы ла оят.

- Һеҙ нисек оло йәштә була тороп шундай һүҙҙәр әйтә алаһығыҙ? Был темаға мин һеҙгә бик күп миҫалдар килтерә алам.

Ошолай башланған әңгәмәбеҙ бер аҙҙан бәхәскә әйләнде. Беҙ инде юғары тондарға күстек. Был ирҙең ҡысҡырыуына ҡарап, мин дә тауышымды арттырҙым. Өндәшмәй генә беҙҙе тыңлаусы башҡа юлдаштарыбыҙ ҙа ваҡыты-ваҡыты менән бәхәсебеҙгә ҡыҫылды. Әммә тышҡы ҡиәфәте унын уҡымышлылығы тураһында һөйләгән был оло йәштәге ир-аттан башҡа береһе лә Аллаһты инҡар итмәне. Шулай ҙа барыһы ла беҙҙең кисекмәҫтән бәхәсте туҡтатыуыбыҙҙы һәм шымып ҡалыуыбыҙҙы теләй ине. Ә микроавтобусыбыҙ әкрен генә тиҙлеген арттыра башланы. Тәгәрмәс аҫтынан осоусы таштарҙың бер йөҙ метр аҫта еп кеүек һуҙылған Джәйхан йылғаһына тиклем барып етеүе беҙҙе хайран итте. Барыһы ла бер-береһе менән өндәшмәй генә ҡарашҡан арала, шофер еңелсә генә артҡа бирҙе лә:

- Тормоздар эшләмәй башланы әллә? - тине.

Һул яғыбыҙҙа ҡарағай менән ҡапланған текә яр. Текә ярҙың аҫтында Джәйхан йылғаһының һыуы күперекләнеп ҡаяларға бәрелә. Ә уң яғыбыҙҙа текә ҡаялар. Бер мәллек ҡаңғырыҡ үткәндән һуң, кемдер асырғанып ҡысҡырҙы, кемдер шәһәҙәт кәлимәһен ҡабатланы, кемдер – «Бисмилләһ»те, кемдер үҙ һүҙҙәре менән доға уҡыны. Аллаһҡа ышанмайым тигән кеше, үҙ-үҙен белештермәй, бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы:

- Йәә Аллаһ! Ҡотҡар беҙҙе, йәә Аллаһ!

Әммә был хәл оҙаҡ дауам итмәне. Беҙ ҡаңғырышҡан арала, машина тиҙлеген әкренәйтеп, юл ситенә барып туҡтаны. Паникаға бирелгән пассажирҙар сыҡты. Бар ерҙән дә:

- Ай-һай, был ни хәл? - тигән тауыштар ишетелә ине.

- Тормоз эшләмәй ине түгелме?



- Беҙҙең йөрәк табанға китте!

Шофер ҙа яныбыҙға килде. Күптән түгел минең менән бәхәсләшкән өлкән йәштәге иргә төбәп былай тине:

- Һеҙгә оят түгелме «Аллаһ юҡ!» тип әйтергә? Әле генә «юҡ» тинегеҙ, ә тормоздар эшләмәгәйне, барыһынан да ныҒыраҡ «Аллаһ!» тип ҡысҡырҙығыҙ. Әгәр һеҙ әйткәнсә, «Аллаһ юҡ» икән, ниңә Уны ярҙамға саҡырырға?

Аҙаҡ, беҙгә әйләнеп:

- Ғәфү итегеҙ! Бер ниндәй ҙә тормоз боҙолманы. Бәхәсегеҙҙе ишеткәс, был кешене уҡытырға теләнем, - тине. Һуңынан ҡабат руль артына барып ултырҙы.

Машина ҡуҙғалып киткәс, сиңерткәләрҙең һайрағаны ғына ишетелде. Береһе лә һүҙ башламаны, ә өлкән йәштәге ир ҡыҙарынып уйланып ултырҙы. Ҡайнар сығанаҡҡа килеп етеп, йөктәребеҙҙе бушатҡанда миңә килде лә:

- Улым, һинән ғәфү үтенәм! Баҡһаң, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең барлығына инанғамын икән, тик мин оҙаҡ йылдар Уға ышанмайым, тип һанағанмын. Эйе, ышанам икән, әммә был хаҡта белмәгәнмен. Был хаҡта белеүемә һин сәбәпсеһе булдың, - тип, шоферға әйләнеп шулай тине:

- Иптәш шофер, һеҙгә лә бик рәхмәтлемен. Инанғанымды аңларға мөмкинлек бирҙегеҙ.

Вәхби ВАҠҠАС УЛЫ
«Уҡытыусы яҙмалары»

# ИМАН

✍ Бөтә йөрәк менән Аллаһтың барлығына, Уның Берлегенә һәм Мөхәммәт r Уның Пәйғәмбәре икәненә инаныу – Иман була.

**Мәңгелектә ҡотолоу пароле – Кәлимәи Тәүхид.**

Кәлимәи Тәүхид – ул күңелебеҙҙә булған имандың һүҙҙәге аңлатмаһы.

Ул ике өлөштән тора. Тәүге өлөшө – «Ләә иләәһә илләлааһ» – беҙ Аллаһтан башҡа бөтә иллаһтарҙы кире ҡағабыҙ. Бөтә йәшәйешебеҙ менән Аллаһҡа бурыслыбыҙ, был донъяла Ул нисек теләй, шулай ғәмәл ҡыласағыбыҙҙы белдерәбеҙ. Аллаһ ҡына табыныуға лайыҡлы булыуын танийбыҙ. Икенсе өлөшөндә - «Мөхәммәдүр-расүүлүллааһ» - Мөхәммәт

Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Һис шикһеҙ, мөьминдәр
Сәғәҙәткә ирешәсәк».

(Мөьминүн сүрәһе, 1-се аят)

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

Иң яҡшы зекер –
«Ләә иләәһә илләллааһ», ә иң яҡшы доға –
«Әлхәмдүлилләәһ».

(Тирмизи, Дәғүәт, 9)

## Кәлимәи Тәүхид

لا إله إلا الله محمد رسول الله

**«Ләә иләәһә илләллааһ,
Мөхәммәдүр-расүүлүллааһ»**

“Аллаһтан башҡа илаһ юҡ һәм Мөхәммәт Уның Илсеһе”



саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең Аллаһ тарафынан ебәрелгән пәйғәмбәр һәм тормошобоҙҙоң өлгөһө булыуын бөтә күңелебеҙ менән таныйбыҙ.

Кәлимәи Тәүхидтең мәғәнәһе хаҡында уйланып, ҡабатлап тороуҙың әжер-сауаптары зур. «Ләә иләәһә илләллааһ» һүҙҙәрен ихлас әйтеү, ғазаптарыбыҙҙы таратып, күңелебеҙҙе күтәрә. Йөрәгебеҙҙә Аллаһҡа ҡарата һөйөү урынлаштыра. Шул рәүешле Аллаһтың яратҡан ҡолдарына әүерeләбеҙ.



Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

«Ләә иләәһә илләллааһ»ты ҡабатлап, иманығыҙҙы яңыртығыҙ».

(Әхмәд ибн Хәнбәл, II, 359)

**Имандың һүҙҙәге аңлатмаһы - Кәлимәи Шәһәҙәт.**

Кәлимәи Шәһәҙәт - Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә һәм Пәйғәмбәргә инаныуҙы иң тулы һүҙҙәр менән белдереү. Кәлимәи Шәһәҙәт - Ислам динен ҡабул итеү һәм кешелеккә инаныуыбыҙҙы иғлан итеү. Кәлимәи Шәһәҙәт ярҙамында, мосолман булыуыбыҙҙы иғлан итеп, Исламдың бойороҡтары менән тыйыуҙарын ҡабул итәбеҙ. Ислам дине мосолмандарға биргән бөтә хоҡуҡтарға һәм йөкләмәләргә эйә булабыҙ, Ислам дине өммәтенең ағзаһына әйләнәбеҙ.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

«Ләә иләәһә илләллааһ, Мөхәммәдур-расүүлүллааһ» – «Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, Мөхәммәт – Аллаһтың Илсеһе» тип шәһәҙәт әйтеүсегә Аллаһ тамуҡ утын харам ҡылыр».

(Мөслим, Иман, 47)

Кәлимәи Шәһәҙәт нимә ул?

أَشْهَدُ أَنْ لَا إِلٰهَ إِلَّا اللّٰهُ

وَأَشْهَدُ أَنَّ مُحَمَّدًا عَبْدُهُ وَرَسُولُهُ

**«Әшһәду әлләә иләәһә илләллааһ үә әшһәду әннә Мухәммәдән ғәбдүһү үә расүлүһ».**

Кәлимәи Шәһәҙәт нимә аңлата?

**«Аллаһтан башҡа илаһ юҡлығына һәм Мөхәммәт Уның ҡоло һәм илсеһе икәнлегенә шаһитлыҡ ҡыламын».**

Кәлимәи Шәһәҙәтте әйтеп, нимә белдерәбеҙ?

**«Шәһәҙәт Кәлимәи» ярҙамында белдерәбеҙ:**

**- Аллаһтың барлығына һәм Уның Берлегенә инаныуыбыҙҙы.**

**- Аллаһтан башҡа бер кемдең дә табыныуға лайыҡлы түгеллеген.**

**- Тормошобоҙҙа Уның бойороҡтарына һәм тыйыуҙарына ярашлы йәшәүебеҙҙе.**

**- Пәйғәмбәребеҙгә һәм Ул Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән алып килгән барлыҡ хәбәрҙәргә инаныуыбыҙҙы.**

# УНЫҢ ТОРМОШО ШУЛАЙ ҮҘГӘРӘ

Исламдың беренсе йылдары була. Мосолмандар һаны көндән-көн арта. Пәйғәмбәребеҙҙең олатаһы Хәмзәнең Ислам динен ҡабул итеүе менән мосолмандар һаны утыҙ туғыҙға етә. Абруйлы Хәмзәнең мосолман булыуы Мәккәләге боттарға табыныусыларҙы нығ һағайта. Юлбашсылары йәһәт кенә ҡор йыя. Ислам диненең таралыуына нисек итеп кәртә ҡуйыу хаҡында ентекле һөйләшеү алып барыла.

-Мосолмандар һаны арта, улар көндән-көн көсәйә. Әгәр беҙ кисекмәҫтән саралар күрмәһәк, алда беҙҙе ҡурҡыныстар көтә, уларға ҡаршы тора алмаясаҡбыҙ. Беҙ мотлаҡ был мәсьәләне хәл итеү юлын табырға тейешбеҙ, - тип иғлан итә улар.

Ҡорҙа төрлө ысулдар тәҡдим ителә. Ләкин иң ҡаты ҡарарҙы Әбү Джәһл индерә:

- Мөхәммәтте үлтереүҙән башҡа юл юҡ.

Шул саҡ Ғүмәр урынынан ырғып тора:

- Был эште Ғүмәр ибн Хаттаб ҡына эшләйәсәк!

Ҡорҙағыларҙың алҡыштары аҫтында Ғүмәр уктай осоп сыға. Өйөнә йүгереп ҡайтып, билбауына ҡоралын таға һәм Аллаһ Рәсүлен үлтерергә китә.

Юлында ул Нуғәйм ибн Абдуллаһты осрата. Нуғәймде Ғүмәрҙең асыулы йөҙө һағайта һәм ул һорай:



- Әй, Ғүмәр! Ҡайҙа китеп бараһың?

- Ғәрәптәр араһына низағ орлоғон сәскән Мөхәммәтте үлтерергә.

- Әй, Ғүмәр! Һин бик етди эш ниәтләгәнһең. Мосолмандар Мөхәммәт тирәләй күбәләк кеүек өйөрөләләр. Улар һине хатта яҡын да ебәрмәйәсәктәр. Күҙ алдына килтерәйек, теләгәнеңде эшләнең, ти. Бану Хашимдар һине тере ҡалдырырҙар тип уйлайһыңмы әллә?

- Әллә һин дә уларҙың береһеме? Һин дә Мөхәммәттең динен ҡабул иттеңме?

- Һин минән һорарҙан алда туғандарыңды ҡара! Кейәүең Сәғд менән һеңлең Фатима мосолман булдылар!

Нуғәймдең был һүҙҙәре Ғүмәрҙе ҡотортоп ебәрә. Асыуынан нимә эшләргә белмәй. Кейәүенең һәм һеңлеһенең мосолман булғанына ышанырға теләмәй... Әгәр дөрөҫ булһа? Хәҙер нимә эшләргә? Иң тәүҙә кемгә барырға? Күңеленә төшкән шиген бөтөрөү өсөн, юлын бороп, тура-нан-тура кейәүе Сәғд ибн Зәйдтең өйөнә юллана. Унда Изге Ҡөрьәнде уҡыған булалар. Хөрмәтле Хаббаб йорт хужаларын Ҡөрьән уҡырға өйрәтә. Ишеккә яҡынлашҡас, Ғүмәр уларҙың уҡыған тауыштарын ишетә. Әйтерһең дә ишекте емерергә теләгән кеүек, нык итеп ҡаға башлай. Өйҙәгеләр, Ғүмәр килгәнен аңлап, нык ҡурҡа. Ҡурҡыштарынан улар Хаббабты йәшерә. Ҡулдарындағы Ҡөрьән төргәген дә йәшергәс, ишектәрен асырға йүгерәләр.

- Нимә уҡынығыҙ? - ярһыған Ғүмәр ҡысҡырып ебәрә.

- Бер нимә лә, - ти кейәүе.

- Тимәк, мин ишеткән – дөрөҫ, - ти ҙә кейәүенең яғаһынан тотоп ала. Көслө йоҙроғо менән уны ҡолата һуға. Аҙаҡ ярһыуҙан уны типкеләй башлай. Һеңлеһе, ирен ҡотҡарыр өсөн, Ғүмәрҙең ҡулынан тотоп ала, тегеһе һеңлеһенең йөҙөнә һуға. Фатима ҡанатҡансы һуғылған йөҙө менән: «Әй, Ғүмәр! Эйе, беҙ – мин һәм минең ирем - мосолман булдыҡ! Беҙҙең менән нимә теләйһең, шуны эшлә! Хатта үлтерһәң дә, динебеҙҙән сигенмәйбеҙ!» - тип әйтә. Фатиманың әйткән һүҙҙәре, сикәһе буйлап аҡҡан ҡаны, уның етди һәм моңһоу ҡиәфәте Ғүмәргә нык тәьҫир итә. Йөрәге йомшай.

Ул, нисектер үкенгән кеүек, иҙәнгә сүгәләй ҙә тыныс ҡына әйтә: «Нимә уҡынығыҙ, шуны алып килегеҙ әле, ҡарарға теләйем». Йәшеренгән еренән сыҡҡан Хаббаб Ғүмәргә әйтә: «Әй, Ғүмәр! Пәйғәмбәрҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһҡа ошолай доға ҡылғанын ишеттем: «Әй, Аллаһ! Ислам динен Әбү Джәһл йәки Ғүмәр ибн Хаттаб менән нығытһаң ине!» Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һинең хаҡтағы доғаһы тормошҡа ашырына өмөтләнәм. Аллаһтан ҡурҡып, мосолман бул!» Ул арала һеңлеһе йәшерелгән еренән Ҡөрьәндең төргәген Ғүмәргә алып бирә. Төргәктә «Та-Һа» сүрәһенең тәүге аяттары яҙылған була. Ғүмәр төргәкте ала һәм уҡый башлай. Тамамлағас, тәрән уйға ҡала. Аяттар уға нык тәьҫир итә. Ислам күңеленә үтеп инә. Әйтерһең дә, ул үҙгәреп, икенсе кешегә әйләнә. Уның ауыҙынан: «Мине Мөхәммәткә алып барығыҙ», - тигән һүҙ сыға. Ғүмәрҙең был һүҙҙәре өйҙәгеләрҙең бөтәһен дә ҡыуандыра. Кисекмәҫтән барыһы ла бергә өйҙән сыға.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Әрҡамдың йортонда була. Мосолмандар ҡоралдар менән Әрҡамдың өйөнә юлланған Ғүмәрҙе күреп борсола.

Хөрмәтле Хәмзә уларҙы дәртләндерә: «Әгәр яҡшы ниәттәр менән килә икән, был бит бик яҡшы! Әгәр насар ниәт менән килә икән, кәрәген алыр. Борсолмағыҙ!»

Әрҡамдың ишегенә килгән Ғүмәрҙе Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янына үткәрәләр. Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ни өсөн килгәнен һорай. Ғүмәр: «Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә иман килтерәгәнемде хәбәр итергә килдем,» - тип яуап бирә. Һуңынан: «Әшһәдү әлләә иләәһә илләллааһ үә әшһәду әннә Мухәммәдән ғәбдүһү үә расүлүһ», - тип әйтеп, мосолман була. Унда булған кешеләр тантаналы рәүештә ҡысҡырып тәкбир әйтә. Тәкбир Мәккә урамдары буйлап яңғырай. Ғүмәр, разыяллаһу ғәнһү, яңы тормош башлай. Ул мосолмандар сафына инә. Исламға һәм мосолмандарға ҡарата булған асыуынан эҙе лә ҡалмай. Исламдың матурлығын аңлай, йөрәге иман менән тула. Элекке Ғүмәр юҡҡа сыға, урынына яңы Ғүмәр пәйҙә була.

Ғүмәрҙең, разыяллаһу ғәнһү, Ислам динен ҡабул итеүе мосолмандарға көс өстәй, араларында Ғүмәрҙең, разыяллаһу ғәнһү, булыуы ҡыйыулыҡ бирә. Улар, йәшеренеп Исламды өйрәнгән Әрҡамдың өйөнән бергәләп сығып, Ҡәғбәгә юлланалар. Ҡәғбә янында ултырған боттарға табыныусылар Ғүмәр, разыяллаһу ғәнһү, менән бергә килгән мосолмандар төркөмөн күрә. Ғүмәр, разыяллаһу ғәнһү, уларға бөтә мосолмандарҙы алып килә, тип фараз итә улар. Күп тә үтмәй яңылышҡандарын аңлайҙар. Тәкбир әйтеп килгән төркөм Ҡәғбәгә яҡынлағас, Ғүмәр, разыяллаһу ғәнһү, алға сыға ла, Мәккәнең башлыҡтарына мөрәжәғәт итеп, мосолман булғанын иғлан итә: «Белмәгәндәр белһен. Мин, Ғүмәр ибн Хаттаб, мосолман булдым». Ә аҙаҡ шәһәҙәт һүҙҙәрен ҡысҡыра. Боттарға табыныусылар, Ғүмәрҙең, разыяллаһу ғәнһү, һүҙҙәрен ишетеп, баҙап ҡала. Әйтерһең, тетрәнеүҙән улар телдәрен йота. Ҡаршы бер һүҙ ҙә әйтә алмай таралышалар.



Ҡәғбәгә килгән мосолмандар бөтәһе бергә беренсе тапҡыр шунда намаҙ ҡыла. Ғүмәр ҙә, разыяллаһу ғәнһү, улар менән бергә намаҙ уҡый, үҙен мосолман булырға лайыҡлы иткән Аллаһты данлай. Күп тапҡырҙар Ҡәғбәгә килгән Ғүмәрҙең, разыяллаһу ғәнһү, йөрәге элек ни ҡәҙәр асыу һәм нәфрәт менән солғанған булһа, хатта ки Аллаһ Рәсүлен үлтерергә әҙер булһа, хәҙер шул уҡ йөрәк ышаныс һәм һөйөү менән тула, дин юлында үлергә лә әҙер була. Шәһәҙәт һүҙҙәре был мөхәббәт һәм имандың иң күркәм символы рәүешендә яңғырай.

# ДИН КҮҘЛЕГЕНӘН ҠАРАҒАНДА КЕШЕЛӘР

Дин күҙлегенән ҡарағанда, кешеләр ике төркөмгә бүленә:
1. Иман килтергәндәр.
2. Иман килтермәгәндәр.

**ДИН КҮҘЛЕГЕНӘН КЕШЕЛӘР**

- ИМАН КИЛТЕРГӘНДӘР (МӨЬМИН-МОСОЛМАНДАР)
- ИМАН КИЛТЕРМӘГӘНДӘР
  - **КӘФЕР** (Аллаһты инҡар итеүсе)
  - **МӨШРИК** (Аллаһҡа тиңдәшлек биреүсе)
  - **МОНАФИҠ** (тыштан ғына иман килтергән кеүек күренеүсе)

Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Иман килтереп, изгелек ҡылғандар, һис шикһеҙ, Аллаһ яралтҡандарҙың иң яҡшылары. Раббы янындағы иң олуғ әжер (йәннәт) уларға булыр. Арыҡтарынан шишмәләр ағып ятыусы Ғәден йәннәттәрендә улар мәңге ҡаласаҡ. Аллаһ уларҙан ҡәнәғәт булыр. Улар ҙа Аллаһтан ҡәнәғәт ҡалыр. Быны былар барыһы ла Аллаһтың яҙаһынан ҡурҡҡан мөьминдәр өсөн әҙерләнгән әжер».



(Бәййинә сүрәһе, 7-8-се аяттар)

## 1. Иман килтергәндәр

☺ Аллаһтың барлығына һәм Уның Берлегенә, Мөхәммәт r пәйғәмбәрлегенә һәм уға Аллаһтан төшөрөлгәндәргә ихлас күңелдән инаныусы **мөьмин** йәки **мосолман** тип атала. Иман килтереп, изге эштәр ҡылғандар йәннәткә инә.

## 2. Иман килтермәгәндәр

Иман килтермәгәндәр өс төргә бүленә: кәферҙәр, мөшриктәр, монафиҡтар.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең барлығына һәм Уның Берлегенә ышанмай, Мөхәммәт r пәйғәмбәрлеген ҡабул итмәй һәм уға Аллаһтан төшөрөлгәнде кире ҡаға икән, ул кеше кәфер тип атала. Шулай уҡ диндең нигеҙҙәрен инҡар итеүсе, динебеҙ ҡанундарын кире ҡағыусы ла кәфер була. Кәфер булып үлгән кеше мәңгелек тамуҡ язаһында булыр.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең барлығына инанған, әммә уның Берлеген танымаған һәм кемделер Уға тиңдәш ҡуйғандар мөшрик тип атала.

Юҡтан бар ҡылыу, ризыҡландырыу, шифаландырыу Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә генә хас. Башҡа заттарҙың ошондай үҙенсәлеккә эйә икәненә ышанғандар Уға тиңдәшлек килтереүсе була. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ҡатыны йәки ярҙамсыһы барлығына ышаныусы ла тиңдәшлек килтереүсе була.

Кемдер үҙен мосолмандар кеүек тота, ә ысынында ышанмай икән, ул монафиҡ (ике йөҙлө) тип атала. Әхирәттә монафиҡтарҙың хәле лә бик ауыр буласаҡ.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Инҡарсыларға йәһәннәм ғазабы бар. Улар шунда үлтерелмәҫтәр ҙә, ғазаптары ла еңеләйтелмәҫ. Кәферлектә алда барғандарҙы Беҙ бына шулай итеп язалайбыҙ. Улар шунда:

- Раббыбыҙ, зинһар, беҙҙе сығар бынан, әүәл ҡылған (изгелекһеҙ) эштәребеҙ урынына изгелекле эштәр башҡарыр инек, - тип үкереп ялбарырҙар.

- Һеҙгә уйлап аңларлыҡ ғүмер бирмәнекме? Һеҙгә киҫәтеүсе (Ҡөрьән, Пәйғәмбәр) килмәнеме? (Ни өсөн инанманығыҙ!) Хәҙер инде (язаһын) татығыҙ! Залимдарға ярҙам итеүсе булмаҫ».

(Фатыр сүрәһе, 36-37-се аяттар)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Аллаһҡа тиң эҙләгәнде Аллаһ кисермәҫ. Ошо гөнаһтан башҡа гөнаһтарҙы, теләгән кешеһен ғәфү итер. Аллаһҡа тиң эҙләгән кеше - тура юлды таба алмаҫ дәрәжәлә аҙашҡан иң ҙур гөнаһлы булыр».

(Нисә сүрәһе, 116-сы аят)

## ДИН МӘСЬӘЛӘЛӘРЕНДӘ НИМӘГӘ ИҒТИБАР ИТЕРГӘ ТЕЙЕШБЕҘ?

Аллаh Сүбхәнәhү үә Тәғәләнең барлығына һәм Уның Берлегенә, Мөхәммәт r пәйғәмбәрлегенә инанғандан һуң, беҙ иманлыларҙан булабыҙ. «Мин инандым», - тип бер тапҡыр әйтеү генә етмәй. Һуңғы һулышыбыҙға тиклем динебеҙҙе ентекләп өйрәнеп һаҡларға кәрәк, сөнки иманыбыҙҙың ныҡлығы беҙҙе мәңгелек бәхеткә илтә. Шуға күрә ошоларға иғтибар итергә тейешбеҙ:

**Беҙ динебеҙҙең барлыҡ ҡанундарын һәм ғаҡида нигеҙҙәрен ҡабул итергә тейешбеҙ.**

Аллаh Сүбхәнәhү үә Тәғәләгә, фәрештәләренә, Изге китаптарына, пәйғәмбәрҙәренә, Ҡиәмәт Көнөнә, яҙмышҡа һәм тәҡдиргә инаныу -

Аллаhу Тәғәлә бойора:

«Шик юҡ, монафиҡтар йәһәннәмдең иң аҫҡы ҡатында буласаҡ». (Нисә сүрәhе, 145-се аят)

«Сөнки улар башта иман килтерҙе, ахырҙа имандан сыҡты. Шуға күрә уларҙың күңеле йоҙаҡлы». (Мунафиҡун, 3-сө аят)

Аллаhу Тәғәлә бойора:

«Әй, иман килтергәндәр, Аллаhтың яҙаhынан нисек ҡурҡырға кәрәк булhа, шулай ҡурҡығыҙ. Һаҡ булығыҙ, мосолманлыҡтан башҡа хәлдә йән бирмәгеҙ».

(Ғимран сүрәhе, 102-се аят)



ғәҡиҙаның (иман асылының) нигеҙе. Ә бойороҡтары һәм тыйыуҙары - динебеҙҙең төп ҡанундары. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә намаҙ, ураҙа, хаж, зәкәт, йыһат кеүек ғибәҙәттәрҙе ҡылырға бойора. Урлашыу, кеше үлтереү, ҡомарлы уйындар, эскелек, зина кеүек әшәкелекте тыя. Иманыбыҙ ныҡ булһын өсөн, бөтә күңелебеҙ менән быларҙың Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тарафынан бойоролоуына йәки ҡәтғи тыйылыуына инаныу кәрәк. Ислам бойорғандар йәки тыйғандар менән килешмәү, ризаһыҙлыҡ белдереү, бер йәки бер нисә иман нигеҙенән һәм төп ҡанундарҙан көлөү, һүҙҙә йә ғәмәлдә уларҙы инҡар итеү (Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Үҙе һаҡлаһын), мөртәтлеккә (диндән яҙған кеше) һәм динебеҙгә хыянатҡа сәбәп була.

### Ҡурҡыу һәм өмөт араһында йәшәргә тейешбеҙ.

Ҡылған ғибәҙәттәребеҙ һәм яҡшы ғәмәлдәребеҙ өсөн Йәннәткә һис шикһеҙ инәбеҙ тип һанау - ҙур хата. Шулай уҡ ҡылған хаталарыбыҙ һәм гонаһтарыбыҙ өсөн үҙебеҙҙе тамуҡ әһелдәренән тип һанау ҙа хата була. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең мотлаҡ ярлыҡауына йәки кереһенсә Уның мәрхәмәтенә өмөтһеҙләнеү иманыбыҙҙы юғалтыуҙың сәбәбе булыуы ихтимал.

Бындай осраҡта беҙ, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең сикһеҙ Мәрхәмәтле һәм Ярлыҡаусы икәненә ышанып, ләкин Ул гонаһлыларҙы язалауы тураһында хәтерләп торорға тейешбеҙ. Ожмахҡа инеүебеҙгә өмөтләнеү, әммә йәһәннәмгә ебәрелеүебеҙҙән ҡурҡыу лазым, йәғни ҡурҡыу менән өмөт араһында йәшәргә. Ожмахҡа лайыҡлы булырға тырышырға, тамуҡҡа илтә торған әшәке ғәмәлдәрҙән һәм гөнаһтарҙан йыраҡ булырға кәрәк.

Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Һеҙ Китаптың (Тәүрәттың) бер өлөшөнә ышанып, икенсеһен инҡар итәһегеҙме? Һеҙҙең был ҡылғандарығыҙ был донъяла рисуайлыҡ һаналһа, Әхирәттә иһә иң ҡаты язаһын килтерер. Аллаһ һеҙҙең был ҡылғандарығыҙға битараф ҡалмаҫ».

(Баҡара сүрәһе, 85-се аят)

«Әгәр Ҡиәмәт Көнөндә бер генә кеше йәннәткә инә, тип иғлан ителһә, уның үҙем булырына өмөт бағлаясаҡмын. Әгәр ҙә ки бары бер кеше генә тамуҡҡа элгә, тиһәләр, был юлы: «Мин түгелме ул?» - тип хафаланасаҡмын»

Хәлиф Ғүмәр t

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Әйт һин: «Һәй, үҙ нәфселәре арҡаһында хаттин ашҡандар! Аллаһтың рәхмәтенән өмөт өҙмәгеҙ. Аллаһ - (тәүбә иткән) барса гөнаһлыларҙы ярлыҡаусы. Хаҡтыр, Ул сикһеҙ ярлыҡаусы, хәтһеҙ мәрхәмәтле».

**(Зумәр сүрәһе, 53-сө аят)**

# ПӘЙҒӘМБӘРҘӘН r ҠЫУАНЫСЛЫ ХӘБӘР

Пәйғәмбәребеҙ r сәхәбәләренең береһе булған Ғәмр ибн Ас t йән бирергә ятҡан. Дуҫтары хәлен белешергә килгән. Улар ингәс, диуар яғына йөҙө менән әйләнеп, ул ипләп кенә илай башлаған. Улы уны тынысландырырға тырышҡан:

- Атаҡайым! Рәсүлуллаһ шул-шул ҡыуанослы хәбәр менән шатландырманымы ни? Ни өсөн борсолаһың?

Шул саҡта Ғәмр ибн Ас йөҙө менән дуҫтарына әйләнгән дә әйткән:

- Мәңгелек тормош өсөн әҙерләгән иң ошо һүҙҙәр: «Ләә иләәһә илләллааһ, Мөхәммәдүр-расүүлүллааһ» - иң ҡиммәтлеһе.

Һуңынан хәтирәләре менән уртаҡлаша:

- Ваҡытында минең кеүек Пәйғәмбәребеҙгә r ҡарата асыу һәм нәфрәт кисергән бер кем дә булманы. Ниндәйҙер һылтау табып, уны үлтерергә теләнем. Әгәр ҙә мин был уйҙарым менән үлгән булһам, мотлаҡ йәһәннәм әһеле булыр инем. Аллаһ минең күңелемдә Исламға ҡарата һөйөү уятҡас, Пәйғәмбәребеҙгә r килдем дә әйттем:

- Ҡулыңды бир! Һиңә ант иткем килә (һиңә инандым һәм буйһондом тип һүҙ бирәм).

Аллаһ Илсеһе, r, ҡулын биргәс, мин үҙемдекен тартып алдым. Пәйғәмбәребеҙ r һорау бирҙе:

- Нимә булды? Әллә иман килтереү уйынан кире ҡайттыңмы?

Мин:

- Мин иман килтерәм, ләкин бер шартым бар, - тинем.

Рәсүлуллаһ һораны:

- Шартың ниндәй?

- Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә мине ғәфү итеүен теләйем, - тинем.

Пәйғәмбәребеҙ r шулай тип яуап бирҙе:

- Ислам элекке гонаһтарҙы йыуа. Аллаһтың юлында һижрәт итеү гонаһтарҙы юҡ итә. Хаж ҡылыу элекке гонаһтарҙы юҡҡа сығара.

Мин был һүҙҙәргә ныҡ шатландым. Уға иман килтерҙем һәм мөбәрәк ҡулдарын ҡулыма алдым. Был инаныу менән бергә йөрәгемдә Пәйғәмбәребеҙгә r ҡарата шундай һөйөү барлыҡҡа килде, уны яратҡан кеүек бер кемде лә яратманым.

(Мөслим, Иман, 192)



# ИМАНЫБЫҘҘЫ НЫҒЫТЫР ӨСӨН, НИМӘ ЭШЛӘРГӘ ТЕЙЕШБЕҘ?

Иман – аҡылыбыҙҙың юлбашсыһы, йөрәгебеҙҙең тыныслыҡ сығанағы. Был донъянан мәңгелек донъяға бәхетле күсенеү иман менән генә мөмкин.

Иман – бөтә ғибәҙәттәрҙең дә төп нигеҙе. Ғибәҙәттәрҙең ҡиммәте бары тик иман менән. Мөхәббәт менән атҡарылған ғибәҙәт, күркәм ғәҙәттәргә эйә булыу, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең һәр ғәмәлебеҙҙән ҡәнәғәт булыуын хәстәрләү - иманыбыҙҙың иң яҡшы емештәренән. Шул уҡ ваҡытта был эштәребеҙ иманыбыҙҙы нығытып тора.

- Раббыбыҙға яҡынлыҡ;
- Ғибәҙәттәребеҙ;
- Харамдан йыраҡ булыу

тормошобоҙға йоғонто яһап, көндәлдәребеҙҙе Иман менән тултыра.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә булған мөхәббәт - ныҡлы иман һөҙөмтәһе. Ә тыйылған ғәмәлдәр ҡылыу һәм ғибәҙәткә һалҡын булыу имандың зәғифлеген күрһәтә. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне ихтирам итеүҙән һәм һөйөүҙән күҙҙәре йәш менән тулған кешенең һәм, исе лә китмәй тыйылғандарға батып, ғибәҙҙәттәренә иғтибар бирмәгәндең иман кимәле бер түгел.

Иман йөрәктәребеҙҙә шытып һәм йәшәреп килеп сыҡҡан үҫентегә тиң. Был шытым үҫһен, емеш бирһен өсөн, уны һаҡлау, тәрбиәләү зарур. Шулай уҡ иманыбыҙҙы рухи аҙыҡ менән нығытып торорға, зарарлы фекерҙәрҙән һәм ҡараштарҙан ҡурсаларға кәрәк, сөнки иманды ҡурсалап тормаһаң, ҡараусыһыҙ ҡалдырылған үҫентеләр нисек кибә, ул да шулай юҡҡа сыға.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«(Мосолмандар) ҡаушамағыҙ, хафаланмағыҙ, әгәр ҙә һеҙ мөьмин-мосолман икәнһегеҙ, һеҙ барыһынан да өҫтөн булырһығыҙ».

**(Ғимран сүрәһе, 139-сы аят)**

Иман – ул нур һәм көс.
Ныҡлы иманлы кеше бөтә ғаләмгә оран һалырлыҡ көс-ҡеүәткә эйә.





Иман – иң ҡиммәтле капиталыбыҙ. Асыҡтан-асыҡ дошманыбыҙ булған шайтан, һәр уңайлы осраҡтан файҙаланып, йөрәктәребеҙҙәге иманды юҡ итергә тырыша. Шул сәбәпле, иманыбыҙҙы йәнләндереп, ғүмеребеҙҙең ахырына тиклем уны ҡурсаларға тейешбеҙ. Ә быны уңышлы башҡарыр өсөн:

- изге ғәмәлдәр ҡылырға;
- ғибәҙәттәребеҙҙе ентекле үтәргә;
- фекер йөрөтөргә;
- гонаһтарҙан һәм харамдан тыйылырға;
- иманлы кешеләр менән бергә булырға тейешбеҙ.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

«Әгәр берәйегеҙ Ислам буйынса йәшәһә, һәр ҡылған изге эше өсөн ундан алып ете йөҙгә ҡәҙәре әжер яҙыласаҡ. Ә һәр бер насар эш өсөн берәү яҙыла».

**Бохари, Иман, 31**

**Аллаһтың ризалығы өсөн эшләгән изге эштәребеҙҙең дөйөм атамаһы - салих ғәмәлдәр (ғәмәл-салих).**

Иман – ниндәйҙер теоретик фекер һәм ғилем түгел. Иман түбәһенә күтәрелеү ғибәҙәттәребеҙгә һәм изге эштәребеҙгә бәйле. Иман тәүҙә йөрәктәребеҙҙә ярала, ә аҙаҡ ғәмәлдәребеҙгә әйләнә. Шул нөктәгә еткәс кенә, имандың хәҡиҡи тәмен тоясаҡбыҙ. Изге Ҡөрьәндә һәм Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәҙистәрендә иман менән изге ғәмәлдәр ғәҙәттә бергә телгә алына. Аллаһтың ризалығын алыр өсөн ҡылынған бөтә яҡшы һәм матур эштәребеҙ **салих ғәмәлдәр** тип атала . Һәр бер ошондай изге эш:

Аллаһ ризалығы өсөн эшләнгән һәр изге эш иманыбыҙҙы нығыта.

- Аллаһтың бойороҡтарын үтәү;
- Аллаһ тыйғандарынан арыныу;
- Юғары әхлаҡлы булыу;
- Мәхлүктәргә ҡарата изгелекле һәм шәфҡәтлеле булыу;
- Белем алыу һәм уны башҡаларға тапшырыу;
- Кешелеккә хеҙмәт итеү;
- Кешеләргә ярҙам ҡулы һуҙыу һәм миһырбанлылыҡ күрһәтеү;
- Хайуандарға мәрхәмәтле булыу;
- Тирә-яҡ мөхитте таҙартыу,

былар изге ғәмәлдәрҙән һанала. Иманыбыҙ йөрәктәребеҙҙә янып һәм яҡтыртып юл күрһәткән лампа кеүек, ә изге ғәмәлдәребеҙ был лампаны һаҡлап һәм яҡтылығын сағыуыраҡ иткән плафон ише. Иманыбыҙҙы һаҡлау һәм нығытыу өсөн, изге ғәмәлдәребеҙҙе арттырырға кәрәк. Изге ғәмәлдәребеҙ өҫтәлгән һайын, күңелдәребеҙҙәге яҡтылыҡ та арта. Аллаһҡа һәм Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәтебеҙ нығына.



**Ғибәҙәттәребеҙ иманыбыҙҙы тейешле кимәлдә тоторға мөмкинлек бирә.**

Иманыбыҙ менән ғибәҙәттәребеҙ араһында тура бәйләнеш бар. Ғибәҙәт ҡылыуҙағы ихласлығыбыҙ иманыбыҙ ныҡлығын күрһәтә.

Бер кеше Пәйғәмбәребеҙгә килгән дә әйткән:

- Әй, Аллаһ Илсеһе! Тамуҡтан йырағайтып, ожмахҡа илтә торған ғәмәлдәр тураһында миңә хәбәр ит.

Быға Пәйғәмбәребеҙ r ошондай яуап биргән:

- Аллаһҡа табын, Уға тиңдәшлек килтермә. Намаҙ ҡыл, зәкәт түлә һәм туғандарыңды хәстәрлә.

**(Мөслим, Иман, 31)**

Ныҡлы иманға эйә булған мосолман ғибәҙәт ҡылыуҙан ләззәт таба. Ул ғибәҙәтен тыныс ҡыла, бынан эске шатлыҡ кисерә. Ә иманы көсһөҙ мосолман ғибәҙәткә ялҡау ҡарай. Даими ғибәҙәт ҡылмағанлыҡтан, дини тойғолары кәмей, гонаһтарҙан тайшанмай башлай, йөрәге ҡата, күңелендәге иман нуры яйлап ҡына һүнә.

Ғибәҙәт ҡылыуыбыҙ Аллаһҡа яҡынайта, Уның мөхәббәтен һәм ризалығын яулауға сәбәп булып тора. Намаҙ, ураҙа, зәкәт, саҙаҡа, ғәҙеллек, дуҫтарҙы һыйлау кеүек ғәмәлдәр, ғибәҙәт ҡылыуҙар үҙ-ара һәм Аллаһ менән рухи бәйләнеште, иманыбыҙҙы нығыта.

**Кешенең фекерләү офоғо: Тәфәккүр.**

**Тәфәккүр – тимәк:**

- ✔ Аллаһтың бөйөклөгө;
- ✔ Уның ҡеүәте һәм көсөнөң бөйөклөгө;



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Улар аяҡ өҫтө тороп та, ултырып та, ҡырын ятҡан килеш тә Аллаһты зекер итәләр, күктәрҙең һәм Ерҙең яралтылышы хаҡында тәрән фекерләйҙәр, (һәм әйтәләр):
- Раббыбыҙ! Һин быларҙы бушҡа ғына яралтманың. Һине тәсбих итәбеҙ. Беҙҙе йәһәннәм ғазабынан ҡотҡар!».

**(Ғимран сүрәһе, 191-се аят)**

- Ғаләмдәге мәхлүҡтәрҙең матурлығы;
- Кешенең яратылыу маҡсаты;
- Фани донъя, әжәл, ҡәбер тормошо;
- Ҡиәмәт Көнө, иҫәп-хисап, ожмах һәм тамуҡ

тураһында фекер йөрөтөп, унан һабаҡ алыу.

Кешенең һәм башҡа мәхлүҡтәрҙең яратылыуында Аллаһтың барлығына һәм берлегенә бик күп дәлилдәр бар. Сикһеҙ ғаләм, уның кәмселекһеҙ төҙөлөшө тураһында уйлап, Раббыбыҙҙың ни тиклем бөйөк һәм ҡөҙрәтле икәненә төшөнәбеҙ. Көсһөҙлөгөбөҙҙө һәм ярҙамға мохтажлығыбыҙҙы аңлайбыҙ.

Үҙенең көсһөҙ һәм зәғиф ҡолдарына Аллаһтың ни тиклем йомарт һәм мәрхәмәтле булыуын аңлайбыҙ. Тормош, үлем һәм мәңгелек тураһында уйланып, был тормоштың фанилығын төшөнәбеҙ. Мәңгелек тормошобоҙҙа был донъялағы һәр ҡылығыбыҙ өсөн иҫәп-хисап тоторға тейешлегебеҙ хаҡында онотмайбыҙ. Ошондай фекерләүҙәребеҙ арҡылы иманыбыҙ тағы ла нығына. Тормошто Раббыбыҙҙы таныу һәм ожмахҡа ирешеү өсөн бирелгән ҙур мөмкинлек кеүек ҡабул итәбеҙ. Ата-әсәләр, туғандар, дуҫтар менән яҡшы мөғәмәлә итәбеҙ. Бер мәхлүҡкә лә зыян һалмайбыҙ.

Бер сәғәт фекер йөрөтөү бер йыл белемһеҙ ҡылынған нәфел ғибәҙәттәренән хәйерлерәк.

# ИҢ ИЗГЕ ҺҮҘ

“Ләә иләәһә илләллаah
Мөхәммәдүр-расүүлүллаah” -
Был иң яҡшы кәлимә,
Күп тапҡырҙар ҡабатла.

“Ләә иләәһә илләллаah
Мөхәммәдүр-расүүлүллаah”-
Ошо гүзәл кәлимәгә
Телең күнектер әйҙә.

“Ләә иләәһә илләллаah
Мөхәммәдүр-расүүлүллаah”-
Һуңғы һулышыбыҙҙа
Әйтергә насип әйлә.

Зекерҙең иң яҡшыһы -
“Ләә иләәһә илләллаah
Мөхәммәдүр-расүүлүллаah”
Мизанда ауырыраҡ.

“Ләә иләәһә илләллаah
Мөхәммәдүр-расүүлүллаah”-
Күктәрҙә һәм дә ерҙә,
Бар Ғаләмде тултыра.

“Ләә иләәһә илләллаah
Мөхәммәдүр-расүүлүллаah!”
Телебеҙҙән юғалма!
Беҙҙе уттарҙан һаҡла.

“Ләә иләәһә илләллаah
Мөхәммәдүр-расүүлүллаah”
Тамуҡ юлдарын яба,
Йәннәттәргә юл аса.

“Ләә иләәһә илләллаah
Мөхәммәдүр-расүүлүллаah”ты
Атабыҙ Әҙәм белә,
Уны Ғәрештә күрә.

“Ләә иләәһә илләллаah
Мөхәммәдүр-расүүлүллаah” -
Аллаh бар – Бер Илаh!
Мөхәммәт – Пәйғәмбәре!
Хаҡтыр, беҙ – Аллаhтыҡы!..

Йософ ӘСХӘДУЛЛИН



**Йөрәгебеҙҙе ҡара таптарҙан һаҡлау – гөнаһтарҙан йыраҡ булыу.**

Тәнебеҙгә, йәнебеҙгә, йәмғиәтебеҙгә, башҡа кешеләргә һәм тере заттарға зыян килтергән эштәр була. Аллаһ уларҙы ҡылыуҙы тыя. Уға ширек ҡаттырыу, ялған, ғәйбәт, ата-әсәне тыңламау, намаҙ ҡылмау, башҡаларға зыян килтереү кеүек ғәмәлдәрҙе Аллаһ рөхсәт итмәй. Был бойоroҡтарға буйһонмаһаҡ, гөнаһ ҡылған булабыҙ. Ҡылған гөнаһтарабыҙ иманыбыҙға зыян килтерә.

Ғәҙәтебеҙгә ингән гөнаһтарыбыҙ иманыбыҙҙың көсһеҙләнеүенә сәбәп була. Гөнаһтарыбыҙ артып, ғибәҙәт ҡылыу теләген кәметә, Аллаһ яҙаһынан ҡурҡыу тойғоһо көсһеҙләнә. Ҡылған һәр бер гөнаһыбыҙ йөрәгебеҙгә ҡара тап булып ята. Таптарыбыҙ күбәйгән һайын, йөрәгебеҙ ҙә ҡата. Ә йөрәк ҡатһа, гөнаһ ҡылам тигән тойғо юғала. Элек тыйылып килгән гөнаһтарыбыҙға иғтибар итмәй башлайбыҙ. Шуға күрә, аңлы йәки аңһыҙ рәүештә ҡылған гөнатарыбыҙға үкенеп, кисекмәҫтән тәүбәбеҙгә килеп, Раббыбыҙ алдында ғәфү үтенергә тейешбеҙ. Йөрәгебеҙгә кире йоғонто яһаған гөнаһтарыбыҙҙан арынып өсөн, салих ғәмәлдәр ҡылырға кәрәк.



Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

«Мөьмин гөнаһ ҡылған ваҡытта, йөрәгендә ҡара нөктә барлыҡҡа килә. Әгәр был гөнаһты ҡалдырып, Аллаһтан ғәфү үтенһә, тап юҡҡа сығып, йөрәге элекке паклығын алыр. Әгәр гөнаһ ҡылыуын дауам итһә, ҡара нөктәһе ҙурайып, тулыһынса йөрәген ҡарайтыр. Был тутыҡ тураһында Аллаһ әйтә: «Улар ҡылған яманлыҡтар туҙан бөртөгө булып, йөрәктәренә тутыҡ ҡаплана» (Мутаффифин сүрәһе, 14-се аят).

**(Ибн Мәджә, 29)**

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

«Берәү Аллаһ юлында алыҫ юл үтә. Туҙған сәстәре менән саңлы килеш усын асып, күккә ҡарап, доға ҡыла: «Әй, Раббым!» Ә үҙенең шул уҡ ваҡытта ашағаны – харам, эскәне – харам, ризығы – харам. Шундай кешенең доғаһы нисек ҡабул булһын!»

**(Мөслим, Зәкәт, 65)**

**Аллаһ хаҡында хәтерләтеп торған яҡшы дуҫтар - тәҡүәле мөьминдәр.**

Аллаһтың бойороҡтарына буйһонған, ғибәҙәттәрен тырышып үтәгән, харам менән хәләлгә иғтибарлы гүзәл холоҡло кешеләр була. Был мосолмандар харамдан ҡаса, файҙалы ғәмәлдәр ҡыла һәм, берәйһен үпкәләтмәҫ өсөн,

**Кем харамды ашай,**
**ул юлбаҫар булып китә**

Ашап-эскән ризығыбыҙ рухи донъябыҙға, диндә ҡабул итеүебеҙгә бик ныҡ йоғонто яһай. Ризығыбыҙ ни тиклем хәләл, таҙа булһа, дини тормошобоҙ шул тиклем күркәм була һәм иманыбыҙ ҙа шул тиклем ныҡ була. Әйҙәгеҙ берәй транспорттың ағыулығы тураһында уйлап ҡарайыҡ. Ағыулыҡтағы сит матдә транспорттың эшмәкәрлегенә зыян килтергән кеүек, ашҡаҙанға эләккән харам ризыҡ та беҙҙең фекерләүебеҙ һәм әхлағыбыҙ боҙолоуға сәбәп була. Харам ризыҡ ашаған кеше харам нәмәләр тураһында уйлай, күңеле насарлыҡҡа тартыла, яуыз эштәр ҡыла башлай. Шуның өсөн ата-бабаларыбыҙ әйткән: «Кем тыйылғанды ашай, юлбаҫар булып китә».

һүҙҙәрен дә үлсәп һөйләй. Улар Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне ныҡ ярата, Аллаһ та уларҙы ярата. Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, улар - «тәҡүәле ҡолдар».

Тәҡүәле ҡолдар – камил заттар, Аллаһ улар менән дуҫ булыуыбыҙҙы теләй. Кешегә үҙе аралашҡан, яратҡан кешеләрҙең халәте, ғәмәлдәре мотлаҡ йоғонто яһай. Әгәр беҙ насар ғәҙәтле, ғибәҙәттәрен үтәмәгән, харамдан тыйылмаған кеше менән дуҫлашһаҡ, бындай дуҫлыҡ беҙгә кире йоғонто яһай. Иманыбыҙҙың көсһөҙләнеүенә, әхлаҡи принциптарыбыҙҙың боҙолоуына сәбәп була.

Ә изге, салих заттарға ҡарата һөйөү һәм улар янында булыу беҙгә ыңғай йоғонто яһай. Улар тыныс асыҡ диңгеҙгә оҡшаш. Йөҙҙәрендә - яҡтылыҡ, күңелдәрендә – тыныслыҡ. Рухи матурлыҡтары тышҡы ҡиәфәттәрендә сағыла. Бындай кешеләр үҙе тирәләй ыңғай энергия таратып, Аллаһ һәм мәңгелек тормош тураһында хәтерләтеп, һүҙҙәре һәм ҡылыҡтары өлгө булып тора.

Әгәр салих заттар менән дуҫ булһаҡ, иманыбыҙ нығый, Аллаһҡа ҡарата һөйөү тойғоларыбыҙ арта, йөрәгебеҙҙә харамға ҡарата сирҡаныу уяна, әхлағыбыҙ яҡшыра. Һәм беҙ, улар кеүек, иманлы ҡолдарҙан, Аллаһтың тыйғандарына һәм әмерҙәренә буйһонған, Уның ризалығына лайыҡлыларҙан булабыҙ.



Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

«Кешегә дуҫының йәшәү рәүеше йоғонто яһай. Һәр берегеҙ кем менән дуҫлашырға йыйынғанына иғтибар итһен».

**(Әбү Дауыт, Әҙәп, 16)**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Әй, иман килтергән кешеләр, Аллаһтан ҡурҡығыҙ һәм тура юлдағылар менән бергә булығыҙ».

**(Тәүбә сүрәһе, 119-сы аят)**

# ҺОРАУҘАР БИРӘ БЕЛГӘН КЕШЕ

Календарҙа алты йөҙ ҙә утыҙынсы йыл. Мәсет янына ят кеше килеп туктағанда, Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сәхәбәләре менән әңгәмә ҡороп ултырған була. Мосафирҙың оҙон, толомлап үрелгән сәстәре ике яҡҡа төшөп тора. Көс-кеүәте ташып торған мөһабәт кәүҙәле был кеше, еңел генә хәрәкәттәр менән дөйәнән һикереп төшөп, дөйәһен мәсеттең ихатаһына бәйләп, ышаныслы аҙымдар менән ултырыусыларға табан йүнәлә.

- Кемегеҙ Мөхәммәт? - тип һорай.

Мосолман булмағаны аңлашыла, сөнки мосолмандар Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тураһында һөйләгәндә, исеме буйынса түгел, Аллаһ биргән атаманы – «Алла Илсеһен» ҡуллана. Изге сәхәбәләр уға күрһәтә:

- Анауында һөйәлеп ултырған кеше.

Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Пәйғәмбәр Мәсетендә айырым бер урыны ла, урамға кейеп сығыр өсөн махсус кейеме лә булмай. Сәхәбәләрҙән уны бер нисек тә айырып булмай. Уның мөбәрәк йөҙөн алдан күрмәгән ят



кеше уны шунда уҡ таный алмаҫ ине. Әммә был кеше Аллаһ Рәсүле янына килә лә ҡартатаһының исеме менән уға мөрәжәғәт итә:

- Әй, Ғәбдүмоталлибтың улы!

Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, быңдай тупаҫ мөрәжәғәткә:

- Эйе, тыңлайым һине! - тип яуап бирә.

- Һиңә бер нисә һорау бирәм. Әгәр һорауҙарым әҙәп сиктәренән уҙһа, миңә үпкәләмә, - ти кеше.

Аллаһ Илсеһе, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:

- Үпкәләмәйем, теләгәнеңде һора, - ти.

Һәм уларҙың араһында ошондай һөйләшеү була:



- Ҡәбиләбеҙгә килгән илсең хәбәр итеүе буйынса, Аллаһ һине пәйғәмбәр булараҡ ебәргән тип раҫлайһың. Мин һинән Раббыңдың исеме менән һәм һиңә тиклем булғандарҙың Раббыһы менән һорайым: Аллаһ һине бөтә кешеләргә ебәргәнме?

- Эйе, мине Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ебәрҙе.

- Яҡшы, ә был күктәрҙе кем яралтҡан?

- Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уларҙы яралтҡан.

- Ә ерҙе?

- Уны ла Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә яралтҡан.

- Ергә был тауҙарҙы кем урынлаштырған?

- Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уларҙы урынлаштырған.

- Һин Аллаһҡа ғына табынырға бойораһың, боттарға табыныуҙы туҡтатырға һәм Уға тиңдәшлек килтермәҫкә. Мин һинән Аллаһ исеме менән һорайым: Һиңә Аллаһ был хаҡта хәбәр иттеме?

- Эйе, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә хәбәр итте.

- Аллаһ хаҡына әйт: һиңә Аллаһ бойорҙомо көнөнә биш тапҡыр намаҙ ҡылырға?

- Эйе, быны Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бойорҙо.

- Аллаһ хаҡына әйт: Рамаҙан айында ураҙа тоторға Аллаһ бойорҙомо һиңә?

- Эйе, быны Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бойорҙо.

- Аллаһ хаҡына әйт: байҙарҙан зәкәт алып, уны ярлыларыбыҙға бирергә Аллаһ бойорҙомо?

- Эйе, быны Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бойорҙо.

Изге сәхәбәләр, билдәһеҙ кешенең логик фекер ағышына эйәреп, бирелгән һорауҙарын иғтибар менән тыңлай.

Кеше дауам итә:

- Ҡәбиләбеҙгә ебәргән илсең хәбәр итеүенсә, кемдең матди мөмкинлеге бар, шул Ҡәғбәгә барырға тейеш. Дөрөҫмө?

- Эйе, илсем дөрөҫ әйткән.

- Кем һине пәйғәмбәр итеп ебәргән, шунең хаҡына әйт: быларҙың барыһын да Аллаһ бойорҙомо?

- Эйе, быларҙың барыһын да Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бойорҙо.

Һәр бирелгән һорауға ыңғай яуап алған кеше Алла Илсеһенә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡарап, тәрән ихласлыҡ менән әйтә:

- Мин, һис шикһеҙ, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән башҡа илаһ юҡлығына һәм тағы ла Мөхәммәт, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ҡоло һәм Уның Илсеһе икәненә инанам. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән һиңә килгән барлыҡ бойороҡтарға инанам. Барыһын да еренә еткереп үтәйәсәкмен һәм тыйғандарыңдан йыраҡ буласаҡмын. Мин – Сәғд ибн Бәкир ҡәбиләһенән Димам бин Сәғләбәмен. Ырыуымдың вәкиле булараҡ һиңә килдем. Һине пәйғәмбәр итеп ебәргән Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә менән ант итәм: әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, һин нимә әйтһәң, шуны ғына үтәйәсәкмен».

Хөрмәтле Димам урынынан тора, дөйәһен ысҡындырып атлана ла, шунда уҡ үҙенең ҡәбиләһенә йүнәлә. Изге сәхәбәләр уның артынан аптырап ҡарап ҡала, ә Пәйғәмбәр, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йылмая һәм шатлыҡлы хәбәре менән бүлешә: «Әгәр был үрелгән сәсле кеше дөрөҫөн әйтә икән, тимәк ул йәннәткә инде».

*(Бохари, Ғилем, 6; Мөслим, Иман, 10)*

# БЕҘГӘ ИМАН НИМӘ БИРӘ

**ИМАН**

- Тамуҡтан ҡотҡара һәм ож-махҡа илтә.
- Бәләләр һәм бәхетһеҙлек-тәргә сабыр итергә көс бирә.
- Туғанлыҡ һәм үҙ-ара ярҙам итеү тойғоһон уята.
- Хистәребеҙҙе, уйҙарыбыҙҙы һәм ҡылыҡтарыбыҙҙы яҡшырта.

Тормош был донъя менән генә бөтмәй. Уртаса алтмыш-етмеш йыл дауам иткән ерҙәге тормош мәңгелек тормошҡа әҙерләнеү өсөн мөмкинлек булып тора. Үлгәндән һуң, фани донъяға кире ҡайта алмаясаҡбыҙ. Фани донъяның мөмкинлеген баһалай алмағандар әхирәттә бының өсөн бик ныҡ үкенәсәк. Был донъя – һынау урыны. Иман юлына баҫҡандар салих ғәмәлдәр ҡыла был донъяла, улар йәннәткә лайыҡ була. Ә кемдәр инанмай һәм яуызлыҡ тарата, тамуҡҡа хаҡлылар. Мәңгелек тормошта бәхетле булыу-булмауыбыҙ был тормоштағы ҡараштарыбыҙға һәм ғәмәлдәребеҙгә бәйле. Ныҡлы инаныусыбыҙ изге эштәр эшләүгә этәрә, **тамуктан арындыра һәм ожмахка илтә.**



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

**«Иман килтереп, изгелек ҡылғандар арыҡтарынан шишмәләр ағып ятыусы йәннәттәргә керер. Бөйөк бәхет шул булыр».**

**(Буруж сүрәһе, 11-се аят)**

Кеше көсһеҙ. Ә һынауҙар урыны булған был донъя ауырлыҡ һәм мәшәҡәт менән тулы. Был донъяла һәр кемдең үҙ ҡайғы-хәсрәте. Матди һәм рухи ыҙалыҡтар, бәлә-ҡазалар – тормошобоҙҙоң бер өлөшө. Тәнһә ниндәй мәлдә ауырыу, үлем-китем, тәбиғәт афәттәре менән осрашыуыбыҙ ихтимал.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

**«Һәр хәлдә һеҙҙе бер аҙ ҡурҡытып, аслыҡта тотоп, малдарығыҙҙы әҙәйтеп, ниғмәтегеҙҙе кәметеп, яҡындарығыҙҙың йәнен алып һынай-быҙ. Түҙем булғандарҙан һөйөнсө ал. Улар берәй бәлә килһә, шулай тип әйтә: «Беҙ Аллаһ бәндәләре, Аллаһ хозурына барасаҡбыҙ».**

**(Баҡара сүрәһе, 155-156-сы аяттар)**

Кәфер был донъяның ыҙаларын түҙеп булмаҫлыҡ яза кеүек ҡабул итә. Иманлы кеше иһә тормошҡа һәм ваҡиғаларға дини күҙлектән сығып баға. Һәр ваҡиғаның төбөндә ниндәйҙер хикмәт ятҡанын белә, тормошондағы һәр ваҡиғаны йәннәткә илтеүсе сәбәп итеп ҡабул итә һәм сабырлыҡ күрһәтә. Ауырыу, үлем, ер тетрәү кеүек ауырлыҡтар, уны тетрәндереп, өмөтһеҙлеккә батырмай, сөнки иманлы әҙәм белә: һәр ҡыйынлыҡтан һуң еңеллек килә. Дин уға бөтә булғандар һынау икәнен һәм беҙ сабырлыҡ күрһәтергә тейешлекте төшөндөрә, **бәләләр һәм бәхетһеҙлектәргә түҙергә көс бирә.**

Иман башҡа кешеләр менән беҙҙең арала туғанлыҡ һәм мөхәббәт атмосфераһын тыуҙыра. **Туғанлыҡ, үҙ-ара ярҙам тойғоһо уята.**

Үҙен йәмғиәт ағзаһы итеп тойоуы, ҡайғы-хәсрәттәре менән уртаҡлашыуы, кешегә тыныслыҡ бирә. Иман килтереп, изге кешеләрҙән торған йәмғиәт ағзаһы булабыҙ, был донъяла яңғыҙ түгеллегебеҙҙе аңлайбыҙ, шатлыҡ-ҡайғыларыбыҙҙы бүлешеп, уртаҡ көс менән төрлө мәсьәләләрҙе хәл итәбеҙ

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

**«Иман килтергәндәр, бер организм кеүек, бер-береһен ярата, йәлләй, яҡлай. Тәндең бер өлөшө ауыртһа, башҡа ағзалары ла был ауыртыуҙы бүлешә: йоҡоһонан яҙа, яна».**

**(Бохари, Әҙәп, 27)**

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

**«Кешенең тәнендә бәләкәй генә ит киҫәге бар. Әгәр был ит киҫәге һау-сәләмәт булһа, бөтә тәне һау-сәләмәт булыр. Әгәр ул боҙолһа, бөтә тәне сырхау булыр. Был ит киҫәге - ҡәлб (йөрәк)».**

**(Бохари, Иман, 39)**

Инанысыбыҙҙан яңы фекерҙәр, хистәр ярала. Ғәмәлдәребеҙ – был хистәрҙең һәм фекерҙәрҙең көҙгөһө. **Иманыбыҙ беҙҙең тойғоларҙы, уйҙарҙы һәм ҡылыҡтарҙы үҙгәртә.** Ныҡлы иманға эйә булғас, беҙ үҙгәрәбеҙ, һүҙҙәребеҙ, халәтебеҙ һәм ғәмәлдәребеҙ яҡшыра. Дөрөҫөн һөйләүсе, изгелек ятатыусы, башҡаларҙың хоҡуғын хөрмәт итеүсе кешеләргә әйләнәбеҙ. Ғәйбәт һөйләмәйбеҙ. Бер кемде лә ҡул менән дә, тел менән дә йәрәхәтләмәйбеҙ. Юғары әхлаҡлы кешеләргә әйләнәбеҙ. Аллаһтың ризалығын һәм мөхәббәтен ҡаҙанабыҙ, шулай уҡ эргә-тирәләге кешеләрҙең һөйөү-ихтирамын яулайбыҙ.



Фекерҙәрегеҙгә иғтибарлы булығыҙ, улар хискә әүерелә.

Хис-тойғоларығыҙға иғтибарлы булығыҙ, улар ҡылыҡҡа әүерелә.

Ҡылыҡтарығыҙға иғтибарлы булығыҙ, уларҙы ғәҙәткә әүерелә.

Ғәҙәттәрегеҙгә иғтибарлы булығыҙ, улар холоҡҡа әүерелә.

# ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘҘЕҢ r ИХЛАС ИМАНЫ



Пәйғәмбәрҙәр – тәҡүәле кешеләр, бөтә кешелекте дингә өндәр өсөн, Аллаһ тарафынан һайланғандар. Тәүҙә үҙҙәре инанғандар, ә һуңынан башҡа кешеләрҙең күңеленә иман нурын еткерергә тырышҡандар.

Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һайлаған һуңғы пәйғәмбәр. Башҡа пәйғәмбәрҙәр кеүек үк, тапшырасаҡ динде тәүҙә үҙе ҡабул итә. Ул бер ҡасан да боттарға табынмай, **Аллаһтан башҡа илаһты ҡабул итмәй**. Раббыбыҙҙың динен таратыу өсөн ең һыҙғанып тырыша. Был юлда күп яфа кисерә.

Пәйғәмбәребеҙҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ғәмәлдәренән баш тарттырға мәжбүр итер өсөн, Мәккәнең боттарға табыныусылары төрлө ысулдар ҡуллана, әммә уның ихлас иманы алдында булдыҡһыҙ булып сыға. **Бер ниндәй көс тә уны иманынан һәм кешеләрҙе дингә саҡырыуҙан баш тартырға мәжбүр итә алмай.**

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) **шәхсән үҙенә ҡарата ҡылынған яуызлыҡтарҙы кисерһә лә, бер ваҡытта ла Ислам диненә ҡарата ябырылыуҙарҙы яуапһыҙ ҡалдырмай.** Золом менән ул килешә алмай һәм төрлө ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы киҫкен рәүештә көрәшә. Ғүмерен дин өсөн фиҙа ҡылыуҙан ҡурҡмай, Аллаһ юлында һәләк булыуҙы иң юғары дәрәжә тип һанай.

Аллаһ Рәсүле (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) **ғибәҙәттәр, тәфәккүр, Аллаһты зекер итеү аша иманын тейешле кимәлдә тота.** Һәр мәл Раббыбыҙ күҙәтеүе аҫтында икәнен белеп, Уның

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

**«Ул пәйғәмбәр ҙә Раббынан үҙенә төшөрөлгән (Ҡөрьән)гә иман килтерҙе. Мөьминдәрҙең һәр береһе лә Аллаһҡа, уның фәрештәләренә, китаптарына, пәйғәмбәрҙәренә инанды».**

**(Баҡара сүрәһе, 285-се аят)**

Мәккәләге боттарға табыныусылар, Пәйғәмбәребеҙҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иманынан яҙҙырыу өсөн төрлө ысулдар ҡуллана. Ахырҙа, ағаһы Әбү Талибҡа барырға булалар. Пәйғәмбәребеҙ һигеҙ йәшенән уның ғаиләһендә үҫкән, ағаһын бик яратҡан. Бәлки, уны тыңлап, Исламдан һәм уға саҡырыуҙан баш тартыр, тип өмөтләнгән мөшриктәр Әбү Талибтан Пәйғәмбәребеҙ менән һөйләшеүен һорай. Ағаһы ҡустыһына эштең асылын аңлата. Мөшриктәрҙең ни теләгәндәрен хәбәр итә һәм был эштең насар тамамланасағын әйтә һәм унан баш тартыуын теләй.

Пәйғәмбәребеҙ уға:

- Ағай! Валлаһи, әгәр ҡояшты уң ҡулыма, ә айҙы һул ҡулыма бирһәләр ҙә, барыбер эшемдән баш тартмаясаҡмын. Йә Аллаһ был динде бөтә донья буйлап таратыр, йә мин был юл өсөн йәнемде фиҙа ҡылырмын! – тип яуап бирә.

**(Ибн Әсир, әл-Камил, II, 64)**

һөйөүенә һәм ризалығына лайыҡ булырға тырыша. Ғибәҙәттәрен тейешле ваҡытында ҡыла, Аллаһҡа табыныр өсөн, көн һәм төндөң һәр уңайлы мәлен файҙалана. Ғибәҙәт һәм тәфәккүр ваҡытында ул донъяның ауырлыҡтары тураһында онота, күңеле тынысլыҡ таба. Иманынан килгән күңел тыныслығы һәм матурлығы Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) фатихалы йөҙөндә лә сағылыр була.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) - **иң юғары әхлаҡ эйәһе**. Уның әхлаҡи күркәмлеге йөрәгендәге камил иманы сағылышы була. *«Кем күркәм холоҡҡа эйә, шул иң камил иман эйәһе»* (Тирмиҙи, Рада, 11), – тигән ул мосолмандың күркәм холоҡҡа эйә булырға тейешлегенә иғтибар итеп. Иман һәм әхлаҡ - айырылмаҫ апалы-һеңле, тип атаған ул хатта. Иман булған ерҙә мотлаҡ әхлаҡ та булыуы хаҡында әйткән. Шуға күрә диндәге юғары әхлаҡҡа эйә булғандарға айырым иғтибар биргән. **Кешеләрҙе фәҡирлегенә, байлығына, йәмғиәттәге урындарына ҡарап түгел, ә иманы һәм әхлағы буйынса баһалаған.**

Аллаһтың ҡоло икәнен аңлап йәшәгән Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) **фани донъяға һәм фани донъялағы бөтә ваҡиғаларға дини күҙлектән ҡараған**. Осраған ауырлыҡтарҙы сыҙам үткәргән, бер ваҡытта ла өмөтһеҙлеккә бирелмәгән. Ысын тормош – ул мәңгелек тормош икәненә инанған, был донъялағы һәр эшебеҙ өсөн хисаплама бирергә тура киләсәгенә шикләнмәгән һәм шул турала иҫтә тотоп ғәмәл ҡылған. Кешегә ниғмәттәр ваҡытлыса ҡулланыу өсөн бирелә, тип һанаған. Барлыҡ йәнле һәм йәнһеҙ мәхлүктәргә миһырбанлы булған.

Бер һүҙ менән әйткәндә, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) **иң күркәм рәүештә иманын камиллаштырған**. Беҙҙең өсөн иң яҡшы өлгөгә әүерелгән. Уның диндәге ихласлығы һәм күркәм холҡо, ҡояш кеүек, бөтә кешелек юлын яҡтырта.



Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ваҡытында фәҡир сәхәбәләренең береһе яңғыҙы сүллектә йәшәгән. Был сәхәбә Пәйғәмбәребеҙҙе, ә Пәйғәмбәребеҙ уны бик яратҡан. Мәҙинәлә булғанында, ул Аллаһ Рәсүленә килгән һәм хөрмәт йөҙөнән уға ҙур булмаған бүләктәр килтергән. Ә Пәйғәмбәр, яуап итеп, уға ҙур бүләктәр биргән. Бер заман был сәхәбәне Пәйғәмбәребеҙ баҙарҙа осратҡан. Шым ғына артынан яҡынлашҡан да, уның күҙҙәрен үҙенең мөбәрәк ҡулдары менән ҡаплаған һәм (уның Аллаһ ҡоло икәнен күҙ уңында тотоп):

- Был ҡолдо һатып алырға теләүселәр бармы?! - тип ҡысҡырған.

Уның тауышын танып, сәхәбә бик шатланған һәм әйткән:

- Әй, Рәсүлуллаһ! Минең кеүек йәмһеҙ ҡолдо кем һатып алһын? Мине һатып, бик әҙ килем алырһың.

Пәйғәмбәребеҙ уны ебәргән дә:

- Кемдәр тышҡы күренешкә алдана, улар күп аҡса бирмәҫ, ләкин Аллаһ һине юғары баһалай! - тип әйткән.

# АҠ КЕЙЕМДӘГЕ БИЛДӘҺЕҘ КЕШЕ

Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) һөйләгән: «Бер мәл, Рәсүлуллаһ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән йәнәш ултырғанда, ҡапыл ғына ап-аҡ кейемле, ҡап-ҡара сәсле, тәнендә һәм кейемендә бер ниндәй ҙә сәфәр эҙе күренмәгән кеше килеп сыҡты. Беребеҙ ҙә уны белмәй ине. Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янына килде лә, тубығын уның тубығына терәп ултырҙы һәм ҡулдарын тубығына һалып әйтте:

- Әй, Мөхәммәт! Миңә Ислам тураһында һөйлә.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шулай тине:



- Ислам - Аллаһтан башҡа илаһ юҡлығына, Мөхәммәт Аллаһтың Рәсүле икәнлегенә шәһәҙәт килтереү, барлыҡ ҡағиҙәләре буйынса намаҙ ҡылыу, тулы рәүештә зәкәт биреү, Рамаҙан айында ҡалдырмай ураҙа тотоу, әгәр юлын үтә алһаң, Ҡәғбәтуллаға (хажға) барыу.

Кеше раҫлап:

- Дөрөҫ әйтәһең, - тине.

Беҙгә уның һорағаны һәм шул уҡ ваҡытта һорағанын раҫлағаны сәйер тойолдо.

Кеше дауам итте:

- Ә хәҙер миңә Иман тураһында һөйлә.

Рәсүлуллаһ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм):

- Иман – ул Аллаһҡа, фәрештәләренә, китаптарына, Ҡиәмәт көненә, шулай уҡ тәҡдиргә инаныу: бөтә яҡшылыҡ һәм насарлыҡ – Аллаһтан, - тип әйтте.

Кеше йәнә:

- Дөрөҫ әйтәһең, - тип раҫланы һәм өҫтәне: - Яҡшы, ә нимә ул Ихсан? Был хаҡта һөйлә әле.

Рәсүлуллаһ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтте:

- Ихсан - Аллаһ Сүбхәнәһү Тәғәләнең Үҙен күргәндәй табыныу. Һин Уны күрмәһәң дә, Ул һине, һис шикһеҙ, күрә.

Кеше йәнә раҫланы:

- Дөрөҫ әйтәһең.

Ҡиәмәт көнө һәм уның билдәләре тураһында һорау биргәс, әҙәм шым ғына китеп барҙы. Мин дә күпмелер ваҡыт өндәшмәнем. Аҙаҡ Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) миңә һорау бирҙе:

- Әй, Ғүмәр! Һорауҙар биргән кешене беләһеңме?

- Аллаһ һәм Уның Илсеһе яҡшыраҡ белә, - тинем.

Рәсүлуллаһ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтте:

- Ябраил фәрештә ине ул, һеҙгә динегеҙҙе өйрәтер өсөн килде.

(Мөслим, «Иман», 1 һәм 5. Айырым ҡарағыҙ: Бохари, «Иман», 37; Тирмиҙи, «Иман», 4; Әбү Дауыт, «Сөннәт», 16; Нәсаи, «Мавакит», 6; Ибн Мәджә, «Муҡаддима», 9).

# ИМАН ШАРТТАРЫ

Мосолмандар алты иман бағанаһына инана. Был иман нигеҙҙәре «Әмәнтү» доғаһында бирелгән:

## ӘМӘНТҮ

آمَنْتُ بِاللّٰهِ وَمَلٰٓئِكَتِهِ وَكُتُبِهِ وَرُسُلِهِ وَالْيَوْمِ الْآخِرِ وَبِالْقَدَرِ خَيْرِهِ
وَشَرِّهِ مِنَ اللّٰهِ تَعَالٰى وَالْبَعْثُ بَعْدَ الْمَوْتِ حَقٌّ ۞ اَشْهَدُ اَنْ لَا
اِلٰهَ اِلَّا اللّٰهُ ۞ وَاَشْهَدُ اَنَّ مُحَمَّدًا عَبْدُهُ وَرَسُولُهُ

Инандым Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә, фәрештәләренә, китаптарына, пәйғәмбәрҙәренә, Ҡиәмәт көнөнә, тәҡдирҙең яҡшыһы ла, яманы ла Аллаһтан булыуына. Үлгәндән һуң терелеү – Хәҡиҡәт. Аллаһтан башҡа илаһ юҡлығына һәм Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Уның ҡоло һәм Илсеһе икәнлегәнә таныҡлыҡ бирәм.






# ҺОРАУҘАР

**Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| **1** | Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һәм Пәйғәмбәргә инаныуыбыҙҙы белдереү | | имандың көсһөҙлөгөн күрһәтә. |
| **2** | Юҡтан бар ҡылыу, ризыҡ һәм шифа биреү | | Аллаһты иҫтә тотоу, Уны онотмау. |
| **3** | Даими инаныуыбыҙ беҙҙе | | беҙ гөнаһ ҡылабыҙ. |
| **4** | Ғибәҙәттәребеҙ иман менән генә | | ғибәҙәттәрҙән ләззәт ала. |
| **5** | Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне һөйөү | | ҡимметкә эйә була. |
| **6** | Тыйылғанды ҡылыу һәм ғибәҙәттәргә иғтибарһыҙлыҡ | | мәңгелек бәхеткә илтә. |
| **7** | Ныҡлы иманлы мосолман | | күтәрергә көс бирә. |
| **8** | Зекер - даимән | | ныҡлы иман һөҙөмтәһе. |
| **9** | Иманыбыҙ ҡайғы-хәсрәттәрҙе | | тик Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә генә хас. |
| **10** | Аллаһтың бойороҡтары менән тыйыуҙарына буйһонмаһаҡ, | | ул шәһәҙәт һүҙҙәрен әйтеү. |



## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. Был варианттарың ҡайһыһы Кәлимәи Шәһаҙәттең мәғәнәһе булып тора?**

А. Мин Аллаһҡа ышанам.

Б. Аллаһтан башҡа илаһ юҡ. Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Уның ҡоло һәм рәсүле.

В. Аллаһтан башҡа илаһ юҡ һәм Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Уның ҡоло менән рәсүле икәненә таныҡлыҡ бирәм.

Г. Аллаһ мин ҡылған ғәмәлдәрҙең барыһына ла шаһит.

**2.** I. Салих ғәмәлдәр.

II. Ентекләп үтәлгән ғибәҙәттәр.

III. Зекер һәм фекерләү.

IV. Уйын һәм күңел асыу.

V. Гонаһтарҙан һәм харамдан тыйылыу.

**Юғарыла күрһәтелгән ҡайһы ғәмәлдәр беҙҙең иманды ныҒыта?**

А I, II, III һәм V — Б. II, IV һәм V

В. I, II, III һәм IV — Г. II, III, IV һәм V

**3. Түбәндәгеләрҙең ҡайһыһы Кәлимәи Тәүхид була?**

А. Әлхәмдү лилләһи Раббил-ғәләмиин.

Б. Аллаһүммә салли ғәләә Мөхәммәдин үә ғәләә әәли Мөхәммәд.

В. Әшһәдү әлләә иләәһә илләллааһу үә әшһәду әннә Мөхәммәдән ғәбдүһүү үә расүүлүһ.

Г. Ләә иләәһә илләллаах Мөхәммәдур-расүүлүллаах.

**4.** I Аллаһтың Барлығына һәм Берлегенә инанабыҙ.

II. Аллаһтан башҡа бер йән эйәһе лә ғибәҙәткә лайыҡлы түгел.

III. Аллаһтан башҡа йән эйәләре лә илаһ булыуы мөмкин.

IV. Аллаһтың бойороҡтарына ярашлы, тыйылғандарынан тыйылып йәшәргә тырышабыҙ.

V. Пәйғәмбәр Әфәндебеҙгә һәм уның Аллаһтан алып килгән мәғлүмәттәренә инанабыҙ.

**Юғарыла яҙылғандың ҡайһыһы ярҙамында беҙ Кәлимәи Шәһаҙәтте белдерәбеҙ?**

А. I һәм II — Б. I, II, IV һәм V

В. II, III һәм V — Г. I, II, III, IV һәм V

**5. Быларҙың ҡайһыһы изге ғәмәл булмай?**

А. Күркәм холоҡҡа эйә булыу.

Б. Аллаһ тыйғандан тыйылыу.

В. Хайуандарға ҡарата насар мөнәсәбәт.

Г. Кешеләргә ярҙам күрһәтеү.

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(салих / ҡәлб / салих ғәмәле / заттар / ете йөҙгә / дуҫлашырға / сәләмәт / йөрәктәр / дуҫының / зекер)**

1. «Кемдәр инаналар һәм .................... ғәмәлдәр ҡылалар, улар - иң яҡшы ....................».
2. «Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә .................... ҡылып ҡына .................... тыныслана».
3. «Кешегә .................... йәшәү рәүеше тәьҫир итә. Шуға күрә һәр береһе кем менән ......... йыйынғанына иғтибарлы булһын».
4. «Кем Ислам буйынса йәшәй, уға һәр ҡылған .................... өсөн ундан .................... ҡәҙәр әжер сауаптары яҙыла. Ә һәр бер ҡылған насарлығы өсөн бер насар ғәмәл яҙыла».
5. «Кешенеү тәнендә бәләкәй ит киҫәге бар. Әгәр был ит киҫәге .................... булһа, бөтә тәне һау-сәләмәт булыр. Әгәр ул зарарланһа, бөтә тәне ауырыу була. Был ит киҫәге - ....................».



# ҺОРАУҘАРҒА ЯУАПТАР

**Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һәм Пәйғәмбәргә инаныуыбыҙҙы белдереү | 6 | имандың көсһөҙлөгөн күрһәтә. |
| 2 | Юҡтан бар ҡылыу, ризыҡ һәм шифа биреү | 8 | Аллаһты иҫтә тотоу, Уны онотмау. |
| 3 | Даими инаныуыбыҙ беҙҙе | 10 | беҙ гөнаһ ҡылабыҙ. |
| 4 | Ғибәҙәттәребеҙ иман менән генә | 7 | ғибәҙәттәрҙән ләззәт ала. |
| 5 | Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне һөйөү | 4 | ҡиммәткә эйә була. |
| 6 | Тыйылғанды ҡылыу һәм ғибәҙәттәргә иғтибарһыҙлыҡ | 3 | мәңгелек бәхеткә илтә. |
| 7 | Ныҡлы иманлы мосолман | 9 | күтәрергә көс бирә. |
| 8 | Зекер - даимән | 5 | ныҡлы иман һөҙөмтәһе. |
| 9 | Иманыбыҙ ҡайғы-хәсрәттәрҙе | 2 | тик Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә генә хас. |
| 10 | Аллаһтың бойороҡтары менән тыйыуҙарына буйһонмаһаҡ, | 1 | ул шәһәҙәт һүҙҙәрен әйтеү. |



**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ**

1. В   2. А   3. Г   4. Б   5. В

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ**

1. салих - заттар
2. зекер - йөрәктәр
3. дуҫының - дуҫлашырға
4. салих ғәмәле - ете йөҙгә
5. сәләмәт - ҡәлб





# ҒАЛӘМДӘР РАББЫҺЫ
# АЛЛАҺҠА ИНАНЫУ

- *Аллаһтың Барлығы һәм Берлеге*
- *Аллаһтың Сифаттары һәм Исемдәре*
- *Аллаһҡа инаныу беҙгә нимә бирә*
- *Пәйғәмбәребеҙҙең r Аллаһҡа мөхәббәте*





# АЛЛАҺКА ЫШАНҒАН МАЛАЙ

Ҡасандыр Вавилонда Ибраһим исемле малай йәшәгән. Ул күркәм холҡо һәм тапҡырлығы менән айырылып торған. Иленең халҡы боттарға, айға, ҡояшҡа, йондоҙҙарға, утҡа, һыуға һәм башҡа заттарға табынған. Ғибәҙәтханалары шул ялған илаһтарының һүрәттәре һәм һындары менән тулған. Улар, Аллаһты онотоп, илаһтарының һүрәттәре һәм һындары алдында теҙләнеп табынғандар, ғибәҙәт ҡылғандар, теләктәрен үтәүҙе һәм насарлыҡтан һаҡлауҙы һорағандар. Үҙен уратып алған кешеләрҙең ырымдарына Ибраһим һағайып, аптырап ҡараған. Кешеләрҙең был инаныуҙарын ул аңлай алмаған. Ибраһимдың атаһы Азар ҙа ошо диндә тотҡан. Ул билдәле скульптор булған, кешеләр табынған боттарҙы таштан һәм ағастан уйып яһаған. Ибраһим кешеләрҙең боттар алдына теҙләнеп торғанын күргән саҡта ныҡ көйәләнгән. «Күптән түгел таш йәки ағас булған ябай материал һөнәрсенең ҡулы аҫтында нисек илаһҡа әүерелә? Кешеләрҙе нисек яуызлыҡтарҙан һаҡлап, уларҙың теләктәрен үтәй ала?» - тип уйлаған. Йәш булыуына ҡарамаҫтан, Ибраһим боттарға табынмаған, боттарға табыныусыларҙы ул ғәмәлдәренән баш тарттырырға өндәгән.



Бер ваҡыт Ибраһим, йондоҙҙарға, айға, ҡояшҡа табынған кешеләргә бара. Кешеләр ҡараңғы төшкәнен, күк көмбәҙендә үҙҙәре илаһ тип иҫәпләгән күк есемдәре күренгәнен көтә - улар ғибәҙәткә әҙерләнә. Ибраһим был төркөмгә ҡушыла. Тиҙҙән ҡараңғы төшә. Һоҡланғыс ҡараштар

аҫтында күк көмбәҙендә Ҡотоп Йондоҙо күренә. Уны башҡа йондоҙҙарҙан шунда уҡ айырырға мөмкин. Ибраһим, йондоҙға күрһәтеп, эргәһендә йыйылған кешеләргә әйтә: «Ниндәй сағыу һәм матур йондоҙ! Бына был минең Раббым». Ҡотоп йондоҙона табыныусылар: «Ибраһим да беҙҙең кеүек инана икән. Ул да хәҡиҡәтте тапҡан,» - тип ҡыуанған.

Күпмелер ваҡыттан һуң, Ҡотоп Йондоҙо йәшеренеп күренмәй башлаған. Ибраһим әйткән: «Юҡ, бының Раббым булыуы мөмкин түгел. Раббым улай юғалырға тейеш түгел. Байып юҡҡа сыҡҡандарҙы мин яратмайым». Уратып алған кешеләрҙең ҡайһы береһе был хикмәтле һәм киҫкен һүҙҙәр менән ризалаша, диндәренә ҡарата күңелдәрендә шик тыуа. Ҡайһылары уға асыуланa. Илаһтары хаҡында үҙ ғибәҙәтханаларындағы малайҙың хәбәре зиттарына тейә.

Тиҙҙән ай күренә. Ҡотоп Йондоҙона ҡарағанда матурыраҡ та, сағыуыраҡ та була ул. Тирә-яҡтағылар ишетерлек итеп, Ибраһим йәнә һөрәнләй: «Был тағы ла ҙурыраҡ һәм сағыуыраҡ! Бәлки, был – минең Раббым?» Бер әҙ ваҡыттан ай ҙа күҙҙән юғала. Шул саҡта Ибраһим әйтә: «Был да йондоҙ кеүек юғалды. Әгәр хаҡ Раббым тура юлды күрһәтмәһә, аҙашҡандарҙың береһе булыр инем. Һис шикһеҙ, был да минең Раббым булыуы мөмкин түгел». Ҡайһы бер кешеләр уның фекере менән килешә: «Моғайын, ул хаҡтыр». Әммә ҡайһы берҙәре үҙҙәренең әшәке диндәрен алыштырырға теләмәй, шуға ла был ышандырғыс дәлилдәр менән ризалашмай.

Иртәнсәк, ҡояш ҡалҡҡас, Ибраһим әйтә: «Бәлки, был – минең Раббым? Был ҙурыраҡ һәм матурыраҡ та». Тирә-йүндәгеләр уны ышандырырға тырышып әйтәләр: «Эйе, күрәһеңме, хәҙер һин хәҡиҡәтте таптың. Илаһ булырға ҡояш күпкә лайыҡлыраҡ». Ләкин кис, ҡояш батҡас, Ибраһим был күк есемдәренә табынған кешеләргә мөрәжәғәт итә: «Әй, халҡым минең! Был йондоҙҙарға һәм яҡтыртҡыстарға табыныу, пәйҙә булыуҙары һәм юҡҡа сығыуҙары үҙҙәренә бәйле булмауы, бер нәмәгә лә көстәре етмәүе аҡылға һыймай. Ысын әйтәм, һеҙ илаһ күреп табынған боттарға мин табынмаясаҡмын. Мин бер Аллаһҡа – донъяны һәм күктәрҙе юҡтан бар ҡылған Ғаләмдәр Раббыһына инанам». Тирә-йүндәгеләр уны киҫәтә: «Нимә эшләйһең, Ибраһим? Улай һөйләнһәң, һин һәләк буласаҡһың. Хоҙайҙарыбыҙ тарафынан язаланырһың һәм әйткәндәреңә үкенерһең!»

Быға Ибраһим шулай тип яуап бирә: «Һеҙ Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә – Көс һәм Ҡеүәт эйәһенә, бөтә ғаләмде Яралтыусыға ышанмайһығыҙ. Берәүгә лә зыян да, файҙа ла килтерә алмаған көсһеҙ, ҡеүәтһеҙ заттарҙы илаһ тип һанайһығыҙ. Уларҙы Аллаһҡа тиң ҡуяһығыҙ. Был аҙашыуығыҙ өсөн яуап бирергә тура киләсәк тип ҡурҡмайһығыҙмы? Ялған илаһтарығыҙҙан мин нисек ҡурҡайым?! Хаталы динегеҙҙән баш тартығыҙ. Күктәрҙе һәм ерҙе яралтҡан, күк көмбәҙен йондоҙҙар, ҡояш һәм ай менән биҙәгән хаҡ Раббыбыҙ Аллаһҡа иман килтерегеҙ. Ерҙе һәм күктәрҙе юҡтан яралтҡан Аллаһҡа йөҙөм менән боролдом. Мин мөшрик (күп хоҙайҙарға инаныусы) түгел» («Әнғәм» сүрәһен ҡарағыҙ, 74-79).

# ҺӘР ӘҪӘР АВТОРЫНА ИШАРАЛАЙ

Беҙ ултырған парталарҙы эшләгән оҫта, йорттарыбыҙҙы һәм мәктәбебеҙҙе төҙөгән архитектор, ҡулыбыҙҙағы китапты яҙған яҙыусы бар. Матурлығы, нәфислеге менән күңелдәрҙә йылы хистәр уятҡан һәр сәнғәт әҫәренең оҫтаһы була. Беҙ йыһанда күргән һәр күренештең сикһеҙ ғилемгә һәм бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс-ҡеүәткә эйә Ижадсыһы бар. Ғаләмдәге бөйөк тәртип осраҡлы барлыҡҡа килгән тип уйларға ярамай. Ошондай миҫалда аңлатып үтәйек:



Йәйге эҫе көндәрҙә диңгеҙ ярына йүнәлдегеҙ. Алдығыҙҙа күкһел диңгеҙ һәм иҫ китмәле пляж. Диңгеҙ тыныс, һыуы таҙа. Яр буйлап йөрөгәндә, матур ҡом һарайына тап булдығыҙ. Тирә-яҡҡа ҡарағас, бер кемде лә күрмәнегеҙ. Һеҙ һарайҙың бында нисек барлыҡҡа килеүе тураһында фекер йөрөтә башлайһығыҙ. Был ҡәлғәнең барлыҡҡа килеүен ике вариант менән аңлатырға була:

Беренсе вариант. Был ҡәлғә – бөйөк хеҙмәт һәм нәфис сәнғәт емеше. Уны тик һәләтле һәм ҡомға форма биреү тәжрибәһенә эйә булған кеше генә төҙөүе ихтимал.

Икенсе вариант. Был ҡәлғә ярға һуғылған тулҡындар менән һалынған. Диңгеҙ тулҡындары ярға һуғылған саҡта, ҡом осраҡлы рәүештә ҡәлғә формаһын алған. Нисек уйлайһығыҙ, ике варианттың ҡайһыһы ысынға тура килә? Бында һүрәтләнгән ҡәлғә ҡом ҡәлғәләре төҙөү һәләтенә



эйә булған, сәғәттәр буйы тырышҡан кеше тарафынан төҙөлгән. Бөгөнгө көнгә тиклем бер-бер артлы йүгерешкән тулҡындарҙың ҡомдан осраҡлы рәүештә ҡәлғә ҡойоп ҡуйғанын бер кем дә күргәне лә, ишеткәне лә юҡ. Ҡомло ҡәлғә дауылдан, йә ҙур булмаған тулҡындан емерелә. Хатта иң ябай ҡом һарайы төҙөү өсөн дә, белем, тәжрибә һәм тырышлыҡ кәрәк.

Ә хәҙер фотоһүрәттәге мәсеткә иғтибарлап ҡарайыҡ. Истамбулдың диңгеҙ буйындағы бер ҡалҡыулығында торған Сөләймәниә мәсетен Мимар Синан төҙөгән. Эске һәм тышҡы архитектураһы йәһәтенән ҡарағанда, донъяла иң танылған мөһәбәт ҡоролмаларҙың береһе. Үҙенең нәзәкәтле, бейек манаралары, көмбәҙҙәренең күплеге, мөғжизәле күренеше менән һоҡландыра ул. Ныҡлы материалдар ҡулланылыуы, сифатлы башҡарылған эше, барса өлөштәре һәм тирә-яҡ мөхит менән гармонияһы һәр кемде хайран ҡалдыра. Әлбиттә, бындай һоҡландырғыс сәнғәт өлгөһө архитекторһыҙ һәм инженерһыҙ барлыҡҡа килгән тип уйлау ҙа, раҫлау ҙа мөмкин түгел.

Ул сағында өҫтөбөҙҙәге күк көмбәҙе, был донъя, беҙҙе уратып алған кешеләр, хайуандар, үҫемлектәр, тауҙар, күк киңлектәрендәге ҡоштар, һәм диңгеҙ, океан тәрәнлектәрендәге балыҡтар, сикһеҙ йыһанды биҙәгән ҡояш, планеталар, галактикалар... Беҙ белмәгән һәм күҙебеҙгә күренмәгән заттар менән оло ғаләм... Улар осраҡлы рәүештә, үҙҙәренән-үҙҙәре килеп сығыуы мөмкинме ни? Кем һуң быларҙың бөтәһен дә нескәлек, сикһеҙ белеме, көсө менән камиллаштырып, оҫта итеп яралтҡан? Берҙән-бер яуап был һорауға ошондай: «Бәләкәй генә атомынан алып ғәләмәт ҙур галактикаларға ҡәҙәр нескә иҫәп һәм юғары проект емеше булған был ғаләмдең Яралтыусыһы бар. Ул – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, Хикмәт һәм сикһеҙ Ҡеүәт Эйәһе». Ошо сикһеҙ Ҡеүәтте тойоп, шағирә Таңһылыу Ҡарамышева былай тип яҙа:







# ӘГӘР АЛЛАҺ ТЕЛӘҺӘ

Батырҙы ла бахыр итер,
Яһар унан көләгә,
Яһилды ла даһи итер,
Әгәр Аллаһ теләһә.
Тулҡынды ла туфан итер,
Яуызлыҡтан еләһә,
Ожмахты ла тамуҡ итер,
Әгәр Аллаһ теләһә.
Диңгеҙҙе лә сүллек итер.
Бәндәләр мән белмәһә,
Кешене лә кейек итер.
Әгәр Аллаһ теләһә.
Сыраҡты ла сыра итер,
Теректе үлек ерләһә.
Алтын донъя сүбе булыр,
Әгәр Аллаһ теләһә.
Яҙыҡтарҙы ярлыҡар Ул,
Күңелде нур биләһә.
Наҙанды ла абыҙ итер,
Әгәр Аллаһ теләһә.
Әҙәп бирер әҙәмдәргә,
Әгәр хаҡын түләһә.
Иртән уңған, кис тә уңыр,
Әгәр Аллаһ теләһә.

# ӘБҮ ХӘНИФӘНЕҢ ЯУАБЫ

Элекке заманда Бағдадта бик билдәле кеше йәшәгән. Исеме Имам Әғзәм Әбү Хәнифә булған. Уҡыусылары бик күп булған бөйөк ғалимдың. Кешеләр уны бик ныҡ хөрмәт иткән.

Шул уҡ заманда үҙен оло ғалим тип иҫәпләгән бер тәкәббер кеше йәшәгән. Ул Аллаһ юҡ тип раҫлаған һәм ҡайҙа ғына барһа ла бөтә ерҙә был хаҡта бәхәс ҡуптарған.



Тәкәббер кеше Әбү Хәнифә хаҡында белеп ҡалған да, уның менән бәхәсләшергә теләгән. Бағдадҡа килгән, Әбү Хәнифәне тапҡан һәм уға үҙенең бер үк һорауын биргән: «Ә Аллаһ бармы ул, әллә юҡмы?»

Әбү Хәнифә яуап бирмәгән, тик иртәгеһенә билдәләнгән ваҡытта, тәғәйенләнгән урынға килергә ҡушҡан һәм шунда һорауҙарына яуап аласағын әйткән.

Билдәле булыуынса, ҡаланы ике өлөшкә бүлеп, Бағдад аша Тигр йылғаһы аға. Киләһе көндә тәғәйенләнгән ваҡытҡа Әбү Хәнифә килмәй. Тәкәббер кеше уны оҙаҡ көтә, ул инде китергә йыйыйыуға, Әбү Хәнифә килеп сыға. Тәкәббер кеше уны күреү менән ҡысҡырып ебәрә:



- Ниңә һуңланың? Моғайын, һин минең менән бәхәсләшеүҙән ҡурҡаһың!

Әбү Хәнифә уға ошондай яуап биргән:

- Юҡ, ҡурҡмайым. Ҡаланың икенсе өлөшөндә, йылға аръяғында йәшәгәнемде беләһең бит. Төндә йылғалағы күперҙе дауыл емергән. Мин, йылғаға яҡынлашҡас, ошо күперҙең эшселәрһеҙ, төҙөүселәрһеҙ һәм инженерһыҙ тергеҙелеүен теләнем. Күпер булып теҙелһендәр өсөн, ағас һәм таштарға бойороҡ бирҙем. Дөрөҫ, был күпмелер ваҡытымды алды һәм мин, һуңлауыма ҡарамаҫтан, бында килеп еттем.

Тәкәббер кеше ҡысҡырып ебәрә:

- Алдайһың! Төҙөүселәрһеҙ һәм инженерһыҙ күперҙең үҙе төҙөлөүе мөмкинме! Быға ышанған кеше ахмаҡ була түгелме ни?

Әбү Хәнифә әйткән:

- Уян, кеше! Күпер үҙе төҙөлә алмай, тип раҫлайһың. Ә һинеңсә, был ғаләм үҙе барлыҡҡа килгәнме? Үҙенән-үҙе хатта ағастағы япраҡ та һелкенмәй. Ә һин һаман бер нәмә лә үҙенән-үҙе, сәбәпһеҙ килеп сыҡмағанын аңлай алмайһың! - тип, тәкәббер кәферҙе уйға һала.

Әммә теге һаман тиҫкәреләнеүен дауам итә:

- Быныһы менән килешәм, тик миңә Аллаһты күрһәт, шунан беҙ инанырбыҙ.

Әбү Хәнифә ҡулына һөтлө стакан ала һәм тәкәбберҙән һорай:

- Әйт әле, май менән сырҙы нимәнән эшләйҙәр?

- Нисек нимәнән? Әлбиттә, һөттән.

- Ул сағында һөттәге май һәм сырҙы күрһәтә алаһыңмы?

- Әлбиттә, был һөттә май ҙа, сыр ҙа бар, ләкин беҙ уларҙы күрмәйбеҙ.

- Был һөттә май ҙа, сыр ҙа булғанына ышанаһың. Ул сағында ниңә Аллаһты күрмәйенсә ышанмайһың? Был һөттә сыр менән май булған кеүек, шулай уҡ Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә лә бар!

Шул саҡта кеше үҙенең хатаһын таный. Был донъяның Яралтыусыһы барлығын аңлай, үҙенең яңылышлыҡтарынан баш тарта. Ошо көндән алып Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Барлығына һәм Берлегенә инана.

# ЭСКЕ ҺӘМ ТЫШҠЫ ДОНЪЯНЫҢ КАМИЛ ТӘРТИБЕ

Аллаһтың барлығы һәм Берлеге – шикһеҙ хәҡиҡәт. Аллаһтың барлығын һәм Уның Берлеге менән Бөйөклөгөн аңлар өсөн, үҙебеҙҙе һәм тирә-яҡ мөхитте иғтибарлап өйрәнеү ҙә етә.



Бер күҙәнәктән барлыҡҡа килгән кеше организмы, уртаса йөҙ триллион күҙәнәктән тора. Һәр күҙәнәктә бер ДНК молекулаһы була. Кеше тураһындағы бөтә мәғлүмәт ошо молекула эсендәге гендарҙа. Кеше организмының күҙәнәгендә яҡынса өс миллиард ген бар, йәғни һәр бер ДНК молекулаһында төрлө параметрҙар буйынса өс миллиард мәғлүмәт тупланған.

Күҙ һәм тире төҫөнән алып, нәҫелдәге ауырыуҙарға тиклем беҙҙең тураһындағы бөтә мәғлүмәт ДНК гендарында һаҡлана һәм ошо гендар аша быуындан-быуынға тапшырыла. Йөрәк тибеүе кеүек организмыбыҙҙағы иҫәпһеҙ функциялар беҙҙең ҡатнашлыҡһыҙ башҡарыла. Шуға ҡарамаҫтан, организмыбыҙҙың бөтә системалары бер ниндәй кәмселекһеҙ эшләй. Һәр эшләгән хәрәкәтебеҙ, һәр фекеребеҙ, һәр әйткән һүҙебеҙ, һәр тойғобоҙ мейебеҙҙә формалаша.



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Ул (Аллаһ) һеҙҙе юҡтан бар итеүсе, һеҙгә ҡолаҡтар, күҙҙәр, йөрәк биреүсе».

**(Мөлк сүрәһе, 23-сө аят)**

Ә мәғлүмәттәр менән алмашыу мейеләге нервы күҙәнәктәре тарафынан атҡарыла. Кеше мейеһендә, уртаса алғанда, йөҙ миллиард нейрон, йәғни нервы күҙәнәге була.

Илау, күреү, тойоу өсөн, күҙәнәктәрҙең берберсе менән бәйләнеш тотоуы кәрәк. Баш мейеһендәге йөҙ миллиард нервы күҙәнәге йөҙ триллион ысул менән бәйләнеш булдыра.

Хәҙер, ошо юлдарҙы уҡығанда, күҙ алдығыҙҙа миллиардлаған процесс бара. Күҙҙәрегеҙгә төшкән яҡтылыҡ шәлкеме тәүҙә мөгөҙғатлауы (роговица), аҙаҡ күҙғараһы (зрачок), һуңынан күҙ яҫмығы (хрусталик) аша үтә. Яҡтылыҡҡа һиҙгер күҙәнәктәр, яҡтылыҡты электр сигналдарына әйләндереп, уларҙы нервы ялғауҙарына ебәрә. Мейе ике күҙҙән килгән ике һүрәтте берләштерә лә, формаһын, төҫтәрен, араурығын билдәләй. Бөтә был процестар секундтың ундан бер өлөшөндә була.

Ер йөҙө - 75% һәм кеше кәүҙәһе 70% һыуҙан тора. Һыу - һәр күҙәнәктә, кеше организмының һәр бер ҡан тамырында. Һыу организмдың һәр



Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Йыраҡта йәшәүсе халыҡтарға һәм үҙ ҡәүемдәре араһында ла аяттарыбыҙҙы күрһәтәбеҙ».

(Фуссиләт сүрәһе, 53-сө аят)

йөҙ триллион күҙәнәген кислород һәм энергия менән тәьмин итә. Һыу – һоҡланғыс тормош сығанағы.

Бер үк тупраҡта, бер үк һыу һибеп үҫтерелгән йәшелсә һәм емеш-еләк төрлө-төрлө. Йөҙҙәрсә йыл дауамында тупраҡта үҫкән, һыу һәм минералдар менән туҡланған йәшелсә һәм емеш-еләк бер-береһе менән буталмай, үҙенең тәмен һәм еҫен юғалтмай.

Үҫемлек тураһындағы бөтә мәғлүмәт ул яралған кескәй генә орлоҡта һаҡлана. Ботағының һәм япрағының формаһы, ҡабығының төҫө һәм ҡалынлығы, тәме, еҫе, формаһы, емешенең төҫө, бер һүҙ менән әйткәндә, үҫемлек тураһында бөтә мәғлүмәтте орлоҡ үҙендә һаҡлай.

Тере заттарға ерҙә йәшәү өсөн күп төрлө шарттар кәрәк: Ҡояштан билдәле бер алыҫлыҡта булыу, йылылыҡ, углекислый газ, озон ҡатламдары, һыу әйләнеше, минералдар, фотосинтез, Ер шары күсәренең билдәле ауышлығы, Ерҙең тартыу көсө, атом эсендәге көстәр. Беҙ йәшәгән Ерҙә бөтә был шарттар бар, өҫтәүенә Ер атмосфера менән һаҡланған.

Ғаләмдә өс йөҙ миллиард галактика бар, тип һанала. Ҡош юлы – шуларҙың береһе генә. Массаһы буйынса Ерҙән 333 мең тапҡырға ҙурыраҡ Ҡояш – Ҡош юлындағы ике йөҙ илле миллиард йондоҙҙоң береһе генә. Ерҙән Ҡояшҡа тиклемге алыҫлыҡ – илле миллион километр. Ғаләмдәге күк есемдәренең бөтәһе лә үҙ күсәрендә әйләнә һәм үҙҙәренең системаһы менән бергә хәрәкәт итә.



Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Ижад ҡылыусыларҙан иң бөйөгө, иң данлыһы - Аллаһ Тәғәләләр!»

(Мөьминүн сүрәһе, 14-се аят)

# ӨС ҺОРАУҒА БЕР ЯУАП

Боронораҡ бер динһеҙ кеше йәшәгән. Ул:

- Аллаһ юҡ. Әгәр ҙә Ул булһа, беҙ Уны күрергә тейешбеҙ, - тигән.

Был динһеҙ кешенең күршеһе Юныс исемле бик яҡшы кеше булған. Юныс Аллаһҡа инанған, намаҙ ҡылған, бер ваҡытта ла насар һүҙ



һөйләмәгән. Бөтәһенә лә яҡшы ҡараған. Үҙенең эргә-тирәһенә балаларҙы йыйып һорар булған:

- Һине кем яралтты? - Әгәр белмәһәләр, өйрәткән: - Кескенәм, һине Аллаһ яралтҡан!

Бер ваҡыт был кәфер күршеһе Юнысҡа килә лә, яуап бирә алмаҫына ышанып, уға һорау бирә:

- Һиңә дин тураһында өс һорау бирәм. Ҡарайыҡ әле, яуап бирә алырһыңмы?

Юныс ҡыйыу һәм ышаныслы итеп:

- Әйҙә, һора, - ти.

Был ҡыйыулыҡ һәм ышаныс уның ныҡлы иманынан була. Ә эстән: «Һора һәм яуап ал,» - тип уйлай.

- Беренсе һорауым: Аллаһ бар, тиһегеҙ. Әгәр ҙә ул булһа, беҙ уны күрер инек. Мин Аллаһ юҡ, тип әйтәм, сөнки беҙ Уны күрә алмайбыҙ. Әгәр ул булһа, миңә Уны күрһәт! Икенсе һорауым: шайтан утта яна, тиһегеҙ. Һәм шайтандың уттан яралыуына ышанаһығыҙ. Нисек инде ут утты яндырһын? Өсөнсө һорауым: әгәр изгелек һәм яуызлыҡ – Аллаһтан икән, ни өсөн инанмағаным өсөн мин яҙаланасаҡмын?



Юныс һорауҙарҙы тыныс ҡына тыңлай ҙа:

- Бына һинең өс һорауыңа бер юлы яуап, - тип, ерҙән балсыҡ киҫәге алып, кәферҙең башына тондора.

Кәфер күршеһенә ялыу яҙа һәм улар судҡа киләләр. Ҡазый Юныстан һорай:

- Был кешенең башына балсыҡ киҫәге менән һуҡтыңмы?

Юныс:

- Эйе, ҡазый әфәнде! Мин уның башына һуҡтым. Әммә был ҡылығым, уның өс һорауына яуап булды, - ти. Һәм эштең асылын аңлата башлай:

- Башта ул, Аллаһ юҡ, тине, сөнки ул Уны күрмәй. Иманға ҡайтыр өсөн, Аллаһты күрһәтеүемде һораны. Мин уның башына һуҡтым. Хәҙер ул башым ауырта, ти. Башының ауыртыуын күрһәтмәйенсә, мин дә бит уға ышанмаясаҡмын. Күрмәгәнен ул инҡар итә икән, мин дә башы ауыртҡанына ышанмайым. Һуңынан ул шайтандың нисек тамуҡ утында яныуын һораны. Кеше балсыҡтан яралтылған. Ут утты яндыра алмай икән, тимәк мин уға һуҡҡан балсыҡ киҫәге лә уға зарар килтереүе мөмкин түгел. Өсөнсөнән, раҫлауынса, кәфер булыу – уның тәҡдире, шуға бәйле уны яҙалау - мәғәнәһеҙлек. Тимәк, башына туҡмаҡ алыу ҙа – уның тәҡдире. Бәс, шулай булғас, ни өсөн үҙенең ялыуы менән ваҡытығыҙҙы биләй әле ул?

Ҡазый, быңдай яуаптан һуң, кәферҙән һорай:

- Быға ни әйтерһең?

Кешегә үҙ һүҙҙәре өсөн оят булып китә, хатаһын аңлай.

- Ҡазый әфәнде! Юныс әфәнде нимә әйтә, барыһы ла – дөрөҫ. Ул хаҡлы. Уға бер ниндәй ҙә дәғүәм юҡ. Мин дә мосолман булырға теләйем. Зинһар өсөн, ул миңә ярҙам итһен , - ти. Юныс һәм уның күршеһе бергә суд бинаһынан сығалар һәм татыу дуҫтарға әйләнәләр.

# АЛЛАҺ СҮБХӘНӘҺҮ ҮӘ ТӘҒӘЛӘНЕ СИФАТТАРЫ АША ТАНЫЙБЫҘ

Һиҙеү ағзаларыбыҙҙың мөмкинлеге сикләнгән. Шуға күрә барыһын да ишетеп һәм күреп бөтә алмайбыҙ. Мәҫәлән, вирустар һәм микробтар күҙебеҙгә күренмәй. Шулай уҡ ҡырмыҫҡаның шым ғына атлауы һәм ғәләмәт көслө тауышлы ер әйләнеше лә ҡолағыбыҙға ишетелмәй.

Һиҙеү ағзалары функцияһы сикләнгән кеүек, аҡыбыҙҙың үҙләштереү һәм төшөнөү һәләте лә сикләнгән. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең асылы һәм сифаттары - аҡыбыҙ менән төшөнөү ауыр булған ғилемдең бер өлкәһе.

Аҡыбыҙҙы ҡулланып, ғаләмдәге билгеләр тураһында уйланып, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Барлығы һәм Уның Берлеге хаҡында һығымта яһай алабыҙ. Әммә Уның асылы тураһында фекер йөрөтә алмайбыҙ. Үҙе хаҡында Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙгә нимә хәбәр иткән, шул сифаттарынан танып, Уға иманабыҙ.

Беҙ Уны танып белһен өсөн, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Изге Ҡөрьәндә Үҙенең сифаттары

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Ул күҙгә күренмәй. Ул (барса) күҙҙәрҙе күреүселер».

**(Әнғәм сүрәһе, 103-сө аят)**

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Аллаһты нисек кенә күҙ алдына килтерһәгеҙ ҙә, Ул ундай түгел. Аллаһтың асылы тураһында уйланмағыҙ. Аллаһтың яратылмыштары хаҡында уйлағыҙ. Сөнки һеҙ Аллаһтың асылын төшөнә алмаясаҡһығыҙ».

**(Хәйсәми, Мәжмәғүз-Зәүәид, I, 81)**



тураһында һөйләй. Аллаһты дөрөҫ аңлар һәм табыныр өсөн, беҙ ул сифаттарҙы белергә тейешбеҙ. Донъяны нисек яралтыуына һәм уның менән идара итеүенә ҡарап, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә асылына хас сифаттарҙы ике төркөмгә бүлеп өйрәнә алабыҙ:

**АЛЛАҺТЫҢ СИФАТТАРЫ**

- **Зати сифаттары (асыл сифаттары)**
- **Субути сифаттары (ғәмәл сифаттары)**

### I) ЗАТИ СИФАТТАРЫ

Раббыбыҙға ғына хас булған, башҡа бер кемгә лә хас булмаған сифаттар. Барлығы алты асыл сифат:

**ЗАТИ СИФАТТАРЫ**

**Әл-Вүджүд (Ысынбарлыҡ)**
Аллаһ бар.

**Әл-Ҡидәм (Башланғысһыҙ)**
Аллаһ мәңгелек. Уның барлығының башланғысы юҡ..

**Әл-Баҡа (Сикһеҙ)**
Аллаһтың булмышының сиге юҡ.

**Әл-Үәхдәниәт (Берлек)**
Аллаһ Бер һәм Яңғыҙ.

**Әл-Мухәләфәтү лил-хәүәдиҫ (Мәхлүҡтәрҙән айырыла)**
Аллаһ Үҙе яралтҡан мәхлүҡтәренә оҡшамаҫ.

**Ҡыям би-нәфсиһи (Бер нимәгә лә мохтаж түгел)**
Аллаһ бар нәмәгә Хужа һәм бер нәмәгә мохтаж түгел.

**1. Әл-Вүджүд:** Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бар. Уның булмауы мөмкин түгел.

**2. Әл-Ҡидәм:** Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә мәңгелек. Булмышының башланғысы юҡ. Ваҡыт арауыҡтарын үтеп, уйҙарыбыҙ менән күпме генә артҡа китмәйек, Аллаһ булмаған заманды күҙ алдына килтереү мөмкин түгел.

**3. Әл-Баҡа:** Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә сикһеҙ. Булмышының сиге юҡ. Ваҡыт арауыҡтарын үтеп, уйҙарыбыҙ менән күпме генә алға сапмайыҡ, Аллаһ булмаған заманды күҙ алдына килтереү мөмкин түгел.

**4. Әл-Үәхдәниәт:** Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бер һәм яңғыҙ. Аллаһтан башҡа Яралтыусы һәм Уның камил сифаттарына эйә булыусы зат юҡ.

**5. Әл-Мухәләфәтү лил-хәүәдис:** Аллаһ Үҙе яралтҡан мәхлүҡтәренә лә оҡшамаҫ. Ул кешенең уйына килгән барлыҡ формаларҙан һәм төшөнсәләрҙән өҫтөн.

**6. Ҡыям би-нәфсиһи:** Үҙенең булмышын дауам итер өсөн, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бер ниндәй затҡа мохтаж түгел. Аллаһ кемдәндер яралтылмаған. Уның булмышы Үҙенән башлана.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Әй, кешеләр, һеҙ Аллаһҡа мохтаж. Аллаһ, (бөтөн ғаләмдәр байлығына) хужа булараҡ, бер нимәгә лә мохтаж түгел, Ул маҡтауға лайыҡ».

**(Фатыр сүрәһе, 15-се аят)**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Әйт һин: «Аллаһ – Ул берәү! Аллаһу - Самәд (Ул мәңгелек). Ул тыуҙырылмаған да, тыуҙырмаған да. Аллаһҡа тиңдәш юҡ».

**(Ихлас сүрәһе, 1-4-се аяттар)**



# ҺӨТ ҺАТЫУСЫНЫҢ ҠЫҘЫ

Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү), хәлиф булғас, кешеләр танымаһын өсөн ябай кейемдәр кейеп, халыҡтың нисек йәшәгәнен белеү өсөн йыш ҡына ҡалаға сығыр булған. Бер төндә, Мәҙинә урамдарын урап, таңға ҡарай арып, ул бер өй эргәһенә ял итергә ултыра. Өйҙән һөйләшкәндәре ишетелә. Бер ҡатын ҡыҙын уята икән:

- Ҡыҙым, уян, һөт алыусы килмәҫ борон, һөткә һыу өҫтәп өлгөрөр кәрәк.

Ҡыҙы:

- Әсәй, ниңә улай ҡыланырға? Һин Ғүмәр хәлифтең һөткә һыу ҡойоуҙы тыйғанын ишетмәнеңме ни? - ти.

- Һин нимә, ҡыҙым! Хәлиф Ғүмәр үҙенең түшәгендә хәҙер татлы төштәр күреп йоҡлай. Беҙҙең һөткә һыу өҫтәгәнде нисек күрһен?

- Әсәй, әгәр хәлиф Ғүмәр йоҡлай икән, Аллаһ та йоҡлаймы ни? Аллаһ беҙҙе күрмәйме ни? Нимә эшләгәнебеҙҙе белмәйме ни? - ти ҡыҙы.

Әсәһе ни әйтергә белмәй тынып ҡала. Үҙенең хатаһын аңлап, әйткән һүҙҙәренә үкенә.

Хәлиф Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү), был һөйләшеүҙе тыңлап, шым ғына үҙ алдына түгелеп илай. Аллаһты яратып, ысын күңелдән Уға инанып, яуызлыҡ һәм гонаһ ҡылыуҙан тыйылған йәш быуын үҫеп килә. Ғүмәр разыйаллаһу ғәнһүнең күҙ йәштәре ошондай быуынды үҫтергән Аллаһҡа рәхмәт һәм һөйөү йәштәре була.

Хәлиф Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) өйөнә ҡайта. Иртәнсәк ҡылған иң тәүге ғәмәле шул була: улы Ғасымды, Аллаһ үҙен күреп торғанын белеп, һөтөнә һыу өҫтәмәгән ҡыҙ менән никахлаштыра. Күп йылдар үткәс, был ҡыҙ Ғүмәр ибн Әбдел-Ғәзизгә, Икенсе Ғүмәр тиеп аталыусыға өләсәй була.

Иманлы һәм ғәҙел Ғүмәр ибн Әбдел-Ғәзиз хакимлыҡ иткән осорҙа дәүләт тағы ла нығыраҡ үҫешә һәм байый. Илдә хатта байҙарҙың ярҙамына мохтаж булған ярлылар ҡалмай.



## II) СУБУТИ СИФАТТАРЫ

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә хас булған камил һәм мәңгелек үҙенсәлектәр. Был сифаттар беҙгә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ғаләмде нисек яралтҡанын һәм уның менән нисек идара иткәнен аңларға ярҙам итә.

### СУБУТИ СИФАТТАРЫ

**Әл-Хаят (Тереклек)**
Аллаһ тере һәм бөтә тереклектең сығанағы.

**Әл-Ғилем (Ғилем)**
Аллаһ сикһеҙ ғилем эйәһе.

**Әс-Сәмиғ (Ишетеү)**
Аллаһ бөтә нәмәне ишетә.

**Әл-Басыр (Күреү)**
Аллаһ бөтә нәмәне күрә.

**Әл-Ирадә (Ихтыяр)**
Аллаһтың ихтыяры киң.

**Әл-Ҡөҙрәт (Көс)**
Аллаһ сикһеҙ көс һәм ҡөҙрәт эйәһе.

**Әл-Ҡәләм (Телмәр)**
Аллаһ телмәргә эйә.

**Әт-Тәкүин (Яралтыу)**
Аллаһ һәр нәмәне юҡтан яралта.

**1. Әл-Хаят:** Тереклек. Аллаһ тере һәм хаҡ. Тереклегенең башы ла, аҙағы ла юҡ. Уның тереклеге мәхлүктәрҙең тормошо кеүек ваҡытҡа, сәбәпкә һәм арауыҡҡа бәйле түгел. Ул бөтә тереклеккә ғүмер бүләк итә. Барлыҡ тереклек Уның ярҙамында йәшәй.

**2. Әл-Ғилем:** Белем. Күктә һәм Ерҙә ни булғанын Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә белә. Ул белмәгән бер нәмә лә юҡ. Күк һәм ер, уның араһындағы барлыҡ мәхлүктәр, йыһандағы барлыҡ ҡанундар, барлыҡ булған ваҡиғалар хаҡында белә.

Йыһандағы миллиард йондоҙҙар, һәр тере йән эйәһе күҙәнәктәрендәге кодлаштырылған мәғлүмәттәрҙе, кешеләр һаҡлаған серҙәрҙе белә, сөнки Аллаһ – быларҙың барыһын да Яралтыусы. Аллаһ тың ғилеме сикһеҙ. Бөтә йыһандағы системалаштырылған тәртип, аһәң һәм камиллыҡ – быларҙы яралтҡан Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ғилеменең сикһеҙ булыуына дәлил.

**3. Әс-Сәмиғ:** Барыһын да ишетеү. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, һис шикһеҙ, ара алыҫлығына ҡарамаҫтан, бөтә нәмәне ишетә. Йыһандағы мәхлүктәр нимә хаҡында һөйләшкәнен Ул һәр ваҡыт ишетә һәм аңлай. Күңелдәребеҙҙәге доғаларҙы ишетә. Ишетеү өсөн Аллаһ бер ниндәй ҙә ҡулайламаларға һәм ишетеү ағзаларына мохтаж түгел. Аллаһтың ишетеү һәләте сикһеҙ. Барыһын да бер үк ваҡытта ишетә: бер нәмәне тыңлау, Уға икенсе нәмәне тыңларға ҡамасауламай.

**4. Әл-Басыр:** Барыһын да күреү. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә барыһын да күрә. Әйбер яҡынмы йәки алыҫ торамы, асыҡмы йәки йәшеренме, бәләкәйме йәки ҙурмы, Уның өсөн әһәмиәте юҡ. Ҡайҙа һәм нимә эшләгәнебеҙҙе күрә. Нәмәнелер күреү өсөн, Ул беҙҙең һымаҡ күҙгә мохтаж түгел.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**




**(Әнғәм сүрәһе, 59-сы аят)**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Аллаһ ысыны менән ишетеп, күреп тороусылыр».

**(Моьмин сүрәһе, 20-се аят)**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Аллаһ берәй нәмәнең бар булыуын теләһә: «Бар бул!» - тип әмер итә һәм шунда уҡ ул әйбер барлыҡҡа ла килә».

**(Йәсин сүрәһе, 82-се аят)**

**5. Әл-Ирадә:** Ихтыяр. Барыһы ла Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ихтыяры буйынса бара. Уның ихтыярынан һәм бойороуынан тыш бер нимә лә башҡарылмай. Сәбәпһеҙ һәм хикмәтһеҙ бер нәмәне лә яралтмаған. Уның ихтыярын кире ҡаға алған, ҡарарын ҡылыуҙан туҡтата алған көс юҡ.

**6. Әл-Ҡөҙрәт:** Көс. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә сикһеҙ Көс һәм Ҡөҙрәт эйәһе. Ул башҡара алмаған бер нәмә лә юҡ. Тормошҡа ашырырға теләгәнен башҡарыр өсөн, Уның алдында ҡаршылыҡтар юҡ. Аллаһ Ҡөҙрәтенең осһоҙ-ҡырыйһыҙлығы һәм сикһеҙлеген аңлар өсөн, кешегә үҙе йәшәгән йыһанды һәм ундағы күренештәрҙе өйрәнеү ҙә етә. Йыһанда миллионлаған тонна ауырлығындағы йондоҙ һәм планеталарҙың бер-береһе менән бәрелешмәйенсә, орбиталары буйлап хәрәкәт итеүе, кешенең бер күҙәнәктән яралыуы - Аллаһ Ҡөҙрәтенә дәлил.

**7. Әл-Ҡәләм:** Телмәр. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һөйләшә, шул уҡ ваҡытта иренгә, телгә, өндәргә һәм хәрефтәргә мохтаж түгел. Уның бер һүҙен дә кешеләрҙең телмәре менән сағыштырып булмай. Раббыбыҙ һәр мәхлүк менән уға аңлайышлы телдә аралаша. Ергә, күккә, бәләкәй һәм ҙур мәхлүктәргә Үҙенең бойороҡтарын аңлата ала. Пәйғәмбәрҙәргә, ә улар аша бөтә кешелеккә Изге яҙмаларын төшөрөп мөрәжәғәт иткән. Изге Ҡөрьән һәм башҡа пәйғәмбәрҙәргә индерелгән яҙмалар - Уның телмәре.

**8. Әт-Тәкүин:** Яралтыу. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә йыһанды һәм йыһандағы тереклекте Яралтыусы. Барыһын да яралтҡан: микроскоп аша ғына күреп булған иң кескәй тере организмдарҙан башлап, күләме буйынса Ерҙән бер нисә мең тапҡырға ҙурыраҡ йондоҙҙарға тиклем. Ул – барлыҡ тереклекте яралтыусы, уларға ғүмер биреүсе, туҡландырыусы һәм үҫтереүсе. Унан башҡа Яралтыусы юҡ. Аллаһ юҡтан бар ҡыла ала, шул уҡ ваҡытта бер ниндәй өлгөгә мохтаж түгел. Кешеләр уйлап тапҡан технология ҡулайламалары һәм яңы асыштар ни тиклем генә мөғжизәле күренмәһен, был - булғанды берләштереү, әҙерҙе файҙаланып, әйберҙәргә яңы формалар биреү һөҙөмтәһе. Былар бөтәһе лә яралтыу түгел, бары тик асыш.



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Барлыҡҡа килтереүсе, яралтыусы, хасил иткәндәргә рәүеш биреүсе - Аллаһ».

**(Хәшер сүрәһе, 24-се аят)**

# АЛЛАҺ СҮБХӘНӘҺҮ ҮӘ ТӘҒӘЛӘ БАРЫҺЫН ДА КҮРӘ

Атаһы балаларын йыйған да һәр береһенә ҡиммәтле балдаҡ биргән. Был балдаҡтарҙы берәү ҙә күрмәгән урынға йәшереп, ул үлгәндән һуң ғына ҡулланыуҙарын теләгән.

Балалары, балдаҡтарын алып, йәшерер урын эҙләй башлаған. Ике балаһы, балдаҡтарын үҙҙәренең шәхси әйберҙәре араһында ентекләп йәшергәндән һуң, аталарына кире киләләр ҙә өсөнсө туғанын көтә башлайҙар. Оҙаҡ ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, туғандары кире әйләнеп ҡайтмаған. Борсола башлағандар, кискә табан ҡулына балдағын тағып алған туғандары күренә.

Кискә тиклем балдаҡты йәшерә алмағанын күреп, улар унан көлә башлайҙар:

- Туғаныбыҙ шул тиклем ваҡыт һуҙылып йөрөп, балдағын ҡайҙа йәшерергә урын тапмаған.

Шул уҡ ваҡытта улар аталарының теләген тиҙ арала үтәгәнгә ғорурланып ҡыуанған.

Аталары өс улына ла иғтибар менән ҡараған. Һуңынан балдағын йәшерә алмаған улына мөрәжәғәт иткән:

- Балаҡайым! Ҡара әле, туғандарың балдаҡтарын йәшергәндәр. Ә һин ни өсөн үҙеңдекен кире килтерҙең?

Улы былай тигән:

- Атай! Балдаҡтарыбыҙҙы берәү ҙә күрмәгән урынға йәшереүебеҙҙе теләмәгәйнеңме ни?

Атаһы:

- Эйе, - тигән.

Улы дауам иткән:

- Атай, мин күпме һуҡлығып йөрөнөм, әммә һин әйткән урынды тапманым. Ҡайҙа ғына барһам да, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә мине күргәнен беләм инем. Шуға күрә балдағымды кире алып килдем.

Улының һүҙҙәренән бик ҡәнәғәт ҡалған атай кеше:

- Афарин, балаҡайым! Ошо ҙур булмаған һынау ярҙамында Аллаһ беҙҙе һәр ваҡыт һәм һәр ерҙә күреп торғанын иҫкә төшөргөм килгәйне.



# РАББЫМ! МИН ҺИНЕ ТАНЫП, БӨТӘ ЙӨРӘГЕМ МЕНӘН ҺИҢӘ ИНАНАМ!

**Йәә, Раббым!** Һин барһың. Булмышың менән Һин бер нимәгә лә мохтаж түгелһең. Һин - беҙҙе Яралтыусы һәм беҙгә үҙеңдең барлығыңды Хәбәр итеүсе. Һинән башҡа бөтә тереклек үҙенең булмышы менән Һиңә бурыслы. Һин - барлыҡ мәхлүктәрҙе Яралтыусы һәм Һин - бөтә тереклек-те Йәшәтеүсе. Әгәр Һин теләһәң, барыһын да юҡҡа сығара алаһың.

**Йәә, Раббым!** Һинең барлығыңдың башы ла, аҙағы ла юҡ. Һин - Башлаусы ла һәм Тамамлаусы ла. Һин - ваҡытты Яралтыусы һәм уның ағымын Туҡтатыусы. Мәңгелек Һинеке генә. Һинән башҡа барыһы ла фани. Тыуымдан ҡалмаған - үлемдән ҡалмаясаҡ, һәр мәхлүктең ғүмере бөтәсәк. Һин генә мәңге буласаҡһың.

**Йәә, Раббым!** Һин генә Берәү һәм Берҙән-бер. Һинең шәригең һәм тиңдәшең юҡ. Бөтә көс-ҡеүәт Һиндә генә. Һин - барыһын да Ярал-тыусы һәм улар менән Идара итеүсе. Был гүзәл йыһандағы тотороҡлоҡ һәм камил тәртип - Һинең ижадың һөҙөмтәһе. Һинән башҡа илаһ юҡлығын иҫбатлаусы дәлилдәр бихисап.

**Йәә, Раббым!** Беҙ Һинең асылыңды танып белә алмайбыҙ. Ни генә күҙ алдына килтерһәк тә, мәхлүкәткә Һинең һис бер оҡшашлығың юҡ. Йәшәйешең һинең үҙеңдән. Үҙеңдең мәхлүктәреңдең береһенә лә оҡшамағанһың, олуғлыҡ һәм бөйөклөк Һиңә генә хастыр. Һине берҙән-бер Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләбеҙ итеп таныйбыҙ һәм Һиңә иманабыҙ.

**Йәә, Раббым!** Һин - йәшәү сығанағы. Һин - бар тереклеккә Ғүмер бүләк итеүсе, ер аҫтындағын, йыһан киңлегендәген, океан тәрәнлегендәген һәм күңелдәрҙә йәшерелгәнен белеүсе, ишетеүсе һәм күреүсе. Барсаһы - ваҡ ҡына организмдарҙан алып, ҙур-ҙур планеталарға



**БИСМИЛЛӘҺ**

“Аллаһ” - мөһим һүҙебеҙ,
Иман һала йөрәккә.
Татлы йоҡоға талғанда,
Таңдарҙа уянғанда,
“Бисмилләһ”, - тиеп әйтәм.

Ашағанда, эскәндә,
Йә китап уҡығанда,
Һабағыма барғанда,
Урамда уйнағанда,
“Бисмилләһ”, - тиеп әйтәм.

Ҡабатлап телем талмаҫ,
Шыбырлайым: “Бисмилләһ”.
Раббыма доға ҡылам -
Йөрәгемдә көс тоям.
“Тура юлдан алып бар!” -
Раббыма доға ҡылам.

**М.Асым Көксал**

ҡәҙәр - Һинең ижад емешең. Һинең ғилемең быларҙың барыһын да сорнап алған.

Һин ҡап-ҡара ташта шыуышҡан ҡап-ҡара ҡырмыҫҡаны ҡараңғы төндә күрәһең, уға нимә кәрәклеген беләһең, тауышын ишетәһең һәм теләгәнен бирәһең.

**Йәә, Раббым!** Һин генә - теләгәнен юҡлыҡтан яралтыусы. Бөтә тереклек барлыҡҡа килгән, сөнки Һин шулай теләгәнһең. Һәр эшеңдә - хикмәт. Һин - сикһеҙ ҡөҙрәт һәм ҡеүәт эйәһе. Һинең ҡарарыңа ҡаршы торорлоҡ бер ниндәй ҙә ҡеүәт юҡ.

**Йәә, Раббым!** Һинең Ҡәләмең - иң күркәм һәм хаҡ телмәр. Һин - ҡолдарыңа Мәрхәмәтлек күрһәтеүсе, уларға илаһи яҙмалар төшөрөп, Мөрәжәғәт итеүсе. Диңгеҙҙәрҙең һыуы - яҙыу ҡараһы, ә ағастар ҡаурый ҡәләм булһа ла, Һинең һүҙҙәреңде яҙып бөтөп булмаҫ ине.

**Йәә, Раббым!** Һин генә юҡтан бар ҡылаһың һәм булғандың тереклеген туҡтатаһың. Һин барыһын да камил итеп яралтаһың, Ҡеүәтең менән юл күрһәтәһең һәм идара итәһең.

Йәә, Раббыбыҙ! Күңелдәребеҙҙе Һиңә лайыҡ булмаған уй-фекерҙәрҙән таҙарт! Ғүмерҙәребеҙҙе Һиңә ғибәҙәт ҡылып үткәрергә

һәм мосолмандарҙан булып донъя ҡуйырға насип ит!

Гонаһтарыбыҙ һәм етешһеҙлектәребеҙ өсөн

Ҡиәмәт Көнөндә беҙҙе оятҡа ҡалдырма!

Мullыҡ һәм мохтажлыҡ ваҡытында беҙгә ярҙам ит!

Һин - барлыҡ теләктәребеҙҙе белеүсе һәм доғаларыбыҙҙы ишетеүсе!

Доғаларыбыҙҙы ҡабул ҡыл! Әмин



# ЕГЕТТЕҢ ИМАНЫ

Бер ваҡыт Аллаһ Рәсүле (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләренә шундай тарих һөйләгән:

«Һеҙгә тиклемге бер халыҡтың батшаһы һәм уның һарайында сихырсыһы булған. Сихырсы ҡартайғас, батшаға әйткән:

- Ҡартайҙым инде. Берәй йәш кешене тәғәйенләһәң, уны сихырға өйрәтермен.

Был үтенесенә яуап итеп, батша сихырсыға йәш егетте ебәргән. Сихырсыға китеп барғанда, кеше йөрөмәгән ерҙе үткәнендә, егет рахибты



(монах) осрата. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Берлегенә инанған был рахиб илаһилыҡҡа дәғүә иткән батшаға ҡаршы баш күтәргән, залим батшанан һәм уның кешеләренән ҡасып, ошо кешеһеҙ урында йәшеренгән. Егет, сихырсыға барған һайын, рахибҡа инә башлаған. Уның һөйләгәне оҡшаған. Рахиб менән хушлашҡыһы килмәгән, шуға ҡайһы саҡ сихырсы янына һуңлап килгән.

Һуңлаған сағында, сихырсы егеткә асыуланған һәм уны туҡмар булған. Бер мәлде егет юлда кешеләргә үтергә ҡамасаулаған ҙур йыртҡысҡа тап булған. Шул саҡта егет уйлаған: «Бына хәҙер кем кемде үткәнен беләсәкмен инде: сихырсы рахибтымы, әллә рахиб сихырсынымы». Ерҙән таш алып, йыртҡысҡа ошо һүҙҙәр менән бәреп ебәргән:

- Йәә, Раббым! Әгәр сихырсыныҡына ҡарағанда рахибтың ғәмәлен күберәк яратһаң, ул сағында кешеләр артабан юлдарын дауам итһен өсөн, был йыртҡысты үлтер.

Йыртҡыс йән бирә, ә халыҡ тыныс ҡына юлын дауам итә. Һуңыраҡ егет рахибҡа килә лә ваҡиғаны һөйләп бирә.

Рахиб уға әйтә:

- Ҡустым! Юғары кимәлгә күтәрелгәнеңде күрәм. Һин мине үттең. Минең уйымса, һин тиҙҙән һынауға дусар ителәсәкһең. Әгәр шулай булһа, ҡара уны, берәүгә лә минең ҡайҙалығымды күрһәтмә.

Егет һуҡырҙарҙы, махау (проказа) менән сирләүселәрҙе һауыҡтыра һәм башҡа сырхауҙарҙы дауалай башлай. Батшаның бер һуҡырайған яраны был хаҡта ишетеп ҡала һәм егеткә ҡиммәтле бүләктәр менән килә лә әйтә:

- Әгәр мине дауалаһаң, быларҙың барыһы ла һинеке буласаҡ, -ти.

Егет:

- Үҙем берәүҙе лә дауалай алмайым.Тик Аллаһ ҡына шифаларын бирә. Әгәр һин Аллаһҡа иман килтерһәң, мин Уға доғалар менән мөрәжәғәт итәм. Әгәр Ул теләһә, һиңә шифаһын бирер.

Батша кәңәшсеһе, Аллаһҡа инана, ә Ул уны һауыҡтыра. Ул батша һарайына кире бара һәм тәү сираттағы кәңәшмәлә үҙенең урынын биләй.

Батша һорай:

- Кем күҙҙәреңде дауаланы?

Ул:

- Раббым, - тиеп яуаплай.

Батша ҡысҡырып ебәрә:

- Һинең нимә, минән башҡа Раббың бармы?

Кәңәшсе:

- Минең дә, һинең дә Раббыбыҙ – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, - ти.

Яуап итеп, ярһыған батша кәңәшсене ҡулға алырға һәм егеттең ҡайҙалығын әйткәнгә ҡәҙәр яфаларға бойора. Ахырҙа яфалауға сыҙамай, теге егеттең ҡайҙалығын әйтә. Егетте батшаға алып киләләр. Батша унан һорай:

- Егет, тимәк тылсымда оҫтарғанһың, һуҡыр һәм махауҙарҙы дауалау дәрәжәһенә еткәнһең. Ишеттем, һин был эшкә ныҡлап тотонғанһың. Шулаймы?

Егет:

- Юҡ, мин берәүҙе лә һауыҡтыра алмайым. Аллаһ сәләмәтләндерә, - ти.

Батша, рахибтан белем алғандыр, тип уйлап, егетте ҡулға алырға бойора. Һәм, рахибтың ҡайҙа йәшеренгәнен әйткәнгә ҡәҙәр, уны яфаларға ҡуша. Егет яфаларға түҙмәй, рахибтың ҡайҙалығын әйтә. Рахибты алып киләләр ҙә уға әйтәләр:



- Динеңдән баш тарт!

Рахиб диненән баш тартмай, шуға күрә батша уны өҫтән аҫҡа ҡарай икегә бысырға бойора. Һуңынан батшаның кәңәшсеһен алып киләләр. Уға ла шулай уҡ:

- Динеңдән баш тарт! - тиҙәр.

Ләкин ул да ныҡ була һәм диненән баш тартмай. Батша уны ла шулай уҡ өҫтән аҫҡа ҡарай икегә бысырға бойора. Шунан егетте алып киләләр, янайҙар:

- Динеңдән баш тарт, юғиһә һин дә үләһең!

Егет бирешмәй. Батша һаҡсыларына бойора:

– Анау тауҙың башына мендерегеҙ. Әгәр диненән баш тартһа - яҡшы, әгәр юҡ икән - аҫҡа табан ташлағыҙ.

Һаҡсылар егетте тау башына алып китәләр. Егет доға ҡыла:

- Йәә, Раббым! Нисек теләйһең, шундай ысул менән мине уларҙан арындыр!

Тау тетрәп китә һәм батшаның кешеләре аҫҡа тәгәрәй. Һау-сәләмәт килеш егет батшаға ҡайта. Батша унан һорай:

- Һинең менән булған һаҡсылар ҡайҙа? -ти.

- Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә мине уларҙан ҡотҡарҙы, - ти егет.

Батша икенсе һаҡсыларына бойора:

- Кәмәгә ултыртығыҙ һәм асыҡ диңгеҙҙең уртаһына алып барығыҙ. Әгәр диненән баш тартһа - яҡшы, әгәр юҡ икән - диңгеҙгә ырғытығыҙ.

Егетте алып китәләр. Ул доға ҡыла:

- Йәә, Раббым! Нисек теләйһең, шундай ысул менән мине уларҙан арындыр!

Кәмә түңкәрелә һәм ундағыларҙың барсаһы һыуға бата. Егет кенә һау-сәләмәт килеш батшаға ҡайта. Батша уны күргәс һорай:

- Һинең менән булған һаҡсылар ҡайҙа?

- Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә мине уларҙан ҡотҡарҙы, - ти егет һәм шулай тип өҫтәй:

- Мин әйткәнсә эшләмәйенсә тороп, һин мине үлтерә алмайһың.

- Нимә эшләргә инде? - тип һорай батша.

Егет аңлата:

- Халыҡты ҙур майҙанға йый. Ә мине хөрмә пальмаһының олонона бәйлә. Минең янымдан уҡ ал һәм уны йәйәнең уртаһына ҡуй. «Егеттең Раббыһы Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә исеме менән!» - тиеп әйт тә ат. Шулайтып ҡына мине үлтерә алаһың.

Батша халыҡты ҙур майҙанда йыйған, егетте хөрмә пальмаһының олонона бәйләгән. Шунан, егеттең янынан уҡ алып, үҙенең йәйәһенә ҡуйған да:

- Егеттең Раббыһы Аллаһ исеме менән! - тиеп, уҡты ысҡындырған.

Уҡ егеттең һамайына (висок) эләгә, ул һамайын ҡулдары менән ҡаплап өлгөрә һәм шунда уҡ йән бирә. Ә кешеләр:

- Без егеттең Раббыһына иман килтерҙек! - тиҙәр.

Батшаның ярандары был хаҡта батшаға еткерә:

- Һеҙҙең ҡурҡанығыҙ тормошҡа ашты - халыҡ иманға ҡайтты».

(Мөслим, Зөхд, 73)

# ИҢ ГҮЗӘЛ ИСЕМДӘР (ӘСМӘҮЛ – ХҮСНӘ) АЛЛАҺ СҮБХӘНӘҺҮ ҮӘ ТӘҒӘЛӘНЕКЕ

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләбеҙ беҙгә Исемдәре һәм сифаттары аша Үҙе тураһында ғилем биргән. Аллаһ Ҡөрьәндә хәбәр иткән һәм Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙгә өйрәткән был исемдәр Әсмәәүл-Хүснә (иң гүзәл исемдәр) тип атала.

Аллаһ Изге Ҡөрьәндә әйтә: **«Иң гүзәл исемдәр Аллаһтың исемдәрелер. Шулай булғас, шул гүзәл исемдәр менән доғалар ҡылығыҙ»** («Әғрәф» сүрәһе, 180-се аят). Раббыбыҙ Аллаһ доғаларыбыҙҙа гүзәл Исемдәрен телгә алыуыбыҙҙы теләгән.

Шулай уҡ Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһтың исемдәре тураһында хәбәр иткән:

*«Аллаһтың 99 исеме бар. Кем уларҙы ятлап ала һәм уҡып сыға, ул йәннәткә инер»* (Бохари, «Дәғүәт», 76, Мөслим, «Зикра», 5-6).

Хәҙистә килтерелгән «ятлап ала һәм уҡып сыға» һүҙҙәре, Аллаһты гүзәл исемдәре аша аңлап, был исемдәрҙе онотмау, Уның был сифаттарын иҫеңдә тотоу, һәр ваҡыт зекер ҡылып тороу тигән һүҙ.

Тормошҡа һәм ваҡиғаларға Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең гүзәл Исемдәре призмаһы аша ҡарарға кәрәк. Мәҫәлән, «әр-Рахман» һәм «әр-Рәхим» исемдәрен әсәйебеҙҙең иркәләүен һәм изгелеген тойғанда, «әр-Раззәәҡ» исемен - тәмле ризыҡ ашағанда, «әл-Ғәфүү» исемен - гонаһтарыбыҙ өсөн ғәфү үтенгәндә, «әл-Мүхйи» исемен - һәр саҡ яҙҙы ҡаршылағанда, «әл-Мүмиит» исемен - үлем менән осрашҡанда иҫләргә. Әгәр был гүзәл Исемдәрҙең мәғәнәһен өйрәнеп, ғәмәлдәребеҙҙе күркәмләштерһәк, Аллаһтың һөйөклө ҡолдарынан булырбыҙ, Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) изге хәбәре аша йәннәткә инергә лайыҡлы булырбыҙ.

Әйҙәгеҙ әле, устарыбыҙҙы асып, ҡайһы бер гүзәл Исемдәре менән Раббыбыҙға доға ҡылайыҡ.



| | | |
|---|---|---|
| ЙӘӘ АЛЛАҺ! <br> ٱللَّه | Йәә Аллаһ, бөтөн гүзәл Исемдәргә һәм сифаттарға эйә булыусы! <br>   | Иң бөйөк Исемең менән Һиңә мөрәжәғәт итәбеҙ! Доғаларыбыҙҙы ҡабул ит! |
| ЙӘӘ РАХМАН! ЙӘӘ РӘХИМ! <br> الرَّحْمٰن <br> الرَّحِيم | Йәә Аллаһ, бөтә мәхлүктәргә шәфкәтле һәм мәрхәмәтле булыусы! <br>  | Беҙгә ҡарата фанилыкта ла, баҡыйлыкта ла рәхимле бул! |
| ЙӘӘ РАЗЗӘӘҠ! <br> الرَّزَّاق | Йәә Аллаһ, барыһын да ризыҡ менән бүләкләүсе! <br>  | Беҙгә мул һәм хәләл ризыктар әйлә! |
| ЙӘӘ ХӘФИИЗ! <br> الْحَفِيظ | Йәә Аллаһ, барыһын да ҡурсалаусы һәм һаҡлаусы! <br>  | Мине, ғаиләмде, бөтә мосолмандарҙы яуызлыктарҙан һәм бәлә-казаларҙан һаҡла! |

| | | |
|---|---|---|
| ЙӘӘ МҮСАУУИР!<br>الْمُصَوِّرُ | <br>Йәә Аллаһ, барыһын да иң күркәм рәүештә яралтыусы! | Ҡиәфәтемде күркәм рәүештә ҡылған кеүек, минең холҡомдо ла күркәм ит! |
| ЙӘӘ МҮЖИИБ!<br>الْمُجِيبُ | <br>Йәә Аллаһ, күңелдәребеҙ аша үткән һәм ауыҙҙарыбыҙҙан сыҡҡан доғаларҙы ишетеүсе һәм ҡабул итеүсе! | Беҙҙе ихлас күңелдән доға ҡылыусыларҙан һәм доғалары ҡабул булыусы ҡолдарыңдан әйлә! |
| ЙӘӘ ҺӘӘДИ!<br>الْهَادِي | <br>Йәә Аллаһ, хәҡиҡәтте күрһәтеүсе һәм хаҡ юлдан алып барыусы! | Беҙҙе Исламдағы хаҡ юлыңдан, хәҡиҡәтеңдән, салих заттарҙан айырма! |
| ЙӘӘ ХӘЙЙҮ!<br>ЙӘӘ ҠӘЙЙҮМ!<br>الْحَيُّ<br>الْقَيُّومُ | <br>Һәр саҡ Тере, йәшәйештең сығанағы булған, барлыҡ ғаләмде етәкләүсе! | Үҙең биргән ғүмеребеҙҙе Үҙеңдең юлыңда йәшәт! Йөрәктәребеҙҙе фанилыҡҡа бәйләмә! |
| ЙӘӘ ҮӘДҮҮД!<br>الْوَدُودُ | <br>Һин – мөхәббәт сығанағы. Һин – һөйөүгә лайыҡ, йәә Аллаһ! | Беҙҙе, Үҙең яратҡанды яратып, Үҙең ерәнгәндән ерәнеүселәрҙән ҡыл! |

# АЛЛАҺҠА ИМАН БЕҘГӘ НИМӘ БИРӘ

## АЛЛАҺҠА ИМАН

- Беҙгә сикһеҙ өмөт хисе бирә.
- Мәхлүктәргә ҡарата күңелебеҙгә изгелеклелек һәм мәрхәмәт һала.
- Ҡылыҡтарыбыҙҙы контролдә тоторға ярҙам итә.
- Беҙҙең гүзәл һәм намыҫлы кеше булыубыҙҙы һаҡлай.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ҡеүәтенә инаныу һәм һәр эштең һөҙөмтәһен Унан ғына көтөү – көсһөҙ итеп яралтылған кешеләр өсөн ҙур өмөт сығанағы. Барыһы ла Аллаһ ҡулында һәм Уның ҡурсалауы аҫтында. Кемдәр Уға ышана, улар бер ҡасан да өмөттәренән төңөлдөрмәй. Әгәр Аллаһ теләмәһә, берәү ҙә һеҙгә файҙа ла, зыян да килтерә алмай. Беҙ, инаныусылар, Аллаһҡа иман килтерәбеҙ. **Был инаныу булмышыбыҙға сикһеҙ өмөт тойғоһон һала.** Һәр яңы көндө *«Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙгә етә. Ул ниндәй күркәм яҡлаусы»* тигән аң менән башларға ярҙам итә. Беҙҙе ялҡаулыҡтан, күңел төшөнкөлөгөнән, артыҡ шомланыуҙан, билдәһеҙлек көсөргәнешлегенән арындырып, тормошобоҙға тыныслыҡ бирә.

**Аллаһү Тәғәлә бойора:**

«Аллаһ һеҙгә ярҙам итеп торғанда, һеҙҙе һис кем еңә алмаҫ. Әгәр Ул һеҙҙе ташлаһа, унан башҡа һеҙгә кем ярҙам итер? Мөьминдәр бары тик Аллаһҡа ғына таянырға тейеш».

**(Ғимран сүрәһе, 160-сы аят)**

Бөтә барлыҡтың Аллаһтың мәрхәмәте һәм шәфҡәте һөҙөмтәһе булғанына инанабыҙ. Былдай инаныу **барса яратылмыштарға изгелекле һәм мәрхәмәтле булыуға этәргес**, сөнки һәр йән эйәһе - Аллаһтың мәрхәмәт һәм шәфҡәт һөҙөмтәһе, Уның Барлығына һәм Берлегенә дәлил.

Әйҙәгеҙ, Аллаһ ғүмер бүләк иткән бөтә барлыҡҡа, мәхлүктәргә шәфҡәтлерәк булайыҡ. Йөрәк-тәребеҙ изгелек менән тулһын. Уратып алған йәмғиәткә, ғаиләбеҙгә, дуҫтарыбыҙға зыян һалмайыҡ, хатта ҡырмыҫҡаларҙы ла ҡыйырһытмайыҡ. Был ерҙәге бөтә мәхлүктәр Аллаһ тарафынан беҙгә хеҙмәт итер өсөн яратылған. Уларға ҡарата насар мөнәсәбәткә, исраф итеүгә юл ҡуймайыҡ.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Бер мәл бер мосафир ныҡ һыуһай. Ҡоҙоҡ табып, унда төшөп, туйғансы һыу эсә. Ҡоҙоҡтан сыҡҡас, һыуһауынан телен сығарған һәм дымлы тупраҡты ялаған этте күрә. Кеше үҙенә: «Был эт, минең кеүек үк, эсергә теләй», - ти, йәнә ҡоҙоҡҡа төшә һәм, башмағына һыу алып, башмағын тештәренә ҡыҫып күтәрелә, эткә һыу эсерә. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уның был ҡылығынан ҡәнәғәт ҡала һәм гонаһтарын ғәфү итә».

**(Бохари, Мусаҡат, 9)**



Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙгә шаһ тамырына ҡарағанда ла яҡыныраҡ, Ул барыһын да белә, күрә һәм ишетә. Уның ғилеме сорнап алмаған, күҙәтеүе аҫтында булмаған йыһанда бер нәмә лә юҡ.

Раббыбыҙға бөтәһе лә мәғлүм булыуы, ғәмәлдәребеҙҙе күҙәтеп тороуы **үҙебеҙҙе контролдә тоторға ярҙам итә**.

Фотоға һәм видеоға төшкәндә тышҡы ҡиәфәтебеҙҙе хәстәрләгән, үҙебеҙҙе контролдә тотҡан кеүек, һәр даим үҙебеҙҙе, ғәмәлдәребеҙҙе, әйткән һәр һүҙебеҙҙе контролдә тоторға тейешбеҙ.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Һеҙ ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа, Аллаһ һеҙҙең янда булыр. Аллаһ ғәмәлдәрегеҙҙе күреп тора».

**(Хәдид сүрәһе, 4-се аят)**

Илаһи күҙәтеү аҫтында булғаныбыҙҙы онотмаһаҡ, үҙебеҙҙең халәтебеҙгә, ғәмәлдәребеҙгә, уй-фекерҙәребеҙгә ҡарата иғтибарлы булырбыҙ. Хәүефһеҙлек, йә башҡа талаптарға ярашлы эш итеүҙән бигерәк, Аллаһ һәр мәлебеҙҙе күреп торғанын аңлап, үҙ-үҙебеҙҙе контролдә тотабыҙ. Беҙ Уны күрмәһәк тә, Ул беҙҙең нимә эшләгәнебеҙҙе күрә тигән инаныу менән Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылабыҙ. Эштәребеҙҙе яҡшы атҡарырға, күркәм холоҡ һәм сифатҡа эйә кешеләр булырға тырышабыҙ.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә инананабыҙ икән, тормошобоҙҙо Уның бойороҡтарына һәм тыйыуҙарына ярашлы ҡорабыҙ. Аллаһты яратҡанға күрә, Уның ризалығын ҡаҙанырға тырышабыҙ. Уның асыуына тарыуҙан, тамуҡтан ҡурҡабыҙ һәм Уға оҡшамаған ғәмәлдәрҙән тыйылабыҙ. Шул рәүешле беҙҙә тәҡүәлек формалаша. Бындай иман **беҙҙең ғәҙел һәм намыҫлы кеше булыуыбыҙҙы һаҡлай**.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Раббыбыҙ - Аллаһ!» - тип, һуңынан да шуға тура булғандар өсөн бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс юҡ. Уларға ҡайғы килмәҫ. Улар йәннәт әһеле булыр. Ҡылған изгелектәренә күрә әжер булараҡ шунда мәңгегә ҡаласаҡтар».

**(Әхҡаф сүрәһе, 13-14-се аяттар)**

Һүҙҙә лә, эштәребеҙҙә лә намыҫлы булып китәбеҙ. Нимә генә булмаһын, хаҡлыҡтан сигенмәйбеҙ. Мутлыҡ һәм алдаҡ кеүек сифаттарҙан тайшанабыҙ. Беҙгә ышанғандарҙы һатмайбыҙ. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) кеүек, йомғиәттә хөрмәтле һәм һөйөклө, эш менән һүҙә ышаныслы һәм намыҫлы, өлгөлө мосолмандарға әүерелабеҙ.

# АЛЛАҺҠА МӨХӘББӘТ

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә - тәнебеҙҙе һәм йәнебеҙҙе Яралтыусы, йөрәктәребеҙгә Мөхәббәт Һалыусы. Гүзәл исемдәренең береһе - «әл-Үәдүүд», йәғни Аллаһ Һөйөүсе һәм Һөйөлөүсе.

Һөйөү сығанағы булған Аллаһ беҙҙе – үҙенең ҡолдарын - ныҡ ярата. Һөйөүен Ул беҙгә бүләк итеп биргән иҫәпһеҙ-һанһыҙ ниғмәттәре аша күрһәтә, киләһе тормошта тағы ла яҡшыраҡ ниғмәттәр менән бүләкләйәсәге хаҡында белдерә. Ә беҙҙән Үҙе бойорғанса ғибәҙәт ҡылыуыбыҙҙы талап итә.

Аллаһты беҙ яратабыҙ, сөнки Уны һөйөүебеҙ - иманыбыҙҙың бер өлөшө, рәхмәтебеҙ. Ул - һөйөү бағлауға иң лайыҡлыһы.

Аллаһты һөйөүебеҙ - иманыбыҙҙың юғары дәрәжәһе. Уны һөйөүебеҙ – бөтә матурлыҡтың һәм изгелектең башланғысы. Иман юлына баҫҡас, бөтә йөрәгебеҙ менән Аллаһты ярата башлайбыҙ, хатта үҙ ғүмеребеҙҙән дә нығыраҡ яратабыҙ. Әсәйгә, атайға, хәләл ефетебеҙгә, балаларыбыҙға, дуҫтарыбыҙға һөйөүебеҙ – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙгә бүләк итеп биргән бәрәкәт. Уларға булған һөйөүебеҙ бер ҡасан да Аллаһҡа булған һөйөү менән сағыштырырлыҡ түгел.

Һөйгән һөйөклөһөнә буйһона. Буйһоноу - Аллаһҡа инаныуыбыҙҙың һәм Уға һөйөүебеҙҙең иң яҡшы дәлиле. Ысын мөхәббәт ҡылған ғәмәлдәрҙә күренә. Аллаһҡа иманыбыҙҙы һәм көслө һөйөүебеҙҙе, Уның бойороҡтарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып, Ул ҡәнәғәт булған ғәмәлдәр ҡылып ҡына белдерә алабыҙ.

Кем ярата, һөйгәнен һәр ваҡыт хәтерендә тота. Уның исемен телгә алыуҙан ләззәт таба. Уны бер ҡасан да онотмай. Мөьмин булып, Раббыбыҙҙы ғибәҙәттәребеҙ, намаҙҙарыбыҙ аша, Ҡөрьән уҡып, доға ҡылып иҫебеҙгә алабыҙ. Гүзәл исемдәре аша Уның Бөйөклөгө, Көсө һәм Ҡеүәте хаҡында уйланабыҙ. Уны иҫләп, Уға булған һөйөүебеҙҙе белдерәбеҙ.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Өс сифатҡа эйә булған имандың тәмен татыр:
- Аллаһты һәм Уның Рәсүлен барыһынан да нығыраҡ яратыусы;
- Яратҡан кешеләрен Аллаһ ризалығы өсөн яратыусы;
- Аллаһ иманһыҙлыҡ һаҙлығынан сығарғандан һуң, уттан ҡурҡҡан кеүек, ул һаҙлыҡҡа ҡабат батыуҙан ҡурҡыусы».

**(Бохари, Иман, 9)**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Иман килтергән кешеләр - Аллаһты иң ныҡ яратыусылар».

**(Бакара сүрәһе, 165-се аят)**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«(Әй, Рәсүлем) әйт: «Әгәр Аллаһты яратһағыҙ, миңә эйәрегеҙ. Аллаһ та һеҙҙе ятатыр һәм гонаһтарығыҙҙы ярлыҡар», - тип. Аллаһ - Ярлыҡаусы, киң күңелле, Ғәфү итеүсе».

**(Ғимран сүрәһе, 31-се аят)**

Кем Аллаһты ярата, Уның Пәйғәмбәренең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юлынан атлай. Ислам - иң бөйөк мөхәббәт мәктәбе. Был мөхәббәт мәктәбенең уҡытыусылары - пәйғәмбәрҙәр - ер йөҙөндәге иң лайыҡлы һәм иманлы кешеләр. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) - «Хәбибуллаһ», йәғни «Аллаһтың һөйгән ҡоло». Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юлы менән барып, Аллаһҡа мөхәббәтебеҙҙе белдерәбеҙ һәм Уның һөйөүен ҡаҙанабыҙ.

Йөрәктәребеҙ Аллаһҡа һөйөү менән тулһа, тормошобоҙ үҙгәрә, тәртибебеҙ һәм әхлағыбыҙ яҡшыра. Аллаһты яратҡанға күрә, Уның ризалығын алырға тырышабыҙ. Раббыбыҙҙың һүҙен тыңлайбыҙ, пәйғәмбәрҙәренең нәсихәттәренә эйәрәбеҙ, Улар күрһәткән тура юлдан тайпылмайбыҙ. Үҙебеҙҙе шулай тотҡан осраҡта, Аллаһ та беҙҙе ярата һәм яратҡан ҡолдары исәбенә индерә, Уның һайлам ҡолдарына, дуҫтарына әйләнәбеҙ. Мөьминдәрҙең һәм фәрештәләрҙең һөйөүен яулайбыҙ.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Мәғлүмдер, Аллаһ тураһында уйлағанда, күңелдәр рәхәт тыныслыҡҡа ирешә».

**(Рағд сүрәһе, 28-се аят)**

Изге бер мосолман: «Раббым мине иҫкә алған сағын беләм», - тигән. Быны ишеткән халыҡ уның янына йыйылып:

- Быны ҡайҙан беләһең? - тип һораған.

- Был эш бик ябай. Раббымды иҫкә алған һайын, Ул да мине иҫкә ала.



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Иман килтереп, изгелектәр ҡылғандарҙың күңелендә мәрхәмәтле Аллаһ (бер-береһен) яратыу хисен уятасаҡ».

**(Мәрйәм сүрәһе, 96-сы аят)**

# ҒИБӘҘӘТЕБЕҘҘЕҢ АСЫЛЫ – ДОҒА

Доға - көсһөҙлөгөбөҙҙө һәм ярҙамға мохтажлығыбыҙҙы танып, Аллаһҡа йүнәлеү, Унан ярҙам һорау. Раббыбыҙға иң яҡын булған бер мәл ул. Доға ҡылғанда, устарыбыҙҙы асып һорайбыҙ һәм үтенәбеҙ, Аллаһҡа теләктәребеҙҙе белдерәбеҙ.

Доға өсөн махсус урын һәм ваҡыт кәрәкмәй. Һәр ваҡыт һәм бөтә ерҙә лә доға ҡыла алабыҙ. Әммә ҡайһы бер ваҡыттар һәм ҡайһы бер урындар доға ҡылыу өсөн иң яҡшыһы һанала. Изге көндәр һәм төндәр, йома көнө, ифтар һәм сәхәр ваҡыты - былар доға өсөн айырым бәрәкәтле эйә ваҡыт. Ҡәғбә һәм Ғәрәфәт - доғалар ҡабул ителгән мөбәрәк урындар.

Аллаһ ихлас күңелдән ҡылынған доғаларҙы ҡабул итә. Доға ҡылған ҡолдарын буш ҡалдырмай. Әммә доғаның ҡабул ителеүен ашыҡтырмаҫҡа кәрәк, сөнки Аллаһ ҡоло өсөн нимә изгелек булып килерен бөтәһенән дә яҡшыраҡ белә.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был хаҡта әйткән: «Һәр берегеҙҙең доғаһы, ашыҡтырып: «Күпме тапҡыр Раббымдан һораным, тик Ул минең доғаларымды ҡабул итмәне», - тиеп әйткәнгә ҡәҙәр ҡабул ителә» (Бохари, Дәғүәт, 22).

Доға - ғибәҙәт, ул Аллаһ менән һәр ваҡыт бәйләнеш тоторға ярҙам итә. Аллаһты, ауыр ваҡыттарҙа иҫкә алған кеүек, муллыҡ һәм тыныслыҡ ваҡытында ла иҫебеҙгә төшөрәбеҙ, һәр уңайлы осраҡта Уға ялбарабыҙ.

Башҡаларҙың рәхмәтенә ирешеү - доға ҡылыу кеүек үк мөһим. Әсәйҙәргә өҫтәл әҙерләргә ярҙам итеү, кемгәлер һыу биреү, бәләгә эләккән дуҫыңа ярҙам итеү, атай һәм әсәйеңдең, бигерәк тә мөьмин һәм ғалим булған уҡытыусыларыбыҙҙың, ҡунаҡтарҙың, күршеләрҙең, етемдәрҙең, фәҡирҙәрҙең, өлкәндәрҙең рәхмәтен алыу - хуплауға лайыҡ ғәмәлдәр. Үҙебеҙ ҙә улар өсөн, мосолман ҡәрҙәштәребеҙ өсөн доға ҡылырға тейешбеҙ.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Доға – ул ғибәҙәттең асылы».

**(Тирмиҙи, Дәғүәт, 1)**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Минең ҡолдарым һинән Минең турала һораһа, Мин бит яҡын, Мине саҡырғанда, Мин саҡырыусыға яуап бирәм».

**(Бакара сүрәһе, 186-сы аят)**

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Именлек һәм муллыҡ осоронда Аллаһты хәтереңдә тот, Һин ҡыҫырыҡланған ваҡытта, Ул һине иҫләр».

**(Әхмәд бин Хәнбәл, Муснәд, I, 307)**

Йәә, Аллаһ!
Мөхәммәттең Өммәтен һаҡла! Гонаһтарын ярлыҡа. Үҙеңдең Мәрхәмәтең менән Ярҙамыңдан айырма.

# ТЫҢЛАЙЫМҺИНЕ ҠОЛОМ

Бер мосолман, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә зекер әйтеп, Уға доға ҡылыр өсөн һәр төн һайын торған. Был мосолманға шайтан әйткән:

- Әй, Аллаһҡа күп зекер ҡылыусы кеше, төндәр буйы Аллаһты саҡырыуҙарыңа кем яуап бирә? Бер яуап та алманың. Ҡасанға тиклем һин доға ҡыласаҡһың?

Кеше үпкәләп, башын иҙәнгә һала һәм йоҡлап китә. Төшөндә уға әйтелә:

- Аңыңа кил, уян! Ни өсөн һин зекер менән доғаларыңды ҡалдырҙың? Нишләп һин ялыҡтың?

Кеше әйтә:

- Яуап юҡ бит, бер кем дә: «Тыңлайым һине», - тиеп әйтмәй. Мәрхәмәттән мәхрүм ҡалыуҙан ҡурҡам.

Уға яуап итеп әйтелә:

- «Тыңлайым һине», - тигәненә күрә, һин: «Йәә Аллаһ!» - тиһең. Әгәр ҙә Ул: «Тыңлайым һине, ҡолом», - тиеп әйтмәһә, һин Аллаһҡа зекер әйтеп доға ҡыла алмаç инең. Аллаһ күңелеңә хәбәр ебәрә, шуға ла Унан һорайһың. Көс түгәһең, мәсьәләнең сиселешен эҙләйең, сөнки Аллаһ, һине үҙенә яҡынайтып, аяғыңдағы бауҙарҙы сискән. «Йәә Раббым!» - тигән һәр һүҙеңә Аллаһтың: «Тыңлайым һине», - тигән яуабы килә. Күңеле Аллаһҡа зекер, доға ҡылыуҙан йыраҡ кеше быңдай яуаптан йыраҡ, уға: «Йәә, Раббым!» - тиеп әйтеү насип түгел. Телендә һәм күңелендә уның йоҙаҡ. Ул илап зарланмаһын өсөн, бәлки, Аллаһ уға ғазаптарҙы, һыҙланыуҙарҙы, хәсрәттәрҙе, бәләләрҙе һәм күңелһеҙ хәлдәрҙе бирмәгәндер. Аңла, һине Аллаһ доға ҡылырға мәжбүр иткән михнәттәр һәм ыҙалар был доньяһ зиннәттәренән, хакимлығынан яҡшыраҡ. Ғазаптарҙан инрәп сыҡмаған доғалар һалҡын. Михнәттәр ваҡытында ҡылынған доғалар күңелдең иң түренән түгелә.

Мәүләнә Йәләлетдин Руми



# МИН ҺЕПЕРҘЕМ, Ә ҺИН ҺЫУ ҠОЙ



Бер нисә ай инде ямғырҙың тамсыһы ла ергә төшмәй. Кипкән һыу ятҡылыҡтарында күләүек кеүек кенә ҡалған бысраҡ батҡаҡтан башҡа хайуандарға эсер һыу юҡ. Ә кешеләр ҡоҙоҡтағы ҡороп бөткән тиерлек һыу менән хушһына.

Аллаһҡа ялбарыуҙан башҡа сара юҡлығын һәр кем аңлай. Күп көндәр ямғыр һорап доға ҡылалар, малдарҙы ҡорбанға салалар, етемдәргә саҙаҡа тараталар, әммә теләгән һөҙөмтә юҡ та юҡ.

Хәлдәр уғата ҡырҡыулаша. Бер нисә ауылдың кешеләре бергә йыйыла һәм йәнә ямғыр һорап доға ҡыла. Бөтә ауыл халҡы – балалар, йәштәр һәм ҡарт-ҡоро – яланға йыйылған. Ҡалаларҙан һәм күрше ауылдарҙан дин әһелдәре килгән. Кешеләр «Йә-Син» сүрәһен һәм салауаттар уҡый, саҙаҡа тарата, ҡорбан сала. Сәғәттәр буйына доға ҡылалар. Ҡараштар күккә төбәлгән. Әммә унда бер генә ҡара тап әҫәре лә күренмәй.

Икенсе көнөнә тағы ла, йыйылышып, ямғыр һорап доға ҡылырға сығырға йыйыналар. Көн башлана, тамам яҡтыра. Көн кисәгегә ҡарағанда ла эҫерәк булмаҡсы. Ҡатындар иртә менән, үҙҙәренең сиратын көтөп, ҡоҙоҡ янына, шул тиклем мохтажлыҡ кисергән һыуҙарын алырға теҙелгән. Ә ауыл ир-егеттәре, өй эштәрен тамамлап, яланға ямғыр һорап доға ҡылырға барырға әҙерләнә. Ҡаланан мөфтөй һәм юғары дин әһелдәре килергә тейеш.

Төшкә табан тирә-яҡ ауыл халҡы ла килә башлай. Дин әһелдәре лә килә. Бына-бына доға ҡылыу башланырға тейеш. Ошо ваҡытта оло йәштәге бер ярлы ҡатын үҙенең ихатаһына сыға. Ауырыуы һәм картлығы арҡаһында, ул яланға

бара алмай. Ямғыр булмауына нык борсола һәм, Аллаһҡа тәүбә ҡылып, гелән гөнаһтарын ярлыҡауҙы һорай. Ул өмөтөн юғалтмай, Аллаһ ҡолдарына мәрхәмәтле, күркәм бер көндө ямғыр мотлаҡ яуасаҡ, тип ышана.

Сир бөкһә лә, оло йәштәге ҡатын ауырлыҡ менән ихатаһын һеперә. Тураймаған билен аҙ ғына төҙәйтеп, йәш тулы күҙҙәре менән күккә ҡарай. Һеперер алдынан, саң күтәрелмәһен өсөн, һәр ваҡыт ергә һыу һибер ине. Был юлы, һыу булмау сәбәпле, һибә алманы. Уның ни ҡәҙәр ямғыр көткәнен кем белә инде!

Ҡапыл ҡарсыҡтың теленән ошо һүҙҙәр ысҡына:

- Йәә, Раббым! Мин һеперҙем, ә һин һыу ҡой!

Ул китеп өлгөрмәй, шунда уҡ күк һыҙаты ҡарая. Ямғыр болоттары, тиҙ арала яҡынлашып, бөтә күкте ҡаплай. Ярты сәғәттән ямғыр биҙрәнән ҡойған кеүек яуа башлай. Ә доға ҡылырға йыйынған күмәк халыҡ, эштең ниҙә икәнен дә аңлап өлгөрмәйенсә, баштан-аяҡ һыулана. Ҡыуаныстарынан илайҙар, шул уҡ ваҡытта, был ваҡиғаның серен аңлай алмай тәҫирләнеп, өйҙәренә таралалар.



## МОСОЛМАН БУЛЫУЫБЫҘ БЕҘГӘ НИМӘ ЙӨКЛӘЙ?

* Уның ҡоло булыуыбыҙ менән барыбыҙ ҙа Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә бурыслыбыҙ.

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә тиңдәшлек ҡылмайбыҙ

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән башҡа һис нимәне, һис кемде илаһ тип ҡабул итмәйбеҙ

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне барыһынан да нығыраҡ яратабыҙ.

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә генә табынабыҙ.

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә генә доға ҡылабыҙ, Унан ғына ярҙам һорайбыҙ.

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә генә өмөт бағлайбыҙ, беҙҙе ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫына ышанабыҙ.

* Барлыҡ изгелек Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән, Уға рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

* Намаҙҙы тик Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә өсөн ҡылабыҙ, Уға ғына табынабыҙ.

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең мәрхәмәтенә өмөтләнәбеҙ һәм Уның язаһынан ҡурҡабыҙ.

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә нимә эшләргә бойорған, шуны эшләйбеҙ.

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә нимә эшләүҙән тыйған, шунан тыйылабыҙ.

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне һәр ваҡыт яратабыҙ һәм ниндәй генә хәл булмаһын, Уның исемен иҫкә алабыҙ.

* Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Ҡәләме булған Изге Ҡөрьәнде уҡырға, тыңларға һәм аңларға тырышабыҙ.

СӨНКИ БЕҘ – МОСОЛМАНДАР.

# КЕМ ҠОТҠАРЫР?

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Недж өлкәһенә хәрби поход ойоштора. Походты тамамлаған яугирҙар бик арыған була, ә Мәҙинәгә ҡәҙәр оҙайлы юл үтәһе бар әле. Төш мәле, томра. Ҡыуаҡлыҡтар һәм ағас баҫҡан үҙәнгә еткәс, ялға туҡтайҙар. Сәхәбәләр, Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ял итһен өсөн, ағас күләгәһендә уға иң уңайлы урынды һайлай, ә үҙҙәре арыраҡ, күләгәлерәк урындарға урынлаша.

Эҫелә, юлда йонсоған яугир-мосолмандар шунда уҡ йоҡлап китә. Пәйғәмбәребеҙ ҙә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡуйы япраҡлы ағас аҫтына ята. Үҙенең ҡылысын ботаҡҡа элә лә, тиҙҙән йоҡоға тала.

Дошмандар йәшеренеп кенә мосолман ғәскәрен эҙәрлекләй. Улар өсөн уңайлы осраҡ була был. Араларынан Ғәүрәс исемле мөшрикте ебәреп, Пәйғәмбәрҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үлтертергә теләйҙәр. Берәү ҙә һиҙмәҫлек итеп, Ғәүрәс һөйөклө Пәйғәмбәребеҙгә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҡыная. Ағаста эленеп торған ҡылысты ала һәм Аллаһ Илсеһенең өҫтөнә күтәрә. Шул ваҡыт Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөбәрәк күҙҙәрен асҡанын күрә һәм һорай:

- Әй, Мөхәммәт! Хәҙер кем һине минән ҡотҡарыр?

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙен үлтерергә яҫҡынған дошманынан тамсы ла ҡурҡмайынса әйтә:

- Аллаһ!

Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ныҡлы иманы, Аллаһҡа ҡаҡшамаҫ тәүәккәллеге мөшрикте хайран ҡалдыра. Унның ҡулынан ҡылысы төшөп китә. Төшөп барған ҡылысты эләктереп, Пәйғәмбәребеҙ ҙә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ сиратында һорай:

- Яҡшы, ә хәҙер минән һине кем ҡотҡарыр?

Булған хәлгә шаҡ ҡатҡан кеше әйтә:

- Туҡта! Әле үк мине яҙалама!

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һорай:

- Аллаһтан башҡа илаһ юҡлығын һәм минең Аллаһ Рәсүле икәнемде таныйһыңмы?

- Юҡ, танымайым. Әммә мин вәғәҙә бирәм: һиңә ҡаршы һуғышмайым һәм һинең менән һуғышҡан бер ниндәй ҙә төркөмгә ҡушылмайым, - тип яуап бирә теге.

Ғүмерен ҡыйырға килгән мөшрикте Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ебәрә.

Тауышты ишетеп, сәхәбәләр килеп етә. Уларҙың аптыраулы ҡарашы аҫтында мөшрик китә һәм оҙаҡламай күҙҙән юғала. Мәрхәмәтле һәм йомшаҡ мөнәсәбәт уны тетрәндерә. Дуҫтары янына әйләнеп ҡайтҡас, унның ауыҙынан шундай һүҙҙәр сыға:

- Әле генә мин Иң Яҡшы Кешенән килдем.

(Бохари, Йыһат, 84)

# ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘ r АЛЛАҺТЫ НЫҠ ЯРАТҠАН

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәләм) Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне барыһынан да нығыраҡ ратҡан. **Аллаһты ратҡан кеүек ул бер кемде лә, бер нәмәне лә ратмаған.** Раббыһынан ошо хисте даими ҡылыуын һорап, устарын асҡан һәм доға ҡылған: *«Йәә, Аллам! Һине һөйөүемде миңә үҙемдән, ғаиләмдән һәм һыуыҡ һыуҙан да һөйөклө ҡыл!»* (Тирмиҙи, Дәғүәт, 72).

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәләм) **бөтә ғәмәлдәре менән Аллаһтың һөйөүен яуларға ынтыла**. Аллаһты ратҡан өсөн, Аллаһтың мәхлүҡтәренә лә миһырбанлы, мәрхәмәтле була. Һәр хәләтендә һәм ғәмәлендә Аллаһтың ризалығын алырға тырыша. Ул йыш ҡына ошондай доғаны ҡыла: *«Йәә, Аллаһым! Һинән Һине һөйөүҙе, Һине һөйгән кешене һөйөүҙе һәм Һинең һөйөүеңә ирештергән ғәмәлде һөйөргә теләйем!»* (Тирмиҙи, Дәғүәт, 72).

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәләм) әйткән: *«Аллаһты хәтерләүсе һәм Уны хәтерләмәүсе араһындағы айырма, тере һәм үлек араһындағы айырма кеүек»* (Бохари, Дәғүәт, 66). **Ул Аллаһты күп зекер иткән.** Һәр эшен Аллаһ исеме менән башлаған һәм Уның гүзәл Исемдәрен, сифаттарын иҫкә алыуҙан күңел тыныслығы тапҡан.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәләм) **Аллаһтың бойороғон үтәмәүҙән нык ҡурҡҡан**. Раббымдың мөхәббәтенән һәм рәхмәтенән мәхрүм ҡалып ҡуймайым тигән уй һәр ваҡыт күңелен борсоп торған. Аллаһты ололап һәм ратып йөрәге тулҡынланған. Аллаһҡа итәғәте, буйһоноуы һоҡланғыс булған, ул әйткән: *«Мин - һеҙҙең арала Аллаһты иң нык белеүсе һәм иң нык ратыусы»* (Бохари, Истисам, 5). Аллаһтың

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Йәә, Аллаһ! Һин минең Раббым. Һинән башҡа илаһ юҡ. Һин мине ралтҡанһың һәм мин Һинең ҡолоң. Мин хәлемдән килгәнсе Һиңә биргән вәғәҙәмә һәм антыма тоғро ҡалам. Ҡылған яуызлыҡтарымдан Һиңә һыйынам. Һинең миңә күрһәткән мәрхәмәтеңде танийым. Һинең алдында гонаһтарымды танийым. Ғәфү ит мине, Һинән башҡа бит бер кем дә гонаһтарҙы ярлыҡамаясаҡ!»

**(Бохари, Дәғүәт, 2)**



бөйөк язаһы тураһында ла онотмаған. Көслө ел иҫә башлаһа, йәшен йәшнәһә, ҡара болоттар элеп торһа, элекке халыҡтарҙың һәләк булғанын иҫенә төшөргән. Бындай саҡта, Аллаһтың язаһынан ҡурҡып, намаҙ уҡыған һәм доға ҡылған. Изге Ҡөрьәнде уҡығанда, тыңлағанда, намаҙ ҡылғанда, Аллаһтың язаһынан ҡурҡып, йөрәге тетрәнгән, ҡайһы ваҡыт күҙ йәштәрен тыя алмай илаған.

**Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәләм) һәр ваҡыт Аллаһтың шәфҡәтенә, ярҙамына өмөтләнгән һәм үҙен Уға тапшырған.** Һижрәт ваҡытында, Мәккә мөшриктәре улар йәшеренгән мәмерйәгә яҡынлашҡас, Әбү Бәкер, пәйғәмбәребеҙгә зыян ҡылырҙар, тиеп ҡурҡа. Шул ваҡыт ул әйтә: *«Ҡурҡма! Аллаһ беҙҙең менән бергә»*.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһтың яҙаһы бик ҙур икәнен белгән. Әммә бер ҡасан да Уның рәхмәтенән өмөтөн өҙмәгән. **Ҡурҡыу менән өмөт араһында йәшәгән.** Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) булыуына ҡарамаҫтан, Ул да тик Аллаһтың мәрхәмәте менән генә яҙанан ҡотола алыуын аңлатҡан. Ул: *«Доға - ғибәҙәт асылы»,* - тигән (Тирмиҙи, Дәғүәт, 1) һәм, Аллаһтың тоғро ҡоло булыр өсөн, һәр мөмкинлекте файҙаланып, доға ҡылған, ялбарған. Унан ярҙам, мәрхәмәт һәм гөнаһтарҙы ярлыҡауын үтенгән.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) **Аллаһҡа иң күп рәхмәтен белдереүсе кешеләрҙән булған**. Көнө-төнө ҡылған ғибәҙәттәре аша Раббыбыҙға мөхәббәтен еткерергә тырышҡан. Фарыз ғибәҙәттәр менән сикләнмәгән, Аллаһҡа сикһеҙ һөйөүен белдерер өсөн, өҫтәмә ғибәҙәттәр ҡылған. Айҙың билдәле бер көндәрендә ураҙа тотҡан, ә төндәрен намаҙ ҡылған. Оҙаҡ тороуҙан хатта аяҡтары шешкән.

Бер тапҡыр, үткәндәге һәм киләсәктәге бөтә гонаһтары ярлыҡана тороп, үҙен ни өсөн шулай йонсотоуы хаҡында һорағас, ул шулай тип яуап бирә: *«Аллаһтың рәхмәтле ҡоло булырға тейеш түгелменме ни мин?»* (Бохари, Тәфсир, 48-се Сүрә, 2).

Юлбашсы һәм бар яҡтан да өлгө булып торған Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ысын шөкөр итеү - Аллаһҡа буйһоноу һәм табыныу икәнен күрһәтә. Һәр ваҡыт Аллаһҡа шөкөр итеүсе ҡол булырға ынтыла. Аллаһтан үтенә: *«Йәә Аллаһым! Һине иҫкә алыусы, ниғмәттәреңә шөкөр итеүсе һәм иң күркәм рәүештә табыныусы булырға миңә ярҙам ит!»* (Әбү Дауыт, Витр, 26). Беҙгә лә ошо доғаны ҡылырға кәңәш итә. **Муллыҡ ваҡытында ла, етешһеҙлек ваҡытында Аллаһты маҡтауҙан туҡтамай.** Аллаһтың һәр ниғмәте өсөн, ул: «Әлхәмдүлилләһ», йәғни «Аллаһҡа дан», тигән, йәғни ни тойған, шуны һүҙ аша белдергән.



بِسْمِ اللّٰهِ الرَّحْمٰنِ الرَّحِيمِ

اَللّٰهُ لَٓا اِلٰهَ اِلَّا هُوَ اَلْحَيُّ الْقَيُّومُ لَا تَأْخُذُهُ سِنَةٌ وَلَا نَوْمٌ لَهُ
مَا فِي السَّمٰوَاتِ وَمَا فِي الْاَرْضِ مَنْ ذَا الَّذِي يَشْفَعُ
عِنْدَهُ اِلَّا بِاِذْنِهِ يَعْلَمُ مَا بَيْنَ اَيْدِيهِمْ وَمَا خَلْفَهُمْ وَلَا
يُحِيطُونَ بِشَيْءٍ مِنْ عِلْمِهِ اِلَّا بِمَا شَٓاءَ وَسِعَ كُرْسِيُّهُ
السَّمٰوَاتِ وَالْاَرْضَ وَلَا يَؤُدُهُ حِفْظُهُمَا وَهُوَ الْعَلِيُّ
الْعَظِيمُ

*Аллаһтан башҡа илаһи ҡөҙрәткә эйә һәм тәңре булырҙай һис бер кем юҡ. Ул мәңге, тере. Заты менән Ул һәр ваҡыт бар. Уны йоҡомһорау ҙа, йоҡо ла тотмай. Күктәрҙәге, Ерҙәге бөтөн нәмә Уныҡы ғына. Аллаһтың рөхсәте булмағанда, бер кем дә бер кемдең дә гөнаһтарын ярлыҡай алмай. Ул Үҙе яралтҡандарҙың алда нимә күрәсәген, үткәнендә нимә күргәндәренең барыһын да белеп тора. Кешеләр уның ғилеменән башҡа бер нәмә лә эшләй алмаҫ. Уның көрсийе Күктәрҙе һәм Ерҙе үҙ эсенә алған. Аллаһҡа Күктәрҙе, Ерҙе һаҡлап тороу һис тә ҡыйын түгел. Аллаһ ғәйәт бөйөк, ғәләмәт тә олуғтыр.*

*(Баҡара сүрәһе, 255-се аят)*

# ҺОРАУҘАР

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(бул / япраҡ та / яратһағыҙ / доға / яратһын / тышҡы / яҡынмын / йөрәктәр / Аллаһты / уларҙың үҙҙәрендә)**

1. «Беҙ кешеләргә аяттарыбыҙҙы ......... һәм ......... донъяларында күрһәтербеҙ».
2. «Аллаһ ерҙәге һәм диңгеҙҙәге бөтә тереклек хаҡында белә, хатта ......... Уның ризалығынан башҡа төшмәй».
3. «Әгәр Аллаһ низер теләһә, Уға - ........., тиеп әйтеүе етә, шунда уҡ тормошҡа аша».
4. «Кемдәр иман килтергән, улар ......... күберәк ярата».
5. «Әйт: «Әгәр һеҙ Аллаһты .........., миңә буйһоноғоҙ, Аллаһ та һеҙҙе ......... һәм гонаһтарығыҙҙы ярлыҡаһын».
6. «Белегеҙ, Аллаһты хәтерләп кенә, ......... тыныслыҡ таба».
7. «.......... - ул ғибәҙәттең асылы».
8. «Әгәр ҡолдарым Минең турала һинән һораһалар, әйт, мин уларға бик .......... Миңә ялбарып ҡылған доғаларын ҡабул итәмен».

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. Имандың түбән татыр өсөн, мосолман ошо сифаттарҙың ҡайһыһына эйә булырға тейеш?**

А. Аллаһты һәм Уның Илсеһен барыһынан да ныҒыраҡ яратырға.

Б. Кемдәрҙе яратаһың, шуларҙы Аллаһ хаҡы өсөн яратырға.

В. Диндән сығыу - утҡа ташланыу менән бер, тиеп иҫәпләргә.

Г. Был сифаттарҙың бөтәһенә лә эйә булырға.

**2. Доғалар тураһындағы аңлатмаларҙың ҡайһыһы дөрөҫ түгел?**

А. Доға өсөн махсус урын һәм ваҡыт кәрәкмәй.

Б. Доға өсөн махсус тәһәрәт алырға кәрәк.

В. Доға ярҙамында һәр ваҡыт Раббыбыҙ менән бәйләнеш булдырабыҙ.

Г. Мохтаж ваҡытыбыҙҙа ярҙам итһен өсөн, муллыҡ мәлендә Раббыбыҙға доға ҡылайыҡ.

**3. Пәйғәмбәребеҙҙең Аллаһты яратыуы тураһында һөйләгәндә, ниндәй фразаны ҡулланырға ярамай.**

А. Аллаһтың исемен күп иҫкә алған.

Б. Барлыҡ һүҙҙәре һәм ғәмәлдәре менән Аллаһтың ризалығына лайыҡ булырға теләгән.

В. Биш намаҙ мәлендә сәхәбәләренә имам булған.

Г. Аллаһҡа рәхмәтен белдерер өсөн, күп доға уҡыған һәм ғибәҙәт ҡылған.

**4. Был сифаттарыбыҙҙың ҡайһыһы иманыбыҙҙың емеше түгел?**

А. Иманыбыҙ арҡаһында, беҙҙе кешеләр бик ярата.

Б. Иман беҙгә сикһеҙ өмөт тойғоһон бирә.

В. Иманыбыҙ бөтә барлыҡҡа изгелекле һәм мәрхәмәтле булырға ярҙам итә.

Г. Иманыбыҙ ғәмәлдәребеҙҙе контролдә тоторға ярҙам итә.

**5. Аллаһтың барлығын һәм берлеген аңлатыу өсөн, ниндәй фразаны ҡулланырға ярамай?**

А. Һәр әҫәрҙең үҙ сәнғәткәре була. Был йыһандың да Яралтыусыһы бар.

Б. Кешенең организмының камил төҙөлөшө һәм функциялары үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә алмай. Улар Яралтыусының барлығы хаҡында һөйләй.

В. Ҡояш ҡалҡыуы һәм байыуы, көн менән төндөң, йыл миҙгелдәренең алмашыныуы - бөтәһе лә үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәгән. Йыһандағы был камил тәртип Яралтыусының барлығы тураһында һөйләй.

Г. Һәр кеше изгелекте йәки яуызлыҡты һайлау хоҡуғына эйә.





# ҺОРАУҘАРҒА ЯУАПТАР

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ**

1. уларҙың үҙҙәрендә / тышҡы
2. япраҡ та
3. бул
4. Аллаһты
5. яратһағыҙ / яратһын
6. йөрәктәр
7. доға
8. яҡынмын

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ**

1. Г 2. Б 3. В 4. А 5. Г





### ГҮЗӘЛЛЕК МЕНӘН ИЗГЕЛЕКТЕҢ СИМВОЛЫ

# ФӘРЕШТӘЛӘРГӘ ИНАНЫУ

- *Күренгән һәм күренмәгән заттар*
- *Фәрештәләргә инаныу*
- *Фәрештәләрҙең үҙенсәлектәре һәм вазифалары*
- *Фәрештәләргә инаныу беҙгә нимә бирә*
- *Шайтандың үҙенсәлектәре*
- *Пәйғәмбәребеҙ ﷺ һәм фәрештәләр*





# ФӘРЕШТӘ ТАУЫШЫ

Хәлил - бик аҡыллы, иғтибарлы һәм уйланырға ятраҡан малай. Һәр ваҡыт күргән ваҡиғаларҙың, йә уйҙарына килгән фекерҙәренең сәбәптәрен эҙләй һәм күп осраҡта ныҡлы һығымталар яһай.

Бер көндө атаһына былай тине:

- Атай! Әсәйемдең беҙҙең өсөн эшләп, ныҡ арығанын күреп, ҡайһы ваҡыт ныҡ борсолам. Шул мәлдә ысын күңелдән ярҙам иткем килә һәм мин ярҙам итәм. Ә ҡайһы берҙә урамға сығып уйнағым килә һәм шулай эшләйем дә, ә үҙем беләм: ул минең ярҙамыма мохтаж. Әсәйемде ныҡ яратһам да, ни өсөн улай ҡыланамындыр, белмәйем.

Атаһы Хәлилдең былдай һорауҙарына күнеккән инде. Уға улының хистәрен йәшермәйенсә, асыҡтан-асыҡ һөйләшеүе бик оҡшай.

- Улым, былдай хәлдәр һинең менән генә түгел, барыһы менән дә була, - тиеп яуаплай ул Хәлилгә.

- Ысынмы, атай? Валлаһи, мин бик шатмын. Үҙемде ғәйепләнем, сөнки мин генә шулай тиеп уйланым. Мин быный сәбәбен белергә теләйем. Был бит бер-береһенә ҡаршы килгән фекерҙәр, шулай түгелме?

- Әлбиттә, шулай. Кеше ҡайһы ваҡыт төрлөсә фекер йөрөтә, сөнки даими рәүештә күҙгә күренмәгән ҡапма-ҡаршы ике йән эйәһенең йоғонтоһо аҫтында була. Ул йән эйәләренең береһе – фәрештә, ә икенсеһе – шайтан.

- Атай, ә фәрештә нимә эшләй?

- Фәрештә беҙгә изге нәсихәттәрен бирә. «Мәрхәмәтле бул!» - ти. Ул беҙҙең насар ҡыланыуыбыҙҙы теләмәй. Әгәр насар ғәмәл ҡылһаҡ, фәрештә быныӊ өсөн борсола.

- Ә шайтан нимә эшләй?

- Ул һәр саҡ күңелебеҙгә насарлыҡ сәсә. Насар һүҙҙәр һөйләүебеҙҙе, кешеләрҙе рәнйетеүебеҙҙе көсәй. Аллаһтың бойороҡтарына ҡаршы барыуыбыҙҙы теләй. Өлкәндәрҙең ихтыярына ҡаршы барһаҡ, атай менән әсәйҙе тыңламаһаҡ, ул ҡыуана һәм бәхетле була.

- Һуң атай! Мин бит берәй яҡшы йәки насар ғәмәл ҡылырға йөрөгәндә: «Шулай эшлә!» йәки «Былай эшләмә!» - тигән бер ниндәй ҙә эске тауышты ишетмәйем!

- Улым, фәрештә менән шайтандың тауыштары беҙҙең тауыштарға оҡшамаған. Улар уйҙарыбыҙға туранан-тура йоғонто яһарға тырыша. Әйҙә, һин килтергән миҫалда ҡарайыҡ. Һин: «Әсәйем бик ныҡ арый. Бер әҙ ял итеп алһын өсөн, ярҙамсыһы ла юҡ. Үҙенең көсөн беҙгә сарыф итә. Уға әҙерәк ярҙам итәйем әле!» - тиеп уйлаған саҡта, белеп ҡуй, ул - фәрештәнең тауышы. Әгәр һин, әсәйеңдең ниндәй хәлдә булыуына ҡарамаҫтан: «Ә әсәйемдең арыуында минең ни эшем бар! Бераүгә лә ярҙам итергә йыйынмайым,» - тиеп уйлайһың икән, тимәк, белеп ҡуй, шайтан һине аҙаштырырға тырыша. Ҡайһы берҙә шайтандың йоғонтоһо еңә һәм ул һине үҙең теләмәгән рәүештә ҡыланырға мәжбүр итә. «Әгәр эшләй икән, өй өсөн эшләй. Барыһы ла үҙ бурыстарын үтәй. Ул арый, ярай, ни хәл итәһең!» - тиеп уйлата ул һине.

Бына ошо ваҡыт беҙ шунда уҡ туҡтарға һәм шайтандың тоҙағына эләкмәҫкә тейешбеҙ.

Мин һиңә, фәрештә менән шайтандың тауышын тойор өсөн, йәнә бер сер асам. Әгәр Аллаһ һәм Уның Пәйғәмбәре (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙҙән теләгәнде эшләргә теләһәк, был - фәрештәнән килгән теләк. Әгәр ниндәйҙер быға ҡаршы теләк булһа – ул шайтандан килә. Шайтан беҙҙе диндән, тимәк матурлыҡ менән изгелектән йырағайтҡыһы килә.

- Атай, ә ниңә безгә фәрештә менән шайтанды күреү мөмкин түгел? Миңә фәрештә менән шайтан тураһында һөйлә әле?

- Уларҙың төҙөлөштәре беҙҙекенән айырыла, шуға ла уларҙы күреү мөмкин түгел. Икенсе ваҡыт был хаҡта һиңә һөйләрмен. Хәҙер миңә эшкә барырға кәрәк, улым.

Хәлил атаһына рәхмәт әйтте һәм фәрештә менән шайтан хаҡында уйлана башланы...

М. Йәшәр ҠАНДӘМИР



# КҮРЕНГӘН ҺӘМ КҮРЕНМӘГӘН ЗАТТАР

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә - Ул беҙ йәшәгән донъяла барыһын да яралтыусы һәм йыһанда тәртип урынлаштырыусы. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең мәхлүктәре иҫәпһеҙ.

Уларҙың ҡайһыларын күрә алабыҙ, ә ҡайһыларын - юҡ. Ғаләмдә йәшәгән мәхлүктәрҙең бер өлөшөн күҙҙәребеҙ менән күрә, башҡа һиҙеү органдары менән һиҙә алабыҙ. Шулай уҡ беҙ күрә һәм һиҙә алмаған йән эйәләре лә бар.

Нимәлер барлығын таныу өсөн, беҙгә уны күреү мотлаҡ түгел. Күреүе мөмкин булмаһа ла, уларҙың барлығын беҙ таныған күп әйберҙәр бар.

Мәҫәлән, күҙҙәребеҙ менән аҡылды, мөхәббәтте, рәхимлелекте һәм бәхетте күреү мөмкин түгел. Әммә барыһы ла белә, улар бар. Шулай уҡ күҙҙәребеҙ менән ток үткәргестәрҙәге электр ағымын, һауалағы тауыш тулҡындарын күрә алмайбыҙ. Был миҫалдарҙан шуны аңлайбыҙ: мәхлүктәр донъяһы беҙ күргәндәрҙән генә тормай.

Кешеләр, хайуандар, үҫемлектәр, тауҙар, диңгеҙҙәр, ағастар, сәскәләр, ай, ҡояш һәм йондоҙҙар күренгән заттарҙан булып тора. Фәрештәләр менән шайтандар күҙгә күренмәгән заттарға инә. Күреүебеҙҙең сиктәре сикле булыуы сәбәпле, күҙҙәребеҙгә уларҙы күреү һәләте бирелмәгән. Фәрештәләр менән шайтандарҙы күреү мөмкин булмаһа ла, уларҙың барлығына ышанабыҙ, сөнки Раббыбыҙ изге Ҡөрьәндә фәрештәләр һәм шайтандарҙың барлығын хәбәр иткән.



# ФӘРЕШТӘЛӘРГӘ ИНАНЫУ

Фәрештәләр - Аллаһтың бойороғо буйынса төрлө-төрлө бурыстарҙы үтәү өсөн барлыҡҡа килтерелгән заттар. Беҙ фәрештәләрҙе һиҙеү ағзалары аша тоймайбыҙ. Шуға күрә улар хаҡындағы белемде Изге Ҡөрьән менән Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һүҙҙәре аша ғына алабыҙ. Фәрештәләрҙең барлығын хәҡиҡи таныу - Ислам ғаҡыйҙаһының (вероубеждение), инаныу ғилеменең нигеҙе. Фәрештәләрҙе инҡар итеү - Раббыбыҙ Аллаһты, Пәйғәмбәрҙе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) аша тапшырылған Изге яҙманы һәм ул алып килгән диндә инҡар итеү. Аллаһ пәйғәмбәрҙәргә Үҙенең үәхиҙәрен фәрештәләр аша тапшырған. Был осраҡта Аллаһтың үәхи ебәреүенә, пәйғәмбәрҙәргә, Изге яҙмаларға инанған кеше, шулай уҡ фәрештәләргә лә инанырға тейеш.

### Фәрештәләрҙең үҙенсәлектәре

Фәрештәләрҙе кешеләрҙән айырып торған бик күп төрлө үҙенсәлектәр бар. Фәрештәләр нурҙан барлыҡҡа килтерелгәндәр. Улар ҡеүәтле һәм көслө. Бик тиҙ йөрөй алалар. Шуға күрә алыҫ араларҙы ла бик ҡыҫҡа ваҡыт арауығында үтергә һәләтлеләр.

Фәрештәләр - Аллаһтың биргән бойороҡтарын үтәүсе заттар. Улар гел генә Аллаһтың әмерҙәрен үтәү һәм табыныу менән мәшғүлдәр. Раббыбыҙҙың бойороғона ҡаршылашмайҙар, гөнаһ ҡылмайҙар, Аллаһтың тыйыуҙарын боҙмайҙар, бер мәхлүккә лә зарар килтермәйҙәр. Фәрештәләрҙең енесе булмай. Улар ашамайҙар, эсмәйҙәр һәм йоҡламайҙар. Эш һәм ғибәҙәт ҡылыу уларҙы арытмай ҙа, ялҡытмай ҙа.

### Фәрештәләрҙең вазифалары

Фәрештәләрҙең бурыстары – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә табыныу һәм Уның бойороҡтарын үтәү. Аллаһ тарафынан йөкмәтелгән вазифаларын фәрештәләр урынеренә еткереп башҡара. Дөйөм вазифалары Аллаһҡа буйһоноу һәм ғибәҙәт ҡылыу булған фәрештәләрҙең шәхси вазифа йөкмәтелгәндәре лә бар. Улар араһында төп дүрт фәрештә:

**Ябраил.** Ул пәйғәмбәрҙәргә Аллаһтан алған үәхиҙәрҙе тапшырырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта башҡа фәрештәләргә Аллаһтың бойороҡтарын еткерә.



**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Фәрештәләр - нурҙан,
ендәр - саф уттан,
ә Әҙәм – балсыҡтан яратылған».

**(Мөслим, Зөһд, 10)**



**Ғазраил.** Аллаһтың ихтыяры буйынса, тере йән эйәләренең үлер ваҡыты еткәс, йәнен алырға бурыслы. Шул сәбәпле Ғазраил Изге Ҡөрәндә «үлем фәрештәһе» тиеп аталған.

**Микаил.** Тәбиғәт күренештәре менән идара итергә һәм мәхлүҡтәргә ризыҡ бүлеп бирергә бурыслы.

**Исрафил.** Ҡиәмәт Көнө етеүе һәм мәңгелек тормоштоң башланыуы тураһында белгертеп, Сурға өрөп, иғлан итергә бурыслы.

Был дүрт мөһим фәрештәнән тыш төрлө вазифа башҡарыусы башҡа фәрештәләр ҙә була. Бына ул фәрештәләрҙең ҡайһы берҙәре:

**Кирамән кәтибин.** Изге эштәребеҙ менән гөнаһтарыбыҙҙы яҙыусы фәрештәләр. Береһе кешенең - уң, ә икенсеһе һул яғынан урынлашҡан ике фәрештә. Уң яҡтан урынлашҡан фәрештә изге һүҙҙәрҙе, эштәрҙе һәм ҡылыҡтарҙы яҙа. Ә һул яғыбыҙҙан урынлашҡан фәрештә насар һүҙҙәрҙе, ҡылыҡтарҙы һәм эштәрҙе яҙа. Ҡиәмәт көнөндә, Аллаһ алдында иҫәп-хисап биргәндә, ерҙәге тормошобоҙҙа ҡылынған изге һәм насар ғәмәлдәребеҙ хаҡында был фәрештәләр шаһитлыҡ ҡыласаҡ.

**Һаҡсы фәрештәләр.** Аллаһтан һаҡлау, яҡлау һораған һәм Уға өмөт бағалаған кешеләрҙе ҡурсаларға бурыслылар. Аллаһ ихтыяры буйынса, кешеләрҙе был донъялағы бәлә-ҡазаларҙан һаҡлайҙар.



**Мөнкәр һәм Нәкир.** Һорау алыусы фәрештәләр. Кеше үлгәндән һуң, ҡәберҙә һорау алырға бурыслылар. Ҡәберҙә кешенән һораясаҡтар: «Раббың кем? Пәйғәмбәрең кем? Китабың ниндәй?» Алған яуаптарына ярашлы рәүештә кеше менән яҡшы йә насар мөрәжәғәт итәләр.

**Башҡа фәрештәләр.** Беҙ һөйләгән фәрештәләрҙән тыш төрлө бурыстар йөкмәтелгән тағы ла бик күп фәрештәләр бар. Мәҫәлән, ҡайһы бер фәрештәләр кешене хаҡ юлға илһамландырырға, икенселәре Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) исеменә әйтелгән салауатты яҙырға, өсөнсөләре ожмах һәм тамуҡ эштәрен алып барырға бурыслылар.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Һеҙҙең өҫтөгөҙҙә һаҡсылары тора, ышаныс ҡаҙанған, намыҫлы рәүештә яҙып барыусылар бар. Һеҙ нимә ҡылһағыҙ, улар шуны белеп тора».

**(Инфитар сүрәһе, 10-12-се аяттар)**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«... көслө һәм Аллаһтың әмеренә ҡаршы килмәй торған, бары тик Аллаһ бойорғанды ғына үтәй торған фәрештәләр...».

**(Тахрим сүрәһе, 6-сы аят)**

# Фәрештәләр ауырыуҙың хәлен белгән кеше өсөн доға ҡылалар

Бер ваҡыт Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ике туған ҡустыһы һәм кейәүе Ғәли (раҙыйаллаһу ғәнһү) үҙенең дуҫы Сәғит ибн Ифаҡты осратҡан. Унының ҡулынан тотҡан һәм әйткән:

- Сәғит! Әйҙә бөгөн һинең менән ауырыуҙың хәлен беләйек. Хәсән ауырый. Әйҙә, хәлен беләйек.

Һәм улар бергәләп ауырыуҙың йортона баралар. Хәсәнгә барып еткәндә, Әбү Муса әл-Әшғәри ҙә шунда була. Ғәли (раҙыйаллаһу ғәнһүмә) унан һорай:

- Әй Әбү Муса! Һин ауырыуҙың хәлен белеү ниәте менән килдеңме, әллә былай ғына индеңме?

Әбү Муса:

- Мин ауырыуҙың хәлен белергә килдем, - тиеп яуап бирә.

Быға Ғәли  Аллаһ Илсеһенән ишеткән шатлыҡлы хәбәрҙе еткерә:

*- Әгәр мосолман үҙенең ауырыу мосолман туғанының хәлен белергә иртәнсәк барһа, етмеш мең фәрештә кискә тиклем уның өсөн доға ҡыласаҡ һәм уның гөнаһтарын ғәфү итеүҙе һораясаҡ. Әгәр кисен хәлен белешһә, етмеш мең фәрештә иртәнгә тиклем уның өсөн доға ҡыласаҡ һәм уның гөнаһтарын ғәфү итеүҙе һораясаҡ. Унан тыш был кеше өсөн йәннәттә емештәр йыйыла.*

(Тирмиҙи, Йыназа, 2)



# Фәрештәләр ураҙа тотҡандар өсөн доға ҡылалар

Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күршеләр менән яҡшы мөнәсәбәттә булыуға ҙур әһәмиәт биргән һәм һәр уңайлы осраҡта күршеләренә ингән. Шулай бер ваҡыт Өхөд һуғышы осоронда үҙенең ҡаһарманлығы менән айырылып торған Үммү Һөмәйрәнең (Уны Нәсибә ханым тип атағандар) өйөнә килеп, үҙенең ихтирамын күрһәткән.

Пәйғәмбәребеҙ килеүенә бик шатланған Үммү Һөмәйрә шунда уҡ ашарға әҙерләгән, Пәйғәмбәребеҙ менән уны оҙатыусыларҙы һыйлаған. Йорт хужабикәһенең һыйҙан үҙе лә ауыҙ итеүен теләгән Пәйғәмбәребеҙ әйткән:

- Зинһар өсөн, һин дә аша әле!

Үммү Һөмәйрә:

- Мин ураҙа тотам, - тиеп яуаплаған.

Үммү Һөмәйрә ул көндө бөтәһе менән бергә ашай алмай, сөнки өҫтәмә ураҙа тотҡан була. Ошо уңайҙан Пәйғәмбәребеҙ шатлыҡлы хәбәрҙе еткерә:

*– Әгәр ураҙала булған кеше алдында ашаһалар, фәрештәләр ул кеше өсөн ризыҡ бөткәнсе йәки ризыҡланыусылар ашап туйғансы доға ҡыласаҡтар.* (Тирмиҙи, Саум, 66)



# ФӘРЕШТӘЛӘРГӘ ИНАНЫУ БЕҘГӘ НИМӘ БИРӘ

**Фәрештәләргә инаныу**

- Аллаһтың ҡолдары булыуыбыҙҙы ныҡлап төшөндөрә, ғибәҙәт ҡылыуҙағы тырышлығыбыҙҙы арттыра.
- Яуызлыҡтан тыйылырға ярҙам итә.
- Әхлағыбыҙҙы яҡшырта.
- Хеҙмәткә дәртләндерә, кәйефебеҙҙе күтәрә.

Фәрештәләр - һәр ваҡыт Аллаһтың ҡушҡандарын үтәүсе һәм Уға ғибәҙәт ҡылыусы заттар. Ҡайһы берәүҙәре даимән рөкүғ хәлендә, ҡайһылары сәждә хәлендә тора. Улар, һәр даим Аллаһҡа зекер ҡылып, иман килтергәндәрҙең гөнаһтарын ғәфү итеүҙе һорай.

Бындай сифаттарға эйә булған фәрештәләрҙең барлығына инаныу **Аллаһтың ҡолдары булыуыбыҙҙы яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә, ғибәҙәттәр ҡылыуҙағы тырышлығыбыҙҙы арттыра**. Беҙҙе Аллаһҡа йүнәлтеп, гөнаһтарыбыҙ өсөн тәүбә ҡылыуға дәртләндереп, Ул теләгән кешеләр булыуыбыҙға этәргес бирә. Көн менән төндәребеҙҙе баһалай белергә өйрәтә.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Күктәрҙәге, Ерҙәге барсаһы Уныҡы. Уның янындағылар (фәрештәләр) тәкәбберләнмәй, Уға ғибәҙәт ҡылыуҙан арымай. Улар арымай-талмай, кис-көндөҙ Аллаһҡа тәсбих әйтә».

**(Әнбиә сүрәһе, 19-20-се аяттар)**

Беҙ фәрештәләргә көнләшәбеҙ, улар һымаҡ Аллаһҡа ихлас табыныусы ҡолдар булырға тырышабыҙ.

Уң һәм һул яғыбыҙҙан ҡылған эштәребеҙҙе ғәмәл китаптарыбыҙға яҙып барған һәм ҡәберҙә беҙҙән һорау аласаҡ Мөнкәр менән Нәкир фәрештәләргә инаныу Әхирәткә (мәңгелек тормош) ҡарата яуаплылығыбыҙҙы арттыра. Бер заман ҡылған ғәмәлдәребеҙ өсөн мотлаҡ хисап тотасағыбыҙ хаҡында иҫкәртә.

Был инаныу беҙҙе, мөьминдәрҙе, башҡа кешеләр менән мөнәсәбәттәребеҙҙе, һүҙҙәребеҙҙе үлсәргә һәм контролдә тоторға өйрәтә. Үҙебеҙҙе тәртиптә тоторға, **яуызлыктан тыйылырға ярҙам итә**. Фәрештәләргә инаныу беҙҙән «фәрештәләргә оҡшаш» кешеләр яһай. Йәнәшебеҙҙә булған фәрештәләрҙе борсомаҫ өсөн, тупаҫ һүҙҙәрҙән тыйылабыҙ. Берәү тураһында ла ғәйбәт һөйләмәйбеҙ, берәүҙе лә мыҫҡыл итмәйбеҙ. Ғәҙелһеҙлектән ҡасабыҙ, берәүгә лә тупаҫ өндәшмәйбеҙ.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Әҙәмдәрҙең уң яғында һәм һул яғында ғәмәлдәрен яҙып барыусы ике фәрештә бар. Кешенең ауыҙынан сыҡҡан бер генә һүҙ ҙә күҙәтеүсе тарафынан яҙылмай ҡалмай».

**(Ҡаф сүрәһе, 17-18-се аяттар)**



Фәрештәләр беҙҙе изгелеккә, матурлыҡҡа, ғәҙеллеккә һәм намыҫлылыҡҡа илһамландыра, беҙ Аллаһ һәм Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡушыуы буйынса ҡылған һәр изге эшкә бик ныҡ шатлана. Беҙҙең өсөн доға ҡылалар һәм Аллаһтан гөнаһтарыбыҙҙы ярлыҡауҙы һорайҙар. Мәҫәлән, ата-әсәләребеҙҙе яҡшы ҡарағанда, дуҫтарыбыҙға изгелек ҡылғанда, туғандарыбыҙҙың һәм ауырыуҙарҙың хәлен белгәндә, көсһөҙ һәм хәлһеҙ кешеләргә ярҙам иткәндә, намаҙ ҡылғанда, Ҡөрьән уҡығанда, белем алғанда, бер һүҙ менән әйткәндә, һәр эште Аллаһтың ризалығы өсөн башҡарғанда, фәрештәләр беҙҙең өсөн доға ҡыла һәм гөнаһтарыбыҙҙы ярлыҡауҙы һорай. Изге ғәмәлдәребеҙгә шундай зур әһәмиәт биреүҙәрен, уларҙы яратыуҙарын аңлау беҙҙе ҡыуандыра һәм күңелдәребеҙҙе тынысландыра. Был беҙҙе тағы ла яҡшыраҡ булырға, **әхлағыбыҙҙы яҡшыртырға дәртләндерә**.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Шайтан да, фәрештә лә кешенең күңеленә ҡайһы бер хистәр менән фекерҙәр сәсә. Шайтандың эше -яуызлыҡҡа әйҙәү, насар һәм зарарлы һөҙөмтәләре булған ғәмәлдәргә йүнәлтеү һәм хәҡиҡәттән йыраҡлаштырыу. Ә фәрештәләрҙең эше - хәҡиҡәткә, гүзәлеккә, изгелеккә әйҙәү һәм яуызлыҡтан йыраҡлаштырыу. Кем изгелеккә әйҙәүсе эске тауышты ишетә, был фәрештә тауышы икәнен белһен. Шунда уҡ был тауышҡа эйәрһен һәм Аллаһҡа шөкөр ҡылһын. Ә кем яуызлыҡҡа өндәүсе эске тауышты ишетә, был шайтандың тауышы икәнен белһен. Ул өндәүҙән йыраҡ булһын һәм Аллаһтан ҡурсалау һораһын».

**(Тирмиҙи, Тәфсир, 3)**



Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә - Үҙенең ҡолдарына эшләр өсөн Көс биреүсе, тимәк теләһә ниндәй уңыш - Унан. Раббыбыҙ һәр саҡ мәрхәмәтле һәм тырыш кешеләр янында. Ул Үҙенең тырыш ҡолдарын бик ярата, кем эшләй, шуларға теләгән һөҙөмтәһен бирә. Изге һәм файҙалы эштәр эшләргә ниәтебеҙ булһа, Аллаһ беҙгә ярҙам итә. Үҙҙәренә ярҙам итеү бурысы йөкмәтелгән фәрештәләр ҙә, яҡшы һәм гүзәл фекерҙәр менән беҙҙе илһамландырып, яныбыҙҙа була. Изге һәм файҙалы ғәмәлдәр ҡылһаҡ, улар бик һөйөнә һәм Аллаһтан беҙгә уңыштар юлдаш булыуын һорай. Аллаһтың бойороғо буйынса, ауыр ваҡыттарҙа улар беҙгә ярҙам итә. Изге Ҡөрьәндә хәбәр ителгәнсә, Бәҙер һуғышы ваҡытында мосолмандарға ярҙам итеү, еңеү тураһында изге хәбәр килтереү һәм мораль ярҙам күрһәтеү өсөн, биш мең фәрештә ебәрелә. Ауыр осорҙа Аллаһ Үҙенең фәрештәләрен ебәреп ярҙам итәсәгенә инаныу беҙҙе хеҙмәткә илһамландыра, кәйефебеҙҙе күтәрә. Ауырлыҡтарҙан ҡурҡмайбыҙ, өмөтһеҙлеккә бирелмәйбеҙ.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Хаҡтыр, Раббыбыҙ - Аллаһ, тиеп тура юлға баҫҡандар янына фәрештәләр төшөр һәм әйтер: «Ҡурҡмағыҙ, хафаланмағыҙ, ҡыуа-нығыҙ: һеҙ алдан уҡ вәғәҙә ителгән йәннәткә керәсәкһегеҙ. Беҙ донъя-ла ла, Әхирәттә лә һеҙҙең дуҫтарығыҙ булырбыҙ. Рәхмәте киң Аллаһ әҙерләгән ризыҡтарҙан йәнегеҙ нимә теләй, шуның менән хушланырһығыҙ, теләгәнегеҙҙе табырһығыҙ»

**(Фуссиләт сүрәһе, 30-31 сүрәһе)**



# ФӘРЕШТӘЛӘР МӨЬМИНДӘР ӨСӨН ДОҒА ҠЫЛА

Яуызлыҡтан яҡлаулы булһындар, изгелек менән осрашһындар өсөн, фәрештәләр мөьминдәр өсөн доға ҡыла. Был хаҡта Аллаһ хәбәр итә:

«Ғәреш эштәрен үҙ өҫтәренә алған, Ғәреш тарафындағылар (фәрештәләр) Раббыға мәҙхийә уҡыйҙар һәм тәсбих әйтәләр. Аллаһҡа инаналар.

- Йәә Раббыбыҙ, һинең рәхмәтең һәм ғилемең һәр нәмәне солғап алған. Шулай булғас, тәүбә иткәндәрҙе һәм Һинең юлыңа йүнәлгәндәрҙе ярлыҡа. Уларҙы йәһәннәм ғазабынан ҡотҡар!

Йәә Раббыбыҙ, уларҙы ла, уларҙың аталарын да, ҡатындарын да, нәҫелдәрендәге изгелек ҡылғандарҙы ла үҙҙәренә вәғәҙә иткән Ғәден йәннәттәренә керт. Һис шик юҡ, Һин һәр саҡ еңеүсе һәм хаким булдың.

Уларҙы һәр төрлө яманлыҡ ҡылыуҙарҙан һаҡла. Гөнаһтарҙан һаҡлаһаң, хаҡтыр, ул Көндә (Ҡиәмәттә) улар рәхмәтеңә ирешер. Был улар өсөн иң оло ҡотолош һәм Сәғәҙәткә ирешеү булыр ине».

(Мөьмин сүрәһе, 7-9-сы аяттар)



**Фәрештәләрҙең доғаһын алырға теләйһегеҙме?**

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Мосолман янында булмаған дин ҡәрҙәше өсөн доға ҡылһа, үҙенә вәкил булараҡ ебәрелгән фәрештә әйтер: «Ул доғаның бер өлөшө һинең өсөн булһын!»

Пәйғәмбәребеҙ һәр уңайлы осраҡта доға ҡылыуыбыҙҙы теләгән.

**(Тирмизи, Тәфсир, 3)**

**Фәрештәләр доғаларыбыҙға “Әмин!” - тиҙәр**

Пәйғәмбәребеҙ бөтә доғаларыбыҙға ла фәрештәләр: «Әмин!» - тиеп яуап ҡайтаралар, тигән ҡыуанысլы хәбәр ҡалдырған. Доғаларыбыҙҙа Аллаһтан яҡшылыҡ һәм изгелек хаҡында һорауыбыҙҙы кәңәш иткән: «Доға ҡылғанда, үҙегеҙ өсөн тик яҡшыны һәм изгелекте генә һорағыҙ, сөнки фәрештәләр ҡылған доғаларығыҙға «Әмин!» - тиеп яуап бирәләр».

**(Тирмизи, Тәфсир, 3)**

## Фәрештәләр белем алғандар өсөн доға ҡылалар

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәбәр итеүенсә, фәрештәләр белем алыусылар, шул белемде тормоштарында ҡулланырға теләүселәр өсөн доға ҡылалар: «Кем белем алыу маҡсаты менән юлға сыға, Аллаһ йәннәткә юлын еңеләйтер. Фәрештәләр был ғәмәл менән бик ҡәнәғәт булырҙар һәм белем алырға теләгән был кешенең өҫтөнән ҡанаттарын йәйерҙәр. Күктәге һәм ерҙәге бөтә тереклек, хатта һыуҙағы балыҡ та, Аллаһтан был шәкерттең гөнаһтарын ярлыҡауын һорар». (Әбү Дауыт, Ғилем, 1)



# ФӘРЕШТӘЛӘР, ШАЙТАН ҺӘМ КЕШЕ

Әҙәм әле яралтылмаған булған. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, Үҙен танып, Үҙенә табынһындар өсөн, кешеләрҙе яралтырға теләгән. Ул фәрештәләргә:

- Мин Ер йөҙөнә хәлифә (хужа) яралтасаҡмын, - тигән.

Фәрештәләр:

- Беҙ Һине маҡтап, тәсбих әйтеп, Аллаһ Тәғәлә кәмселектәрҙән пак тип, Һине ҙурлап торғанда, Ер өҫтөндә аҙғынлыҡ ҡыласаҡ һәм ҡан ҡойясаҡ бәндәнде хәлифә итеп ҡуясаҡһыңмы?

Аллаһ уларға:

- Һеҙ белмәгәндәрҙе һәр хәлдә мин беләм.

Фәрештәләр тына. Аҙаҡтан бер-береһенә әйтәләр:

- Һис шикһеҙ, Раббыбыҙ барыһын да белә һәм файҙаһыҙ бер нәмә лә булдырмай.

Аллаһ уларға әйтә:

- Әй минең фәрештәләрем! Әҙәмде балсыҡтан яралтам, уға һын (форма) һәм йән бирәм. Бойороғомдо тыңлап, уға хөрмәт күрһәтеп, сәждә ҡылығыҙ.

Бөтә фәрештәләр ҙә:

- Йәә Раббыбыҙ! Һинең бойороғоңдо тыңлайбыҙ һәм Һиңә буйһонабыҙ, - тиеп яуап ҡайтаралар.

Аллаһтың был бойороғо шайтандың күңеленә хуш килмәй. Ул йөҙөн сөйөрә, тәкәбберлеген еңә алмай, үҙен Аллаһтың иң камил мәхлүге, тиеп иҫәпләй.

Һәм бына Аллаһ кешене яралта. Фәрештәләр, Раббыларының бойороғона эйәреп, Әҙәмгә хөрмәт күрһәтеп, уға сәждә ҡыла. Ә шайтан тәкәбберләнә һәм Аллаһтың бойороғонан баш тарта. Әҙәмгә сәждә ҡылыуҙан ҡаса. Аллаһ унан һорай:

- Мин һиңә сәждә итеүҙе ҡушҡандан баш тартырға ни сәбәп булды?

Иблес:

- Мин унан өҫтөнөрәк, сөнки мине уттан яралттың, уны балсыҡтан ғына, - ти.

Бының өсөн Аллаһ шайтанды үҙенең мәрхәмәтенән мәхрүм итә. Һуңынан Әҙәмде йәннәткә урынлаштыра һәм уға хәләл ефете итеп Һауаны яралта һәм Әҙәмгә әйтә:

- Әй Әҙәм, һеҙ ҡатыныңыҙ менән бергә йәннәттә йәшәрһегеҙ, йәннәттең теләгән ерендә, теләгәнегеҙсә ризыҡ ашағыҙ, ләкин бары тик бына был ағасҡа ғына яҡын килмәгеҙ. Был ағастың емешен ашаһағыҙ, үҙ-үҙегеҙгә золом ҡылыусыларҙан булырһығыҙ.

Аллаһ уларға бөтә ағастарҙың емешен ашарға рөхсәт итә, тик бер ағастан ашауҙы тыя. Шул рәүешле Ул кешене теләктәрен контролдә тоторға һәм ихтыяр көсөн нығытырға өйрәтә. Әҙәм менән Һауа ожмахта тыныс һәм бәхетле йәшәй. Арыу һәм ҡурҡыуҙың нимә икәнен белмәй. Теләгәндәрен ашайҙар-эсәләр. Аллаһ Әҙәм ғәләйһис-сәләмде шайтан хаҡында кисәтеп ҡуя:

- Әй Әҙәм! Хаҡлыҡта, был шайтан һинең һәм хәләл ефетеңдең дошманы. Ҡара уны, һеҙҙе йәннәттән сығармаһын. Ул сағында һеҙ бәхетһеҙ булырһығыҙ. Ә ожмахта һеҙ аслыҡ кисермәйһегеҙ, яланғас түгелһегеҙ. Эҫе ҡояш аҫтында ла ҡалмайһығыҙ һәм сарсауҙы ла тоймайһығыҙ.

Әҙәм менән Һауа йәнә күпмелер ваҡыт ожмахта тыныс һәм бәхетле ғүмер итә. Әммә шай-

тан эшһеҙ ултырмай, төрлө мәкерҙәр ҡора. Бер ваҡыт, уларға үтеп инеп, үәсүәсә ҡыла:

- Әй Әҙәм! Һиңә мәңге дауам итәсәк мәңгелек һәм хакимлыҡ ағасын күрһәтергәме?

Әҙәм шайтанға ҡараған да:

- Нимә инде ул? Күрһәт әле, - ти.

Шайтан Аллаһтың тыйылған ағасына күрһәтә, Әҙәм уға ышанмай һәм уны үҙенең янынан ҡыуып ебәрә. Әммә шайтан сигенмәй. Ул ҡабаттан уларға килеп шыбырлай:



- Ни өсөн Раббығыҙ был ағасты харам ҡылғанын беләһегеҙме? Әгәр һеҙ был ағастың емешен ашаһағыҙ, мәңгелеккә бында ҡаласаҡһығыҙ. Быға юл ҡуймаç өсөн, уны һеҙгә тыйҙы. Яҡшылап уйлағыҙ! Ярай инде, тәмләгеҙ емеште!

Әҙәм менән Һауа, шайтанды тыңламайынса, ул урындан китә. Шайтан Аллаһ менән ант итә-итә:

- Валлаһи, биллаһи, һеҙгә яҡшы кәңәш бирәм, - тип уларҙың артынан эйәрә.

Аллаһ исеме менән Иблес ант иткәс, Әҙәм менән Һауаның башына шундай уй килә: «Аллаһ менән ант итеп алдау мөмкин булмаған эш. Бәлки, ул дөрөçөн әйтәлер».

Һәм улар Аллаһ тыйған ағастың емешен ашай. Емеште тәмләгәс, уларҙан йәннәт кейемдәре сиселеп, ғәүрәттәре күренә. Уларға бик оят була. Яçы ағас япраҡтары менән ғәүрәттәрен ҡапларға тырышалар. Ни эшләргә белмәйҙәр.

Аллаһ уларҙан һорай:

- Мин, ул ағасҡа ҡағылырға ярамай, шайтан һеҙҙең асыҡтан-асыҡ дошманығыҙ, тиеп әйтмәнемме ни? Ни өсөн һеҙ Минең әмеремде тыңламанығыҙ?

Әҙәм менән Һауа:

- Йәә Раббыбыҙ! Ғәфү ит, ярлыҡа беҙҙе! - тиҙәр.

Аллаһы Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уларға:

- Мин бойорҙом, ә һеҙ Минең бойороғомдо тыңламанығыҙ.

Әҙәм менән Һауа ялына башлайҙар:

- Йәә Раббыбыҙ, үҙебеҙҙе харап иттек. Әгәр беҙҙе кисермәһәң, ярлыҡамаһаң, һис шикһеҙ, зарар күреүселәрҙән булырбыҙ, - тиҙәр.

Аллаһ Әҙәм ғәләйһис-сәләмгә әйтә:

- Мин һиңә иң бөйөк мөғжизәм - ожмахты бүләк иттем. Йәнең теләгәндең барыһын да бирҙем. Биргәндәрем етмәнеме ни һиңә, нимәгә был ағасҡа яҡынланың?

Әҙәм яуап биргән:

- Валлаһи, Һинең исемең менән ант итеп алдашалар тип уйламаным.

Аллаһ өйөрөлөп-сөйөрөлгән Әҙәмгә әйтә:

- Ант итәм, һин ергә төшәһең һәм, тир түгеп, үҙ көнөңдө үҙең күрәһең. - Шунан Аллаһ бойора: - Барығыҙ ҙа ергә төшөгөҙ. Һеҙ унда билдәләнгән ваҡытҡа ҡәҙәр йәшәйәсәкһегеҙ.

Әҙәм ғәләйһис-сәләм ныҡ борсола. Бар ҡылығы өсөн үкенә, тәүбә итә һәм илай башлай:

- Йәә Раббым! Кисер мине! Йәә Раббым! Ярлыҡа мине! - тиеп үтенә.

Аллаһ, уға үҙенең мәрхәмәтен күрһәтеп, тәүбәләрен ҡабул итә, ярлыҡай, сөнки Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, ҡылған ғәмәлдәре өсөн үкенеп, тәүбәгә килгәндәрҙе ярлыҡай. Ул – бөйөк Мәрхәмәт Эйәһе.

(Ҡөрьән Кәримдән дини хикәйәләр, Сәйет Ҡотоб – Абдуллаһ Джуде әс-Сәххар). (Баҡара сүрәһе, 30-37 һәм Әғрәф сүрәһе, 11-25-се аяттар).

# ШАЙТАН

Күҙгә күренмәҫ йән эйәләренең береһе - шайтан. Шайтандың Изге Ҡөрьәндә телгә алынған икенсе исеме - Иблес. Шайтан - беренсе кеше булған Әҙәм ғәләйһис-сәләмгә сәждә ҡылмағаны өсөн, Илаһи мәрхәмәттән мәхрүм булған йән эйәһе. Уттан яралтылған һәм яуызлыҡ символы булып тора.

Илаһи мәрхәмәттән мәхрүм булыуының сәбәбе - уның тәкәбберлеге һәм Аллаһтың әмеренә буйһонмауы. Әҙәм ғәләйһис-сәләм арҡаһында, Аллаһ тарафынан язаландым, тиеп иҫәпләп, ул кешеләрҙең дошманына әйләнә. Кешеләр хаҡ юлды тапмаһын өсөн, ул алдаша, төрлө хәйлә һәм мәкерҙәр ҡора. Кешеләрҙең Аллаһтың бойороҡтарына буйһонмауҙарын һәм гөнаһ ҡылыуҙарын теләй. Шулай итеп, ул Әҙәм ғәләйһис-сәләмдән һәм уның нәҫеленән - кешеләрҙән үс алырға тырыша, йәғни шул рәүешле уларҙы тамуҡҡа этәрә. Аллаһ шайтандың дошманлығы, мәкере һәм алдауы тураһында беҙҙе иҫкәртә: **«Шайтан һеҙҙе дошман күрә. Шуның өсөн һеҙ ҙә уны дошман күрегеҙ. Ул үҙенә эйәргәндәрҙе утлы йәһәннәмгә урынлаштырыр өсөн тырыша»** (Фәтыр сүрәһе, 6-сы аят).

Шайтан - ул тиклем ҡурҡырлыҡ көслө йән эйәһе түгел. Ул тик әшәке хистәр менән фекерҙәр генә сәсә. Йөрәктәребеҙгә үҫеүсә һала. Яуызлыҡты һәм ерәнгес ғәмәлдәрҙе күҙҙәребеҙгә матур итеп биҙәп күрһәтә. Аллаһ һәм мәңгелек тормош тураһында онотторорға тырыша. Әммә беҙ, кешеләр - ихтыярға эйә, аҡылы булған йәндәр. Ошо сифаттарыбыҙ менән шайтандан көслөбөҙ.

Шайтандың төҙөлөшө беҙҙекенән айырылыуына, ул күҙгә күренмәгән зат булыуына ҡарамаҫтан, беҙҙе яуызлыҡ ҡылырға мәжбүр итерлек көсө юҡ. Көсләп яуызлыҡ ҡылырға мәжбүр итә алмай ул беҙҙе. Аллаһ был хаҡта хәбәр итә: **«Иман килтергәндәрҙе һәм Раббыларына тәүәккәлләгәндәргә шайтан мәжбүрилек көсөнә эйә түгел. Ул тик уның менән дуҫлашҡандарға һәм Аллаһҡа тиңдәшлек ҡылғандарға ғына йоғонто яһай ала»** (Нәхел сүрәһе, 99 – 100-сө аяттар).

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Иблес ул ен нәҫеленән ине. Раббының әмеренә буйһонманы».

**(Кәһәф сүрәһе, 50-се аят)**

Әгәр беҙ, аңыбыҙ һәм ихтыярыбыҙҙы файҙаланып, шайтандан килгән хистәр һәм фекерҙәр йоғонтоһо аҫтына эләкмәһәк, яуызлыҡ һәм насар ғәмәлдәр ҡылмаясаҡбыҙ. Шулай итеп, шайтан үҙ маҡсаттарына ирешә алмаясаҡ, кеше һәм шайтан араһындағы көрәштә беҙ еңеүсе буласаҡбыҙ. Әммә һис бер ваҡыт онотмайыҡ: был көрәштә бер тапҡыр ғына еңеү етмәй. Был - ғүмеребеҙҙең аҙағына тиклем дауам итәсәк көрәш.



## Шайтандың таныуы

Иҫәп-хисап бөткәндән һуң, шайтан әйтер: «Һис шикһеҙ, Аллаһ һеҙгә вәғәҙә иткәнде еренә еткерҙе. Мин дә һеҙгә вәғәҙә иттем, әммә һеҙҙе алданым. Һеҙгә ярҙам итерлек көс миндә юҡ. Мин бары тик Аллаһҡа ышанмаҫҡа өндәнем. Хәҙер мине ғәйепләмәгеҙ инде, үҙегеҙҙе ғәйепләгеҙ. Мин һеҙҙе ҡотҡара алмайым, һеҙ ҙә мине ҡотҡара алмаҫһығыҙ. Һеҙҙең мине Аллаһҡа тиңләүегеҙҙән бөгөн мин ваз кисәм», - тип.

Шик юҡ, залимдар өсөн әрнетеүле яза-лар бар.

(Ибраһим сүрәһе, 22-се аят)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Әгәр шайтандан килгән әшәке фекер һине биләп алһа, Аллаһҡа һыйын. Аллаһ барыһын да ишетеп, күреп тороусылыр».

**(Фуссиләт сүрәһе, 36-сы аят)**

## ӘЙҘӘГЕҘ, ШАЙТАНДАН АЛЛАҺҠА ҺЫЙЫНАЙЫҠ

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

Әйт: «Таңдың Раббыһына һыйынам. Ул барлыҡҡа килтергәндең яуызлығынан, дөм ҡараңғы төндәрҙәге мәкерҙән, төйөндәргә өрөүсе ҡатындарҙың яуызлығынан, көнсөл кешенең хөсөтлөгөнән!»

**(Фәләк сүрәһе, 1-5-се аяттар)**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

Әйт: «Кешеләрҙең Раббыһына һыйынам, кешеләрҙең батшаһына, кешеләрҙең илаһына, йәшерен үәсүәсәләүсенең яуызлығынан, кешеләрҙең күңеленә үәсүәсә һалыусынан, ендәрҙән һәм кешеләрҙән».

**(Нәс сүрәһе, 1-6-сы аяттар)**

# ЙЫНАЗАҺЫНДА ФӘРЕШТӘЛӘР БУЛҒАН СӘХӘБӘ

Сәләмә ибн Әсләм (разыйаллаһу ғәнһү) һөйләгән:

«Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бик нык яратҡан дуҫтарының береһе - Сәғд ибн Мүғаҙ (разыйаллаһу ғәнһү), вафат булды. Сәғд тураһындағы ҡайғылы хәбәрҙе алғас та, Пәйғәмбәребеҙ сәхәбәләре менән бергә шунда уҡ уның йортона юлланды. Пәйғәмбәр алдан, беҙ арттан барҙыҡ. Һәм бына беҙ Сәғд булған бүлмәнең ишегенә яҡынлаштыҡ. Унда Сәғд ибн Мүғаҙдың кәүҙәһенән башҡа бер кем дә юҡ ине. Әммә һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ, әйтерһең дә кемгәлер баҫырға ҡурҡҡан кеүек, һаҡ ҡына инде. Минең эскә инергә теләгәнемде күргәс, урынымда ҡалырға ишаралап бойорҙо. Мин туҡтаным да, артымда булғандар ҙа туҡтаһын өсөн ымланым.

Пәйғәмбәребеҙ сыҡҡас, мин: «Йәә Рәсүлуллаһ! Мин берәүҙе лә күрмәнем. Тик һеҙ әйтерһең дә кемдәрҙеңдер иңдәре аша атлап үткән төҫлө тойолдоғоҙ». Пәйғәмбәребеҙ аңлатты: «Быға тиклем ергә аяҡ баҫмаған етмеш мең фәрештә Сәғдтың кәүҙәһен алып барыр өсөн төштөләр. Бүлмәлә ултырырға мин урын тапманым. Фәрештәләрҙең береһе урын бирҙе, тик шул саҡта ғына ултыра алдым».

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Сәғд ибн Мүғаҙҙың ирешкән тәҡүәлек дәрәжәһе менән уғата риза булып, уңайы сыҡҡан һайын уны күҙ уңында тотоп ҡабатлар ине: «Әй Әбү Ғәмр, һин ниндәй бәхетле! Әй Әбү Ғәмр, һин ниндәй бәхетле! Әй Әбү Ғәмр, һин ниндәй бәхетле!» (Ибн Сәғд, 3; 428 - 430)

***Әйҙәгеҙ әле, беҙ ҙә йыназабыҙҙа фәрештәләр ҡатнашырлыҡ итеп ғүмер кисерәйек.***



# ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘ r ҺӘМ ФӘРЕШТӘЛӘР

Әҙәм ғәләйһисәләмгә ихтирам күрһәткән фәрештәләр уның нәҫеленән булған бөтә мөьминдәрҙе лә хөрмәт итә. Улар Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә яратҡан намыҫлы кешеләрҙе ярата, тимәк пәйғәмбәрҙәрҙе фәрештәләр бөтәһенән дә ныҡыраҡ ярата һәм хөрмәт итә.

Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) - Аллаһ тарафынан кешелеккә ебәрелгән һуңғы пәйғәмбәр. Кешеләргә иң гүзәл өлгө булһын өсөн, Аллаһ уны һайлаған. Ул фәрештәләр күңеләшерлек күркәм холоҡҡа эйә булған. Аллаһ уны яратҡан һәм һәм уны үҙенең ҡолдарына ла яратырға бойорған. Фәрештәләр ҙә уны нык яратҡандар һәм бер-береһенә уның Пәйғәмбәр булыуы тураһындағы шатлыҡлы хәбәрҙе таратҡандар.

Фәрештәләр һәм Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) араһындағы тығыҙ бәйләнеш Ҡөрьән төшөрөлгәс барлыҡҡа килгән. Ҡырҡ йәш була ул саҡта Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм). Ул, йыш ҡына Мәккә эргәһендәге Хира мәмерйәһенә китеп, унда бер нисә төн үткәреп әйләнеп ҡайтҡылай. Бында ул Аллаһты зекер итә, ғаләм һәм кешеләрҙең хәле тураһында уйлана. Төндәрҙең береһендә, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мәмерйәлә сағында, таңға ҡарай уға Йәбраил (ғәләйһис-сәләм) килә, Аллаһ уға аралашсы бурысын йөкмәткән булған. Ул Пәйғәмбәребеҙгә: «Уҡы!» - тиеп бойора. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм): «Уҡый белмәйем», - тип яуап бирә. Йәбраил фәрештә талабын бер нисә тапҡыр ҡабатлай. Пәйғәмбәребеҙҙән бер үк яуапты алғас, үҙе Ҡөрьәндең тәүге аяттарын уҡый. Беренсе үәхиҙе алып мәмерйәнән сыҡҡандан һуң, Пәйғәмбәребеҙ Йәбраилдың ҡанаттары бөтә күк йөҙөн япҡанын күрә. Был ваҡиғанан һуң, Йәбраил егерме өс йыл буйы төрлө ваҡытта Изге Ҡөрьән аяттарын һәм сүрәләрен килтерә, йәғни Аллаһтан ебәрелгән изге яҙмаларҙы.

Йыл һайын Изге Рамаҙан айында Пәйғәмбәребеҙ ул ваҡытта Изге Ҡөрьәндән ебәрелгән аяттарҙы Йәбраилға уҡыған. Үҙе вафат булыр йылды Рамаҙан айында Ҡөрьәнде башынан аҙағына тиклем ике тапҡыр уҡып сыҡҡан. Пәйғәмбәребеҙ менән Йәбраил Ҡөрьәнде алмашлап уҡығандар. Ҡайһы берҙә Йәбраил Пәйғәмбәребеҙ янына кеше ҡиәфәтендә килгән. Бер заман, Пәйғәмбәребеҙ сәхәбәләренең



йәмғиәтендә булғанда, ул таҙа аҡ кейемдә килгән һәм Ислам, Иман, Ихсан, Ҡиәмәт көнө тураһында һорауҙар биргән, һорауҙарына яуап алғас киткән. Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ сәхәбәләренә уның Ябраил булғанын, уларға диндә өйрәтергә килгәнен хәбәр иткән.

Ауыр ваҡыттарында Пәйғәмбәребеҙҙе ҡыуандырыр һәм ҡурсалар өсөн, Аллаһ уға үҙенең фәрештәләрен ебәрә. Быға иң яҡшы миҫал – Һижрәт ваҡытындағы ваҡиға. Мәккәнең мөшриктәре Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән Әбү Бәкер (раҙыйаллаһу ғәнһү) йәшеренгән мәмерйәнең ауыҙына ныҡ яҡынлайҙар. Әгәр эйелһәләр, уларҙы күрерҙәр ине. Шул мәлде Аллаһ Пәйғәмбәребеҙ күңеленә тыныслыҡ һәм хәүефһеҙлек хисен һала, күҙгә күренмәгән фәрештәләр ғәскәре менән ярҙам итә. Аллаһ Бәҙер янындағы алышта, башҡа бик күп һуғыштарҙа Пәйғәмбәребеҙ менән уның сәхәбәләрен фәрештәләр ғәскәре менән ҡурсалай. Хунәйн янындағы һуғышта ауыр хәлдә ҡалған мосолмандарға фәрештәләр ғәскәре ебәреп ярҙам итә.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һүҙҙәре буйынса, изге эштәр башҡарылған һәм унан Аллаһ ҡәнәғәт булған ергә фәрештәләр килә. Белем бирелгән, Ҡөрьән уҡылған, Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылынған, яҡшы һәм изге эштәр тураһында һөйләнелгән йыйылыштарға фәрештәләр төшә. Ындай урында булған кешеләрҙе фәрештәләр уратып ала, улар өсөн доға ҡыла, уларҙың йәненә шатлыҡ, тыныслыҡ һала. Фәрештәләрҙе борсоған ғәмәлдәрҙән тыйылырға кәңәш итә ул һәм үҙе лә быға ҡарата иғтибарлы була. Һуған, һарымһаҡ ашап, һаҫыҡ еҫе бөтмәйенсә мәсеткә барыуҙы, кеше араһына сығыуҙы өнәмәй, кешеләрҙе лә, фәрештәләрҙе лә борсорға ҡушмай.

Пәйғәмбәребеҙ ғаләмгә рәхмәт булараҡ килә. Аллаһ Үҙенең мәрхәмәте менән Пәйғәмбәребеҙҙе юғары дәрәжәгә күтәрә, фәрештәләренә уны яратырға, уның исеменә мәҙхиә уҡырға һәм салауат әйтергә ҡуша. Шул сәбәпле, фәрештәләр Пәйғәмбәребеҙ өсөн доға ҡылалар. Дәрәжәһе күтәрелеүен һорайҙар. Ҡайһы бер фәрештәләргә хатта, мөьминдәрҙең Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) исеменә әйтелгән сәләмләү һәм салауаттарҙы яҙып, уларҙы Пәйғәмбәребеҙгә еткереү бурысы йөкмәтелгән.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«... белеп тороғоҙ, уның (Пәйғәмбәрҙең) дуҫы һәм ярҙамсыһы - Аллаһ һәм Ябраил һәм иң яҡшы мосолмандар...»



**(Тәхрим сүрәһе, 4-се аят)**

# ФӘРЕШТӘЛӘР МЕНӘН КИЛГӘН ЯРҘАМ

Бәҙерҙәге һуғыш Мәккәләге мөшриктәр менән мосолмандарҙың беренсе алышы була. Мөшриктәр Бәҙергә һаны буйынса мосолмандарҙан өс тапҡыр күберәк ғәскәр менән килә. Улар мосолмандарҙы мәңгелеккә юҡ итеү уйы менән яна. Һуғыш башлана, ике ғәскәр бер-береһенә ташлана. Мосолмандар йән аямай алыша. Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), ҡулдарын күккә күтәреп, доғаһын ҡабатлай: «Йәә Раббым! Бына ҡурәйштәр, һауалылар һәм тәкәбберҙәр, Һинең диненде бөтөрөргә килгәндәр. Улар Һиңә ҡаршы сығалар һәм Һинең Пәйғәмбәреңде алдаҡсыға һанайҙар. Йәә Аллаһ! Ярҙам итермен тиеп Пәйғәмбәрҙәреңә биргән вәғәҙәңде үтә инде. Әгәр ошо бәләкәй генә мөьминдәр төркөмө лә ҡырылһа, ерҙә Һиңә табынған бер кем дә ҡалмаясаҡ».

Аллаһ Пәйғәмбәребеҙҙең был доғаһын ҡабул итә. Һуғыштың иң ауыр мәлендә фәрештәләр ғәскәрен төшөрә, Ул мосолмандарға биш мең фәрештә менән ярҙам итә. Һуғышта мосолмандар еңә. Аллаһ фәрештәләр аша төшөрөлгән был ярҙам тураһында Ҡөрьәндә әйтә:

*«Хаҡтыр, һеҙ Бәҙер һуғышында көсһөҙ һәм ҡаушаған инегеҙ, Аллаһ һеҙҙе еңеүгә ирештерҙе. Аллаһтың яҙаһынан ҡурҡығыҙ, Уға шөкөр итегеҙ. Аллаһ быны (фәрештәләр менән ярҙам итеүҙе) фәҡәт һеҙҙе ҡыуандырыр һәм күңелегеҙ тынысланһын өсөн эшләне. Еңеү, хөкөм һәм хикмәттәрҙең хужаһы бары тик Аллаһтыр».* (Ғимран сүрәһе, 123-126-сы аяттар)



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Шик юҡтыр, Аллаһ та, фәрештәләре лә Пәйғәмбәргә күп салауат әйтерҙәр. Эй, мөьминдәр, һеҙ ҙә Пәйғәмбәргә салауат әйтегеҙ һәм сәләмдәр күндерегеҙ»

**(Әхзәб сүрәһе, 56-сы аят)**

Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә, фәрештәләр кеүек, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә алдында Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) дәрәжәһе артһын өсөн доға ҡылайыҡ. Нурлы ҡанатлы фәрештәләр аша уға иң изге һәм ихлас сәләмдәребеҙҙе ебәрәйек.

اَللّٰهُمَّ صَلِّ عَلٰى سَيِّدِنَا مُحَمَّدِنِ النَّبِيِّ

الْأُمِّيِّ وَعَلٰى اٰلِهِ وَصَحْبِهِ وَسَلِّمْ

**Аллааһүммә салли ғәләә сәййидинәә Мөхәммәдин-ин-нәбийиль уммийи үә ғәләә әәлиһи үә сәхбиһи үә сәллим!**

**Йә Аллаһ! Уҡый-яҙа белмәгән Пәйғәмбәребеҙгә, уның ғаиләһе менән сәхәбәләргә фатиханды бир һәм сәләмлә!**

**ӘМИН!**

# ҺОРАУҘАР

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(әмин / шайтан / яҙып / фәрештәләр / дошман / көсләп / шайтан / һүҙҙе / тыңдәшлек / фәрештә)**

1. «......... торған ике фәрештә бар, кешенең уң һәм һул яғында урынлашҡан. Улар кешене күҙәтәләр һәм шунда уҡ һәр әйтелгән ......... теркәп баралар».
2. «......... дошманығыҙ булып тора. Шулай булғас ......... һанағыҙ. Үҙ яғына тамуҡ әһелдәренән ҡылыу өсөн генә әйҙәй».
3. «Кемдәр Раббыларына тәүәккәлләйҙәр, уларҙы шайтан ......... мәжбүр итә алмай. Үҙе менән дуҫлашҡан һәм Аллаһҡа ......... килтергәндәргә генә тәьҫир итә ала».
4. «Доға ҡылғанда, үҙегеҙ өсөн нимә яҡшы һәм күркәм, шуны ғына һорағыҙ. Сөнки ........., доғаларығыҙға яуап итеп, ......... тиеп әйтәләр».
5. «Кем изгелеккә саҡырған эске тауышын ишетә, ......... тауышы икәнен белһен. Шунда уҡ уның артынан эйәрһен һәм Аллаһҡа шөкөр итһен. Ә кем яуызлыҡҡа өндәүсе эске тауышын ишетә, был ......... тауышы икәнен белһен. Унан ары торһон һәм Аллаһтан ҡурсалау эҙләһен».

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. Фәрештәләрҙең үҙенсәлектәре тураһында был раҫлауҙарҙың ҡайһыһы хаталы?**

А) улар ашамай һәм эсмәй.

Б) йоҡламай.

В) енесһеҙ.

Г) Аллаһҡа буйһонмаҫҡа мөмкиндәр.

**2. Түбәндә килтерелгәндәрҙең ҡайһыһы фәрештәләрҙең бурыстарына инмәй?**

А) кешеләр өсөн өлгө булыу.

Б) кешеләрҙе күҙәтеү.

В) мөьминдәр өсөн доға ҡылыу.

Г) пәйғәмбәрҙәргә үәхи төшөрөү.

**3. Фәрештәләргә инанысыбыҙ түбәндә бирелгәндәрҙән нимә бирә?**

I. Аллаһтың ҡолдары булып һыналыу, аңыбыҙҙы көсәйтә.

II. Эшһөйәрерәк булырға ярҙам итә.

III. Насарлыҡтан йырағайта.

IV. Әхлағыбыҙҙы яҡшырта.

А. I-II-IV Б. I-III-IV

В. I-II-IV Г. I-II-III-IV

**4. Түбәндә аталған фәрештәләрҙең ҡайһылары төп фәрештәләрҙең дүртәүе булып тора?**

I. Миҡаил. IV. Ябраил.

II. Исрафил. V. Ғазраил.

III. Нәкир һәм Мөнкәр. VI. Юныс.

А. I и IV Б. II и VI

В. III и VI Г. IV и V

**5. Беҙ гүзәл, яҡшы ғәмәл ҡылырға уйлаһаҡ, йөрәгебеҙ аша ҡайһы бер уйҙар үтә, уларҙы күңелебеҙгә шайтан һәм фәрештәләр һала. Түбәндәге уйҙарҙың ҡайһылары шайтандан?**

А. Был ғәмәл аша һин күңел тыныслығы табаһың, ҡыуаныс кисерәһең.

Б. Һин башҡаларға күркәм үрнәк булаһың.

В. Ул ғәмәлдән һиңә был донъяла һис бер файҙа булмаясаҡ.

Г. Һин Аллаһтың мөхәббәтенә һәм әжеренә лайыҡ булаһың.





# ҺОРАУҘАРҒА ЯУАПТАР

**Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ**

1. яҙып / һүҙҙе
2. шайтан / дошман
3. көсләп / тыңдәшлек
4. фәрештәләр / әмин
5. фәрештә / шайтан

**Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ**

1) Г 2) А 3) Г 4) В 5) В





## ҒҮМЕРЕБЕҘҘЕҢ ЙҮНӘЛТМӘҺЕ

# ИЛАҺИ ЯҘМАЛАРҒА ИНАНЫУ

- *Кеше илаһи яҙмаларға мохтаж*
- *Илаһи Яҙмалар*
- *Илаһи Яҙмаларҙың кимммәте*
- *Тәүге илаһи асыш*
- *Китабыбыҙ - Изге Ҡөрьән*
- *Пәйғәмбәребеҙ* r *һәм Изге Ҡөрьән*





# ХЫЯЛ ДИҢГЕҘЕНӘ СУМ

Изге Ҡөрьәнде уҡып ултырған атаһының янына Закир килде лә:

– Атай! Изге Ҡөрьән Аллаһтың Һүҙе икәнен беләм, әммә күберәк белгем килгәйне. Уның хаҡында һөйлә әле, - тине.

Закирҙың атаһы, улының теләгенә ныҡ ҡыуанып, хикәйәһен башланы:

– Улым, Ҡөрьән – ул мосолмандарҙың Изге Китабы. Раббыбыҙ бөтә дәүерҙәрҙә лә кешеләргә Изге Яҙмаларын ебәргән һәм шул рәүешле уларҙың донъяға килеүҙәренең маҡсатын хәбәр иткән, изгелек менән яуызлыҡты айырырға өйрәткән, Раббылары алдындағы бурыстары хаҡында аңлатҡан. Ваҡыт үтеү менән, кешеләр Изге Яҙмаларҙың йөкмәткеһен үҙгәрткәндәр һәм Раббыһының ҡанундарына ҡаршы килгән тормош ҡора башлағандар. Үҙенең ҡолдарына изгелек кенә теләгән Аллаһ, уларҙы тура юлға баҫтырырға теләп, яңы пәйғәмбәр менән яңы Китаптар ебәргән. Изге Ҡөрьән төшөрөлгәнсе шулай дауам иткән. Ҡөрьәндә унан тыш башҡа китаптар артабан төшөрөлмәҫе әйтелгән.



– Атай, ул сағында Ҡөрьән бөтә кешеләрҙең Китабы булып сығамы ни?

– Афарин, улым! Дөп-дөрөҫ! Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ваҡытынан алып Ахрызаманға ҡәҙәр бар кеше инанып ҡағиҙәләренә буйһонған Изге Ҡөрьән илаһи Яҙма һанала.

– Атай, ә Ҡөрьәндә Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һүҙҙәре бармы?

– Юҡ, улым! Изге Ҡөрьән – ул Аллаһтың Һүҙе. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), үҙенән бер ни ҙә өҫтәмәйенсә, Уның һүҙҙәрен еткергән. Күпмелер ваҡыт Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең әйткәндәрен яҙыуҙы ҡәтғи рәүештә тыйған, хатта яҙылғандарын юҡ итергә бойорған. Уның һүҙҙәре менән Изге Ҡөрьән аяттарын бутау ҡурҡынынсы юғалғас, сәхәбәләренә уларҙы яҙырға рөхсәт иткән.

– Ә Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡөрьән нисек төшөрөлгән?

– Фәрештәләр араһында, улым, Аллаһтың бойороҡтарын пәйғәмбәрҙәргә еткереүсе иң мөһим фәрештә - Ябраил (ғәләйһис-сәләм) бар. Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡөрьәнде ул килтергән дә инде.

– Ҡыҙыҡ, ә ул нисек Изге Ҡөрьәнде килтергән? Әллә матур ҡап менән урапмы?

– Юҡ ... һин нимә, улым! Изге Ҡөрьән яҙма рәүештә түгел, вәхи юлы менән төшөрөлгән.

– Атай, ә нимә ул «вәхи»?

– «Вәхи» ғәрәп теленән «йәшерен әңгәмә», «шыбырлау» тиеп тәржемә ителә. «Вәхи» – ул Аллаһтың бойороҡтарын Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ябраил фәрештәнең (ғәләйһис-сәләм) тапшырыуы. Ябраил (ғәләйһис-сәләм) илаһи аяттарҙы Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иҫендә ҡалдырһын өсөн тапшырған. Ә Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм)

үҙ сиратында был аяттарҙы сәхәбәләренә ятларға һәм яҙырға ҡушҡан.

– Эх... пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ваҡытында йәшәһәк, нисек шәп булыр ине, атай! Үҙ күҙҙәребеҙ менән ятаҡан Пәйғәмбәребеҙҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күреп, уның ауыҙынан Изге Ҡөрьәнде ишетһәк!

– Әгәр һин ысынлап быны теләһәң, беҙ, хыял донъяһына сумып, ул ваҡыттарға күсә алабыҙ... Ни әйтерһең быға? Ваҡыт араuyына сәйәхәт итергә ризамы һин?

– Эйе, атай, мин риза!

– Ул сағында – әҙерлән! Бисмиллаһ (Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә исеме менән)! Күҙҙәреңде йом! Маҡсатыбыҙ - Мәҙинә... Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡалаһына күсәбеҙ. Маҡсатыбыҙға еттек! Хәҙер күҙҙәреңде ас! Ҡара – беҙ Мәҙинәлә! Ә хәҙер, әйҙә, Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙен табайыҡ. Уйлауымса, уны табыуы ауыр булмаясаҡ, сөнки ул күп ваҡытын мәсеттә үткәрә. Әлбиттә, ул – бында! Ана, ҡара, ҙур йыйын уртаһында Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ултыра. Таныныңмы? Ана ул – мыҡты кәүҙәле, аҡ ебәк тәнле, нурлы йөҙлө, ҡуйы һаҡаллы, тулҡынланып төшөп торған сәсле, дуғаланып бөгөлөп торған ҡаштары аҫтында - тәрән ҡара күҙҙәре. Таныныңмы һөйөклө Пәйғәмбәребеҙҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)?! Аллаға шөкөр, ваҡытында килдек. Ҡөрьәндең аяттары нисек төшөрөлгәнен белгең киләйме. Минең уйымса, хәҙер күрербеҙ. Ҡара, Пәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) аҡ тәне һарғылт төҫкә инде. Яҫы маңлайында тир бөрсөктәре барлыҡҡа килде. Эргәһендәге кешеләр, ҡараштарын ергә төбәп, шымып ҡалған. Бер тауыш та ишетелмәй. Тимәк Йәбраил фәрештә (ғәләйһис-сәләм) Аллаһтың яңы вәхиен тапшыра, шуға күрә Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шулай йонсоу күренә. Бына ул күҙҙәрен асты! Улар баҙлай! Аҫыл йөҙө илаһи вәхи нурын сағылдыра. Сәхәбәләргә иғтибар ит. Улар, түҙемһеҙләнеп, Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең яңы бойороғон тапшырыуын көтә. Уларҙың күҙҙәре, асылһа, рауза тажы кеүек, бөтә



донъяға илаһи хәҡиҡәт хуш еҫен таратыр төҫлә тойолған ирендәргә төбәлгән. Ана, ул һөйләй башланы:

– Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә яңы аят төшөрҙө. Вәхиҙе яҙыусылар был аятты «Баҡара» сүрәһенә яҙһындар. Яйлап уҡыйым. Иғтибарлап тыңлағыҙ! Өйрәнегеҙ һәм кемдәр бында юҡ, уларҙы өйрәтегеҙ! Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бойора:

**«Йөҙөгөҙҙө Көнсығыш йәки Көнбайышҡа табан ҡаратыу (ғибәҙәт ҡылыу) ғына изгелек ҡылыу түгел. Ысын изгелек ул — кешенең ҡылған яҡшы ғәмәлдәрелер: Аллаһҡа, Әхирәт көнөнә, фәрештәләргә, китаптарға, пәйғәмбәрҙәргә инаныу; яҡындарға, йәтимдәргә, ярлыларға, юлда ҡалғандарға (аҙашҡандарға), һораныусыларға һәм ҡолдарға (әсирҙәргә) ҡәҙерле малынан өлөш сығарыу, намаҙ ҡылыу, зәкәт биреү. Антыңды тотоу, ауыр замандарҙа, ҡайғы-хәсрәт һәм һуғыш ваҡыттарында сабыр итеү, түҙем булыу. Ысын мосолман кешеһенең сифаты шуларҙан тора. Мөттәкийҙәр (Аллаһтың яҙаһынан ҡурҡҡан мөьминдәр) бары тик шундайҙар ғына була ала»** («Баҡара» сүрәһе, 2/177).

– Күрәһеңме, улым, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Ҡөрьәндән аят төшөрөүе булды, Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), шунда уҡ сәхәбәләренә өйрәтеп, уны яҙып ҡуйырға ҡушты. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тороп киткәс, сәхәбәләр, ҡабат-ҡабат был аяттарҙы уҡып, ятлап, ишетмәй ҡалғандарға өйрәтәсәк.

– Атай, был хыял-сәйәхәт өсөн һиңә рәхмәт. Ә Изге Ҡөрьән күпме ваҡыт төшөрөлгән?

– Пәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беренсе вәхи 610 йылда Мәккәлә төшөрөлгән. Аҙаҡ вәхи тапшырылыу 13 йыл Мәккәлә һәм 10 йыл Мәҙинәлә дауам иткән, йәғни 23 йыл.

– Атай! Һине Изге Ҡөрьәнде уҡыуыңдан айырғаным өсөн ғәфү ит, шулай ҙа әйт әле: ни өсөн Ҡөрьән бер юлы ғына түгел, ә 23 йыл дауамында төшөрөлгән?

– Мосолмандар уны еңелерәк үҙләштерһен өсөн. Әгәр Изге Ҡөрьән бер юлы төшөрөлһә, уны яҙыуы һәм өйрәнеүе бик ауыр булыр ине. Изге Ҡөрьән аяттары берәй сәбәп уңайынан, йә Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һорауына яуап итеп төшөрөлгән. Изге Ҡөрьәнде йөрәктәре менән ҡабул иткәндәр, бер хәрефен дә үҙгәртмәйенсә, уның ҡанундары буйынса йәшәгәндәр. Улым! Беҙ ҙә, Изге Ҡөрьәнде даими уҡып, Аллаһтың бойороҡтары менән тыйыуҙарын яҡшы белеп һәм уларҙы ҡәтғи үтәп йәшәйәсәкбеҙ. Динебеҙҙең ҡанундары буйынса йәшәйәсәкбеҙ һәм, Изге Ҡөрьәнде үҙгәртмәйенсә, киләсәк быуындарға тапшырасаҡбыҙ.

Атаһының Изге Ҡөрьәнде уҡыуға ни өсөн айырым әһәмиәт биргәнен хәҙер Закир аңланы, сөнки ул – төптән уйлап уҡып, бөтә тормошоң дауамында ҡәтғи эйәреп йәшәй торған Китап, Раббыбыҙ Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Һүҙе.

**Йәшәр Ҡандәмир**

# КЕШЕ ИЛАҺИ ЯҘМАЛАРҒА МОХТАЖ

Кешенең һиҙеү ағзалары араһында күҙ – айырым урында тора. Сөнки уратып алған тирә-яҡ тураһында 80% мәғлүмәтте күҙ аша алабыҙ.

Ләкин күҙҙең күреүе лә ҡайһы бер шарттар менән сикләнгән. Беренсенән, кеше дөм ҡараңғыла күрә алмай. Предметҡа яҡтылыҡ төшһә генә, ул уға сағылып, күҙҙең селтәр ҡатлауына эләгә һәм күренә. Икенсенән, кешенең күҙҙәре атом, микроб йәки вирус кеүек бәләкәй өлөшсә, киҫәксәләрҙе күреү һәм айырыуға һәләтһеҙ, уларҙы махсус приборҙар – микроскоптар ярҙамында ғына күрә ала.

Кешенең башҡа йән эйәләренән өҫтөнлөгөн күрһәткән һәм уларҙан айырған нәмә - аҡыл. Аҡылға эйә булған кеше изгелек менән яуызлыҡты, дөрөҫлөк һәм ялғанлыҡты, файҙа һәм зыянды айыра ала. Ләкин аҡылдың да, күҙҙәр кеүек, ниндәйҙер кимәлдә сиктәре бар. Яҡшыны насарҙан, файҙаны зыяндан айырыр өсөн бер аҡыл ғына етмәй. Күҙҙәребеҙ күрһен өсөн яҡтылыҡ мотлаҡ булһа, ә аҡылды дөрөҫ файҙаланыр өсөн илаһи асыш яҡтылығы кәрәк. Бигерәк тә аҡыл менән генә яуап таба алыу мөмкин булмаған алдағы тормош, ожмах һәм тамуҡ хаҡындағы һорауҙарға.

Илаһи асыш (вәхи) беҙҙең аҡылыбыҙҙы, зиһенебеҙҙе, аңыбыҙҙы хаҡиҡәт яҡтылығы менән яҡтырта, дөрөҫ (хаҡ) юлға өндәй (әйҙәй). Беҙҙе Барлыҡҡа Килтереүсене уның илаһи асыштары аша танып беләбеҙ, Уның ярҙамында был донъяға килеү мәғәнәһен һәм маҡсатын аңлайбыҙ.

Илаһи асыштар аша бирелгән белемде мөһим һорауҙарға яуап табыу өсөн ҡулланабыҙ:

- Тормошобоҙҙоң йәшәү мәғәнәһе нимәлә?
- Беҙ нимәгә ынтылырға тейешбеҙ?
- Аллаһ Тәғәлә алдында бурыстарыбыҙ нимәлә?
- Үлемдән һуң кеше юҡҡа сығамы?
- Үлемдән һуң кеше яңынан терелтеләме?
- Кеше үҙенең ҡылған ғәмәлдәре өсөн ҡасан һәм нисек әжерен ала?

Бөйөк Аллаһ кешеләр менән бәйләнеште Изге Яҙмалар һәм пәйғәмбәрҙәр аша урынлаштыра. Тәүге пәйғәмбәр атабыҙ Әҙәм ғәләйһис-сәләмдән алып, ер йөҙөндә булып киткән барса пәйғәмбәрҙәр ҙә беҙгә Аллаһтың мөрәжәғәтен еткергәндәр. Пәйғәмбәрҙәр аша кешеләргә Аллаһ тарафынан ебәрелгән был мөрәжәғәттәр, илаһи асыштар **«вәхи»** тип атала.



# ИЛАҺИ ЯҘМАЛАР



Аллаһу Тәғәлә бойора:

«Һиңә күндерелгән һәм һиңә ҡәҙәр күндерелгән бөтә нәмәгә ышаналар»

(Бәҡара сүрәһе, 4-се аят)

Иң төп шарттарҙың береһе – Изге Яҙмаларҙың Аллаһу Тәғәлә тарафынан төшөрөлөүенә һәм улар аша бирелгән асыштарға, ғилемгә инаныу.

Бар ғаләмдәр Хужаһы Аллаһ үҙенең пәйғәмбәрҙәре йәки фәрештәләре аша ошондай асыштарҙы төшөргән дә инде. Асыштар аша алынған белемде пәйғәмбәрҙәр кешеләргә тапшыралар. Йөкмәткеһенә әмер һәм бойороуҙар, тыйыуҙар, өгөт-нәсихәт, кәңәштәр ингән был китаптар «Изге Яҙмалар» тип атала. Нисек дөрөҫ инанырға, ғибәҙәт ҡылырға, йәмғиәттә үҙеңде нисек тоторға ошо яҙмаларҙан төшөнәбеҙ. Аллаһтың ошо бойороҡтарын үтәп, уның ризалығын алырға ынтылабыҙ.

Аллаһ ҡайһы бер пәйғәмбәрҙәргә сәхифәләр (биттәр), ә ҡайһы берҙәренә илаһи бойороуҙар һәм тыйыуҙар күрһәтелгән китаптар ебәргән. Кешелеккә барыһы – дүрт илаһи Китап төшөрөлгән:

**Сәхифәләр (биттәр):**

**Әҙәм ғәләйһиссәлләмгә - 10 сәхифә**

**Шис ғәләйһиссәлләмгә - 50 сәхифә**

**Иҙрис ғәләйһиссәлләмгә - 30 сәхифә**

**Ибраһим ғәләйһиссәлләмгә - 10 сәхифә тапшырылған.**

**Барыһы 100 сәхифә төшөрөлгән.**

### Тәүрат

Муса ғәләйһис-сәләмгә ебәрелә. Изге Ҡөрьәндә, Тәүрат кешеләргә хаҡ юл күрһәткән Изге Яҙмаларҙан һанала, тип хәбәр ителә. Шуның өсөн дә ебәрелгән ошо тәүге китап Бөйөк Аллаһтың һүҙҙәре яҙылған илаһи Китап икәненә инанабыҙ.

Пәйғәмбәр Муса ғәләйһис-сәләм аша тапшырылған был китап Исраил улдарына, йәғни йәһүдтәргә тәғәйенләнә. Әммә йәһүдтәр Тәүратты Аллаһ ебәргән мәғәнәһе менән һаҡлай алмағандар. Китаптың төп нөсхәһе юғалтылған. Бик күп йылдар үткәс кенә Тәүрат йәһүд ғалимдары тарафынан яңынан яҙылған. Шулай итеп, Тәүрат Муса ғәләйһис-сәләмгә Аллаһ тарафынан ебәрелгән тәүге китап булһа ла, беҙҙең көндәргә кешеләрҙең үҙгәртеүе сәбәпле, беҙҙең көндәргә хәҙерге вариантында бик күп үҙгәрештәр менән килеп еткән. Хәҙерге Тәүрат боҙоп үҙгәртелгән яҙма иҫәпләнә һәм тулы ҡиммәтле илаһи Китап булып һаналмай.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Унан алда етәксе һәм рәхмәт итеп Мусаның Китабы күндерелде».

(Әхҡаф сүрәһе, 46/12)

### Зәбүр

Дауыт ғәләйһис-сәләмгә ебәрелә. Аллаһ уны ер йөҙөндә бер кемдә лә булмаған иҫ киткес матур тауыш менән бүләкләгән. Ул үҙенең һоҡланғыс тауышы менән Зәбүрҙе уҡый башлаһа, тыңлаусылар барыһы ла хайран ҡалғандар. Хәҙерге заманда Зәбүр Тәүраттың бер бүлеге булып тора. Беҙгә Зәбүр Аллаһтың бойороуҙары һәм тыйыуҙары йөкмәткеһенә индерелмәгән, тик шиғри юлдарҙа бирелгән кәңәш һәм өгөт-нәсихәттән торған китап булараҡ билдәле.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Беҙ пәйғәмбәрҙәрҙең берәүҙәрен икенселәренән өҫтөн иттек, Дауытҡа Зәбүр (китабын) бирҙек».

(Исра сүрәһе, 55-се аят)

### Инжил

Ғайса ғәләйһис-сәләмгә тапшырыла. Әммә ул да, Тәүрат һәм Зәбүр китаптары кеүек, кешеләр тарафынан йөкмәткеһе боҙолоп, үҙгәртелеүгә дусар ителә. Ғайса пәйғәмбәр заманындағы Инжил яҙма рәүештә һаҡланмаған. Аҙаҡкараҡ, ваҡыт үтеү менән, уның күп кенә варианттары барлыҡҡа килә башлай. 325 йылда Изник ҡалаһындағы христиан сиркәүендә дин әһелдәре Инжилдең бик күп варианттары араһынан 4 китапты һайлап алалар. Хәҙерге көндәрҙә, христиан сиркәүҙәрендә, Инжил китаптарының Матфей, Марк, Иоанн һәм Лука варианттары ғына танылыу алған.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Уларҙың эҙенән Беҙ Мәрйәм улы Ғайсаны ебәрҙек. Беҙ Уға элгәре Әт-Тәүратта күндергәндәрҙең хаҡлығын раҫлап, тәҡүәлеләргә күрһәтмә итеп Инжилде бирҙек».

(Мәидә сүрәһе, 46-сы аят)

### Изге Ҡөрьән

Был һуңғы Илаһи Китап - Аллаһ тарафынан һөйөклө пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәткә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә) төшөрөлгән.

Ҡайһы бер илаһи Китаптар юғалған, ҡайһылары кешеләр тарафынан үҙгәртелгән. Аллаһ кешелеккә тик Изге Ҡөрьән аша ғына алдағы изге Яҙмаларҙа булған иң мөһим ғилемдәрҙе тапшырған.

Мосолмандар кешеләр үҙгәрткән яҙмаларға түгел, ә Аллаһ тарафынан ебәрелгән Изге Яҙмаларҙың дөрөҫлөгөнә ышанырға тейеш. Беҙ Бөйөк Аллаһ ебәргән китаптарҙың барыһын да таныйбыҙ, әммә тик Изге Ҡөрьәндең генә үҙгәртелмәй һаҡланғанына ышанабыҙ.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Беҙ зекер (Ҡөрьән) күндерҙек, һәм Беҙ уны һаҡлайбыҙ».

(Хижер сүрәһе, 9-сы аят)

# ИЛАҺИ ЯҘМАЛАРҘЫҢ ҠИММӘТЕ

## Илаһи Яҙмалар

- Һәр саҡ Бөйөк Аллаһ менән бәйләнеште тәьмин итә.
- Был донъяға килеү маҡсатыбыҙҙы аңлата һәм бурыстарыбыҙҙы өйрәтә.
- Изге Яҙмалар инаныуыбыҙҙың нигеҙен үҙгәртеүҙәрҙән һәм боҙоуҙан һаҡлай.
- Киләсәк быуынға өгөт- нәсихәт һәм ғибрәт өсөн, кешелек тарихында булып үткән ваҡиғалар тураһында һөйләй.

Без яраткан кешебеҙҙән алған хат юлдарын күп тапҡыр уҡыйбыҙ. Күңелгә яткан һөйләмдәрҙе ғүмерлеккә иҫтә ҡалдырабыҙ. Бөйөк Аллаһтың һүҙе булған Изге Яҙмалар кешелеккә ебәрелгән хат кеүек. Бар ғаләмдәрҙең Хужаһы булған Аллаһтың үҙенән килгән был хатта һәм ундағы һөйләмдәрҙә (аятта) әйтеп бөткөһөҙ гүзәллек һәм тәрән мәғәнәле аҡыл ята.Уны уҡығанда, әйтерһең дә, Бөйөк Аллаһ менән әңгәмәләшәбеҙ. Мәңгелек донъянан беҙҙең Ер йөҙөнә ебәрелгән был илаһи һүҙҙәрҙе уҡығанда һәм тыңлағанда, улар йөрәктәребеҙгә яңынан- яңы ҡабатланмаҫ хистәр менән тәьҫир итә. Күңелдәребеҙҙәге Бөйөк Аллаһҡа булған һөйөүебеҙҙе тағы ла ныҒыта. **Изге Яҙмалар һәр саҡ Бөйөк Аллаһ менән бәйләнеште һаҡлай.**

**Наш любимый Пророк (r) говорит:**

«Мин һеҙгә бик мөһим ике нәмә ҡалдырам: береһе - Аллаһ Китабы. Ул Аллаһтың ебе (Ҡөрьән). Кем уға йәбешә, ул дөрөҫ юл табыр. Кем унан айырылһа, хаҡ юлдан яҙыр».

(Мөслим, Фәдәилүс-сәхәбә, 37)



Изге Яҙмалар беҙгә Бөйөк Аллаһтың ҡушҡандарын һәм тыйылғандарын тапшыра, **был донъяға килеү маҡсатыбыҙҙы аңлата һәм бурыстарыбыҙҙы өйрәтә**. Улар берҙән-бер булған Аллаһҡа (Илаһҡа) табынырға (ғибәҙәт ҡылырға) һәм Уның пәйғәмбәрҙәренән өлгө алырға әмер итә. Беҙҙе изге эштәр ҡылырға, тоғро һәм ғәҙел булырға, мохтаждарға ярҙам итергә саҡыра. Изге Яҙмалар Аллаһу Тәғәләнең ризалығын алып, ике донъя рәхәтенә һәм бәхетенә ирешер өсөн тура юл күрһәтә.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Был хәбәр - кешеләргә. Әйтһендәр уларға! Уның берҙән-бер Илаһ икәнен белһендәр ҙә, зиһене булған кешеләр аҡылға килһендәр».

(Ибраһим сүрәһе, 52-се аят)



Нигеҙе ныҡ булмаған бер йорт та оҙаҡ тормай. Кешеләрҙен инаныуҙары ла, ошо йорттар кеүек, ныҡ нигеҙле булырға тейеш. Кешеләр дөрөҫ инаныуға өйрәтеүсе Изге Яҙмаларҙы үҙгәртеп боҙа башлаһалар, аҙашыу юлына төшәләр, берҙән-бер Аллаһтың диненән ситләшәләр. Улар, ҡара урманда юғалып ҡалған кешеләй, тормошта ла аҙашып йөрөйҙәр. Тыйылғанды - ҡушылған, ә үтәргә ҡушылғанды тыйылғанға һанайҙар. Аллаһ, кешеләрҙе дөрөҫ дингә өйрәтеү өсөн, тағы ла яңы Яҙмалар ебәрә. **Аллаһу Тәғәлә тарафынан ебәрелгән был Изге Яҙмалар диндең нигеҙен үҙгәртеү һәм боҙоуҙарҙан һаҡлай.** Изге Ҡөрьән - һуңғы илаһи Китап. Алда ебәрелгән Изге Яҙмалардағы төп ғилемдәр унда (Ҡөрьәндә) тупланған.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Ул һиңә китап ебәреп, элгәре күндерелгәндәрҙең хаҡ булғанын раҫланы. Ул элек Тәүрат менән Инжил ебәрҙе».

(Ғимран сүрәһе, 3-сө аят)

Әҙәм (ғәләйһис-сәлләм) пәйғәмбәр - Ер йөҙөндә иң беренсе кеше. Ерҙә булған кешеләр унан барлыҡҡа килгән. Шул алыҫ

быуаттарҙан алып бөгөнгө көнгә тиклем бик күп быуындар алмашынды. Улар араһында пәйғәмбәрҙәр артынан эйәргән, берҙән-бер Аллаһҡа инанған һәм изге эштәр ҡылған кешеләр ҙә була. Улар тураһында яҡшы хәтирәләр генә ҡалған. Улар киләсәк быуын кешеләре өсөн өлгө булып торалар. Әммә ер йөҙөндә улар менән бер рәттән пәйғәмбәрҙәрҙе, Изге Яҙмаларҙы ҡабул итмәгән, ғәҙелһеҙлек ҡылған, көсһөҙ һәм үҙҙәрен яҡлай алмағандарҙы йәберләгән, ғәйепһеҙҙәрҙе үлтергән ҡәбиләләр ҙә булған. Улар үҙҙәренең байлыҡтарын тыйылған нәмәләргә тотонғандар. Шул сәбәпле Аллаһтың мәрхәмәтенән алыҫлашҡандар һәм тарихта насар дан ҡалдырғандар. **Изге Яҙмалар, киләсәк быуынға өгөт-нәсихәт һәм ғибрәт булһын өсөн, кешелек тарихында булып үткән ваҡиғалар тураһында һөйләй.**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Улар хаҡындағы ҡиссала аҡылы булған кешеләргә ғибрәт бар: был уйлап сығарылған хикәйәт кенә булманы, ә уға тиклем күндергәндең дөрөҫлөгөн раҫлар өсөн, төрлө нәмәне аңлатыр өсөн, иман килтергән кешеләргә юл күрһәтер, рәхмәт билдерер өсөн булды».

(Йософ сүрәһе, 111-се аят)



Мең йыл элек Ҡыҙыл диңгеҙҙең һыуы аҫтында ҡалған, Ҡөҙрәтле Аллаһҡа сәждә ҡылыусы, фирғәүен кәүҙәһенең мумияһы табылған.



Мысыр пирамидалары - фирғәүендәрҙең кәшәнәләре ул.

# ӘЙҘӘГЕҘ, ҮҘЕБЕҘҘЕҢ КИТАП МЕНӘН ТАНЫШАЙЫҠ

### Изге Ҡөрьәндең королошо

Ҡөрьән - Аллаһу Тәғәлә һүҙе. Ул Аллаһ тарафынан төрлө ваҡыттарҙа Ябраил ғәләйһис-сәлләм фәрештә аша һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә егерме өс йыл буйына өлөшләп бирелгән. Ҡөрьәнде өлөштәр менән биреү уны иҫтә ҡалдырыуҙы еңеләйтә. Ҡөрьәнде яттан белгән кешеләр (хафиздар) күбәйә. Пәйғәмбәребеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең төшөрөлгән вәхиҙәрҙе яҙып барыусы бер нисә кешеһе була. Һуңынан Ҡөрьән бер китап итеп туплана. Яҡынса 600 биттән тора.

Изге Ҡөрьән «сүрә» тип аталған 114 бүлектән тора. Һәр сүрә, тура мәғәнәлә әйткәндә, мөһим булған аяттарға бүленә. Аяттар бер йәки бер нисә һөйләмдән тора. Һәр сүрә ниндәйҙер ғәҙәти булмаған һүҙҙәрҙән килеп сыҡҡан йәки уларға бәйле ваҡиғалар мәғәнәһен үҙ эсенә алған атамаларҙан тора. Уларҙың һәр береһе төрлө һандарҙа булған аяттарҙы туплаған. Иң оҙон сүрә - «Бәҡара», ул 286 аятты үҙ эсенә алған. Ә иң ҡыҫҡалары - «Кәүсәр» һәм «Ғаср», улар өс аяттан тора. Изге Ҡөрьән «Фатиха» сүрәһе менән башлана, «Нәс» сүрәһе менән тамамлана. Сүрәләрҙең бирелеү тәртибе уларҙың төшөрөү ваҡытына ҡарап түгел, ә Аллаһ әмере менән ҡуйылған. Ҡөрьән, айҙың һәр көнөндә, бигерәк тә изге Рамаҙан айында уҡыр өсөн, яҡынса 30 тигеҙ өлөшкә - джузға бүленгән. Ә һәр джуз ике хизбтан тора. Барыһы 60 хизб иҫәпләнә.

Изге Ҡөрьән ғәрәп телендә төшөрөлгән. Ғәрәп телен белмәгәндәргә тәржемәләр эшләнгән. Аяттарҙың тулы мәғәнәһе тәфсир китаптарында бирегән.



# ТӘҮГЕ ИЛАҺИ ВӘХИ

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йәшәгән заманда кешеләр боттарға табынған. Улар хөрмәтенә байрамдар ойошторғандар. Боттарға бағышлап, хайуандар ҡорбан ителгән. Был мәжүсилек һәм яһиллыҡ (рухи наҙанлыҡ, әҙәпһеҙлек) дәүере була. Беҙҙең Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер ҡасан да боттарға табынмаған, уларға ҡорбан итеп салынған хайуан итен ашамаған, мәжүсилек байрамдарында ҡатнашмаған. Иҫерткес эсемлектәр эсмәгән, ҡомарлы уйындар уйнамаған. Ул башҡаларҙан күркәм холҡо менән айырылып торған. Ғәҙеллеге, ышаныслығы, һүҙенә тоғролоғо, баҫалҡылығы һәм етдилеге менән хөрмәт һәм ышаныс яулаған.

Пәйғәмбәр Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең ата-бабаһы Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) һымаҡ «хәниф» була - тик Берҙән бер Аллаһҡа инана. Уға 40 йәш тулғас, ысынбарлыҡҡа тап килгән, иҫкәртеүле илаһи төштәр күрә башлай. Ул күберәк тауҙар араһына сығып китеп, яңғыҙ ҡалырға ғәҙәтләнә, тәүлектәрен ғибәҙәттә үткәрә. Был хәл, миләди иҫәп менән, 610 йылдың Рамаҙан айында Мәккә эргәһендәге Хира тауы мәмерйәһендә таңға ҡарай була. Ҡапыл илаһи вәхи менән килгән Ябраил фәрештә пәйҙә була. Ул Пәйғәмбәребеҙ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә:

- Уҡы! - ти.

Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нық тулҡынланып, уҡый белмәүен әйтә. Ябраил (ғәләйһис-сәләм) фәрештә яңынан бойора:

-Уҡы! - ти ул тағы.

Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яңынан:

- Уҡый белмәйем, - тип яуаплай.

Ябраил фәрештә яңынан: «Уҡы!» - тип бойора ла,



«Ғәләҡ» сүрәһенең тәүге биш аятын тапшыра. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ебәрелгән аяттарҙы ҡабатлай. Уларҙың мәғәнәһе ошолай була:

**«Уҡы! Барлыҡҡа килтерелгән Раббың исеме менән!**

**Ул кешене ойошҡан ҡандан бар итте.**

**Уҡы! Раббың һинең – иң йомарты!**

**Ул ҡәләм менән өйрәтте, кешеләргә ул белмәгән нәмәләрҙе өйрәтте»** (Ғәләҡ сүрәһе, 1-5-се аяттар).

Фәрештә аша, Аллаһу Тәғәләнең фәрештә аша ебәргән аяттарын ҡабатлағандан һуң, Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тороп баҫа. Ул шул хәтлем тетрәнеүҙән һәм ҡурҡыуҙан ҡалтырана. Мәмерйәнән сыҡҡас та йыһандан килгән был тауышты тағы ишетә. Ябраил фәрештәнең күк күкрәүенә тиң тауышы күк йөҙөнән алып, киң офоҡтарҙы тултыра, бар ерҙә лә ошо тауыш яңғырай:

- Әй, Мөхәммәт! Һин - Аллаһтың Илсеһе, ә мин - Ябраил!

Был ваҡиға Мөхәммәтте (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) аптырауға һәм ныҡ борсоуға һала. Ул йәһәт кенә тауҙан төшә лә өйөнә таба ашыға. Уның бындай хәлдә ҡайтып ингәнен күреп, ҡатыны Хәҙисә (разыйаллаһу ғәнһә) бик борсола. Ә Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һаман да дер ҡалтырауынан туҡтамай. Бер нәмә лә әйтмәй, уны ҡаплауҙарын һәм ышыҡлауҙарын ғына үтенеп, түшәккә барып ята һәм йоҡлап китә. Йоҡоһонан уянғас, һөйөклө ҡатынына үҙе менән булған хәлде һөйләп бирә. Хәҙисә (разыйаллаһу ғәнһә) иғтибар менән тыңлағандан һуң, уны тынысландыра:

- Ҡурҡма! Аллаһ һине һис ҡасан да оятҡа ҡалдырмаясаҡ! Һин бит туғандарың менән яҡшы мөнәсәбәттәһең. Һәр ваҡыт тик дөрөҫтө генә һөйләйһең. Ауырлыҡтарҙан ҡасмайһың. Бәләгә ҡалғандарға гел генә ярҙамға ашығаһың. Мохтаждарҙың, етемдәрҙең күңелен күрәһең! – ти.

Хәҙисәнең (разыйаллаһу ғәнһәнең) был һүҙҙәре Аллаһ Илсеһен ҡыуандыра һәм тынысландыра. Шунан Хәҙисә (разыйаллаһу ғәнһә) ике туған ағаһы Уараҡаға барып килергә тәҡдим итә. Уараҡа ибн Нәүфәл христиан динен тотҡан, Тәүратты һәм Инжилды яҡшы белгән, хәҙер инде бик ҡартайған ҡарт монах була. Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйләгәндәренән һуң, ул бик ныҡ тулҡынлана.

«Ант итәм! Һин - ошо халыҡтың Пәйғәмбәре! Ә күргән фәрештә - Ябраил фәрештә! Ошо уҡ фәрештә, Муса һәм Ғайса (ғәләйһүмәс-сәләм) пәйғәмбәрҙәргә лә килеп, Бөйөк Аллаһтың әмерҙәрен еткергән», - тип әйтә. Дауам итеп: «Шуныһы үкенесле: мин хәҙер нык ҡартмын, һиңә ярҙам итә алмайым. Хаҡ дингә саҡырған ваҡытта халҡың һине алдаҡсыға һанаясаҡ, тыуған ерҙәреңдән ҡыуасаҡ!»

Был һүҙҙәрҙе ишетеп шаҡ ҡатҡан Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм): «Ысынлап та, мине тыуып-үҫкән ерҙәремдән ҡыуырҙармы?» - тип ғәжәпләнеп һораған. Уараҡа: «Эйе! Һинең һымаҡ, Аллаһтың әмер-бойороҡтарын кешеләргә еткерергә ебәрелгән бөтә пәйғәмбәрҙәр ҙә нәҫел һәм ҡәбиләләштәре тарафынан дошмандарса ҡаршы алынған. Уларҙың ыҙалатыуҙарына, йәберләүҙәренә тарығандар. Хатта тыуып - үҫкән ерҙәренән ҡыуылыуға ла дусар ителгәндәр!»



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Кешегә әйләп,төшөндөрөп уҡыр өсөн Ҡөрьәнде Беҙ өлөштәргә бүлдек, шунан бер-бер артлы күндерҙек».

(Исра сүрәһе, 106-сы аят)

## Изге Ҡөрьәнде яҙыу һәм ятлау

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яңы аяттар килеү менән, сәхәбәләренә тапшырған, ә улар шунда уҡ иҫтә ҡалдырырға, ятларға ынтылғандар. Уларҙан тыш, төшөрөлгән аяттарҙы махсус тәғәйенләнгән кешеләр ҙә яҙып барғандар. Шулай итеп, Ҡөрьәндең һәр төшөрөлгән аяты Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Үҙе һәм уның сәхәбәләре тарафынан күңелдән ятлап алынған. Бер үк ваҡытта был асыштарҙы яҙып та барғандар.

Асыштарҙы яҙып барыусылар, Ҡөрьән аяттарын яҙыу өсөн, ул заманда киң таралған нәҙек таш ярҡаларҙы, хайуандарҙың эшкәртелгән тире һәм ҡалаҡ һөйәктәрен, финик пальмаларының япраҡтарын ҡулланғандар. Башта Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) төшөрөлгән аяттарҙы уҡыған, ә яҙыусылар уның артынан ишеткәндәрен яҙып барғандар. Шунан Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҙылғандарҙы уҡып ишеттереүҙәрен һораған. Ул иғтибар менән тыңлаған һәм яҙмаларҙың дөрөҫлөгөн тикшергән. Дүрт тоғро һәм ғәҙел хәлиф - Әбү Бәкр, Ғүмәр, Усман һәм Әли (разыйаллаһу ғәнһүм) - асыштарҙы яҙып барыусылар (кәтибивәхиҙәр) булған. Был вазифаны уларҙан башҡа Зәйн ибн Сабит, Убай ибн Ҡааб, Мөәз ибн Джәбәл (разыйаллаһу ғәнһүм) кеүек танылған сәхәбәләр ҙә башҡарған.



Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) төшөрөлгән аяттарҙы намаҙ барышында ла, һәм башҡа ваҡыттарҙа ла уҡыған. Ул мосолмандарға аяттарҙың йөкмәткеһен һәм мәғәнәһен аңлатҡан. Рамаҙан айы башланғас, беҙҙең Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Йәбраил фәрештә (ғәләйһиссәләм) менән бергәләп, шул ваҡытта төшөрөлгән аяттарҙы уҡығандар. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был донъяны ташлап китер алдынан, Рамаҙан айында, Йәбраил фәрештә менән ике тапҡыр бер - береһенә Ҡөрьән уҡыйҙар. Алмашлап уҡыу - муҡабәлә тип атала.

## Изге Ҡөрьәнде бер Китапҡа туплау

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йәшәгән ваҡытта Изге Ҡөрьән уның сәхәбәләре тарафынан ятлана һәм яҙма рәүештә лә һаҡлана. Әммә, изге асыштар төшөрөлөүен дауам итеүе һәм тамамланмауы сәбәпле, яҙылған аят һәм сүрәләр бер китап итеп тупланмаған була.

Аллаһ илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был донъянан киткәс, Уның дуҫтары тарафынан, мосолмандарҙың хәлифе булып, Уның яҡын дуҫы Әбү Бәкр (разыйаллаһу ғәнһү) һайлана. Мосолмандар менән идара итеү дәүерендә уға илен һәм халҡын Исламға ҡаршы дошмандарҙан һаҡлау бурысы йөкмәтелә. Һуғыштарҙа Ҡөрьәнде ятлап белгән күп кенә сәхәбәләр һәм хафиздар һәләк була. Бындай ҡайғылы хәл мосолмандарҙа ҙур борсолоу һәм хафа тыуҙыра. Намыҫлы һәм кешелекле Ғүмәр Әбү Бәкргә кешеләр ҡулында булған Ҡөрьән аяттарының бар яҙмаларын да йыйып алырға тәкдим итәләр. Шулай итеп, Яҙмаларҙы яҙып барыусы Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) төп кәтибивәхиҙе Зәйд ибн Сабит (разыйаллаһу ғәнһү) етәкселегндә комиссия ойошторола. Был комиссияның бөтә ағзалары ла хафиздар була. Йыл буйы бик етди һәм көсөргәнешле эш бара.Төрлө киҫәктәргә бүленеп йөрөгән, төрлө тарафтарға таралаған Ҡөрьән яҙмалары бергә йыйыла, бер тәртипкә ҡуйыла һәм яңы биттәргә күсерелә. Әҙер булған Ҡөрьән китабы Әбү Бәкр (разыйаллаһу ғәнһү) хәлифкә тапшырыла.

### Изге Ҡөрьәндең даналарын таратыу

Хәлиф булып Ғүмәр һәм Усман (разыйаллаһу ғәнһүмә) идара иткән ваҡытта, мосолмандарҙың еңеүҙәре менән бергә, яңы яулаған ерҙәрҙә һәм илдәрҙә лә ислам дине тарала башлай. Мәҙәниәте, милләте төрлө булған, төрлө телдә һөйләшкән кешеләр бер - бер артлы мосолман булалар. Улар Ҡөрьән уҡырға һәм уны өйрәнергә теләйҙәр.

Шулай итеп, Ҡөрьән китабының һандарын күбәйтеү һәм таратыу кәрәклеге барлыҡҡа килә. Ҡасандыр, үҙ ваҡытында Ҡөрьән аяттарын бергә туплаған хәлиф Әбү Бәкр һымаҡ, хәлиф Усман да Ҡөрьәндең яңы даналарын (экземпляр) күбәйтеп күсереп яҙыу өсөн Зәйд ибн Сабит (разыйаллаһу ғәнһү) етәкселегендә яңынан комиссия йыя. Бер Ҡөрьән китабы Мәҙинәлә ҡала. Ҡалғандары Мәккә, Куфа, Басра, Сүриә, Йәмән һәм Бахрайнға оҙатыла. Был үҙәктәргә Ҡөрьән китаптары менән уҡытыусылыр ҙа ебәрелә.

### Изге Ҡөрьәнде уҡыу кимməттәре

Изге Ҡөрьән – иң матур һәм иң бөйөк, дәрәжәле һүҙ ул. Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм): *«Арабыҙҙан*



- **Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йәшәгән ваҡытта Изге Ҡөрьән уның сәхәбәләре тарафынан яттан ятлана һәм яҙма рәүештә лә һаҡлана.**
- **Әбү Бәкр (разыйаллаһу ғәнһү) идара иткән ваҡытта Ҡөрьән аяттары бер китапҡа йыйыла.**
- **Усман (разыйаллаһу ғәнһү) идара иткән дәүерҙә Ҡөрьән китабының бер хәрефе лә үҙгәртелмәгән даналары арта. Ҡөрьән беҙҙең көндәргә лә бер хәрефе лә үҙгәртелмәгән килеш килеп етә.**

*Ҡөрьәнде өйрәнгән һәм уны башҡаларға ла өйрәткән кеше - иң яҡшы кеше»,* - тип әйткән (Бохари, 4639). Шуның өсөн беҙ ҙә, Унын ҡушыуы һәм бойороғо буйынса, Ҡөрьәнде уҡырға өйрәнергә һәм башҡаларҙы ла өйрәтергә тейешбеҙ.

Изге Ҡөрьәнде уҡыу - ғибәҙәттең бер төрө һанала. Кем Ҡөрьән уҡый һәм ундағы күрһәткәндәр буйынса йәшәй, шул кешегә Бөйөк Аллаһ ожмах вәғәҙә итә.

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт яҡшы балалар тәрбиәләгән ата-әсәләрҙең Ҡиәмәт көнөндә бүләкләнәсәктәре тураһында ла әйтер булған.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡөрьәнде яйлап, тейешле урындарҙа баҫым яһап уҡыған. Үҙенең сәхәбәләренә лә Ҡөрьәнде дөрөҫ һәм матур итеп уҡырға кәңәш биргән. Уларҙың Ҡөрьәнде йыш уҡыуҙарын теләгән. Ул Ҡөрьәнде матур итеп уҡыған кешеләрҙең фәрештәләр менән бергә буласаҡтарын хәбәр иткән. Ә кемдер Ҡөрьән уҡыу ауырлыҡ менән бирелеүгә ҡарамаҫтан уҡыуын дауам итә, уларҙы икеләтә сауап-әжерҙәр көтөүе хаҡында ҡыуаныслы хәбәр еткерә Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм).



**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Ҡиәмәт көнөндә, Ҡөрьән уҡыған һәм Ундағы күрһәтмәләр буйынса йәшәгән ата-әсәләрҙең баштарына таж кейҙереләсәк. Ул таждарҙан сыҡҡан яҡтылыҡ был донъяның бөтә йорттарын яҡтыртҡан ҡояш нурҙарынан да гүзәлерәк буласаҡ. Шулай булғас, Ҡөрьән ҡушҡанса йәшәгән кешеләргә ниндәй әжер – сауаптар бүләк ителәсәген уйлап ҡарағыҙ әле».

(Сунан, Әбү Дауыт, 1/355)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Аллаһтың Китабын уҡығандар, намаҙ ҡылғандар һәм үҙҙәренә бирелгән ризыҡты башҡаларға күрһәтмәйенсә лә, йәшермәйенсә лә биргәндәр, зыян күрмәйенсә, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ниғмәттәргә өмөт итә ала. Сөнки Аллаһ уларға тейешле әжерен теүәл итеп бирер, ниғмәттәрен арттырып та өләшер. Ул - Ярлыҡаусы, мул мөлкәт биреүсе».

(Фатыр сүрәһе, 29-30-сы аяттар)

# ҠӨРЬӘН КӘРИМДЕҢ ТӨП ФЕКЕРҘӘРЕ

Ҡөрьән «саф ғәрәп телендә» төшөрөлгән. Бер үк ваҡытта бер аятта йәки сүрәлә әллә нисә мәсьәлә сағылыуы мөмкин. Ҡөрьәндең стиле шундай юғары кимәлдә төҙөлгән, хатта кешеләр һәм ендәр бергә йыйылып, оҡшаш берәй аят тыуҙырырға теләһәләр ҙә, көстәренән килмәҫ ине. Ҡөрьәндең йөкмәткеһе мағлүмәт һәм белем тапшырыу менән генә сикләнмәй. Ҡөрьән Һүҙе кешеләрҙең аңына һәм йөрәгенә тәьҫир итә, уларҙы уйланырға һәм хис-тойғоһон байытырға мәжбүр итә. Ҡөрьән алған ғилемде инаныуға, инаныуҙы күркәм әхлаҡҡа әйләндерергә саҡыра.

Иң башта, Изге Ҡөрьән кешене дөрөҫ инаныу табыуға йүнәлтә. Был донъяға килеү маҡсатын аңлата. Бөйөк Аллаһ тураһында һөйләй. Ата-әсәйҙәргә, бөтә кешеләргә, бар булған йәнле һәм йәнһеҙ нәмәләргә яҡшы мөнәсәбәттә булырға өндәй.

Изге Ҡөрьән тағы нимәләр тураһында һөйләй? Нисек итеп Аллаһҡа инанырға, Уға дөрөҫ итеп ғибәҙәт ҡылырға өйрәтә. Яҡшылыҡҡа өндәй, яманлыҡ ҡылыуҙан туҡтата, рөхсәт ителгән хәләлдең һәм тыйылған харамдың нимә икәнлеген аңлата. Күркәм әхлаҡ тәрбиәләй. Ҡөрьәндә боронғо халыҡтарҙың тарихынан ғибрәтле һәм фәһемле хәлдәр бәйән ителә, Ер йөҙөнә килеп киткән, Бөйөк Аллаһтың Берлегенә инанырға саҡырған, пәйғәмбәрҙәр хаҡында һөйләнелә.

Шулай итеп, Изге Ҡөрьәндә беҙгә хаҡ юл менән барырға юл күрһәткән төп фекерҙәрҙе һанайыҡ:

**Ҡөрьән Кәримдең төп фекерҙәре**

- ✔ Иман нигеҙҙәре
- ✔ Ғибәҙәт мәсьәләләре
- ✔ Тәрбиә һәм әхлаҡ мәсьәләләре
- ✔ Хәләл һәм харам
- ✔ Кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте
- ✔ Доғалар
- ✔ Донъяның һәм ғаләмдең яратылыуы
- ✔ Үткән быуаттарҙың халҡы һәм пәйғәмбәрҙәре

## Иман нигеҙҙәре

Иман 6 нигеҙҙән тора. Беренсеһе - Аллаһу Тәғәләгә инаныу. Ҡөрьән беҙгә бар донъяны һәм ғаләмде Барлыҡҡа килтереүсе һәм уның Хужаһы булған Аллаһ тураһында белем бирә. Аллаһ - берҙән бер Илаһ. Ул бер кемгә лә һәм бер нәмәгә лә мохтаж түгел. Киреһенсә, барыһы ла Уға мохтаж. Аллаһҡа оҡшаған, Уға тиң булған һис бер илаһи зат юҡтыр.Уға ғына тик күркәм исемдәр хастыр.Ҡөрьән Кәримдә Аллаһтың 99 гүзәл исеме телгә алынған.

Имандың ҡалған биш нигеҙе лә, бер бөтөн булып, Бөйөк Аллаһҡа инаныуға бәйләнгән: фәрештәләренә, изге Китаптарына, пәйғәмбәрҙәренә, Ҡиәмәт көнөнә һәм Тәҡдиргә. Шулай уҡ яҡшылыҡ менән яманлыҡ та Аллаһу Тәғәләнән.

## Ғибәҙәт мәсьәләләре

Изге Ҡөрьән тик Аллаһу Тәғәләгә генә инанырға әмер итә. Инаныу - ихлас күңелдән Аллаһ бойорғандарын үтәү, беҙгә бирелгән хисапһыҙ ниғмәттәренә шөкөр итеү, рәхмәтле булыу ул. Инаныу беҙҙең иманды нығыта: көнөнә биш тапҡыр уҡылған намаҙ Аллаһты һәр саҡ иҫтә тоторға өйрәтә, ураҙа күңелдәрҙә мәрхәмәтлелекте арттыра, ҡулдарҙы тыйылған нәмәләрҙән һаҡлай, телде - алдашыуҙан, ә бирелгән зәкәт бер - беренә ярҙам итеү хистәрен нығыта һәм һаранлыҡтан ҡотҡара. Былар барыһы ла йәмғиәткә тик файҙа ғына килтерә. Ислам динендә инаныу бойороҡ, әмер һәм ҡушыуҙар менән генә сикләнмәй. Аллаһ ризалығы өсөн эшләнгән бөтә эштәр ҙә: Ҡөрьән уҡыу, доғалар ҡылыу, зекер әйтеү, хәйер-саҙаҡа биреү, кешеләргә ауыр мәлдәрендә ярҙам итеү, ғәҙел һәм миһырбанлы булыу - ғибәҙәттәр.



## Тәрбиә һәм әхлаҡ мәсьәләләре

Ислам диненең маҡсаты - күркәм әхлаҡ тәрбиәһе биреү. Ә әхлаҡ имандан тора. Иманлы кешеләр һәр ваҡыт Бөйөк Аллаһтың күҙәтеүе аҫтында икәнлеген тоялар. Ул кешеләрҙең эшләгән бар эштәрен дә күрә. Кешеләр үҙҙәренең арттарынан эйәреп йөрөгән, эшләгән һәр эшен, ҡылған ғәмәлдәрен яҙып барыусы фәрештәләр барлығын да беләләр. Ҡиәмәт көнөндә, ҡылған һәр ғәмәлдәре өсөн яуап бирәсәктәре хаҡында ла хәбәрҙар улар. Изге Ҡөрьән инаныусыларҙың күңелдәрен бысраҡ сифаттарҙан таҙарыныуға, кешеләргә ҡарата үҙендә изге мөнәсәбәт тәрбиәләүгә, һәм был донъяға яратылғандарҙың барыһының да хоҡуҡтарын һаҡлауға йүнәлтә. Ҡөрьән аяттары мосолмандарҙы ғәҙел булырға, үҙ динен ихласлыҡ менән тоторға, кешеләргә һүҙ менән дә, ҡылған эштәре менән дә зыян килтермәҫкә һәм баҫалҡы, сабыр, йомарт булырға, изге эштәр эшләргә саҡыра. Ҡөрьән тормоштоң һәр осрағында кешеләргә юғары әхләҡ өлгөһө итеп ебәрелгән Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күркәм өлгөһөнә таянып йәшәргә ҡуша.

## Донъяның һәм ғаләмдең яратылыуы



Йондоҙҙар  һәм күк есемдәре, шулай уҡ сама менән үлсәнелеп, иҫ китмәле бер тәртипкә  буйһонған, иге-сиге булмаған был  ғаләм нисек барлыҡҡа килгән? Ерҙе кем барлыҡҡа килтергән, кем унда йәшәү өсөн яраҡлы шарттар тыуҙырған? Кем, ағастар ултыртып, үлән-сәскәләр менән биҙәгән һәм хайуан-йәнлектәр ебәргән? Тәүге кеше нисек барлыҡҡа килгән? Изге Ҡөрьән ошо һәм башҡа бик күп һорауҙарға яуап бирә, был донъяның барлыҡҡа килеү серҙәрен аса. Бөйөк Аллаһ Үҙе барлыҡҡа килтергән заттарҙың (кеше, йәнлектәр һәм башҡа йән эйәләренең) Уны таныуҙарын теләп, Үҙенең мәрхәмәте менән барыһын да юҡтан барлыҡҡа килтергән. Донъала талапсан ҡәтғи әҙмә-әҙлелекле тәртип урынлаштырҙы. Уны матурлыҡ һәм һөйөү менән тултырҙы.Ул Бөйөк һәм Шөһрәтле, бар хөкөм һәм ҡөҙрәт тик Унда ғына. Уға : «Бул!» - тип  әйтеү генә лә етә, әйткәне тормошҡа аша.  Был донъяға әйләнеп ҡарағыҙ әле! Донъя уйын-көлкө, күңел асыр өсөн генә яратылмаған. Унда һәр нәмә маҡсатҡа ярашлы итеп, бер-береһенә тап килерлек итеп бирелгән.  Үләндә шыуышып йөрөгән бөжәктән башлап, күк көмбәҙен яҡтыртып торған йондоҙҙарға тиклем, үҙҙәренә ҡәтғи билдәләнгән  вазифаны үтәйҙәр. Бөйөк Аллаһ яралтҡан нәмәләрҙән ниндәйҙер етешһеҙлек һәм кәмселек табыр инегеҙме? Тирә-йүнде өйрәнгәндә, уны аңларға тырышҡан саҡта, ошоларҙы барлыҡҡа килтергән Ҡеүәтле һәм Ҡөҙрәтле Раббыбыҙ хаҡында ла фекер йөрөтөү лазымдыр.



## Доғалар

Доға - ул ғибәҙәттең төп асылы. Беҙ Аллаһу Тәғәләгә биргән нیғмәттәргә  шөкөр итеп доға ҡылабыҙ. Әгәр  тормошобоҙҙа ауырлыҡтар килеп тыуһа,йә булмаһа икеләнеү- шомланыуҙар барлыҡҡа килһә, устарыбыҙҙы юғары күтәреп, Унан ярҙам һорап, Уның шәфҡәт ишектәре төбөнә ашығабыҙ. Әгәр берәй насар эш ҡылһаҡ, аҙағынан бик үкенәбеҙ, тәүбәгә килеп, Аллаһтан ярлыҡауын һорайбыҙ, әшәке һәм  лайыҡһыҙ  эштәрҙән ҡурсалауын ялбарабыҙ.

Изге Ҡөрьән Кәримдә  пәйғәмбәрҙәрҙең  ихлас күңелдән  ҡылған доғалары тураһында  күп кенә миҫалдар килтерелә. Шулай итеп, Бөйөк Хужабыҙ беҙҙе нисек дөрөҫ итеп Уға мөрәжәғәт итергә һәм тик Унан ғына ялынып һорарға өйрәтә, сөнки тик Берҙән-Бер Аллаһ - доғаларҙы ҡабул итеүсе.

## Хәләл һәм харам

Юлынан аҙашмай ғына бараһы еренә иҫән-һау барып етер өсөн, водитель юлдағы билдәләргә иғтибар итергә, юл йөрөү ҡағиҙәләрен һәм талаптарын ҡәтғи үтәргә тейеш. Шуның кеүек, тормош һуҡмағын үткәндә лә, Аллаһу Тәғәлә һәм Унын Рәсүле (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күрһәткән, ике донъя рәхәте һәм бәхетенә алып барған Исламдан тайпылмаҫ, тура юлдан аҙашмаҫ өсөн, билдәләр һәм ҡағиҙәләр бирелгән. Белеүебеҙсә, юл йөрөү ҡағиҙәләрендә тыйыусы һәм рөхсәт итеүсе билдәләр бар. Динебеҙҙә лә Аллаһ тарафынан тыйылған «харам», ә рөхсәт ителгән «хәләл» бар. Бөтә файҙалы һәм таҙа нәмә «хәләл» була. Динебеҙ буйынса рөхсәт ителгән нәмәләр кешеләр өсөн етерлек бирелгән. Аллаһ тарафынан рөхсәт ителгәндәрҙе бер кем дә тыя алмай. Ҡөрьәндә Аллаһу Тәғәлә нимәләрҙе тыя? Аллаһҡа кемделер, йә нимәнелер тиң ҡуйыуҙы, сусҡа итен, үләкһәне ашауҙы, иҫерткес эсемлектәр эсеүҙе, наркотиктар ҡулланыуҙы, алдашыу, урлашыу, дөйөм алғанда, кешенең рухына һәм тәненә зыян килтерә торған нәмәләр тыйыла.

## Кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте

Ислам диненең төп маҡсаты - иманлы, дөрөҫ ғилемле, күркәм холоҡло, яҡшы сифаттарға эйә булған камил кеше тәрбиәләү һәм ошондай кешеләрҙән торған йәмғиәт төҙөү. Динебеҙ һәр кешенең, һәр барлыҡҡа килтерелгән нәмәләрҙең хоҡуҡтарын һаҡлауға төп иғтибарҙы бирә. Ҡөрьәндә мираҫ, никахҡа инеү, сауҙа һәм кешеләр араһындағы бик күп төрлө мөнәсәбәттәргә тәьҫир итеүсе, йоғонто яһаусы ҡағиҙәләр бирелгән. Һәр кешенең тормошо һәм мөлкәте берберeһенән нык айырылып тороуға ҡарамаҫтан, ул – ҡағылғыһыҙ. Изге Ҡөрьәндә кешеләрҙең Аллаһ тарафынан тиң итеп яратылыуы тураһында әйтелә. Ә улар араһында айырма - тик иманда һәм тәҡүәлектәлер. **«Эй, һеҙ кешеләр! Беҙ һеҙҙе бер ир менән ҡатындан яраттыҡ. Бер – береһе менән танышһын, тип, һеҙҙе төрлө халыҡ, төрлө ҡәбиләә иттек. Аллаһ ҡаршыһында иң хөрмәтле кеше - тәҡүәле кеше була. Аллаһ ысынлап та белә, Ул хәбәрҙар!»** (Хуҙжурат сүрәһе, 13-сө аят). Ҡөрьән ҡәһәрләүҙе, ҡарғауҙы, мыҫҡыллауҙы, кешеләрҙән көлөүҙе тыя. Улар тураһында насар уйҙырмаларҙы һәм фараздарҙы, яла яғыу, ғәйбәт, көнсөллөктө хупламай, сөнки былар барыһы ла йәмғиәттең әхлаҡи торошон тарҡата.



## Үткән быуаттарҙың халкы һәм пәйғәмбәрҙәре



Кешеләр ваҡыттың аҙағана тиклем һабаҡ һәм ғөрөт – нәсихәт алһын өсөн, Изге Ҡөрьәндә тәүге кеше һәм тәүге пәйғәмбәр Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) заманынан башлап, үткән быуындарҙың тормошонан бик күп фәһемле хәлдәр бирелә. Ҡөрьән йәшәп киткән халыҡтарҙың ыңғай һәм кире яҡтарын да күрһәтә. Пәйғәмбәрҙәр әйҙәгән юлдан тайпылмағандар Аллаһтың Мәрхәмәтенә ирештеләр. Ә кем Бөйөк Аллаһҡа ҡаршы – улар Унын Асыуына дусар булды. Аллаһу Тәғәлә кешеләрҙең тейешле һығымта яһауын һәм гонаһ – хаталарҙың башҡа ҡабатланмауын теләй.

# Пәйғәмбәребеҙ r һәм Изге Ҡөрьән

Беҙҙең һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шул тиклем Ҡөрьән уҡырға яратҡан. Ул уны аңлайышлы итеп, һәр хәрефен асыҡ әйтеп уҡыған. Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тауышы иҫ китерлек моңло булған. Тыңлағандар матур уҡыуына тәьҫирләнгәндәр.

Бер ваҡыт, йәстү намаҙы барышында, пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) «Тин» сүрәһен уҡый. Уның уҡыуын ишетеп хайран ҡалған сәхәбәләренең береһе, ошоға тиклем, бер ҡасан да бындай матур тауышты ишетмәгәнлеген әйтә.

Һуғыш хәрәкәттәре барышында, һыбай барғанда ла, пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡөрьән уҡыған. Мәккәне яулаған көндө дөйә өҫтөндә ултырған Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) «Фәтх» сүрәһенең тәүге аяттарын уҡый. Уның иҫ китмәле матур уҡыуын ишеткән сәхәбәләр, күңелдәрендә ошо тауыштың һаман да яңғырауын, онотолмауын һөйләгәндәр.

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уҡыған аяттар хаҡында уйланған һәм уларҙың эстәлегенә ярашлы доға ҡылған. Әгәр ҙә аяттарҙа Аллаһты маҡтау юлдары булһа, шунда уҡ тәсбих әйткән. Ә инде аяттарҙа Аллаһҡа ялбарыу әмере булһа, Ул шунда уҡ Бөйөк Хужабыҙға үтенеү менән мөрәжәғәт иткән. Ул төнө буйы, хатта таңға тиклем, бер аяттың мәғәнәһе тураһында уйланып сыға торған булған. Бер мәл таң атҡансы ошо аятты уҡыған: «Әгәр уларға ғазап бирһәң, улар, шөбһәһеҙ, Һинең ҡолдарыңдыр.



Әгәр уларҙы ғәфү итһәң, был да Һинең ихтыярыңда. Һис шикһеҙ, Һин - Еңеүсе үә Һин - Хөкөмдар» («Мәидә» сүрәһе, 5:118). Ошонан һуң, яратҡан үҙ өммәтенең һәм артынан эйәреүселәренең язаға дусар ителәсәгенә борсолоп, доға ҡыла башлай. Ул Бөйөк Аллаһтан өммәтен ярлыҡауын һорай.

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡөрьәнде бик һағышланып уҡыған. Уның нурлы йөҙө буйлап бәхетле күҙ йәштәре аҡҡан. Үҙенең сәхәбәләренә лә Ҡөрьәнде бойоғоп, һағышлы хәлдә уҡырға кәңәш иткән. Бер мәл Ғәйшәнән (разыйаллаһу ғәнһә) Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иң хайран ҡалдырған сағын һөйләүен һорағандар. Ул: «Уның ғәжәпләндермәгән мәле булдымы икән?» - тип яуаплаған. Аҙаҡтан түбәндәге тарихты бәйән иткән: «Бер төндә пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт уянды ла, минән рөхсәт һорап, тороп китте. Тәһәрәт алып, намаҙға басты. Намаҙға басҡанда ул илай ине. Нурлы күҙҙәренән эре күҙ йәштәре күкрәгә буйлап тәгәрәне. Биленән бөгөлөп рөкуғҡа эйелгәндә, сәждәгә киткәндә лә, унан торғанда ла, иртәнге аҙанды ҡысҡырыусы Билал (разыйаллаһу ғәнһү) килгәнсе илауын дауам итте. Пәйғәмбәребеҙҙе (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былдай хәлдә күргән Билал (разыйаллаһу ғәнһү), ғәжәпләнеп, Унан былай тип һораны:

- О Аллаһ Рәсүле! Был хәтлем күҙ йәштәренең сәбәбе ниҙә? Аллаһу Тәғәлә Һинең үткән һәм буласаҡ гонаһтарыңды ла күптән ярлыҡаны бит!

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм):

- Шуның өсөн илайым, Аллаһ Рәхмәтенең ҡәҙерен белгән ҡоло булмаҫҡа тейешме ни мин? - тип яуаплаған.

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм) төнөн дә Уға аяттар төшөрөлөүен хәбәр итә. Уларға етди һәм төплө ҡарарға, тәрән фекерләргә кәрәклеген әйтә. Һәм Ул «Ғимран» сүрәһенән түбәндәге аяттарҙы уҡый: «Ысынлап та, Күктәр менән Ерҙең яратылыуында ла, көн менән төндөң алмашыуында ла аҡылы булған кешеләр өсөн күп аяттар бар. Торғанда, ултырғанда, ятҡанда ла Аллаһты иҫкә алып, Күк менән Ерҙең яратылыуын уйлап: «Эй, Раббым! Һин быларҙы бушҡа ғына бар ҡылмағанһың. Маҡтау һиңә! Ут ғазабынан беҙҙе һаҡла!»

Рамаҙан айында пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡөрьәнде ғәҙәттәгенән күберәк уҡыған. Был айҙа уның эргәһенә йыш ҡына Ябраил фәрештә (ғәләйһиссәләм) төшөр булған. Улар Ҡөрьән аяттарын бергәләп уҡығандар.

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм) башҡа кешеләрҙең дә Ҡөрьән уҡыуын тыңларға яратҡан. Бигерәк тә матур тауышлы сәхәбәләрҙән Уға Ҡөрьән уҡыуын һораған. Бер саҡ Абдуллаһ бин Мәсғүттән (разыйаллаһу ғәнһү) Изге Китапты уҡыуын һорай. Абдуллах бин Мәсғүт (разыйаллаһу ғәнһү) ғәжәпләнеп, былай ти:

- О Аллаһ Рәсүле! Ҡөрьән бит һеҙгә ебәрелгән, нисек итеп мин Һеҙгә уҡыйым?

- Мин башҡаларҙың Ҡөрьән уҡыуын тыңларға яратам, - тип әйтә Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм).

Абдуллах бин Мәсғүт (разыйаллаһу ғәнһү) «Нисә» сүрәһен уҡый башлай. Ул 41-се аятҡа еткәс, (Беҙ һәр өммәттән шаһит килтереп, һине шуларға ҡаршы шаһит итһәк, нимә булыр?) пәйғәмбәр Мөхәммәт (саллəллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уны туҡтата. Уның һорауы буйынса Абдуллаһ уҡыуынан туҡтай. Аҙаҡ ул: «Уҡыуҙан туҡтағас, мин Пәйғәмбәребеҙгә ҡараным һәм Уның нурлы күҙҙәре йәш менән тулғанын күрҙем», - тип һөйләгән.

Ҡөрьән пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тормошонон һәр мәлендә лә юл күрһәтеүсе һәм етәксе була. Ул Унын ҡушҡандары буйынса йәшәй. Һәр ҡыланышы, уй – фекерҙәре, тәртибе Ҡөрьәндә әйтелгәндәргә ярашлы була. Ҡөрьән һәм Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тәрбиәһе нигеҙендә ҡырағай һәм ҡанһыҙ халыҡтан кешелек донъяһы тарихында иң юғары дәрәжәле йәмғиәт төҙөлә, кешелекле һәм ҡыйыу, киң күңелле һәм мәрхәмәтле инсандар күбәйә.

*Бер ваҡыт, төнгө йәсиғ намаҙын мәсеттә уҡыған Ғәйшә (разыйаллаһу ғәнһә), нисектер һуңлап ҡайта. Пәйғәмбәр Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һуңлап ҡайтыу сәбәбен һорай. Ғәйшә (разыйаллаһу ғәнһә):*

*- О Аллаһ Рәсүле! Мәсеттә бер кеше Ҡөрьән уҡыны. Бер ҡасан да унан яҡшы уҡығандарын ишеткәнем булманы,- тип яуаплаған.*

*Был хәтлем дә матур итеп Ҡөрьәнде кем уҡый икән тигән ҡыҙыҡһыныу менән, Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мәсеткә юл тота. Ғәйшә (разыйаллаһу ғәнһә) Уның артынан эйәрә. Мәсеттә Ҡөрьән уҡыған сәхәбәне тыңлағандан һуң, Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ғәйшәгә (разыйаллаһу ғәнһә) әйтә:*

*- Был - Сәлим! Әбү Хуҙәйфәнең азат ителгән әсире (тотҡоно). Аллаһҡа шөкөр, минең өммәтемдә ошондай кеше булғанға!*

*(Ибн Мәджә, Икәмәт, 176).*



# ҺОРАУҘАР

## Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ

| | | | |
|---|---|---|---|
| **1** | Илаһи яҙмаларҙы Бөйөк Аллаһ пәйғәмбәрҙәренең | | беҙҙең көнгәсә үҙгәртелмәйенсә килеп еткән. |
| **2** | Пәйғәмбәрҙәр кешеләргә | | Аллаһтың ҡушыуын һәм тыйыуҙарын хәбәр итә. |
| **3** | Илаһи Китаптарҙа бирелгән әмер, бойороҡтарҙы үтәп, | | ысынлығын һәм дөрөҫлөгөн раҫлай. |
| **4** | Бөтә Изге Китаптарҙың дә Аллаһ тарафынан төшөрөлгәнлегенә | | аҙашыу юлына төшәләр. |
| **5** | Изге Ҡөрьән | | тура үҙҙәренә йәки Ябраил фәрештә аша бирә. |
| **6** | Илаһи китаптар | | Аллаһтың ризалығын алырға ынтылабыҙ. |
| **7** | Изге яҙмаларҙың тексы боҙоп үҙгәртелһә, кешеләр | | Аллаһтан илаһи асыштар (вәхи) юлы менән алынған мәғлүмәттәрҙе еткерә. |
| **8** | Изге Ҡөрьән үҙенән алда килгән Китаптарҙың | | беҙ инанабыҙ. |

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. Изге Ҡөрьәнде тулыһынса яттан белгән кешеләрҙе нисек атағандар?**

А) Сәхәбә.

Б) Мөхәджир.

В) Хафиз

Г) Ансар.

**2. Ҡөрьәнгә ҡарата бирелгән түбәндәге фекерҙәрҙең ҡайһыһы дөрөҫ түгел?**

А) Ябраил фәрештә аша төшөрөлә.

Б) Ғәрәп телендә төшөрөлә.

В) Миғраж кисендә төшөрөлә башлай.

Г) Беҙҙең көнгә тиклем үҙгәрешһеҙ һаҡланған.

**3. Лоҡман (ғәләйһис-сәләм) үҙенең улына ошо өгөт - нәсихәтте биргән:**

«Эй, улым! Аллаға тиңдәш ҡушма, мөшриклек – оло гонаһ бит! Эй, улым! Намаҙ уҡы, яҡшылыҡҡа өндә, ярамаған эштән тый, ни күрһәң дә, сабыр ит – был бит эшендә ныҡ, ҡыйыу булғаныңдан була. Кеше алдында сырайыңды һытма, тәкәбберләнеп йөрөмә. Ысынлап та, Аллаһ тәкәббер, маҡтансыҡ кешене яратмай» (Лоҡман сүрәһе, 13, 17-18-се аяттар).

**Был аяттарҙың мәғәнәһенә ҡарағанда, ниндәй ҡылыҡтар дөрөҫ түгел?**

А) Тормош ауырлыҡтарына зарланыу һәм сабырһыҙлыҡ күрһәтеү.

Б) Алдаҡсыға дөрөҫтө һөйләргә кәңәш биреү.

В) Намаҙҙы ваҡытында уҡыу.

Г) Аллаһҡа тиңдәш ҡуймау.

**4. Уҡығыҙ һәм хәрефтәр менән билдәләнгән яуаптарҙың дөрөҫөн билдәләгеҙ.**

I. Ятларға еңеллек бирә.

II. Яҙырға мөмкинлек бирә.

III. Илаһи вәхи төшөрөүгә сәбәпсе булған ваҡиғалар ҡапыл ғына килеп тыумай.

**Алдағы һаналған өҫтөнлөктәргә нимә сәбәпсе була?**

А) Ҡөрьәнде өлөштәргә бүлеп төшөрөү.

Б) Ҡөрьәнде ғәрәп телендә төшөрөү.

В) Ҡөрьәнде Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә) төшөрөү.

Г) Ҡөрьәнде Ябраил (ғәләйһис-сәләм) аша төшөрөү.

**5. Ҡөрьән төшөрөүҙең төп мәғәнәһе нимәлә?**

А) Уны намаҙ ваҡытында уҡыу.

Б) Инсандарҙы динһеҙҙәрҙән айырыу.

В) Әруахтарҙың йәндәре өсөн уҡырға.

Г) Ҡөрьәндә бирелгән ҡушыу һәм тыйыуҙарҙы көндәлек тормошта үтәү.

**6. Әйтелгән ҡайһы фекерҙәр Изге Китаптарҙың төшөрөлөүен аңлатыуҙы маҡсат итеп ҡуймай?**

А) Аллаһтың ҡушыуы һәм тыйыуҙарын хәбәр итеү.

Б) Энциклопедик мәғлүмәттәр биреү.

В) Күркәм әхлаҡҡа өйрәтеү.

Г) Хөкөм көнө тураһында һөйләү.

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(күндерҙек / һаҡлайбыҙ; китабы / табыр; өлөштәргә бүлдек; китап / Тәүрат; таж / әжер-сауаптар бүләк буласағын; Ғайсаны / тоғро юл һәм нур).**

1. «Уларҙың эҙенән беҙ Мәрйәм улы ............. ебәрҙек. Беҙ уға элгәре Әт-Тәүратта күндергәндәрҙең хаҡлығын раҫлап, тәҡүәлеләргә күрһәтмә итеп «Инжилде» бирҙек. Унда вәғәз, ........... һәм ........... бар» (Мәидә сүрәһе, 46-сы сүрә).

2. «Беҙ зекер (Ҡөрьән) ..........., һәм беҙ уны ...........» (Хижер сүрәһе, 9-сы аят).

3. «Ул һиңә ........... ебәреп, элгәре күндерелгәндәрҙең хаҡ булғанын раҫланы. Ул элек ........... менән «Инжил» ебәрҙе» (Ғимран сүрәһе, 3-сө аят).

4. «Кешегә яйлап, төшөндөрөп уҡыр өсөн, Ҡөрьәнде Беҙ ............., шунан бер - бер артлы күндерҙек» (Исра сүрәһе, 106-сы аят).

5. «Мин һеҙгә бик мөһим ике нәмә ҡалдырам: береһе - Аллаһ ............. . Ул Аллаһтың ебе (Ҡөрьән). Кем уға йәбешә, ул дөрөҫ юл ............. . Кем унан айырылһа, хаҡ юлдан яҙыр» (Мөслим, Фадаилус-сәхәбә, 37).

6. «Ҡиәмәт көнөндә, Ҡөрьән уҡыған һәм Ундағы күрһәтмәләр буйынса йәшәгән ата-әсәләрҙең баштарына ............. кейҙереләсәк. Унан сыҡҡан яҡтылыҡ был донъяның бөтә йорттарын яҡтыртҡан ҡояш нурҙарынан да гүзәлерәк буласаҡ. Шулай булғас, Ҡөрьән ҡушҡанса йәшәгән кешеләргә ниндәй ............. уйлап ҡарағыҙ әле!» (Сунән, Әбү Дауыт, 1/355).

# ЯУАПТАР

## Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ

| | | | |
|---|---|---|---|
| **1** | Илаһи яҙмарҙы Бөйөк Аллаһ пәйғәмбәрҙәренең | **5** | беҙҙең көнгәсә үҙгәртелмәйенсә килеп еткән. |
| **2** | Пәйғәмбәрҙәр кешеләргә | **6** | Аллаһтың ҡушыуын һәм тыйыуҙарын хәбәр итә. |
| **3** | Илаһи Китаптарҙа бирелгән әмер, бойороҡтарҙы үтәп, | **8** | ысынлығын һәм дөрөҫлөгөн раҫлай. |
| **4** | Бөтә Изге Китаптарҙың дә Аллаһ тарафынан төшөрөлгәнлегенә | **7** | аҙашыу юлына төшәләр. |
| **5** | Изге Ҡөрьән | **1** | тура үҙҙәренә йәки Ябраил фәрештә аша бирә. |
| **6** | Илаһи китаптар | **3** | Аллаһтың ризалығын алырға ынтылабыҙ. |
| **7** | Изге яҙмаларҙың тексы боҙоп үҙгәртелһә, кешеләр | **2** | Аллаһтан илаһи асыштар (вәхи) юлы менән алынған мәғлүмәттәрҙе еткерә. |
| **8** | Изге Ҡөрьән үҙенән алда килгән Китаптарҙың | **4** | беҙ инанабыҙ. |

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1)** В

**2)** В

**3)** А

**4)** А

**5)** Г

**6)** Б

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**1.** Ғайсаны / тоғро юл һәм нур.

**2.** күндерҙек / һаҡлайбыҙ.

**3.** китап / Тәүрат.

**4.** өлөштәргә бүлдек.

**5.** китабы / табыр.

**6.** таж / әжер-сауаптар бүләк буласағын.





### КЕШЕЛӘРҘЕҢ ИҢ ЯҠШЫҺЫ

# ПӘЙҒӘМБӘРҘӘРГӘ ИНАНЫУ

- *Пәйғәмбәрҙәр һәм уларҙың сифаттары*
- *Пәйғәмбәрҙәрҙең саҡырыуында дөйөм уртаҡлыҡ*
- *Пәйғәмбәрҙәргә инаныуҙың ҡиммәте*
- *Пәйғәмбәрҙәр тормошонан иң гүзәл өлгөләр*
- *Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт* r *һәм унан алдағы пәйғәмбәрҙәр*





# ПӘЙҒӘМБӘРҘӘР - АЛЛАҺ ИЛСЕЛӘРЕ

Бөгөн ял көнө, әҙерәк йоҡлап алырға ла була. Ләкин Рөстәм иртә уянды, ғәҙәттәгесә, уны уятырға ла кәрәкмәне. Тиҙ генә йыйынды, китап һәм дәфтәрҙәрен арҡа муҡсаһына тултырҙы ла, йоҡо бүлмәһенән: «Киттеңме ни?» - тип ғәжәпләнеп һораған әсәһенә ҡул болғап :

- Эйе, әсәй, мин киттем... - тип яуапланы.

- Төшкә манты бешерәм, һуңлама, улым! - тип оҙатып ҡалды әсәһе.

Бына өс ай инде, Рөстәм ял һайын, ҡала уртаһында урынлашҡан ҙур матур мәсеттә асылған мәҙрәсәгә уҡырға йөрөй. Уҡытыусыһы, остазы Сәйет хажи үткәргән дәрестәрҙән тағы ла яңы һәм ҡыҙыҡлыраҡ белем алыу теләге үҙенә ныҡ тарта, һәм ул ялды түҙемһеҙлек менән көтөп ала.

Үткән дәрестә Рөстәмгә пәйғәмбәрҙәр тураһында әҙерләнеп килергә ҡуштылар. Ул бер - нисә көн элек уҡытыусыһы биргән китаптарҙы тырышып һәм ентекләп уҡыны. Бына дәрес тә башланды. Сәйет хажи дәрестең башланыуын иғлан итте:



- Бөгөнгө дәрес - ғәҙәти дәрес түгел. Был - арҙаҡлы ислам ғалимы, профессор Рөстәм хажиҙың пәйғәмбәрҙәр темаһына пресс-конференцияһы буласаҡ. Рәхим итегеҙ, хажи! - тиеп йылмайып, Рөстәмде таҡта янына саҡырҙы.

Һеҙ бөгөн уҡыусылар түгел, ә ошо темаға ярашлы һорауҙар биреүсе журналистар, яҙыусылар һәм блогерҙар. Һеҙ үҙегеҙҙең гәзитегеҙ, журналығыҙ, йәки каналығыҙға исем уйлағыҙ. Әгәр ҡаршы булмаһағыҙ, алып барыусы үҙем булам, һәм конференцияны асыҡ, тип иғлан итәм. Беренсе һорауҙы хөрмәтле профессорға бирәм! Әйтегеҙ әле, хажи, **«пәйғәмбәр» һүҙе нимәне аңлата**?

Рөстәм хәлдең ҡапыл үҙгәреүенә башта аптырап ҡалды, әммә бер нәмә лә булмаған кешеләй яуап бирҙе:

- Пәйғәмбәр - Аллаһтың ҡушҡандарын кешеләргә еткереүсе ул.

Уҡытыусы ҡәнәғәт төҫ менән башын һелкте һәм балаларға ҡараны. Класты үҙ артынан әйҙәүсе Морат беренсе булып һүҙ алды:

- Морат булам, «Сәләм» гәзитенең журналисы. **Һәр теләгән кеше пәйғәмбәр була аламы?**

Рөстәм тотҡарлыҡһыҙ яуап бирҙе:

- Пәйғәмбәрлек - уҡыу, эш, йә инаныу барышында ғына үҙләштерә торған һөнәр түгел. Пәйғәмбәрҙәр - Аллаһу Тәғәлә тарафынан һайланып алынған иң яҡшы кешеләр. Пәйғәмбәрлек миссияһы ныҡ ауыр вазифа ул. Бөйөк Хужабыҙ уны юғары кимәлдә үтәйәсәк кешеләргә генә йөкмәтә.

Уйынға әүрәп киткән балалар бер- бер артлы һорауҙар яуҙыра башланылар.

Әхмәт ҡулын күтәрә:

- Әхмәт, «Аманат» журналының мөхәррире! **Батшаларҙағы кеүек, пәйғәм-бәрлек атаһынан улына күсә йә тапшырыла аламы?**

- Юҡ! Пәйғәмбәрлек нәҫел буйынса мираҫ итеп бирелмәй. Әммә аталарынан һуң улдары пәйғәмбәр булған осраҡтар ҙа булған. Мәҫәлән, Ибраһим пәйғәмбәрҙән һуң, уның улдары Исмәғил һәм Исхаҡ пәйғәмбәр булғандар. Яҡуп пәйғәмбәрҙән һуң - улы Йосоп, ә Дауыт пәйғәмбәрҙең миссияһын улы Сөләймән дауам иткән. Был пәйғәмбәрлек аталарынан мираҫ итеп ҡалдырылмаған, ә Бөйөк Аллаһ шулай теләгән.

Һорауҙы Әминә дауам итә:

- Әминә, «Мөслимә» журналының хәбәрсеһе. **Тимәк, пәйғәмбәрҙәрҙең балалары ла үҙҙәре кеүек яҡшы кешеләр булғандармы?**

Рөстәм яуап бирә:

- Юҡ! Һәр ваҡыт улай булмаған. Ҡайһы бер пәйғәмбәрҙәргә халҡының күп өлөшө, шул иҫәптән үҙ балалары ла эйәрмәгән. Мәҫәлән, Нух пәйғәмбәрҙең улы атаһының пәйғәмбәрлегенә ышанмаған. Ул, Аллаһтың белдереүен алдаҡҡа һанап, уны һанға һуҡмағандар менән бергә урғылып килгән һыу упҡыны аҫтында ҡалып һәләк була.

Ҡулын Ғәйшә күтәрә:

- Ғәйшә, балалар яҙыусыһы. **Пәйғәмбәр бай һәм абруйлы кеше булырға тейештер. Юғиһә уларҙы бер кем дә тыңламаясаҡ бит.**

Рөстәм:

- Был һорауға яуапты пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тормошонан табабыҙ. Ул бай булмаған, ләкин намыҫлы һәм күркәм ғаиләнән сыҡҡан. Рәсүлебеҙҙең пәйғәмбәрлегенә ышанмаған ҡайһы бер кешеләр, уның ярлы булыуын шелтәләп: «Әгәр пәйғәмбәр кәрәк икән, беҙҙең аралағы байҙарҙың береһе - иң лайыҡлыһы булһын», - тигәндәр. Аллаһтың әмерен еткереүсе фәрештәнең ярлы кешегә килеүенә улар һис тә ышана алмағандар. Бөйөк Аллаһ пәйғәмбәрҙәрен һайлағанда, байлыҡты баһалау нигеҙе һәм өлгөһө итеп ҡуймаған.

Ғәйшә һорауын дауам итте:

- Пәйғәмбәрҙәрҙе Аллаһу Тәғәлә Үҙе һайлап ҡуйғас, уларҙы кешеләрҙең боҙоҡлоғонан һәм төрлө бәләләрҙән һаҡлаймы?

**- Юҡ! Пәйғәмбәрҙәр төрлө һынауҙарға башҡа кешеләргә ҡарағанда ла ныҒыраҡ дусар ителгәндәр...**

Сәйет хажи Рөстәмдең яуабын ошо хикәйә менән тулыландырҙы:

- Пәйғәмбәрҙәр, бөтә һынауҙарҙы ла тик Аллаһҡа ғына өмөтләнеп, сыҙамлылыҡ һәм ныҡ түҙемлелек менән үткәргәндәр. Аллаһ юлынан барырға саҡырған Ибраһим пәйғәмбәрҙе иҫләйек әле, кешеләр уны үлем хөкөмөнә тарттырғандар, таш һәм уҡ атырға яраҡлаштырылған ҡоролмаға һалып, ҙур усаҡ уртаһына ырғытҡандар. Ләкин Аллаһ утты сәскәлеккә әйләндереп, уны яҙалаусыларҙың ҡулынан тартып ала. Шулай итеп, Ибраһим пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) фәжиғәле үлемдән ҡотҡарыла.

Әйүп (ғәләйһис-сәләм), үҙенә ябырылған бәхетһеҙлектәргә ҡарамаҫтан, Аллаһты данлау һәм маҡтауҙан туҡтамаған. Хатта ауыр итеп сирләгән мәлендә лә иҫ киткес түҙемлелек күрһәткән. Ул Аллаһу Тәғәләгә: «Иии, Раббым! Һин - мәрхәмәтлеләрҙең иң мәрхәмәтлеһе!» - тип өндәшкән. Ошо ялбарыуҙары өсөн, Аллаһ уға шифаларын биреп, һауығып китергә насип иткән. Балаларын һәм мөлкәтен кире ҡайтарған.

Йософ пәйғәмбәрҙе аталары башҡаларға ҡарағанда ла нығыраҡ яратҡанға күрә, ағалары көнләшеп, унан ҡотолор өсөн ҡоҙоҡҡа ташлайҙар. Ҡолдар менән сауҙа итеүселәр, Йософто үҙҙәре менән алып китә һәм сит ерҙәргә һатып ебәрәләр. Аҙаҡ, яла яғыу һәм ошаҡ арҡаһында, төрмәгә ултырталар. 12 йыл ғүмере тотҡонлоҡта үтә.

Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) 950 йыл буйы боттарға табынған үҙ халҡын Аллаһтың Берәү генә икәнен танырға саҡыра. Ҡәбиләләштәре уға ышанмайҙар, уны аҡылдан яҙғанға һанайҙар, мыҫҡыл итәләр, араларынан ҡыуалар, таш бәреп үлтереү менән янайҙар.

Муса пәйғәмбәр ҙә үҙ халҡын ҡоллоҡтан азат итеү көрәшендә, мәкерле, яуыз һәм ҡаты бәғерле фирғәүендән бик күп ыҙа һәм яфа кисерә.

Ә пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өлөшөнә төшкән ауыр һынауҙарҙы үҙенән башҡа бер кем дә күтәрә алмаҫ ине!..

...Тағы һорауҙар!

Ғәйшә һорай:

- Ҡөрьән ерҙә булып киткән бөтә пәйғәмбәрҙәргә лә бирелгәнме?

Рөстәм көләп ебәрҙе:

- Һин һорауҙы дөрөҫ ҡуйманың. Ҡөрьән – Мөхәммәт пәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәллам) генә ебәрелгән китаптың исеме ул. Һорауҙы: «**Бөтә пәйғәмбәрҙәргә лә изге Китаптар төшөрөлгәнме?** - тип әйтеү дөрөҫөрәк булыр ине». Юҡ! Был хаҡта, Изге Китаптар тапшырылған пәйғәмбәрҙәр һәм Китаптарҙың исемен беҙ «Китаптарға инаныу» темаһында өйрәндек бит.

Артабан Камил һүҙ алды:

- «Ислам тауышы» радиоканалының алып барыусыһы. Хөрмәтле профессор! **Ә пәйғәмбәрҙәр һаны билдәлеме?**

- Изге Ҡөрьәндә 25 пәйғәмбәрҙең исеме телгә алына, - тип яуап бирә Рөстәм.

Уҡытыусы уның һорауын тулыландырып, түбәндәгеләрҙе һөйләне:

- Рөстәм хажи рөхсәтенән, ҡайһы бер әйткәндәргә асыҡлыҡ индерәйем әле. Пәйғәмбәрлек миссияһы Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) дән башланып, Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәллам) менән тамамлана. Улар арауығында ергә бик күп пәйғәмбәрҙәр ебәрелә. Ҡөрьән раҫлауы буйынса: **«Һәр өммәткә – үҙ рәсүле»** (Юныс сүрәһе, 47-се аят), тимәк, һәр халыҡҡа, ҡәбиләгә Аллаһтың хаҡ диненә саҡырыусы пәйғәмбәре тәғәйенләнгән. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәллам) хәҙистәрендә 124 000 пәйғәмбәр булыуы хаҡында әйтелә. Әммә был һандар пәйғәмбәрҙәр иҫәбен математик яҡтан тулы күрһәтеү өсөн түгел, ә уларҙың шундай күп булыуын сағылдырыу маҡсатында бирелгән... «Пресс – конференция»ны дауам итәбеҙ. Морат, һинең һорауың?

- «Сәләм» гәзите. Беҙҙең гәзит уҡыусыларының һорауы: **«Христиан һәм йәһүдтәр беҙҙең пәйғәмбәребеҙҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәллам) танырға, ҡабул итергә**

**теләмәйҙәр. Уларҙың пәйғәмбәрҙәренә беҙ ҙә ышанмаһаҡ дөрөҫ буламы?»**

Рөстәм был һорауға яуап бирә алманы, уға уҡытыусы ярҙамға килде:

- Беҙҙең аралағы иң мөһим айырма ошонда ла инде. Ҡөрьәндә башҡа пәйғәмбәрҙәр менән бер рәттән йәһүд һәм христиандарҙың пәйғәмбәрҙәре Муса (ғәләйһис-сәләм - Моисей) һәм Ғайса (ғәләйһис-сәләм - Иисус) хаҡында ла һөйләнелә. Беҙ бөтә булған пәйғәмбәрҙәргә лә ышанабыҙ, улар араһында бер ниндәй ҙә айырмалыҡ күрмәйбеҙ.

Фатима ҡулын күтәрҙе лә шым ғына: **«Ә иң бөйөк пәйғәмбәр кем була?»** - тип һораны.

Рөстәм:

- «Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) - иң бөйөк пәйғәмбәр!» - тип яуапланы.

**- Ни өсөн Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иң бөйөк пәйғәмбәр һанала?**

Рөстәм был һорауға ҡыйынһыныу кисергәс, уның өсөн уҡытыусы яуап бирҙе:

- Пәйғәмбәрҙәр араһында айырма юҡ, әммә уларҙың Аллаһ алдында төрлө дәрәжәлә булыуын беләбеҙ. Ҡөрьәндә лә ошо хаҡта былай тип әйтелә: **«Бына – рәсүлдәр! Берәүҙәренә Беҙ башҡалары алдында өҫтөнлөк бирҙек.Уларҙың бәғзеләре менән Аллаһ Үҙе һөйләште, бәғзеләрен дәрәжә бирреп күтәрҙе...»** (Бәҡара сүрәһе, 253-сө аят). Мөхәммәт пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһу Тәғәләнең иң ятаҡкан пәйғәмбәре, ул башҡа пәйғәмбәрҙәр араһында иң хөрмәтле урында тора. Уның өҫтөнлөгө нимәлә һуң?



Беренсенән, Аллаһ уны иң яҡшы өммәттең етәксеһе итеп күтәрҙе. *«Һеҙ халыҡ алдына сығарылған иң яҡшы өммәт булдығыҙ...»* (Ғимран сүрәһе, 110-сы аят).

Икенсенән, алда килгән пәйғәмбәрҙәр аныҡ билдәләнгән халыҡҡа йәки ҡәбиләгә генә ебәрелһә, Мөхәммәт пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) **«бөтөн кешелек һәм ендәр өсөн изге хәбәр һәм киҫәтеү - өгөтләү алып килеүсе»** итеп билдәләнә.

Өсөнсөнән, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) аша индерелгән Аллаһтың иң яҡшы законы - шәриғәт, - **бынан алдағы пәйғәмбәрҙәргә төшөрөлгән васыяттарҙы көсөнән сығара**. Һәм был закон Ҡиәмәт көнөнә тиклем дауам итәсәк.

Дүртенсенән, Мөхәммәт пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) - **иң һуңғы пәйғәмбәр**. Ул - ахыры заман пәйғәмбәре. Унан һуң, Ҡиәмәт көнөнә тиклем, бер пәйғәмбәр ҙә ебәрелмәйәсәк. Ул - пәйғәмбәрлек сылбырының һуңғыһы.

Һуңғы партанан юғары күтәрелгән ҡул күренде:

- Фәрит, «Аҙан» гәзитенең хәбәрсеһе. **Ысынбарлыкта пәйғәмбәрҙәргә мохтажлыҡ бармы? Пәйғәмбәрҙәр булмаһа ла кешеләр дөрөҫ юлды таба алырҙар инеме?**

Уҡытыусы Рөстәмгә ымланы, ул аңлата башланы:

- Кешеләр пәйғәмәбәрҙәрҙән башҡа ла ҡайны бер хәҡиҡәтте аңлай алырҙар ине. Ләкин донъяның Барлыҡҡа килтереүсеһе барлығын аңлап һәм Уны «Аллаһ» тип әйтмәйенсә, «Бог»,

«Хоҙай», «God» һ. б. тип атаһалар ҙа, Уны ҡабул итһәләр ҙә, нисек итеп Уға ғибәҙәт ҡылыу юлдарын белмәҫтәр, мәңгелек донъя хаҡында белемдәре булмаҫ, эшләгән эш - ғәмәлдәре өсөн яуап биреүҙе, фәрештә һәм ендәрҙең булыуын һәм башҡа бик күп нәмәләр хаҡында хәбәрҙар була алмаҫтар, шулай уҡ нимә ул яҡшы, нимә - насар, нимә рөхсәт ителә, ә нимә тыйыла - быларҙың барыһы хаҡында ла аныҡ фараз итә алмаҫтар ине. Шуның өсөн дә Мәрхәмәтле Бөйөк Хужабыҙ кешене етәксеһеҙ ҡалдырмаған. Уларға диндә өйрәтеүсе һәм кешеләргә тере өлгө булып торған пәйғәмбәрҙәрҙе ебәргән.

Пресс - конференцияны Йәмилә дауам итте:

- Йәмилә, блогер. **Әгәр Аллаһ үҙенең бойороҡтарын пәйғәмбәрҙәр аша ебәрмәй, фәрештәләр аша ебәрһә, кешеләр өсөн ышаныслыраҡ булмаҫ инеме? Шулай түгелме?**

Рөстәм уйланыңҡырап торҙо ла:

- Беҙ уны белмәйбеҙ. Әгәр был юл дөрөҫ булһа, Аллаһ шулай эшләр ине, - тип яуапланы.

Уҡытыусы был һорауға тулы аңлатыу кәрәклеген тапты, һәм диалогка ҡушылды:

- Эйе, уныһы шулай. Ләкин Аллаһ Үҙенең әмерҙәрен фәрештәләр аша ебәрһә, ҡайһы бер кешеләр: «Фәрештәләр тәбиғәте менән үтә күренмәле һәм беҙҙең яныбыҙға ҡапыл ғына кеше ҡиәфәтендә пәйҙә булһалар, беҙ уларҙан ҡурҡабыҙ. Ҡурҡыу - улар менән осрашыуға,тыныс ҡына аралашыуға, әңгәмәләшеүгә ҡамасаулай. Фәрештәләр гонаһ ҡылмайҙар, шуға күрә уларға: «Гонаһ ҡылмағыҙ!» - тип әйтеүе еңел. Ә инде пәйғәмбәрҙәр кеше затынан булһа, нимәгә өндәгәндәрен аңлатып беҙгә еткерерҙәр ине» - тип әйтеүҙәре лә бар. Шуның өсөн дә Хужабыҙ пәйғәмбәрҙәрҙе, Үҙенең әмер - бойороҡтарын теүәл үтәүсе һәм тыйылғандарҙан тыйылыусы, кешеләр өсөн тере өлгө булып тороусы әҙәм затынан (кешеләрҙән) ебәргән.





Морат тағы ҡулын күтәрә бирҙе лә, баҙнатһыҙланып, кире төшөрҙө. Быны күреп ҡалған уҡытыусы:

- Морат, һорауың бар инеме? - тип һораны.

- Әйе... - ул тейешле һүҙҙәр таба алмай, ҡаушап ҡалған кешеләй туҡтап ҡалды, - **пәйғәмбәрҙәр үҙҙәренең миссияһы өсөн ниндәйҙер хаҡ алғандармы? Һәм кемдән?**

Уҡытыусы йылмайҙы. Морат тулҡынланған ҡиәфәттә баҙап ҡалды. Уны һорауының дөрөҫлөгө борсой ине. Класс та уҡытыусының ниндәй яуап бирәсәген ҡыҙыҡһынып көҙәтте.

- Афарин, Морат! Һин яҡшы һорау бирҙең. Был һорауға яуапты Ҡөрьәндең бик күп аяттарында табабыҙ. Бөтә пәйғәмбәрҙәр ҙә кешеләрҙе хаҡ дингә саҡырып, былай тигәндәр: **«Илселәр артынан эйәрегеҙ. Кемдәр һеҙҙән түләү һорамай, тура юлдан алып бара – шулар артынан эйәрегеҙ!»** Хужабыҙҙың бүләге - Уның Үҙ ҡолонан риза һәм ҡәнәғәт булыуы. Был иң бөйөк бүләк - күптәрҙең иң теләгәне ул!..

Дәресте тамамлау ваҡыты ла етте. Уҡытыусы Рөстәмгә һәм класҡа рәхмәтен белдерҙе. Ә Рөстәм:

- Сәйет хажи! Һеҙгә мин рәхмәт әйтергә тейешмен. Әгәр миңә ярҙам итмәһәгеҙ, был «пресс-конференция»ны тейешле кимәлдә үткәрә алмаҫ инем!»

**Профессор Йәшәр Ҡандәмир**

# БЕҘГӘ ЮЛ КҮРҺӘТЕҮСЕЛӘР

Мәрмәр диңгеҙе менән Ҡара диңгеҙҙе тоташтырып торған Босфор боғаҙы иҫ киткес матур. Азия менән Европа тоташҡан ерҙә урынлашҡан был боғаҙ аша көн һайын меңәрләгән дигеҙ карaптары үтә. Уның тәрәнлеге бөтә ерҙә лә тигеҙ түгел. Ҡайһы бер урындар бигерәк тә хәүефле. Улар дигеҙ караптары өсөн ҡурҡыныс тыуҙыра. Бигерәк тә танкерҙар, йөк караптары һәм ҙур пассажир лайнерҙары үткән был урын һаҡ булыуҙы талап итә. Карап капитандары, алдағы бәлә-ҡазаларҙы урап үтеү өсөн, лоцманһыҙ юлға сыҡмайҙар. Лоцман фарватерҙы, йәғни хәүефһеҙ юлдарҙы яҡшы белә. Ул капитанға, һай урынлы ҡомлоҡҡа ултырмайынса, башҡа суднолар менән бәрелешмәйенсә, һыу аҫты ҡаяларына эләкмәйенсә, Босфор аша нисек итеп дөрөҫ үтергә кәрәклеген күрһәтә.

Ерҙәге тормош та кораблгә оҡшаш. Беҙҙәге кораблгә кешеләр йәндәр донъяһынан киләләр һәм мәңгелек донъяға - Әхирәткә юлланалар. Әгәр беҙ Босфор аша үтергә теләйешле капитан булһаҡ, лоцмандың ярҙамына таяныр инек. Күркәм тормош үтеп, Йәннәткә лайыҡ булыу һәм Тамуҡтан ситтә тороу өсөн, беҙ ҙә «лоцман» ярҙамына мохтажбыҙ. Тура юлдан алып барыусы беҙҙең лоцмандар - Бөйөк Аллаһ тарафынан ебәрелгән пәйғәмбәрҙәр ул.

Кешене барлыҡҡа килтереүҙең маҡсаты нимәлә? Кешенең был донъяға килеүенең маҡсаты - үҙен барлыҡҡа килтергән Ижадсының ризалығын алып, тормош юлын Уға инанып, Уға ғибәҙәт ҡылып, изге ғәмәлдәр ҡылып үтеү ул, яманлыҡтан азат булыу.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Уларҙы, Беҙҙең әмер буйынса, хаҡ юлдан алып бара торған етәксе (пәйғәмбәр) иттек».

(Әнбиә сүрәһе, 73-се аят)

Был донъяла кеше һынауҙар үтә. Ул үҙенән бер аҙым да ҡалмай эйәреп йөрөгән шайтандың ҡотортоуы менән көрәшә. Насар уй һәм эштәргә этәргән алдау, һаранлыҡ, тупаҫлыҡ, хыянатсыллыҡ кеүек эшәке хистәрҙе еңеп сығырға тырыша. Был ауыр көрәштә Хужабыҙ Аллаһ кешеләрҙе етәксеһеҙ ҡалдырмаған. Ул уларға дөрөҫ юл күрһәткән, хаҡиҡәтте аңлар өсөн аҡыл биргән. Бынан тыш үҙҙәре араһынан күркәм тормош алып барған, уларға тере өлгө булған юл күрһәтеүселәрҙе ебәргән.



# ПӘЙҒӘМБӘРҘӘР ҺӘМ УЛАРҘЫҢ СИФАТТАРЫ

Иман шарттарының береһе - пәйғәмбәрҙәргә инаныу, йәғни уларҙың Аллаһтың кешеләргә һайлап ебәргән илселәре икәнлеген һәм улар алып килгән ғилемдең дөрөҫлөгөн таныу ул. Пәйғәмбәрҙәрҙе инҡар итеү - диндe танымау менән бер, сөнки тик пәйғәмбәрҙәр генә динде таратҡандар. Илаһи китаптар менән таныштырғандар, Аллаһтан алған Илаһи вәхиҙе еткергәндәр.

Пәйғәмбәр - Аллаһтың әмер һәм бойороуҙарын кешеләргә еткереүсе ул. Ер йөҙөндәге тәү кеше - Әҙәмде (ғәләйһис-сәләм) - Аллаһ беренсе пәйғәмбәр итеп тәғәйенләгән. Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) - Аллаһтың бойороуҙарын кешеләргә еткереүсе беренсе пәйғәмбәр. Ваҡыттар үтеү менән, кешеләр үҙҙәрен Тыуҙырыусыны һәм яуап бирәсәк Хисап көнөн онотала, дөрөҫ юлдан яҙалар. Уларҙы ҡотҡарыу һәм хаҡ дингә кире ҡайтарыу маҡсатында, Бөйөк Аллаһ Үҙенең Мәрхәмәте менән тағы пәйғәмбәрҙәр ебәрә. Беренсе пәйғәмбәр Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) һәм һуңғы пәйғәмбәр Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) араһында бик күп пәйғәмбәрҙәр булған. Бер хәҙистә 124 мең пәйғәмбәр булыуы хаҡында әйтелә, Ҡөрьәндә 25 пәйғәмбәрҙең исеме телгә алына. Ҡөрьән һәм хәҙистәрҙә Аллаһҡа тулы инаныу менән хеҙмәт иткән был иң күркәм кешеләрҙең тормошонан фәһемле тарихтар бәйән ителә. Ҡөрьәндә әйтелгән пәйғәмбәрҙәр:

**Әҙәм пәйғәмбәр ( u ) – ерҙәге беренсе кеше һәм тәүге пәйғәмбәр, Иҙрис пәйғәмбәр ( u ), Нух пәйғәмбәр ( u ), Һуд пәйғәмбәр ( u ), Сәлих пәйғәмбәр ( u ), Ибраһим пәйғәмбәр ( u ), Лут пәйғәмбәр ( u ), Исмәғил пәйғәмбәр ( u ), Исхаҡ пәйғәмбәр ( u ), Яҡуп пәйғәмбәр ( u ), Йософ пәйғәмбәр ( u ), Әйүп пәйғәмбәр ( u ), Шөғәйеп пәйғәмбәр ( u ), Муса пәйғәмбәр ( u ), Һарун пәйғәмбәр ( u ), Юныс пәйғәмбәр ( u ), Дауыт пәйғәмбәр ( u ), Сөләймән пәйғәмбәр ( u ), Ильяс пәйғәмбәр ( u ), Әльяса́ғ пәйғәмбәр ( u ), Зөлкәфил пәйғәмбәр ( u ), Зәкәриә пәйғәмбәр ( u ), Яхья пәйғәмбәр ( u ), Ғайса пәйғәмбәр ( u ), Мөхәммәт пәйғәмбәр ( r ).**

Бөйөк Аллаһ пәйғәмбәрҙәрҙе әҙәми заттарҙан тәғәйенләгән. Улар ҙа беҙҙең кеүек ашағандар, эскәндәр, йоҡлағандар. Хеҙмәт иткәндәр, төрлө һөнәр алғандар. Ғаилә ҡорғандар. Ауырығандар һәм үлгәндәр. Әммә улар илаһи вәхи ҡабул итеүҙәре менән ябай кешеләрҙән айырылып торған. Бөйөк Аллаһ был намыҫлы, ғәҙел һәм тоғро кешеләрҙе махсус миссия үтәр өсөн дә пәйғәмбәр итеп һайлаған. Улар Аллаһтың биргән динен үтәргә һәм кешеләргә еткерергә тейеш булғандар.

Бөйөк Аллаһ пәйғәмбәрҙәрен иң гүзәл сифаттар менән өлөшләгән, шуның өсөн дә улар үҙҙәренең пәйғәмбәрлек бурыстарын бик күркәм итеп үтәгән, ауырлыҡтарҙы һәм ҡыйынлыҡтарҙы ныҡ сыҙамлылыҡ менән йырып сыҡҡандар:

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Яҡшы һүҙ еткереп, өгөтләгән пәйғәмбәрҙәрҙән һуң кешелә Аллаһҡа ҡаршы дәлил булмаһын өсөн ебәрҙек».

(Нисә сүрәһе, 165-се аят)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Беҙ һине киҫәтеп өгөтләүсе итеп, хаҡ һүҙ еткерергә ебәрҙек. Өгөтләп киҫәтеүсе бармаған бер халыҡ та ҡалманы».

(Фатир сүрәһе, 24-се аят)

| | | |
|---|---|---|
| **Сиддык** | Һүҙҙәрендә лә һәм эштәрендә лә пәйғәмбәрҙәрҙең тоғро булыуы | Пәйғәмбәрҙәр бер ҡасан да ялған һөйләмәгәндәр. Ғәҙеллек - бар кеше баһалаған һәм хөрмәтләгән күркәм сифат ул. Әгәр берәй кеше беҙҙе алдаһа, беҙ уға башҡа ышанмаясаҡбыҙ. Беҙ ғәҙел, намыҫлы кешеләргә ышанабыҙ һәм уларҙы хөрмәт итәбеҙ. Пәйғәмбәрҙәр тик дөрөҫтө генә һөйләгәндәр. Ялғанлыҡ – ергә Аллаһ ебәргән илселәргә ҡарата әйтеп булмаҫлыҡ сифат ул. Сөнки алдашҡан, эшләгән эштәре, ҡыланыштары әйткән һүҙҙәренә тап килмәгән кешеләр башҡаларҙың ышанысын яулай алмайҙар, улар өсөн өлгө булып тормайҙар. |
| **Аманат** | Пәйғәмбәрҙәр һәр мәсьәләлә ышаныслы заттар | «Аманат» – ышаныслылыҡ, «әмин» - ышаныслы, тоғро тигән мәғәнәне аңлата. Пәйғәмбәрҙәр һәр яҡтан да ышаныслы һәм тоғро, иң ғәҙел кешеләр булғандар. Улар бер ҡасан да хыянат итмәгәндәр, лайыҡһыҙ эштәр ҡылмағандар, тик Аллаһ бойорғандарын ғына үтәгәндәр. Шуның өсөн дә кешеләр уларға ышанып ҡарағандар, әйткән һүҙҙәрен тыңлағандар, һәм дин юлында ла, тормошта ла пәйғәмбәрҙәр өйрәткәнсә йәшәргә тырышҡандар. |
| **Фәтанат** | Аҡыл һәм зирәклек яғынан улар кешеләрҙән күпкә юғары | Пәйғәмбәрҙәр - һиҙгер, зирәк, үтә күреүсәнлеккә эйә булғандар. Кешеләрҙе ышандырырлыҡ аҙымдар менән үҙ арттарынан эйәртер, һорауҙарына аңлайышлы яуаптар бирер өсөн, уларға аҡыл һәм зирәклек фарыз булған. |
| **Ғисмәт** | Пәйғәмбәрҙәр гонаһ ҡылмайҙар | Пәйғәмбәрҙәр үҙҙәренең йәшәү дәүерендә бер ваҡытта ла гонаһ ҡылмағандар. Кеше затынан булыу сәбәпле, ҡайһы саҡта хаталар эшләгәндәр Ләкин, илаһи иҫкәртеү һәм киҫәтеү алып, шунда уҡ төҙәтергә ашыҡҡандар. Бөйөк Аллаһтың күҙәтеүе аҫтында тәрбиәләнгән пәйғәмбәрҙәр гонаһ эшләүҙән һаҡланғандар. |
| **Тәблиғ** | Аллаһу Тәғәләнең ҡушҡандарын, тыйыуҙарын кешеләргә тапшырыу һәләте | Пәйғәмбәр Бөйөк Аллаһтан алған бөтә мәғлүмәттәрҙе һәм илаһи вәхиҙәрҙе кешеләргә еткерергә бурыслы. Әммә алған вәхиҙәргә үҙенән бер нәмә лә өҫтәмәҫкә һәм үҙгәртмәҫкә тейеш булған. Пәйғәмбәрҙәр алған илаһи вәхиҙәрҙе бер ҡасан да кешеләрҙән йәшермәгәндәр, сөнки вәхиҙәрҙе кешеләргә еткереү уларҙың төп бурысы булып һаналған. |

# ПӘЙҒӘМБӘРҘӘРҘЕҢ САҠЫРЫУЫНДА ДӨЙӨМ УРТАҠЛЫҠ

Бөтә пәйғәмбәрҙәр ҙә кешеләрҙе берҙән- бер хаҡ дингә һәм Аллаһтың Берлегенә инанырға саҡырғандар. Был дин - «Бер Аллаһҡа табыныу» тип атала. Пәйғәмбәрҙәр - Аллаһтың ярҙамсылары, улар Уға тиң бер кемдең дә булмауын, ғибәҙәт ҡылырға лайыҡлы Аллаһтан башҡа бер кем дә, бер нәмә лә булмауын аңлатҡандар. Уның етешһеҙлектән пак һәм Уға тиң зат юҡ. Аллаһ илселәре Бөйөк Аллаһҡа ғына табынырға саҡырғандар. Ғибәҙәткә лайыҡ булмаған төрлө боттарға, һүрәттәргә, уйҙырма тәңреләргә, кешеләргә табыныуҙың дөрөҫ түгеллеген һөйләгәндәр. Улар Аллаһтың ижады ғына икәнлеген, ваҡыты еткәс, мәңгелек булмауы сәбәпле, нисек барлыҡҡа килгәндәр, шулай юҡҡа сығасаҡтары хаҡында еткергәндәр. Бындай нәмәләргә табыныуҙың мәғәнәһе юҡлығын аңлатҡандар.

Бөйөк Аллаһ әйтә: **«Минән башҡа Тәңре булырҙай һис бер кем юҡ. Шуға күрә, Миңә генә табынығыҙ», - тигән дөрөҫлөктө вәхи итмәйенсә, Беҙ һинән әүәл бер генә пәйғәмбәр ҙә ебәрмәнек!»** (Әнбиә сүрәһе, 25-се аят)

Шулай итеп, Ислам - яңы дин түгел. Алдағы пәйғәмбәрҙәр дине кеүек үк, ул да Аллаһтың берлегенә нигеҙләнә. Дин ғәрәпсә «ислам», башҡорт телендә – «буйһоноусанлыҡ», ә «мосолман» һүҙе – «Берҙән Бер Аллаһҡа буйһонған кеше» тип атала. Һәр халыҡ динде үҙ телендә «буйһоноусанлыҡ», ул динде тотоусыларҙы - «Аллаһҡа буйһоноусылар» тигән һүҙҙәр менән аңлатҡандар. Һуңғы Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) килеп, уға ғәрәп телендә Изге Ҡөрьән төшөрөлгәндән һуң, был һүҙҙәр Ҡөрьән телендә ҡулланыла башлана. Шулай итеп, ислам - Бөйөк Аллаһҡа буйһоноу дине ул.

Тимәк, бөтә пәйғәмбәрҙәрҙең дә инаныуы бер булған. Шуның менән бергә уларға Аллаһҡа табыныу йолалары, рөхсәт итеүсе һәм тыйыусы шәриғәт ҡанундары йыйылмаһы бирелгән. Шулай итеп, һәр Аллаһ илсеһе яңы ҡанундар менән килгән, йәки алдағы килгән пәйғәмбәрҙең закондарын раҫлаған һәм халыҡты уларға таянып йәшәргә саҡырған. Мәҫәлән, пәйғәмбәр Муса (ғәләйһис-сәләм) шәриғәтендә намаҙҙар һаны тәүлегенә икәү булған. Ә пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шәриғәте буйынса мосолмандар биш намаҙ үтәргә тейештәр.

Бөтә пәйғәмбәрҙәр ҙә, Аллаһҡа ысын күңелдән ышанғандар, буйһонғандар – мосолман булғандар. Бөйөк Аллаһу Тәғәлә Ҡөрьәндә Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юлынан барырға, илселәр аша ебәрелгән изге яҙмаларға һәм Китаптарға ышанырға бойора. Бөйөк Хужабыҙ улар араһында айырма юҡлығын, уларҙың барыһы ла мосолмандар булыуын хәбәр итә. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: «Мин һәм минән алда әйткән пәйғәмбәрҙәрҙең иң яҡшы һүҙҙәре ошолор: «Ләә иләәһә илләллаһ» (Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, Ул Бер генә, Уның тиңдәше юҡ). Шуның өсөн дә, бөтә мосолмандар, ер йөҙөндә булып киткән бар пәйғәмбәрҙәрҙе лә ҡабул итә, ярата һәм хөрмәтләй.



# ПӘЙҒӘМБӘРҘӘРГӘ ИНАНЫУҘЫҢ ҠИММӘТЕ

## ПӘЙҒӘМБӘРҘӘР

- Аллаһ тураһында һөйләйҙәр.
- Аллаһҡа дөрөҫ ғибәҙәт ҡылырға өйрәтәләр.
- Мәңгелек тормош хаҡында мәғлүмәт биргәндәр.
- Пәйғәмбәрҙәр яңы мәҙәниәттәргә нигеҙ һалғандар.
- Үҙҙәренең әхләҡ һәм күркәм холоҡтары менән беҙгә өлгө булып торалар.

Йыһаныбыҙҙы өйрәнгәндә, ундағы иҫ киткес бер тәртипте, төҙөклөктө һәм аһәңлелекте күрәбеҙ. Әлбиттә, бындай камил тәртиптәге төҙөклөк осраҡлы рәүештә йәки үҙенән - үҙе барлыҡҡа килмәгән. Былар барыһы ла уйлай белгән кешелә шундай фекер тыуҙыра: Йыһан һәм унда булған барлыҡ нәмәләрҙең Ижадсыһы бар һәм Ул - Берҙән-Бер Аллаһ. Әммә Йыһан Хужаһының ниндәй юғары, камил сифаттарға эйә булыуын һәм Уға нисек итеп дөрөҫ инаныуҙы - үҙ аҡылыбыҙ менән генә аңлай алмайбыҙ. Шуның өсөн дә был ғилемде еткерер өсөн, Аллаһ Үҙенең мәрхәмәтлеге менән, кеше затынан һайлап, халыҡҡа пәйғәмбәрҙәр ебәргән. Нәҡ улар илаһи юл күрһәтеүселәр булған. Тап **улар беҙгә Аллаһ тураһында һөйләйҙәр.**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Ысынлап та, Күктәр менән Ерҙең яратылыуында ла, көн менән төндөң алмашыуында ла аҡылы булған кешеләр өсөн күп аяттар бар. Торғанда, ултырғанда, ятҡанда ла Аллаһты иҫкә алып, Күк менән Ерҙең яратылыуын уйлап: «Эй, Раббым! Һин быларҙы бушҡа ғына бар ҡылмағанһың. Маҡтау һиңә! Ут ғазабынан беҙҙе һаҡла!»

(Ғимран сүрәһе, 190-191-се аяттар)

Кеше булып тыуғас, был донъяға ни өсөн килгәнебеҙҙе, кешеләрҙе һәм башҡа мәхлүктәрҙе тыуҙырған Ижадсыбыҙҙы танып белергә, үҙебеҙҙе төшөнөргә теләйбеҙ. Биргән хисапһыҙ ниғмәттәре өсөн, беҙҙең күңелдә Аллаһу Тәғәләгә рәхмәттәр әйтеү, ярҙам һәм ярлыҡау һорау, доғалар аша өндәшеү ихтыяжы тыуа. Ләкин махсус дини белем булмаһа, Аллаһҡа дөрөҫ ғибәҙәт ҡыла алмайбыҙ. Шуның өсөн дә пәйғәмбәрҙәр үҙҙәренең өлгөһөндә кешеләргә дөрөҫ инаныу һәм ғибәҙәт ҡылыу үрнәген күрһәткәндәр. **Улар Аллаһҡа дөрөҫ инаныу һәм ғибәҙәт ҡылыу юлдарын өйрәткәндәр.**

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Мин намаҙҙы нисек итеп уҡығанмын, шулай уҡығыҙ».

(Бохари, Әҙән, 1)

Изге Китаптар һәм пәйғәмбәрҙәр - киләсәк тормош тураһындағы мәғлүмәт сығанағы. Был донъянан икенсе донъяға күскәндән һуң, кешене нимә көткәнен төшөндөрә улар. Кемдәр Аллаһҡа инанған һәм яҡшы эштәр эшләгән, уларҙы буласаҡ әжерҙәр менән һөйөнсөләгәндәр. Аллаһу Тәғәләгә инанмаған, Ҡиәмәт көнөнә һәм Мәңгелек тормошҡа ышанмаған кешеләрҙе ниндәй ғазаплы михнәттәр көтәсәген иҫкәрткәндәр. Пәйғәмбәрҙәр был фани донъяла дөрөҫ йәшәү юлдарын күрһәткәндәр һәм юлыбыҙҙың иң һуңғы ноктаһе - **мәңгелек тормош хаҡында мәғлүмәт биргәндәр**.

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Аллаһ һәр беребеҙ менән айырым аралашасаҡ. Кеше уң яғына ҡараһа, эшләгән яҡшы ғәмәлдәрен күрәсәк. Һул яғына ҡараһа, ҡасандыр ҡылған яман эштәре көтөп торасаҡ. Алға ҡараһа, тик Тамуҡты ғына күрер. Ярты ғына хөрмә саҙаҡа ҡылып булһа ла, Тамуҡ утынан һаҡланығыҙ».

(Бохари, Зәкәт, 9)



Пәйғәмбәрҙәр ҡәүем, ҡәбилә, халыҡтар төркөмөнә етәксе итеп ебәрелгәндәр, илаһи вәхи менән ҡеҙрәтләнгәндәр. Улар сәнғәт, ер эшкәртеү, сауҙа һәм башҡа төрлө эштәр менән мәшғүл булғандар. Изге Ҡөрьәндә Нух пәйғәмбәрҙең нисек карап төҙөүе, Дауыт пәйғәмбәрҙең тимер иретеү эше менән шөғөлләнеүе һәм башҡаларҙы ла тимерселек һөнәренә өйрәтеүе хаҡында һөйләнелә. Пәйғәмбәрҙәр **яңы мәҙәниәттәргә нигеҙ һалғандар**. Улар, кешеләр тыныслыҡта һәм хәүефһеҙлектә йәшәһен өсөн, яңы йәмғиәт төҙөгәндәр, үҙ халҡын ике донъяла ла бәхетле итер өсөн бөтә тырышлыҡтарын һалғандар.



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Без Дауытҡа Үҙебеҙҙән өҫтөнлөк бирҙек. Эй, тауҙар, уның менән бергә (Аллаһты) данлағыҙ! Ҡоштар, һеҙ ҙә данлағыҙ! Без уның өсөн тимерҙе йомшарттыҡ һәм әйттек: «Тимерҙән кейем яһа һәм үлсәп нескә итеп тек. Яҡшылыҡ эшләгеҙ! Мин һеҙҙең ни эшләгәнегеҙҙе күреп торам!»

(Сәбә сүрәһе, 10-11-се аяттар)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Беҙҙең күҙ алдында Без өйрәткән буйынса көймә яһа, золом ҡылғандар өсөн Миңә доға ҡылма. Улар барыбер батырыла».

(Һуд сүрәһе, 37-се аят)

Кеше ғаиләлә тыуа һәм унда был тормош һәм донъя менән таныша. Ғаиләлә уның ҡылығы, ғәҙәте, нимәгәләр өйрәнеү һәләте һалына. Бала ата-әсәһенә, артабан уҡытыусыларына, туғандарына, өлкән дуҫтарына оҡшарға тырыша. Сөнки кешелә үрнәк булырҙай кемгәләр оҡшарға теләү ихтыяжы тыуа. Шуның өсөн дә Бөйөк Аллаһ кешеләр араһынан өлгө булырҙай иң күркәм кешеләрҙе пәйғәмбәр итеп ебәргән. Улар кешеләрҙе ғәҙел булырға, алдашмаҫҡа, башҡаларҙың хоҡуғын һаҡларға, ғәфү итә һәм кисерә белергә, мәрхәмәтле, рәхимле, изгелекле, шулай уҡ эшсән һәм йомарт булырға өйрәткәндәр. **Улар үҙҙәренең әхлағы һәм күркәм холҡо менән беҙгә өлгө булып тора.**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Улар яҡшы өлгө булды һеҙгә - Аллаһты, Ҡиәмәт көнөн осратырына өмөт иткән кешеләргә».

(Мөмтәхәнә сүрәһе, 6-сы аят)

# ПӘЙҒӘМБӘРҘӘР ТОРМОШО

Бөйөк Аллаһ пәйғәмбәрҙәрҙең тормошон, күркәм әхлағын һәм ғәмәлдәрен кешеләргә үрнәк итеп күрһәткән. Бынан тыш Ҡөрьәндә бирелгән тарихи хикәйәләр Мөхәммәт пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) миссияһының дөрөҫлөгөн иҫбатлай. Ул белемһеҙ булған. Әммә үткән быуаттарҙа йәшәгән пәйғәмбәрҙәр тормошон дөрөҫ итеп һөйләүе беҙҙе хайран ҡалдыра. Шикһеҙ, ул был мәғлүмәттәрҙе ниндәйҙер сығанаҡтарҙан алған. Ул сығанаҡ - Аллаһтың Үҙе һәм Уның уға ебәргән вәхиҙәре. Был хаҡикәт Ҡөрьәндә ошолай яҡтыртылған:

**«Беҙ һиңә ҡәҙәр ҙә рәсүлдәр ебәргәйнек. Ҡайһы береһе хаҡында Беҙ һиңә һөйләнек, ә башҡаларын һиңә һөйләмәнек»** (Ғафир сүрәһе, 78-се аят).

Ә хәҙер Ҡөрьәндә иҫкә алынған ҡайһы бер пәйғәмбәрҙәр тормошоноң мауыҡтырғыс тарихына күҙ һалайыҡ һәм үҙебеҙгә фәһем алайыҡ!

## Әҙәм пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм)

Ул - тәүге кеше һәм тәүге пәйғәмбәр. Бөйөк Аллаһ уны һөйләшергә өйрәткән, бар нәмәнең исемен аңлатҡан. Фәрештәләргә һәм Иблискә Әҙәмде хөрмәт итергә, уға сәжҙә ҡылырға ҡушҡан. Фетнәсе Иблистән башҡа бөтә фәрештәләр ҙә, Аллаһтың әмерен үтәп, Әҙәм алдында баш эйгәндәр. Пәйғәмбәр Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) үҙенең хәләл ефете Һауа менән Йәннәттә урынлашалар, улар унда йәндәре теләгән емештәр менән туҡланалар. Аллаһ уларға тик бер ағасҡа ғына яҡын килмәҫкә ҡуша, емештәрен тәмләүҙән тыя. Көнләшеүҙән һәм тәкәбберлегенән сыҙай алмаған Иблес уларға ҡаршы яуызлыҡ эшләй башлай. Алдау һәм ялған анттар менән Әҙәм һәм Һауаны яңылыштыра, һәм улар тыйылған емеште ашайҙар. Бөйөк Аллаһ буйһонмауҙары өсөн уларҙың барыһын да Ожмахтан ергә төшөрә. Шулай итеп, Әҙәм, Һауа һәм бөтә кешелектең дошманы Иблес ер өҫтөндә тороп ҡалалар. Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) һәм уның ҡатыны, шайтандың ҡотҡоһона бирелеп, ҙур хата эшләгәндәрен аңлайҙар,- тәүбәгә киләләр һәм Аллаһтан уларҙы ғәфү итеүен һорайҙар. Аллаһ Тәғәлә уларҙың тәүбәһен ҡабул итә һәм ярлыҡай. Ә Ожмахтан ҡыуылған шайтан Ҡиәмәт көнөнә тиклем кешеләрҙе тура юлдан яҙҙырырға ант итә. Бөйөк Аллаһ кешеләрҙе шайтандың хәсөттәренән һаҡ булырға һәм уның әҙәм балалары өсөн иң ҡурҡыныс дошман икәнен һәр саҡ иҫтә тоторға саҡыра.

Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) - Аллаһ тарафынан яратылған кешенең иң бөйөк өлгөһө. Аллаһтың Әҙәм ғәләйһис-сәләмдең ҡылған гонаһын ярлыҡауы Уның Үҙ ҡолдарына булған рәхимлелеген, миһырбанлылығын күрһәтте. Шулай итеп, Ҡиәмәт көнөнә тиклем киләсәк бар кешеләрҙе лә Хужабыҙ тәүбәгә өйрәтте.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Улар хаҡындағы ҡиссала аҡылы булған кешеләргә ғибрәт бар».

(Йософ сүрәһе, 111-се аят)

**Әҙәм (ғәләйһис-сәләмдең) тәүбәһе - Аллаһтан нисек ярлыҡау һорарға тейешлектең күркәм миҫалы ул.**

### Нух пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) кәмәһе

Әлбиттә, һеҙ Нух пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) үҙенең күренекле кәмәһендә туфанда батмай ҡотолоп ҡалыуы хаҡында ишеткәнегеҙ бар. Ерҙең төрлө мөйөштәрендәге кешеләргә билдәле булған был ваҡиға тарих төпкөлөндә, биш мең йылға яҡын элек булған. Ләкин бынан ғына уға ҡыҙыҡһыныу кәмемәй, сөнки ул хайран ҡалдырырлыҡ ваҡиғалар, фәһемле һабаҡтар менән тулы. Әйҙәгеҙ беҙ ҙә Изге Ҡөрәндең һүҙҙәренә эйәреп шул боронғо ваҡыттарға күҙ һалайыҡ ...

Ул көндө, һәр ваҡыттағыса офоҡта таң һиҙелеүе менән, Нух (ғәләйһис-сәләм) малдарын ауыл аша көтөүлеккә ҡыуа. Ауыл йоҡлай. Һирәк-һаяҡ ҡына табышы менән ҡасҡан бурҙың аяҡ тауышы, йә һаҡта тороп йоҡомһораған ҡарауылсының төшөп киткән һөңгөһө зыңлауы, йә эфәндеһенең ҡомһоҙлоғонан йәберләнгән меҫкендең ыңғырашып һыҡтауы ғына был тынлыҡты боҙа...

Нухҡа (ғәләйһис-сәләм) ул ваҡытта 50 йәш була. Изгелеге һәм ғәҙеллеге менән ул ырыуҙаштарының хөрмәтен ҡаҙана. Үҙе лә халҡын ярата һәм залим Дармесил батшаның золомонан уларҙы ҡотҡарғыһы, ғәҙелһеҙлектән, алдаҡтан һәм гонаһтан аралағыһы килә. Изге уйҙар менән Нух (ғәләйһис-сәләм) малдарын иң алыҫ көтөүлеккә ҡыуа. Ығы-зығылы һарыҡтар, олпат һыйырҙар, үләндәрҙе йолҡҡолап, туғай буйлап таралыша. Уның ҡолағына һирәк-һаяҡ ишетелгән малдарҙың ҡалын мөңрәүҙәре йәки наҙлы бәэлдәүҙәре фанилыҡҡа ризалашыуҙары һәм шатланыуҙары кеүек тойолдо. Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм), йылмайып, хуплағандай башын һелкеп, таяғына таянып, һыртында йәйенкә ҙур ташы булған, көтөүлеккә ҡарап торған тәпәшәк кенә убаға менә. Ғәҙәттә ул унда ултырып, көтөүенең туғайҙа йөрөүен күҙәтә. Ғәҙәттә ул унда ултырып, көтөүенең туғайҙа йөрөүен күҙәткән.

Ташҡа ултырыр алдынан Нух пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) убаның икенсе яғынан асылған үҙҙәренең төйәгенә күҙ һалғыһы килә. Ауыл ус төбөндә кеүек кенә күренә. Бына батша һарайы һәм эргәһендә байҙарҙың затлы йорттары. Ситтә ана ярлыларҙың ҡамыштан үрелгән аласыҡтары. Ҡояш ҡалҡҡан һәм халыҡ көндәлек эштәре менән



мәшғүл. Ҡатын-ҡыҙ һыу ташый, хеҙмәтселәр ишәккә йөк тейәй, сауҙа менән көн итеүселәр, баштарына кәрзинле күмәстәрен, башҡа тауарҙарын йөкмәп, баҙарға ашыға. Кешеләр сауҙаларына ҡот, мул уңыш, байлыҡ һорап илаһилаштырған таш һындарына ҡорбан килтергәндәр ҙә эргәләге тыҡрыҡтарҙан табынған майҙандарына ағыла. Ғибәҙәтханала урынлаштырылған поттарын «Вадд», «Сува», «Йәғус» һәм «Нәср» тиеп атағандар. Шул тиклем уларҙы ололағандар, хатта һәр бер потҡа берәр хеҙмәтсе булгәндәр. Батша һарайы, затлы йорттар һәм ғибәҙәтхана алыҫтан ҡарағанда яҡындағы кеүек мөһабәт түгел, киреһенсә, бәләкәй, әһәмиәтһеҙ күренә икән, тиеп уйлаған Нух (ғәләйһис-сәләм).

Ауыр һулап, тыуған төйәгенән ҡарашын айыра ла үҙенең ташына барырға ниәтләп борола һәм көтмәгәндә таныш булмаған кешене күреп ҡатып ҡала. Ул ҡара сәсле, эсенән нуры бөркөлөп торған матур йөҙлө, үҙенә ҡурҡыу-хөрмәт уятҡан аҫыл затлы йәш ир була. Нух (ғәләйһис-сәләм) тәүҙә уны мосафир тип ҡабул итә, әммә оҙон юл үткән саҡта таҙалығын һаҡлау икеле булған ап-аҡ кейеменә хайран ҡала. Аңлатып булмаған ҡурҡыу менән таныш булмаған кешегә теләй.

Ят кеше Нухҡа (ғәләйһис-сәләм) мөрәжәғәт итә. Уның гүзәл, ышанысллы, моңло тауышы ауыҙынан түгел, ә бөтә яҡтан сығып, Нухтың (ғәләйһис-сәләм) йөрәгенә биргән кеүек тойола: «Сәләм һиңә, әй Нух! Мин - Ябраил фәрештә, Ғаләмдәр Раббыһы Аллаһтың илсеһемен! Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә аҙашҡан халҡыңды Аллаһтың Берлегенә өндәргә һине һайланы».

Үҙе менән булған ваҡиғаларға иҫе киткән Нух (ғәләйһис-сәләм) күпмелер ваҡытҡа телдән яҙа. Ниһайәт, ҡурҡыуын һәм һеңгәҙәгән хәлен еңеп, әйтә: «Аллаһ мине пәйғәмбәре итеп һайланымы?!! Ғаләмдәр Хужаһы Аллаһҡа дан! Ләкин мин кескәй генә ҡоломон, булдыра алырмынмы?» Ябраил (ғәләйһис-сәләм) яуаплай: «Раббыбыҙ теләгәндәрен һайлай. Барлыҡ Ғилем - Унда ғына. Бар, халҡыңды хәҡиҡи дингә саҡыр. Раббыбыҙ шулай бойорҙо». Нухтың (ғәләйһис-сәләм) ҡурҡыуы уға асылған Хәҡиҡәткә һоҡланыу менән алышына һәм вәғәҙә бирә: «Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә биреләмен һәм үлем сәғәтем килгәнсе кешеләрҙе хаҡ юлға саҡырырға вәғәҙә бирәмен».

Шунан алып Нух (ғәләйһис-сәләм), хәҡиҡи дингә тотоноп, үҙенең халҡын Аллаһтың Берлегенә өндәй: «Халҡым! Аллаһҡа табынығыҙ! Унан башҡа илаһығыҙ юҡ! Мин һеҙгә ебәрелгән Уның тоғро илсеһе. Аллаһтан ҡурҡып, миңә буйһоноғоҙ! Бының өсөн һеҙҙән әжерен һорамайым, ысынында ла әжерем минең Ғаләмдәр Раббыһында!»

Элек Нухты (ғәләйһис-сәләм) хөрмәт итеп, уға ҡарата яҡшы мөғәмәләлә булғандар, хәҙер килеп унан йөҙ сөйөрә. Үҙен «Аллаһтың пәйғәмбәре» тиеп атауы һәм уларҙың поттарын кире ҡағыуы тиҙҙән Дармесил батшаға һәм уның «ҡорғон» тиеп исемләнгән ярандарына ла барып етә. Дармесилдың бойороғо буйынса Нух (ғәләйһис-сәләм) батша һарайына килә, ярһыған батша ҡарғай-ҡарғай уны ҡыуып сығара. Нухты (ғәләйһис-сәләм) поттарға табынырға мәжбүр итеүҙең файҙаһыҙлығын күреп, Дармесил һәм янындағы ҡорғоно уны арбарға уйлай. Кешеләргә илаһтарына табынырға ҡушалар, ә Нух пәйғәмбәрҙе (ғәләйһис-сәләм) алдаҡсы һәм йүләр тип иғлан итәләр...

Нух (ғәләйһис-сәләм) кешеләргә нәсихәт менән мөрәжәғәт итә: «Ни өсөн Аллаһтың бөйөклөгөн танымайһығыҙ? Ул һеҙҙе юҡтан яралтты. Бер-береһенең өҫтөнә ете ҡат күкте яралтты. Һеҙҙең өсөн ҡояш менән айҙы яҡтыртҡыс итте. Алла Тәғәлә үҫемлек кеүек һеҙҙе ерҙән үҫтерҙе. Шунда кире ҡайтарып, аҙаҡ ҡабат ҡалҡытасаҡ. Һәм Уның алдында яуап тотасаҡһығыҙ».

Шул саҡ, янына йыйылған халыҡ, икегә айырылып, ҡиммәтле кейемдәр кейгән «аҡһөйәктәр» әһеленә юл бирә:

«Әй, халыҡ! Тыңламағыҙ уны! Нух - үҙегеҙ кеүек ябай кеше, һеҙҙән өҫтөн булғыһы килә. Илаһтарығыҙ Вадда, Сува, Йәгүсә, Йәүҡә һәм Нәсрҙан һис баш тартмағыҙ! Ул һөйләгәндең барыһы ла алдаҡ, юғиһә беҙ ата-бабаларыбыҙ аша белер инек. Ул аҡылдан шашҡан. Күрерһегеҙ әле!»

Халыҡ: «Һин - алдаҡсы!», «Һин – диуана», «Кит бынан!» - тиеп ҡысҡырып, Нухҡа (ғәләйһис-сәләм) йүнәләләр. Ул ҡайғыға батып китә. Яңғыҙы ҡалғас, доға менән Раббыһына мөрәжәғәт итә: «Әй Раббым! Алдаҡсы итеп һанауҙарынан һаҡланырға насип ит, миңә ярҙамыңды ебәр!»

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ҡайғырмаҫҡа һәм кешеләргә дәғүәт ҡылыуын дауам итергә ҡуша.

«Аҡһөйәктәр» ҡотҡоһона һәм ҡарғалған шайтандың үәсүәсәһенә бирелгән аҙашҡан халыҡ Нухты (ғәләйһис-сәләм) тыңларға теләмәй. Ҡыуалар. Туҡмайҙар һәм таштар аталар. Бер мәл мәжүсиҙәр, Нухҡа (ғәләйһис-сәләм) ябырылып, уны быуа башлай. Ул иҫен юғалта. Мәжүсиҙәр уны үлгәнгә һанап ташлап ҡаса. Ә Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм), үҙен йәберләүселәрҙе йәлләп, Раббыһынан халҡын кисерәүен һорай: «Әй Раббым, улар ни ҡылғандарын белмәй!»

Артабан да ул хаҡ юлға өндәүен дауам итә: «Халҡым! Бер Аллаһҡа ғына табынығыҙ, юғиһә һеҙҙең өҫөн яза Көнө етеүенән ҡурҡам. Уның Берлеге хаҡында миңә еткерелеп, ә һеҙҙән йәшерелгән булмаһа, һеҙгә шул ҡәҙәре нәфрәтле булғанды еткерергә тырышаммы ни? Һеҙҙән әжер көтмәйем, әжерем тик Аллаһтан ғына».

Әммә халҡы, динһеҙлектәре һәм тәкәбберлектәре сәбәпле, хаттин ашып, асыҡ хәҡиҡәтте ҡабул итергә теләмәй, бары тик телләшеп ҡаршылаша:

- Әй Нух! Һин беҙҙең менән оҙаҡ телләшеп, бары бәхәсте генә арттырҙың. Әгәр һин хаҡлы икән, беҙҙе нимә менән ҡурҡытаһың, шуны килтер!

- Һәммәһе Аллаһу ихтыярында, Ул ғына быны эшләй ала. Ҡотолорға хәлегеҙҙән килмәйәсәк.

Ул заманда Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә кешеләргә оҙон ғүмер бүләк итеп биргән. Раббыһының бойороғона тоғро Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) 950 йыл халҡын Аллаһтың Берлегенә инанырға саҡырған, хаҡ юлға өндәгән. Ләкин аҙашҡан халыҡ поттарынан, гонаһтарынан һәм яңлышыуҙарынан айырылырға теләмәгән. Динһеҙлектәре, Аллаһтың Илсеһенә асыу һәм нәфрәттәре уларҙың йөрәктәрен шул ҡәҙәр ныҡ ағыулаған, хатта үлгән саҡта ла балаларына васыят әйтер булғандар: «Әлегә Нух тере, уға ышанып эйәрә күрмәгеҙ».

Туғыҙ быуат ярым өндәгәндән һуң, әҙ генәһе - бары иң ярлы һәм өлөшһөҙ 80 кеше генә Нухҡа эйәрә. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә хаҡ юлға Үҙе теләгәндәрен генә күндерә бит. Төшөнкөлөккә бирелгән Нух (ғәләйһис-сәләм) Раббыһына ялбара: «Еңелдем! Миңә ярҙам ит!.. Раббым, көнөн дә, төнөн дә халҡымды өндәнем, ләкин минең саҡырыуым уларҙың хаҡлыҡтан ҡасыуын ғына арттырҙы...»

Нухтың (ғәләйһис-сәләм) ялбарыуына Раббыһы яуап бирә: «Алдан инаныусыларҙан башҡа халҡыңдан берәү ҙә иманға килмәйәсәк. Уларҙың ҡылығына борсолма! Беҙҙең өйрәтеү буйынса кәмә төҙө. Дәлилдәребеҙҙе алдаҡҡа һанағандарға Минән ярлыҡау һорама. Хәҡиҡәттә улар батырыласаҡ!»

Шулай итеп, Аллаһу Нухҡа (ғәләйһис-сәләм) диңгеҙҙә йөҙә алырлыҡ ҙур карап төҙөргә бойора. Уны был эшкә өйрәтә. Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) кәмәһен сәрүи (кипарис) ағасынан төҙөй һәм эсен дә, тышын да ыҫмалалай. Кәмәһенең оҙонлоғо - өс йөҙ терһәк, киңлеге - илле терһәк, бейеклеге утыҙ терһәк була (терһәк - боронғо оҙонлоҡ үлсәме, яҡынса 0,5 метр тәшкил итә). Ул уны өс ҡатлы (палуба) итеп, йәшәү өсөн күп бүлмәле итеп ҡора. Ишеген ҡырынан яһай. Ә ыҫмаланған герметик өҫкө палубаға бер терһәк үлсәмендә люк уя. Нух (ғәләйһис-сәләм) кәмә

төҙөү менән мәшғүл булғанда, күренекле мәжүсиҙәр эргәһенән үткән һайын унан көлә, мыҫҡыл итә. Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) яуап итеп әйтә: «Хәҙер һеҙ беҙҙән көләһегеҙ, аҙаҡ беҙ һеҙҙән көләрбеҙ. Кемде яза мәсхәрәләп ҡаплауын һәм кемгә мәңгелек яфа ауырын белерһегеҙ».

Вәғәҙә иткән көн дә етә, Раббыбыҙға итәғәтһеҙҙәргә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең асыуы төшә. Күк ҡапҡалары һәм ер аҫтары асылып китә лә Раббының Ихтыяры менән һыуҙар урғыла башлай. Күктән ҡойма яуын, ерҙән сығанаҡтар урғыла, ер менән күк болғана... Һыуҙар төрлө яҡтан килеүенән туҡтамай, тиҙҙән офоҡтарға ҡәҙәр арауыҡ ҡоторонған һыу афәте менән ҡаплана, ул юлында осрағандың барыһын да үлемесле өйөрмәгә һөйрәй.

Аллаһу пәйғәмбәренә кәмәгә инергә һәм үҙе менән ҡатынын, улдары Сама, Хама, Йәфисте, йәнә уға эйәргән һынаулы ғына динлеләрҙе алырға ҡуша. Ә буйһонмаған Кенан улы менән башҡа иманһыҙҙарҙы алмаҫҡа бойора. Шулай уҡ, иҫән ҡалһындар өсөн, кәмәгә хайуандарҙың төрөнән берәр пар йыйырға, кешеләргә лә, хайуандарға ла етерлек ризыҡ алырға ҡуша. Барыһы ла әҙер булғас, Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм): «Әйҙәгеҙ, юлға! Аллаһ исеме менән кәмәбеҙ йөҙәсәк һәм туҡталасаҡ», - ти.

Тау кеүек тулҡындарҙа сайҡалып, кәмә йөҙөп китә. Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) алыҫтағы ҡалҡыулыҡта ҡотолорға тырышҡан төркөм араһында, һыуҙан әҙ генә күтәренке утрауҙа ҡапыл яңғыҙ кешене, үҙенең улы Кенанды таный. Әрнеткес һыҙланыу һөйөү тулы ата йөрәгенә үтеп инә һәм ул улын саҡыра:

- Әй, улым! Кәмәбеҙгә ин, яуыздар менән ҡалма!

- Юҡ! Мин бейек тауға менеп һыуҙан ҡотолам!

- Бөгөн, Аллаһ мәрхәмәте менән бүләкләнмәгәндәрҙән тыш, тәҡдиренән берәү ҙә ҡотолмаясаҡ.

Шул мәлдә уларҙы тулҡын айыра. Өҫтәренә көслө тулҡын емерелеп, упҡынға китеп, Кенан башҡалар менән бергә вафат була. Улының



үлемен күреп, пәйғәмбәр ҡысҡырып ебәрә: «Раббым! Улым бит - ғаиләмдең бер өлөшө!» Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйтә: «Әй Нух! Улың үҙенең әшәке ғәмәлдәре өсөн һинең ғаиләңә ҡараманы, шуға ла динһеҙ һәм иманһыҙ халыҡ менән бергә батырылды».

Месопотамия тигеҙлектәренең киң ерҙәрен биләгән, боҙоҡлоҡ, гонаһтар, яманлыҡ һаҙлығына батҡан, Аллаһтың хаҡ дингә өндәгән пәйғәмбәренән баш тартҡан кешеләргә яһил әжере - ғәйәт ҙур туфан ябырыла. Туфан алты ай дауам итә һәм кәмәсе Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ундағы барлыҡ йән эйәләре менән Аллаһ Ихтыяры буйынса алыҫ ерҙәрҙе гиҙә.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бойора: «Әй ер, һыуҙарыңды йот! Әй күк, яуыуыңды туҡтат!» һәм туфан туҡтай, һыу кәмей башлай. Нух пәйғәмбәр Раббыһына тәсбих әйтә: «Беҙҙе яуыз кешеләрҙән ҡотҡарған Аллаһҡа дан. Раббым! Фатихалы төйәк бир, Һин бит - төйәк биреүселәрҙең иң яҡшыһы». Ҡулында аҡ күгәрсен тотҡан була. Бармаҡтары менән һалҡын ҡаурыйҙары аша бәләкәй генә йөрәктең дерелдәүен тоя. Күгәрсен, башын ҡырын бороп, Нухҡа (ғәләйһис-сәләм) ҡыҙғылт-һары түңәрәк күҙҙәре менән иғтибарлап ҡарай. Ул устарын асыуы була, гүзәл ҡош саф зәңгәр күккә талпына. Кәмә тирәләй һауала бер нисә тапҡыр хушлашыу түңәрәге яһағас, күгәрсен унан ситкә тайпыла, бәләкәсәйгәндән-бәләкәсәйә барып, тиҙҙән бөтөнләй юғала. Кәмәләге бөтә кешеләр аҡ күгәрсендең килерен көтәләр, ләкин кискеһен дә, иртәнсәк тә ул килмәй. Был бары бер нимәне генә аңлатҡан - илселәре ҡоро ергә осоп барып еткән һәм унда ҡалған. Тимәк, ер эргәлә.

Мөхәррәм айының унында, Ғәшүрә көнөндә Нух пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) кәмәһе әл-Джуди тауында туҡтай. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уларға еткерә: «Әй Нух! Сәләм биреп, Беҙҙән һеҙгә ебәрелгән фатихаларыбыҙ менән өммәтең менән ярға аяҡ баҫ!»

**Нух пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) хаҡ юлда күрһәткән тырышлығы һәм сабырлығы беҙҙең өсөн күркәм өлгө булып тора.**

## Ибраһим пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм)

Ибраһим /Авраам (ғәләйһис-сәләм) - ул бөйөк пәйғәмбәр, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уға «Хәлил» (дуҫ) тиеп мөрәжәғәт иткән. Ибраһимдың (ғәләйһис-сәләм) дине тәүхид (бер Аллаға табыныу) булған. Йәш сағынан Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) яҡындарына, янындағыларға Аллаһтың Берлеге хаҡында һөйләгән. Шуға ҡарамаҫтан, атаһы Әзер менән Вавилон халҡы поттарға ғибәҙәт ҡылыуҙан баш тартырға теләмәгән.

Йылына бер тапҡыр Ибраһимдың (ғәләйһис-сәләм) халҡы ҡала ситендә ҙур байрам ойоштороп булған. Ауырыуға һылтанып, Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) башҡалар менән унда бармай ҡалған. Балта алған һәм поттар янына киткән. Поттар йөҙ етмеш була. Кешеләр, йола буйынса поттарҙың алдына ризыҡ һалып, улар ашай икән, тиеп ҡыуанышҡандар, ә ысынында ризыҡты шайтандар алып киткән, ләкин был хаҡта берәү ҙә уйланмаған. Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) балта менән барлыҡ поттарҙы ла ярып бөтә, әммә иң ҙуры булған, алтын тәхеттә ебәк кейем, башына таж кейҙереп ултыртылған башлыҡтарына ғына теймәй. Муйынына балта элеп ҡайтып китә.

Кешеләр, ҡырҙан ҡайтып, поттарын байрам менән ҡотларға килә, тик уларҙы онталған килеш табып, ғәйеплене эҙләргә керешә. Кемдер үҫмер Ибраһимдың был илаһтарға ышанмауын әйтә.

- Һин беҙҙең поттарыбыҙҙы онтаныңмы? - тип һорайҙар унан.

- Юҡ, уларҙы, үҙенән башҡа берәүгә лә табынмауҙарын теләп, балта менән ҙур пот ярып бөттө. Ышанмаһағыҙ, үҙенән һорағыҙ.



- Ул һөйләшә алмай. Был һинең генә ҡулыңдың эше!

- Ул сағында ни өсөн һеҙ, Аллаһтан баш тартып, һөйләшә лә, үҙҙәрен яҡлай ҙа белмәгән поттарға табынаһығыҙ? Һеҙҙең уйлағанса, улар һеҙҙе яҡлай алырмы? Аллаһты ҡалдырып, поттарға табыныуығыҙ өсөн ҡайғы һеҙгә! Аҡылығыҙға килмәҫһегеҙме икән ни?

Кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәргә мәжүсиҙәр яуап ҡайтара алмай, шулай ҙа үҙҙәренең яңлышыуҙарын ҡалдырмағандар.

Ул ваҡытта Бабилда / Вавилонда үҙен аллаһ тип иғлан иткән ҡаты бәғерле залим Нәмруд хакимлыҡ иткән. Кемдәр уға табынырға теләмәгән, уларҙы ауыр михнәт-яфларға дусар иткән. Поттар емерелгәндән һуң, Ибраһимды (ғәләйһис-сәләм) үҙенә алып килергә бойора Немруд. Унан һорай:

- Аллаң кем?

Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) үҙенең илаһы - барлыҡ мәхлүктәрҙе юҡтан яралтыусы, ғүмерҙе алыусы һәм бүләк итеүсе Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, тиеп яуаплай. Немрудты Аллаһҡа инанырға саҡыра. Шул уҡ ғәмәлдәрҙе үҙенең дә башҡара алыуын әйтә Немруд. Быны иҫбатлар өсөн зиндандан ике кешене алып килергә бойора. Береһен үлтерә, ә икенсеһен ебәрә лә:

- Күр! Мин дә ғүмерҙе бүләк итә лә, юҡ итә лә алам! - ти.

Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) файҙаһыҙ бәхәскә инмәй генә дауам итә:

- Аллаһ ҡояшты көнсығыштан ҡалҡыта, ә һин уны көнбайыштан ҡалҡыт.

Немруд ни әйтергә белмәй тынып ҡала. Немрудтың ярандары Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) буйһонмағаны өсөн, Нәмрудтың ярандары уны утҡа ташларға кәңәш итә. Мәжүсиҙәр ғәләмәт ҙур ут яға, уның төтөнө бөтә тирә-яҡҡа тарала, ә эҫеһе Дамаскка барып етә. Катапульт ярҙамында

пәйғәмбәрҙе ялҡын өҫтөнә ташлайҙар. Әммә барлыҡ тереклектең Әмире Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә утҡа бойора: **«Һәй, ялҡын! Ибраһимға зарар килтермә, һалҡынсалыҡ бир»** (Әнбийә сүрәһе, 69-сы аят).

Ут Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең бойороғона буйһона, ә кешеләр, Ибраһимдың утта янмағанын күреп, мөғжизәгә хайран ҡала. Был хәлдән һуң, Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) Бабилды / Вавилонды ташлап сығып китә. Ул Хеврон ҡалаһы (Палестина) яғына юллана. Ҡатыны Сара менән Иерусалимда төпләнә. Икенсе ҡатыны Хәжәр менән улы Исмәғилде (ғәләйһис-сәләм) Мәккәлә урынлаштыра. Аҙаҡ Исмәғил (ғәләйһис-сәләм) менән Мәккә уртаһында Ҡәғбәне төҙөйҙәр. Хәлиуллаһ Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) бөйөк миссияны атҡарып, төҙөлөш бөткәс, Аллаһ кешеләргә был Йортҡа хаж ҡылырға өндәүҙе бойора. Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) кешеләрҙе өндәй башлай. Улар, Раббыларының ризалығын алып, ике донъя бәхетенә ирешергә теләп, Аллаһ Йортона килә башлайҙар.

**Йыһандағы гүзәллекте күҙәтергә һәм Бөйөк Яралтыусының барлығы хаҡында фекер йөрөтөргә яратҡан Ибраһим пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) күркәм өлгө булып тора.**

## Йософ пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм)

Йософ пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) - Яҡуб пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) улдарының береһе. Быны сәбәбе - ағаларының көнләшеүе, хәсәтлеге. Унан ҡотолорға теләп, ағалары уны икһеҙ-сикһеҙ сүллектәге ҡоҙоҡҡа ташлайҙар һәм, ҡайтҡас, аталарына Йософтоң (ғәләйһис-сәләм) ҡанлы күлдәген күрһәтеп, бүре ашаны, тиеп алдайҙар. Сүллек буйлап ошо ҡоҙоҡ янынан үтеүсе каруансылар Йософто (ғәләйһис-сәләм) табалар. Уны үҙҙәре менән алып китәләр һәм Мысырҙың бер вәзиренә ҙур булмаған хаҡҡа һатып ебәрәләр. Ул һарайҙа йәшәй башлай. Үҫеп, егет ҡорона инә. Үҙенең ғәйепһеҙлегенә ҡарамаҫтан, вәзирҙең мәкерле Зөләйха исемле ҡатыны арҡаһында төрмәгә эләгеп, унда 12 йыл ултырып сыға.

Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Йософ пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм) төш юрау ҡабилиәтен (сабый саҡтан бирелгән һәләт) бирә. Ул зиндандағы иптәштәренең төштәрен юрай һәм уларҙы Аллаһтың Берлеген танырға, мәңгелек тормошҡа инанырға өндәй. Бер заман Мысыр батшаһы, сәйер төш күрә, уны бераү ҙә юрай алмай. Йософ (ғәләйһис-сәләм) менән бергә зинданда ултырған хеҙмәтселәрҙең береһе уның төш юрау һәләтен иҫенә төшөрә. Батшаның бойороғо менән Йософто (ғәләйһис-сәләм) һарайға алып киләләр һәм ул төштө аныҡ итеп юрап бирә: киләсәктә илде яман ҡоролоҡ көтәсәген, ваҡытында кәрәкле саралар күреп, уның касафатынан арынып буласағын әйтә. Батшаға уның төштө юрауы бик оҡшай. Ул Йософтоң (ғәләйһис-сәләм) зинданға ғәйепһеҙгә ябылыуын асыҡлай. Уны тотҡонлоҡтан сығарып, дәүләт ҡаҙнаһына күҙәтсе итеп тәғәйенләргә бойора.

Ҡоролоҡ ваҡыты еткәс, Йософтың (ғәләйһис-сәләм) ағалары Мысырға бойҙай артынан киләләр. Әлбиттә, күп йылдар элек үҙҙәре аяуһыҙлыҡ күрһәткән, хәҙер килеп Мысыр батшаһы эргәһендә дәрәжәле урын биләгән ҡустыларын улар танымайҙар. Йософ (ғәләйһис-сәләм), уларҙы ғәфү итеп, ярлыҡап, изгелекле, асыҡ күңелле булып ҡала.

**Беҙҙең менән насар мөғәләмә булғандарҙы кисереп һәм уларҙың яуызлығына изгелек менән яуап ҡайтарырға Йософ пәйғәмбәр (ғәләһиссәләм) күркәм өлгө булып тора.**



Йософ пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) тарихы - Ҡөрьәндәге иң күркәм риүәйәттер. «Йософ» сүрәһе айырылыу һәм осрашыу кеүек һәр кешенең тормошонда булған донъяуи һынауҙарҙы һүрәтләй. Көнсөллөк менән яла яғыу ниндәй тетрәндергес һөҙөмтәләргә илтергә мөмкинлеге хаҡында һөйләй.

### Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм)

Муса пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) үҙ халҡын, Фирғәүен иҙеүенән ҡотҡарып, Мысырҙан сығарғанын иҫләйһегеҙме? Ә Фирғәүендең ҙур ғәскәр башында уларҙы алдап эҙәрлекләй башлағанын? Аҙаҡ ни була һуң? Эҙҙәренә баҫып, уларҙы ҡыуып килгән иң көслө, иң аяуһыҙ ғәскәрҙе күреп, йәһүҙирҙәрҙең ҡоттары оса. Ҡасалар. Алдарында Ҡыҙыл диңгеҙ йәйелә. Әммә улар менән Аллаһ Илсеһе Муса (ғәләйһис-сәләм) була, уға өмөтләнәләр. Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) уларға: «Туҡтамағыҙ! Шәбәрәк булығыҙ! Аллаһтың мәрхәмәтенә таяныгыҙ! Аллаһ беҙҙең менән!» - тиеп, уларҙы саҡыра.

Бына улар диңгеҙгә етә. Аллаһҡа ялбарып, балалар илай, әсәләре йыуаныс һыҙ инрәй. Муса (ғәләйһис-сәләм), үҙенең таяғын өҫкә күтәреп, һыуға һуға. Шул мәл диңгеҙ тулҡындары йүгереүҙән туҡтап тынып ҡала. Быгырлап, күпереп һыуҙар икегә бүленә. Ике диуар кеүек ҡалҡып, диңгеҙ төбөндә киң юл асыла. Алда килеүсе кешеләр, үҙҙәре күргән был мөғжизәгә ышанмайынса, урындарында ҡатып ҡала. Арттағылар, Фирғәүен һалдаттарының тынын арҡалары менән тойоп, сыуалышып алдағыларҙы ҡыҫырыҡлай. Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) һөрән һала: «Барығыҙ! Юлығыҙҙы дауам итегеҙ!»

Кешеләр диңгеҙ һыуҙары аҫҡан коридорға инеп китә. Арттарынан килгән ғәскәр баҫтырып килеүе арҡаһында, улар ҡеҙрәтле тәбиғәт күренешенән ҡурҡыуҙы уйламай. Диңгеҙҙе үтеп, икенсе ярға сығалар. Ғәскәре менән Фирғәүен бер аҙым да ҡалмай, арттарынан эйәреп килә. Ләкин диңгеҙ ҡапыл ғына эҙәрләкләүселәрҙең баштары осонда ябыла һәм уларҙы йота ...

Йәһүҙирҙәрҙең юлы Һинай / Синай сүллеге аша үтә. Алда, Муса пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) янында, таныш булмаған аҡ кейемдәге ят егет бара. Ә кешеләр шул ҡәҙәр йонсоған, кисерелгәндәрҙән һуң шул ҡәҙәр шаңҡыған, уға иғтибар ҙа итмәйҙәр. Сығышы менән Сәмәриәнән булған бер сәмәрийән генә уяулығын юғалтмаған. Һаҡ ҡына уларҙы күҙәткән. Мусаны (ғәләйһис-сәләм) оҙатҡан сит кешенең бөйөк фәрештәләрҙең береһе - Ябраил / Гавриил (ғәләйһис-сәләм) икәнен аңлай. Ябраилдың (ғәләйһис-сәләм) аяғының эҙе ҡалған ерҙән йәшерен генә ҡомдо йыйып ала ла сәмәрийән, кеҫәһенә йәшереп ҡуя.

Әҙме-күпме юл үткәс, йәһүдтәрҙең юлында утар (бәләкәй ауыл) осрай. Ауыл халҡы, донъяларын онотоп, был мәл поттарға табынған була. Йәһүдтәр поттарға табыныусыларҙы уратып ала ла, хайран ҡалып, уларҙың ғәмәлен күҙәтә башлай. Ул ваҡытта йәһүдтәр генә Аллаҡа табынған

була. Ҡыҙыл диңгеҙҙең бүленеүен Раббыларының барлығына һәм берлегенә йәнә бер дәлил итеп ҡабул итә улар. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне кире ҡаҡҡандары өсөн, Фирғәүендең ғәскәре менән һыуҙа батыуын, ә үҙҙәренең Уға инанғандары өсөн ҡотолоуҙарын яҡшы аңлайҙар. Быларҙың барыһын да белһәләр ҙә, күҙҙәре менән күреп, ҡулдары менән тотоп булған әйбергә ғибәҙәт ҡылғылары килә. Мысыр халҡында ҡоллоҡта булған саҡтарында ла поттарҙы күргән булалар, сөнки Мысыр батшаһы Фирғәүен күп поттарға табына.

Йәһүдтәр Мусаға (ғәләйһис-сәләм) мөрәжәғәт итәләр:

- Әй, Муса! Беҙгә лә уларҙыҡы кеүек илаһ яһа!

Муса (ғәләйһис-сәләм) уларға асыуланып әйтә:

- Ниндәй тома наҙанһығыҙ икән! Был кешеләр табынған әйберҙәр Аллаһ тарафынан ҡыйратыласаҡ бит. Ҡылғандары файҙаһыҙ буласаҡ. Һеҙҙе донъялар өҫтөндә зурлаған Аллаһтан башҡа илаһ эҙләйәсәкменме ни?

Йәһүдтәр өндәшмәйҙәр. Сәмәрийән, ни хаҡындалыр уйланып, ситкә китә...

Бер ваҡыт йәһүдтәр мысырлыларҙан бурысҡа алған, хәҙер үҙҙәре менән алып китеп барған алтын хаҡында бәхәсләшә башлай. Улар уны кире ҡайтарырға уйламай. Киреһенсә, һәр береһе үҙен алтындың хужаһы тип иҫәпләй һәм уны нисек ҡулланыу хаҡында план ҡора. Һәр береһе алтынға үҙенең хоҡуғын белдерә һәм башҡаларға биргеһе килмәй. Был бәхәс хаҡында белеп ҡалған Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) йәһүдтәргә барлыҡ алтын һәм затлы әйберҙәрҙе тапшырырға ҡуша. Мусаның (ғәләйһис-сәләм) туғаны Һарун / Аарон пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм), ярҙамға бер нисә ышаныслы кешене һайлап ала ла, алтындарҙы йыйып алып, бөркәнсегенә һалып, Мусаға (ғәләйһис-сәләм) тапшыра. Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) әйтә: «Алтындар Мысыр халҡыныҡы! Беҙҙеке түгел! Файҙаһынан зыяны артығыраҡ!» Аҙаҡ төрә лә ергә күмеп ҡуя. Барыһын да күҙәтеп торған сәмәрийән Муса пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) алтынды ҡайҙа йәшергәнен хәтерендә ҡалдыра. Кәрәкле ваҡытта юлды табыу өсөн, билдә ҡуя.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Муса пәйғәмбәрҙе (ғәләйһис-сәләм) Тур тауына саҡырып ала. Киткән саҡта туғаны Һарунға (ғәләйһис-сәләм):

- Халҡыма баш булып ҡал; тәртип, тәүфиҡ һағында бул яуыздар юлынан барма, - ти һәм тауға менеп китә. Унда ул, Аллаһ менән осрашыуға әҙерләнеп, көндәрен ураҙа тотоп, ә төндәрен ғибәҙәт ҡылып үткәрә. Текә тауҙар, төпһөҙ зәңгәр күктә туҡтауһыҙ йүгергән болоттар араһында Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) үҙен сикһеҙ бушлыҡтағы бәләкәй генә нөктә итеп тоя. Ҡырҡ көн һәм ҡырҡ төн ул Тур тауында була. Аллаһ уны йәһүдтәрҙең яҫы таштарға яҙылған изге яҙмаһына - Тәүратҡа өйрәтә, 10 әмерен, төп ҡанундарын тапшыра. Эштәрҙең асылына



төшөндөрә, көндәлек ғибәҙәткә һәм ҡайһы бер ауырыуҙарҙы дауалау серҙәренә өйрәтә.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйтә:

- Һеҙгә бүләкләгәнгә ныҡлап тотоноғоҙ һәм уларҙың барыһын да иҫегеҙҙә тотоп йәшәгеҙ. Бәлки, шул ваҡытта тәүфиҡлыларҙан булырһығыҙ.

Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) халҡын яңы ғилемгә өйрәтеренә ҡыуанып ҡайтырға ҡабалана. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә нимәгә ҡабаланғанын һорай. Муса (ғәләйһис-сәләм):

- Әй, Раббым! Мин ҡырҡ көн халҡымдан ситтә булдым, Һинең бойороҡтарыңды бер мәлгә булһа ла алдараҡ тапшырғым килә.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә:

- Һин булмағанда, халҡыңды һынаныҡ, һәм сәмәрийән уларҙы юлдан яҙҙырҙы.

Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) кисекмәҫтән ҡайтырға сыға. Сәнскеле ҡыуаҡлыҡтар үҫеп бөткән тау битләүҙәрендә килбәтһеҙ һибелгән таштар буйлап һаҡ ҡына баҫып, китер алдынан булған бөтә ваҡиғаларҙы барлай. Йәһүдтәрҙең поттарҙы күргән саҡта янған күҙҙәре, үҙҙәрендә лә шундайҙың булыуын теләүҙәре, «алтын бизгәге» һәм сәмәрийән...

Низәр булған икән Муса (ғәләйһис-сәләм) булмаған саҡта? Дан көҫәгән сауһансыҡ (дәрәжә артынан ҡыуыусы) сәмәрийән уйлай: «Кешеләргә теләгәнен бирәм дә, бының менән уларҙы үҙемә ҡаратып алып, кәҙер-хөрмәт ҡаҙанам». Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) Раббыһының саҡырыуы буйынса киткәс тә, сәмәрийән планын тормошҡа ашыра башлай. Ҡараңғы төндә, һиллек ҡаплағас, Мысыр халҡының алтыны күмелгән ергә йүнәлә. Билгеләр буйынса алтынды тиҙ таба һәм ҡаҙып ала. Ут яға. Ныҡ эҫе итеп тотоп, алтынды иретә башлай. Ул Эбисты - боронғо мысырлыларҙың үгеҙ формаһындағы илаһтарын хәтерендә һаҡлаған була һәм шундайҙы ҡойғоһо килә.

Сәмәрийән ергә форма ҡора ла, иретелгән алтынды ҡоя, шунда уҡ Ябраил фәрештәнең (ғәләйһис-сәләм) эҙенән булған ҡом усламын ташлай. Төнө буйы үгеҙҙең формаһы өҫтөндә эшләй. Таң атыуға ул әҙер була. Алтын үгеҙ хатта ки мөңрәгән тауыш сығара ала. Бының сәбәбе нимәлә була һуң? Бәлки, арҡаһындағы тишектән инеп, ауыҙынан сыҡҡан ел мөңрәгән тауыштар сығарғандыр. Бәлки, үгеҙҙең тамағына ташланған Ябраил фәрештәнең (ғәләйһис-сәләм) эҙенән алынған тупраҡталыр сәбәбе. Нисек кенә булмаһын уның мәкерле уйы тормошҡа аша. Сәмәрийән йәһүдтәргә әйтә:

- Был һеҙҙең һәм Мусаның илаһы. Ләкин ул, тауҙа икенсе илаһты эҙләп, һеҙҙең хаҡта һәм уның хаҡында онотҡан.

Йәһүдтәр, үгеҙҙе илаһтары итеп танып, табына башлайҙар. Бер һүҙ ҙә әйтә алмағанын, файҙа ла, зыян да килтерә алмағанын аңламайҙар. Һарун пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) уларҙы күреп ҡысҡырып ебәрә:

- Әй халҡым! Бының менән һеҙҙе ҡотҡоға ғына һалалар. Ысынында һеҙҙең Раббығыҙ – Мәрхәмәт Эйәһе. Шулай булғас, миңә эйәреп, бойороҡтарыма буйһоноғоҙ!

Улар:



- Муса (ғәләйһис-сәләм) ҡайтмайынса, уны ололауҙан туҡтамайбыҙ,- тиҙәр.

Һарун (ғәләйһис-сәләм) йәһүдтәрҙе поттарға табыныуҙан баш тартырға өндәгән, Аллаһ уларҙы мысырлылар ҡоллоғонан ҡотҡарыуын, бүләктәрен, мөғжизәләрен иҫтәренә төшөргән. Ләкин берәү ҙә уны тыңламаған. Әйткәндәрен кире ҡағып, уны ҡыуғандар, үлтереп ташларға ла әҙер булғандар. Йәһүдтәр күпселеккә - алтын үгеҙҙе илаһилаштырыусыларға һәм әҙселеккә - мосолмандарға, Аллаһтың Берлегенә Инанып, мәжүсилекте кире ҡағыусыларға бүленә. Бола сығып, һуғыштар башланып китеүенән Һарун (ғәләйһис-сәләм) ҡурҡа. Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ҡайтҡансы, мосолмандарға өндәшмәй көтөргә ҡуша.

Муса (ғәләйһис-сәләм) халҡына әсенеп һәм асыуланып ҡайта. Бейек урынға менә, ҡулына тотҡан Изге аяттар яҙылған яҫмаҡ таштарҙы һала һәм әйтә:

- Халҡым! Һеҙгә Раббым Тәүратта / Иҫке Ғәһеднамәлә (Старый Завет) иң гүзәл вәғәҙәләр бирмәнеме ни? Әллә Ғәһеднамәләге вәғәҙәләрҙең үтәлешенә алыҫмы?

Шунан ҡапыл туғаны яғына әйләнеп, сәстәре менән һаҡалынан тотоп, үҙенә бора:

- Һарун! Юлдан яҙлыҡандарын күргәнеңдә һине нимә тотоп ҡалды?

Оялыуҙан һәм ауыртыныуҙан йәштәре атылып сыға Һарундың (ғәләйһис-сәләм):

- Әй ҡустым! Һаҡалымдан тотма, башыма ла теймә. Аҙаҡтан әйтә: «Һүҙемде тотмай, Исраил улдары араһында бүленеш тыуҙырғанһың», - тиеп әйтеүеңдән ҡурҡтым.

Һарунды (ғәләйһис-сәләм) тотоп торған ҡулдар бер әҙ бушай. Һарун дауам итә:

- Ҡустым! Халыҡ мине һанға һуҡманы. Йәнә әҙ генә булһа, мине үлтерерҙәр ине. Ебәр, минең менән тупаҫ ҡыланып, дошмандарҙы ҡыуандырма.

Ярһып, Муса пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) ағаһынан яуап алыуы йәһүдтәрҙе ҡурҡыуға һала.

- Һиңә вәғәҙә иткәнде үҙ ихтыярыбыҙ менән боҙманыҡ. Сәмәрийәнгә эйәрҙек, - ти улар.

Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) Һарунды (ғәләйһис-сәләм) ебәрә. Һаман да ҡыҙған килеш һорай:

- Сәмәрийән ҡайҙа?

Ағарынған сәмәрийән, ҡалтыранып, алға сыға. Муса (ғәләйһис-сәләм) уға мөрәжәғәт итә:

- Әй, сәмәрийән, нимәгә өлгәшергә теләнең?

Уныһы:

- Улар күрмәгәнде мин күрҙем. Илсенең эҙенән усламдай ҡом алып өлгөрҙөм. Шуны үгеҙҙең тамағына ташланым. Шулай итеп нәфсем менән шайтан ҡотҡоһона бирелдем, - тиеп яуап бирә.

- Кит! Бының был яғына ҡарғышың булып һин ҡабатларһың: «Миңә ҡағылмағыҙ, мин һеҙҙе аҙҙырыусы!» Табынған илаһыңа ҡара - уны яндырабыҙ, ә көлөн диңгеҙгә батырабыҙ. Аллаһ - берҙән-бер Илаһығыҙ, Унан башҡа Илаһ юҡ. Ул Ғилеме менән бөтөнөһөн дә, барсаһын да сорнап алған,- ти, Муса (ғәләйһис-сәләм).



**Муса пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) залим һәм игелекһеҙ кешеләр өҫтөнән еңеү яулауы - беҙҙең өсөн күркәм өлгө.**

## Юныс пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) - балыҡтың әсире

Борон-борон замандарҙа, беҙҙең эраға тиклем VIII быуатта, Тигр / Хиддекел йылғаһы ярында боронғо Ассирийә дәүләтенең баш ҡалаһы бөйөк Нинәбә / Нин (Ниневия) торған. Был

ҡалала тимерселәр һәм зәргәрселәр (ювелир), туҡыусылар һәм сауҙәгәрҙәр, балыҡсылар һәм көршәкселәр, икмәк бешереүселәр һәм корабль төҙөүселәр, рәссамдәр һәм ғалимдар йәшәгән.

Ә был халыҡ менән ҙур зауыҡлы һарайы, унда иҫәпһеҙ бүлмәләре һәм хеҙмәтселәре булған ҡанһыҙ батша идара иткән. Нинәбәнең батша һарайынан да байыраҡ һәм ҙурыраҡ ғәйәт ҙур ғибәҙәтханаһы булған. Ул мәлдәге йолалар буйынса, уны ҡалҡыулыҡҡа төҙөгәндәр, шуға ла ул ҡалаға бөтә яҡтан да күренеп торған. Формаһы буйынса ғибәҙәтхана күп тупһалы манараны - зиккуратты кәүҙәләндергән. Эске бүлмәләре бик матур биҙәктәр һәм һырлап эшләнгән һүрәттәр менән биҙәлгән. Ғибәҙәтхананың эсендә иҫәпһеҙ ассирий илаһтары өсөн ҡорбан килтерергә миһрап (алтарь) булған, миһрап алдында ишелә яҙып әзмәүерҙәй илаһтарҙың һындары торған. Эйе! Был һоҡланғыс ғибәҙәтханала руханиҙар тауышһыҙ, иҫһеҙ поттарға хеҙмәт иткәндәр, хөрмәт күрһәткәндәр. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡала халҡы элек-электән, быуындан-быуынға уларға инанғандар, ошо таш һындарға табынғандар.

Был хәл Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, изге Меттаның улы Юнысты / Ионды (ғәләйһис-сәләм) Үҙенең илсеһе итеп һайлап, мәрхәмәтен күрһәткәнсе дауам иткән. Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйткән: «Аҙаҡ йөҙ мең кешелек халыҡҡа миссия менән уны ебәрҙек».





Юныс (ғәләйһис-сәләм), илаһи үәхиҙәр алып, Нинәбә халҡын Аллаһтың Берлегенә инанырға өндәй башлай: «Файҙаһы ла, зыяны ла булмаған таш һындарығыҙҙы ҡалдырығыҙ! Ғаләмдәр Хужаһы булған бер Аллаһҡа ғына табынығыҙ! Бөтә көс һәм хакимлыҡ Унын ғына ҡарамағында!»

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне танып, Юныс (ғәләйһис-сәләм) артынан эйәреүсе ике генә кеше табыла - аҡыл эйәһе һәм дәүриш. Ә башҡалар былай ти: «Арабыҙҙа уҡыған, аҡыллы кешеләр күп: ғалимдар, уйлап табыусылар, тылсымсылар, ә һин, үҙең генә илаһтарыбыҙҙы инҡар итеп, ата-бабаларыбыҙҙың юлы яңылыш, тиһең! Кешеләрҙең ғәҙәти булмағанға ышаныуын теләйһеңме?»

Улар Ғаләмдәрҙе Яралтыусы Раббының берҙән-бер Илаһ икәнен инҡар итә. Ҡайһылары, Юныс пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм) нәфрәтләнеп, уны әҙәрлекләй башлай. Юныс (ғәләйһис-сәләм), уларҙың кәмһетеп мыҫҡыллауҙарына изгелек менән яуап ҡайтарып, Аллаһтың Берлегенә инанырға саҡырыуын дауам итә. Әммә тиҫкәре халыҡ хаҡ һүҙҙәргә ҡолаҡ һалырға теләмәй. Юныс (ғәләйһис-сәләм), инанмауҙары өсөн яза буласағы хаҡында иҫкәрткәндә лә, яуап итеп көләләр: «Дөрөҫтө һөйләйһең икән, әйҙә яза булһын!» Юныстың (ғәләйһис-сәләм) йөрәгенә сикһеҙ көйөнөс тула, һәм ул халҡын хаҡ дингә өндәргә тырышыуының файҙаһыҙ булыуын күреп, Нинәбәне ҡалдырырға ҡарар итә.

Юныс (ғәләйһис-сәләм), ҡаланан Йыраҡлашып, юл буйлап барғанда, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең бойороғон ишетә: «Әй, Юныс, кире ҡайт та, йәнә ҡырҡ көн дингә өндә!» Ул Раббының бойороғона буйһона, ләкин мәжүсилеккә, ғәҙелһеҙлеккә батҡан халыҡ элеккесә уны эҙәрлекләй, мәсхәрәләй, вәғәзен тыңларға теләмәй. Ҡырҡ көндөң утыҙ етеһе үткәс,

Юныс пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) халыҡҡа иғлан итә: «Өс көн көтөгөҙ һәм һеҙгә яза киләсәк. Ағарған йөҙҙәрегеҙ уның билгеһе булыр». Үҙенә бирелгән мөҙҙәттең етеүен көтмәй, тәрән ҡайғы менән халҡын ташлап китә.

Ҡала ҡапҡаларын үтеп, артына әйләнмәйенсә, пристанға илткән юл буйлап алға атлай.

Шаулы пристандә эшлекле тормош ҡайнай: сауҙәгәрҙәр килгән тауарҙы ҡабул итә, алыш-биреш хаҡында килешә, хөкөм итеүселәр килешеү төҙөй, яурындарына төктәр, мискәләр йөкмәп йөк ташыусылар үтә, ҡолдарҙы тотҡон баҙарына алып барған баҡтансыларҙың киҫкен генә ҡысҡырғандары ишетелә. Туҡталҡала йөҙөргә әҙер бер нисә карап тора.

- Әй, капитан! Карабың ҡайҙа юл тота һәм канаттарын ҡасан сисә?

Капитан караптың Тигр йылғаһы буйлап диңгеҙ ярҙарына барғанын әйтә. Юныс (ғәләйһис-сәләм) кәрәгенсә түләй ҙә карапҡа ултыра. Тиҙҙән карап ҡуҙғалып китә.

Сәйәхәте оҙаҡ дауам итмәй. Кинәт кенә карап йылға уртаһында туҡтай, команда ни ҡәҙәр тырышһа ла, ул урынынан шылырға уйламай. Юлсылар менән моряктар араһында һуҡраныуҙар башлана: «Барыбыҙ ҙа батабыҙ!» Ҡарт моряк әйтә: «Арабыҙҙа зыддыҡ (гонаһлы кеше) барҙыр, шуға ла карабыбыҙ туҡтаны! Йәрәбә ташлайыҡ та зыддыҡтың кемлеген беләйек!» Шулай эшләйҙәр ҙә. Йәрәбә Юнысҡа төшә. Сабырһыҙ булып, Раббыһының ризалығынан тыш халҡын ҡалдырып китеүе өсөн, үҙен ғәйепле тоя теге. Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең мәрхәмәтенә таянып, ул хатаһын таный: «Эйе, мин - гонаһлы бәндә», - ти. Ләкин караптағылар Юныс (ғәләйһис-сәләм) белгәнде белмәй. Улар уны изге кеше итеп күрә һәм йәрәбә ташлауын дауам итә, әммә йәрәбә һәр ваҡыт Юнысҡа төшә. Аранан берәү әйтә: «Ҡарағыҙ әле, егеттәр! Йәрәбәнең уға ғына төшөүе сәйер. Был кеше, күрәһең, нимәләлер ғәйепле. Унан ҡотолоу кәрәк, юғиһә беҙ бер мыҫҡалға ла урыныбыҙҙан ҡуҙғалмаясаҡбыҙ!»

Юныс пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) йәрәбә ташлауҙа отола. Моряктар уны тотоп алалар ҙа, бәүелтеп, борт аша ташлайҙар. Ул таш кеүек түбәнгә оса. Шул уҡ мәлдә һыу упҡынынан ҙур балыҡ килеп сыға ла, атлығып, Юнысҡа (ғәләйһис-сәләм) уҡтала, ауыҙын асып, уны йотоп та ебәрә!.. «Ул шелтәгә лайыҡ ин», - ти Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә. Шулай итеп, Юныс пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) балыҡтың ҡараңғы, һыуыҡ ҡарынына эләгә. Әммә йылғанан диңгеҙ киңлектәренә илткән тере зинданға эләгеп һәләк булмай. Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә балыҡҡа үҙенең йөгөн һаҡ ҡына алып йөрөү теләгеен һендерә. Тирә-яғын күреүҙән мәхрүм булған Юныс (ғәләйһис-сәләм) үҙе һыйыныу тапҡан балыҡтың ҡалын ҡыртышы аша күпләп ишетелгән төрлө-төрлө тауыштарға ҡолаҡ һала. Тәүҙә уға йә геүләү, йә сырылдау, йә бер яҡынайып, бер алыҫайған көйлө тулҡындар ишетелә, йә соло яңғырай, йә ул бер хорға ҡушыла. Яйлап был мелодия тауыштарында диңгеҙҙә йәшәүселәрҙең «Аллаh! Аллаh! Аллаh!» - тиеп асыҡ итеп ҡылған гүзәл зекерҙәрен айыра башлай.

«Хатта диңгеҙҙәге балыҡтар ҙа туҡтауһыҙ Раббыларын данлай,- тиеп уйлай Юныс (ғәләйһис-сәләм).- Ә мин әҙәпһеҙ бәндәмен, Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең бойороғон тыңламаным, халҡымды ҡалдырҙым ...». Балыҡтың дымлы, һыуыҡ, ҡараңғы ҡарынында ул үҙен көсһөҙ, яҡлаусыһыҙ тоя. Үҙенә ҡарата ғәҙелһеҙ булғанын, шуға ла ошо язаны алғанын аңлай. Аллаh Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ихтыяры менән балыҡ эсенә эләккәс, бары Ул ғына Юныстың (ғәләйһис-сәләм) был хәлен үҙгәртә ала.

Ул ҡабатлай башлай: «Аллаh! Аллаh» Аллаh!..» Юныс пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) йөрәге менән теле даими зикерҙә була: «Аллаh! Аллаh! Аллаh!..»



«Аллаһ! Аллаһ! Аллаһ!..» - ҡабатлайҙар диңгеҙҙәге мәхлүктәр.

Балыҡтың ҡараңғы ҡарынында ул Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләһен саҡыра: «Һинән башҡа илаһ юҡ. Барыһынан да өҫтөнһөң! Ысынында мин зыддыҡ булдым!»

Был, күрәһең, балыҡҡа әҙ тынысһыҙлыҡ тыуҙырмай. Юныс (ғәләйһис-сәләм) Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне шул ҡәҙәре күп данлай, ихлас үкенеүен хатта күктәге фәрештәләр ҙә ишетә. Улар уның өсөн ғәфү үтенергә Раббыларына ашығалар. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тәүбә ҡылыусыларҙы ярлыҡарға ярата: «Беҙ уға яуап биреп, хәсрәтенән арындырҙыҡ. Беҙгә инаныусыларҙы шулай арындырабыҙ».

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ҡушыуы буйынса балыҡ үҙенең ҡарынында һаҡлаған ҡиммәтле йөктө сүллектәге ярға ташлай ҙа, ҡойроғон күтәрә һуҡҡан сағында шаулы фонтан сәсрәтеп, һыу төпкөлөнә китә.

«Әгәр (тәүбә иткәнендә) Беҙҙе данламаһа, ул шул балыҡтың эсендә , бөтәһе лә терелəсәк Көнгә ҡәҙәр ҡалыр ине. Беҙ сүллектәге ярға ташланыҡ, ул хәлһеҙ һәм сырхау ине».

Сикәһендә ҡомдоң ҡужырмағын тойһа ла, Юныс пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) ҡыбырлай алырлыҡ та хәле булмай. Ул үҙенең ауырыуын һәм хәлдән тайыуын тоя. Уны ҡояш томраһы яндыра. Ҡара сәс шәлкемдәре дымлы маңлайына йәбешә, эҫенән ирендәре ярыла.

Ҡапыл Юныс (ғәләйһис-сәләм) күләгә һалҡынын тоя. Күҙҙәрен көскә асып, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ихтыяры менән алдында йәйенке ҙур үҫемлек үҫеп сыҡҡанын күреп хайран ҡала. Ҡомда Юныс пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) башы осона ғына күләгә яһап үҫеп ултыра, зөбәрйәттәй йәшел япраҡтары араһында түңәрәк емештәре лә бар. Эсендә сарсауын да, асығыуын да баҫҡан тәмле һөтикән. Япраҡтарында уны йөҙәтерҙәй бөжәктәр ҙә юҡ. Ниневәгә ҡабат ҡайтырға көс йыйыр өсөн, Юныс (ғәләйһис-сәләм) был мөғжизәле үҫентенең ышығы аҫтында ҡала. Күпмелер ваҡыттан һуң, Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең мәрхәмәте менән нығына, көс йыя.

Оҙаҡмы, әҙме барғандыр, Юныс пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) офоҡта тыуған Ниневәһенең бейек диуарҙарын һәм манараларын күрә. Уны ҡала менән айырып торған туғайлыҡта кәзә, һарыҡтарҙың ҙур көтөүҙәре таралған. Таныш көтөүсе, Юнысты (ғәләйһис-сәләм) күреп ҡалып,

ҡаршыһына ашыға: «Сәләм һиңә, әй Юныс! Ҡайҙа булдың ул?» Көтөүсенең сәләменә яуап бирә лә Юныс (ғәләйһис-сәләм) үҙе менән булып үткән ғәҙәти булмаған мажараларҙы һөйләй. Көтөүсе тын да алмай, иғтибар менән тыңлай. Аҙаҡ көтөүсенең сираты етә һәм Юнысҡа (ғәләйһис-сәләм) ул юҡта ниҙәр булғанын еткерә...

Юныс пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) вәғәҙә иткән көн еткәс, Нинәбәлә йәшәүселәрҙең барыһының да йөҙө ағара. Быны күреп, улар бер-береһенә: «Был Юныс иҫкәрткән яҙаның яҡынайыу билгеһе. Ул быға ҡәҙәр беҙҙе бер ҡасан да алдаманы». Күккә ауыр ҡара болоттар ябырыла. Барыһын да паника сорнап ала. Ҡурҡыштарынан ҡысҡыралар, бер-береһенә һыйыналар. Араларында Юныстың (ғәләйһис-сәләм) юҡлығын күреп, яҙанан ҡотола алмаҫтарын аңлайҙар. Хәҙер инде уға ышанып, Берҙән-бер һәм Хәҡиҡи Аллаһтың динен ҡабул итмәгәндәренә ихлас үкенәләр. Улар илаһилаштырған был поттар һәм һындар уларға түгел, хатта үҙҙәренә лә ярҙам итә алмай! Йөрәктәре үкенеү менән тула. Ләкин кешеләр дөрөҫ итеп тәүбә ҡылыр өсөн ни эшләргә кәрәклеген белмәйҙәр. Кемдер араларындағы бер изге кешене иҫенә төшөрә. Аптырауҙың сигенә еткәс, уны саҡыралар:

- Әй, изге йән! Беҙгә ни эшләргә? Юныстың өндәүенән баш тартҡаныбыҙға үкенәбеҙ. Тәүбәбеҙгә килеп, Юныстың Илаһынан ярлыҡау һорағыбыҙ килә. Ни эшләргә?

Был кеше уларҙы тынысланырға саҡырып ҡулын күтәрә лә:

- Әй Нинәбә халҡы! Яҙаға ҡәҙәр йәнә ике көн бар. Тәүбә тауына менегеҙ ҙә, барыһы ла бер-береһенең боҙолған хоҡуҡтарын ҡайтарһындар һәм бурыстарын бирһендәр. Шунан һуң Юныстың Илаһына ҡорбан салығыҙ һәм был ҡорбандың итен ярлыһы ла, байы ла, йәше лә, ҡарты ла - бөтәһе лә ашаһын. Һуңынан сәждә ҡылып әйтегеҙ: «Әй, Юныстың Илаһы! Һиңә инанып, Юныстың пәйғәмбәрлеген ҡабул итәбеҙ. Юныс пәйғәмбәрҙе тапҡас, ул Һинең бойороҡтарыңды еткерер, ә беҙ уның эҙенән барырбыҙ».

Нинәбә халҡы Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә алдында күҙ йәштәре аша ихлас тәүбә ҡыла. Ә Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уларҙың тәүбәләрен ҡабул итә, Уның бит гүзәл исемдәренең береһе әр-Рахмән (Мәрхәмәтле): «Исмаһам берәй утар булдымы беҙ дәғүәтселәр ебәреп, улар Аллаһҡа инана һәм был файҙа килтерә, Юнысҡа ебәргәндәрҙән башҡалары? Улар инанғас, был донъялыҡтағы яҙабыҙҙы уларҙан сисеп, фанилыҡ менән кинәнергә бирҙек».

Һөйләп бөткәс, күҙҙәренән ихлас аҡҡан йәштәрен дә һөртмәйенсә ҡала ҡапҡаларына ҡулы менән күрһәтеп, көтөүсе тантаналы рәүештә ҡысҡыра:

- Әй, Юныс пәйғәмбәр, шәберәк бул! Ҡара, ҡайтҡаныңды белеп, бар Нинәбә халҡы ҡаршы алырға сыҡҡан!

**Ҡараңғылыҡҡа эләгеп, үҙенең ихлас тәүбәләре, туҡтауһыҙ доғалары һәм зикерҙәре менән Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ярлыҡауына лайыҡ булған Юныс пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) беҙҙең өсөн күркәм өлгө булып тора.**



## Ғайса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм)

Ғайса пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) әсәһе изге Мәрйәм Ғимран исемле намыҫлы кешенең күркәм ғаиләһендә тыуа. Мәрйәмдең әсәһе Хөннә тыуасаҡ балаһын Бөйөк Аллаһҡа хеҙмәт итергә тапшырасағы хаҡында нәҙер әйтә. Бына гүзәл ҡыҙ бала донъяға килә. Уны Мәрйәм, тип исемләйҙәр. Ғибәҙәтханаға тик ир затынан ғына балаларҙы хеҙмәткә тапшырыуға ҡарамаҫтан, Хөннә әйткән нәҙерен үтәй, Әл-Аҡса мәсетенә баланы ҡалдыра. Мәрйәм ғибәҙәтханала үҫә. Көндәре ғибәҙәттә һәм мәсетте йыйыштырып

үтә. Ә уның тормошон апаһының ире Зәкәриә пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) хәстәрләй, ҡайғырта. Ул йыш ҡына Мәрйәмдең хөжрәһендә ҡайҙандыр гүзәлдәрҙән-гүзәл емеш-еләк пәйҙә булыуын күрә. Пәйғәмбәргә билдәле булыуынса, был – сафлығы һәм ихласығы өсөн һайлап алынған ҡолдарға ғына бирелгән мөғжизәләрҙең береһе. Мәрйәм тәҡүәле, диндар, ғәҙел һәм тоғро ҡыҙ булып буй етә. Бер ваҡыт уның янына Ябраил фәрештә (ғәләйһис-сәләм) килә. Уның балаһы тыуасағын, Ғайса исемле буласағын хәбәр итә. Мәрйәм: «Нисек минең балам тыуһын, мин бит әле кейәүгә лә сыҡмағанмын?» - тип ғәжәпләнә. Кешелекле һәм күркәм холоҡло фәрештә: «Ҡурҡма, Мәрйәм, Аллаһтың «Бул!», тип әйтеүе генә етә, һәм шул буласаҡ», - тип әйтә лә, юҡ була.

Илаһи мөғжизәнең булыуы һәм Аллаһтың ҡеүәтен күрһәтеп, Ғайса пәйғәмбәр ҙә (ғәләйһис-сәләм), саң-туҙан, балсыҡтан яһалған һәм ата-әсәһеҙ Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) кеүек, атайһыҙ тыуа. Ғайса пәйғәмбәр тыуғандан һуң, кешеләр Мәрйәм хаҡында «хурлыҡлы, мәсхәрәле эш ҡылыуы» тураһында насар һүҙ йөрөтә башлайҙар. Ул бөтә булған мәсхәрә - мыҫҡыллауҙарҙы түҙемле үткәрә һәм бишектә ятҡан сабыйға ғына ишаралай. Ошо ерҙә, Аллаһ Тәғәләнең әмере буйынса, ғәжәп хәл була, сабый телгә килә:

**«Мин - Аллаһтың ҡоло.Ул миңә китап күндерҙе, мине пәйғәмбәр итте, ҡайҙа ғына булһам да, мине мөбәрәк ҡылды, ғүмерем аҙағынаса миңә намаҙ уҡырға васыят ҡылды һәм зәкәт бирергә бойорҙо. Әсәмә изгелек ҡылыуҙы йөкмәтте, мине йәберләүсе лә, бәхетһеҙ ҙә итмәне. Тыуған көнөмдә лә, үлгән көнөмдә лә, терелеп торор көнөмдә лә миңә Аллаһыҙан сәләмдер!» - тине. (Уның мөғжизәле тыуыуы хаҡында) шикле һүҙ һөйләнеләр. Ошо һүҙҙәрҙе һөйләүсе кеше Мәрйәм улы Ғайсалыр, насара ихтилаф итә торған һүҙҙәр араһынан хаҡ һүҙҙәрҙе һөйләне: «Аллаһтың бала атаһы булыуы хаҡ һүҙ түгел. Ул ундай эштән азат. Берәй эш башҡарырға ниәтләһә, Уның «Бул!» - тип әйтеүе етә һәм ул нәмә барлыҡҡа килә. Шуныһы хаҡтыр: Аллаһ - минең дә Раббым, һеҙҙең дә Раббығыҙ. Шулай булғас, уға ғибәҙәт ҡылығыҙ. Бына шул булыр тура юл!»** (Мәрйәм сүрәһе, 30-36-сы аяттар).

Ғайса ғәләйһис-сәләмгә 30 йәш тулғас, Бөйөк Аллаһ уға пәйғәмбәрлекте ышанып тапшыра, изге яҙма «Инжил»де төшөрә һәм төрлө мөғжизә - кәрәмәттәр күрһәтеү һәләтен бирә. Ғайса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) сирлеләрҙе һауыҡтыра, үлектәрҙе терелтә, ен-шайтандарҙы ҡыуа. Ошоларға ҡарамаҫтан, уның артынан эйәреүселәр бик аҙ була. Уларҙы «хауариҙар» тип атайҙар.

Исраил улдары – йәһүдтәр - Муса ғәләйһис-сәләмгә ебәрелгән динде теләкһеҙ генә тота, шунлыҡтан бөтөнләй хаҡ юлдан яҙа. Ғайса ғәләйһис-сәләм дәүерендә был халыҡ тарҡала, төшөнкөлөккә бирелә һәм үҙҙәренең ҡотҡарыусыһын көтә. Улар уңышҡа алып барасаҡ көслө, тәүәккәл, ҡыйыу холоҡло ҡотҡарыусы пәйғәмбәр килеүенә өмөт бағлай. Шуның өсөн дә, Ғайса пәйғәмбәрҙе йомшаҡ холоҡло тип иҫәпләп, уның артынан эйәрмәйҙәр. Ғайса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм), быларға ҡарамаҫтан, оло сабырлыҡ менән Берҙән-Бер Аллаһҡа инанырға саҡырыуын дауам итә.

Йәһүдтәр уны үлтерергә ниәтләй. Әммә Бөйөк Аллаһ Үҙенең пәйғәмбәрен енәйәтселәр ҡулынан ҡотҡара. Ғайса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) тип, һатлыҡ йәндең үҙен әүернәле ағасҡа ҡаҙаҡлап ҡуялар. Ғайса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) үлмәгән, ә Бөйөк Аллаһ тарафынан күккә ашырылған.



**Ғайса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) юғары әхлаҡ эйәһе булыуы, изге күңеллелеге, кешелеклелеге, сыҙамлылығы, мәрхәмәтлелеге һәм һөйөүе менән кешеләргә күркәм өлгө булып тора.**

# МӨХӘММӘТ ПӘЙҒӘМБӘР r

**«Мөхәммәт - ... ул Аллаһтың Рәсүле, пәйғәмбәрҙәрҙең (мөһөрлө) иң һуңғыһылыр»** - Әхзәб сүрәһенең 40-сы аяты менән Аллаһ Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡиәмәт көнөнә тиклем һуңғы пәйғәмбәр булып ҡаласағын хәбәр итә. Ислам диненә тиклем ғәрәптәр наҙанлыҡҡа, тәрбиәһеҙлеккә, әҙәпһеҙлеккә батып, юлдан яҙып йәшәгәндәр. Бөтә Ғәрәп ярымутрауында боттарға табыныу киң таралған булған. Кешеләр боттарҙы таштан, ағастан эшләгәндәр һәм уларға табынғандар, ҡорбан килтергәндәр. Ул замандарҙа Ҡәғбәтуллала 360 бот һаҡланған. Ҡәбиләләр үҙ-ара даими һуғыш алып барғандар. Көслөләр хәлһеҙҙәрҙе йәберләгәндәр, иҙгәндәр һәм ҡыҫҡандар. Йәмғиәттә ҡомарлы уйындар уйнау, эсерткес эсемлектәр эсеү, ришүәтселек, рибалыҡ киң таралған булған. Урлашыу һәм кеше талау ябай күренеш һаналған. Кешелек, яҡшылыҡ менән яманлыҡты аңлатырҙай, гонаһҡа һәм наҙанлыҡҡа батҡан ҡәүемде бәхетле тормошҡа сығарырҙай, көслө кешенең килеүенә мохтаж булған. Тап ошо дәүерҙә уларға пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ебәрелгән дә инде.

Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) 571 йылда Мәккә ҡалаһында донъяға килә. Атаһының исеме – Ғабдулла, әсәһе – Әминә була. Атаһы ул тыуғансы уҡ үлә. Артабан, бәләкәс Мөхәммәтте ҡарау өсөн, һөт әсәһе Хәлимәгә тапшыралар. Уның өйөндә бала сағының иң бәхетле көндәре үтә. Уға 6 йәш булғанда, әсәһе Әминә Мәҙинәләге туғандарының хәлен белергә бара. Ҡайтып барғанда, ҡапыл ғына сирләп китә һәм юлда үлеп ҡала. Бәләкәй Мөхәммәт әсәһен һағынып ныҡ ҡайғыра. Малайҙы олатаһы Ғәбделмотталиб үҙ ҡарамағына ала. Ике йылдан олатаһы ла донъя ҡуя. Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) атаһының бер туған ағаһы Әбү Талиб ғаиләһендә йәшәй башлай. Әбү Талиб кешелекле, изге күңелле кеше була. Ул үҙенең бәләкәй туғанын бик ярата, ҡайҙа барһа ла тик үҙе менән алып йөрөй. Насар һәм яуыз кешеләрҙән ҡурсалай һәм һаҡлай. Хатта пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт үсеп бәлиғ булғас та, ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем уны ҡурсалай, ярҙам итә һәм таянысы була.

Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) башҡа балаларҙан ныҡ айырылып торған. Ул тик дөрөҫтө генә һөйләгән. Боттарға табынмаған. Мохтаждарға ярҙам итергә ашыҡҡан.



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Беҙ һине бөтә халыҡ араһына һөйөнөслө хәбәр биреүсе һәм киҫәтеүсе - өгөтләүсе генә итеп ебәрҙек».

(Сәбә сүрәһе, 28-се аят)

Ошо күркәм сифаттары өсөн кешеләр уны хөрмәт иткәндәр, яратҡандар һәм «Мөхәммәдуль әмин» (Тоғро Мөхәммәт) тип атағандар. Йәш сағында Әбү Талиб менән бергә йөрөп, сауҙа эштәренә төшөнә. Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) 25 йәшендә күркәм холоҡло, хөрмәтле Хәҙисә исемле ҡатынға өйләнә.

Буласаҡ пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр йылдың Рамаҙан айында Мәккәнән алыҫ булмаған Хира тауының мәмерйәһендә яңғыҙ ҡалырға ғәҙәтләнә. Унда пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһтың Бөйөклөгө, Ҡөҙрәте, Уның Үҙенең һәр мәхлүген хәстәрләүе һәм тәрбиәләүе тураһында фекерләргә, доға ҡылырға, зекерҙә булырға яратҡан. Рамаҙан айы бөтөү менән, өйөнә ҡайтҡан, Ҡәғбәтулланы ете тапҡыр әйләнеп сыҡҡан.

Көндәрҙән бер көндө, Хира мәмерйәһендә булғанында, уның эргәһенә кеше ҡиәфәтендә Ябраил фәрештә (ғәләйһис-сәләм) килә. Ул Бөйөк Аллаһтың әмере менән уға пәйғәмбәрлек вазифаһын тапшырыуын белдерә һәм Ҡөрьәндең тәүге ебәрелгән аяттарын уҡырға ҡуша. Булып үткән ваҡиғанан тетрәнгән пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), өйөнә ҡайтҡас, был хаҡта ҡатыны Хәҙисәгә һөйләй. Хәҙисә (разыйаллаһу ғәнһә) шунда уҡ дингә ҡабул итә. Артабан Әли, Зәйд һәм Әбү Бәкер (разыйаллаһу ғәнһүмдәр) мосолман булалар. Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Мәккә халҡын исламға саҡыра башлай. Ҡайһы берәүҙәр инана, ә күбеһе, йәмғиәттә тотҡан урынын һәм хакимлек итеү көсөн юғалтыуҙан ҡурҡып, боттарға табыныуҙарын ташламай. Боттарға табыныусылар мосолмандарҙы эҙәрлекләй, яфалай һәм ғазаплай башлайҙар. Быға ҡарамаҫтан, пәйғәмбәребеҙ 13 йыл буйы халыҡты хаҡ дингә саҡырыуҙы түҙемле генә дауам итә. Мосолмандар был изге юлды интектергән ғазаптарға ҡарамай, ауырлыҡтарға бирешмәй, үҙҙәрен аямай үтәләр.

Ниһәйәт, 622 йылда мосолмандар Пәйғәмбәребеҙ менән бергә, боттарға табыныусыларҙың ыҙалатыуҙарынан арыныу ниәтендә, үҙҙәренең һәм яҡындарының ғүмере өсөн хафаланмай ғына хаҡ диндә тотоу маҡсатында, Мәккәнән Мәҙинәгә күсәләр. Бында пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ун йыл йәшәй. Ул Мәккә һәм Мәҙинә мосолмандарын туғанлыҡ ептәре менән бәйләй. Улар оло хәстәрлек һәм һөйөү менән бер – береһенә ярҙам итәләр, терәк булалар. Мәҙинәлә мәсет төҙөйҙәр. Ҡала йәйләп ислам дәүләтенең үҙәгенә әйләнә. Ошо мәлдәрҙә мотлаҡ ураҙа тотоуҙың, зәкәт түләүҙең, хаж ҡылыуҙың фарыҙлығын аңлатҡан аяттар төшөрөлә.

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) төрлө дәүләт етәкселәренә Ислам динен ҡабул итеүҙе тәҡдим итеп, илселәр ебәрә. Мосолмандар 630 йылда Мәккәне яулап ала. Ҡәғбәтулла боттарҙан таҙартыла. Бөтә Ғәрәп ярымутрауына ислам дине тарала. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хушлашыу хажын ҡыла. Унда ул кешелек донъяһына васыят итеп хөтбә һөйләй. Шул уҡ йылда, пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт вазифаһын тамамлап, 63 йәшендә мәңгелек йортҡа күсә. Һөйөклө пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһтың кешеләр араһынан Үҙе һайлап алған Хәбибе (яратҡаны) була. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юғары әхлағы, һәр ҡылған эше һәм һүҙе менән беҙгә үрнәк булып тора. Аллаһ әйтә: **«Аллаһтың рәсүле һеҙҙең өсөн иң яҡшы үрнәк ул»** (Әхзәб сүрәһе, 21-се аят)



**Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт Мостафаның (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үрнәкле шәхсиәтендә алдағы бөтә пәйғәмбәрҙәрҙең иң күркәм сифаттары тупланған.**

Йәә Аллаһ! Күктәге һәм Ерҙәге бар тереклектең Яралтыусыһы! Кешеләр араһынан пәйғәмбәрҙәрҙе һайлағанһың һәм өлгө сифатында уларҙы ебәргәнһең. Устарыбыҙҙы асып, доға ҡылып, һинән һорайбыҙ: «Йәә Аллаһ! Үҙеңдән Мәрхәмәтеңде күрһәтеп, беҙгә

| | | | |
|---|---|---|---|
| → | ихлас тәүбәһе һинән ҡабул булған | → | Әҙәм / Адам (ғәләйһис-сәләм) |
| → | һинең тарафыңдан бейек урынға күтәрелгән | → | Иҙрис / Енох (ғәләйһис-сәләм) |
| → | бөтә көсөн һинең динеңә саҡырырға сарыф иткән | → | Нух / Ной (ғәләйһис-сәләм) |
| → | залимдарҙан кәмһетелгән көсһеҙҙәр яҡлы булған | → | Һуд / Евер (ғәләйһис-сәләм) |
| → | ауырыуҙарҙың хәлен белеп, фәҡирҙәргә ярҙам иткән | → | Сәлих (ғәләйһис-сәләм) |
| → | халҡын әхлаҡһыҙлыҡтан йолоп ҡалырға тырышҡан | → | Лут / Лот (ғәләйһис-сәләм) |
| → | һинең ихтыярыңа тулыһынса буйһонған | → | Ибраһим / Авраам (ғәләйһис-сәләм) |
| → | һинең өсөн ғүмерен бирергә әҙер булған | → | Исмәғил / Измаил (ғәләйһис-сәләм) |
| → | кешеләргә хаҡ юлды күрһәткән | → | Исхаҡ / Исаак (ғәләйһис-сәләм) |
| → | бер ҡасан да һиңә өмөтөн өҙмәгән | → | Яҡуб / Иаков (ғәләйһис-сәләм) |
| → | инсафлы | → | Йософ / Иосиф (ғәләйһис-сәләм) |
| → | тоғро | → | Шөғәйб / Иороф (ғәләйһис-сәләм) |
| → | залимдарҙың йөҙөнә тураһын әйтә алған | → | Муса / Моисей (ғәләйһис-сәләм) |
| → | хаҡ юлдан барыусыларға ярҙам иткән | → | Һарун / Аарон (ғәләйһис-сәләм) |
| → | һиңә ғибәҙәт ҡылырға яратҡан | → | Дауыт / Давид (ғәләйһис-сәләм) |
| → | мөлкәте менән хакимлығын һинең юлыңда ҡулланған | → | Сөләймән / Соломон (ғәләйһис-сәләм) |
| → | сабырлы | → | Әйүп / Иов (ғәләйһис-сәләм) |
| → | маҡтауыңа лайыҡ булған | → | Зүлкилф (ғәләйһис-сәләм) |
| → | еңеллектә лә, михнәт сиккәндә лә һиңә мәҙхиә ҡылған | → | Юныс / Иона (ғәләйһис-сәләм) |
| → | кемде яҡшы һүҙ менән иҫкә алалар | → | Ильяс / Илия (ғәләйһис-сәләм) |
| → | сәлихтәрҙән булған | → | Әлйәсә / Елисей (ғәләйһис-сәләм) |
| → | ғибәҙәттәрен һиңә ихлас ҡылған | → | Зәкәриә / Захария (ғәләйһис-сәләм) |
| → | дине өсөн вафат булған | → | Яхъя / Иоан (ғәләйһис-сәләм) |
| → | мөхәббәт һәм шәфҡәт сығанығы булған | → | Ғайса / Иисус (ғәләйһис-сәләм) |
| → | әхлағы Ҡөрьән менән һуғарылған | → | Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм алдағы пәйғәмбәрҙәр |

көүек булырға мөмкинлек бир!»

# ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘ r МЕНӘН АЛДАҒЫ ПӘЙҒӘМБӘРҘӘР

Исламды донъяға еткереп, Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тәүхид динен, Аллаһтың пәйғәмбәрҙәре өндәгән «Бер» Аллаһҡа инаныу динен тергеҙгән. ***Уларҙың диндәре бер булған – ғәрәп телендә индерелгән «Ислам» дине.*** Пәйғәмбәр Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: *«Бөтә пәйғәмбәрҙәр ҙә - дини ҡәрҙәштәр: диндәре бер, ләкин Раббының ебәрелгән ҡанундары башҡа».* Йәғни бөтә пәйғәмбәрҙәр ҙә мосолман, ә ҡанудары (шәриғәт) төрлө булған. Мәҫәлән, Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ваҡытында мосолмандар ике тапҡыр намаҙ уҡыһа, Мөхәммәт пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәте көндәлек биш фарыз намаҙын уҡый.

Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ***ерҙәге һуңғы пәйғәмбәр булған***. Был хаҡта Аллаһ әйтә: **«Мөхәммәт һеҙҙең арағыҙҙағы бер генә ирҙең дә атаһы түгел. Ул фәҡәт Аллаһтың Рәсүле һәм пәйғәмбәрҙәрҙең мөһөрөләр. Аллаһ һәр нәмәнең асылын белеп тора»** (Әхзәб сүрәһе, 40-сы аят). Пәйғәмбәрҙәрҙең һуңғыһы булып, кешеләргә Раббының Һуңғы Ғәһеден (Ҡөрьәнде) еткерергә һәм «әхлаҡты күркәмләштереүҙе тамамларға» килгәнен Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙе әйткән: *«Мин һәм башҡалар хаҡында риүәйәт мөйөшөндәге бер ташы урынына ҡуйылмаған матур өй кеүек. Кешеләр килә лә: «Ниндәй матур өй!» - тиеп ҡарай ҙа, әлеге тулмаған таштың урынына ҡуйылыуын теләй. Мин - шул таш, мин - һуңғы пәйғәмбәр, пәйғәмбәрлекте тамамлаусы».*

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ялған пәйғәмбәрҙәрҙең барлыҡҡа килеүен иҫкәрткән һәм өммәтен ояу булырға өндәгән: *«Утыҙ алдаҡсы сығып һәм үҙҙәрен пәйғәмбәр итеп иғлан итерҙәр, әммә мин - пәйғәмбәрҙәрҙең мөһөрө һәм минән һуң пәйғәмбәр булмаҫ».* Ысынлап та, күп тә үтмәй беренсеһе барлыҡҡа килә - Мөсәйләмә Кәззәб, уға ҡаршы



Әбү Бәкр (разыяллаһу ғәнһү) сыға һәм көрәшеп енә. Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) - Ҡиәмәт Көнөнә ҡәҙәр һуңғы пәйғәмбәр һәм был йәһәттән ул башҡа пәйғәмбәрҙәрҙән айырылып тора.

Мөхәммәт пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ***бөтә кешелеккә ебәрелгән***. Алдағы пәйғәмбәрҙәр айырым ваҡытта йәшәгән, айырым халыҡтарға ебәрелгән булған.

Мәҫәлән, Ғайса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) Исраил улдарына ебәрелгән. **«Иҫегеҙҙәме һуң, Мәрйәм улы Ғайса: «Әй, Исраил токомо, мин Аллаһтың һеҙгә ебәргән илсеһе булам, минән алда килгән Тәүрәтте дөрөҫләүсемен һәм минән һуң да киләсәк Әхмәт исемле бер пәйғәмбәр тураһында һөйөнөслө хәбәр килтерҙем» - тине. Был хаҡта ул ышанысլы дәлилдәр килтергәс, улар: «Был - көн кеүек ап-асыҡ бер сихыр» - тинеләр»** (Саф сүрәһе, 6-сы аят). Хәҙерге Библияла Ғайса пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) миссияһын иҫбатлаусы шиғыр бар: *«Исраил Йортонон аҙашҡан һарыҡтарына ғына ебәрелгәнмен»*. (Матфейҙан Еванглиеға, 15:24). Ғайса (ғәләйһис-сәләм) хаҡ юлға тик аҙашҡан йәһүдтәрҙе генә өндәгән, әммә аҙаҡ (б.эра II б.) император Константин, насрани динен ҡабул итеп, Римдың рәсми дине итеп иғлан итә.

Муса (ғәләйһис-сәләм) Исраил улдарына һәм Фирғәүенгә ебәрелгән ине. Муса әйтте: **«Әй, Фирғәүен, мин ғаләмдәрҙең Раббыһы тарафынан һеҙгә күндерелгән бер пәйғәмбәр, Аллаһ тураһында бары тик дөрөҫөн генә һөйләргә бурыслымын. Һеҙгә Раббығыҙҙан асыҡ бер дәлил килтерҙем. Исраил улдарын (Яҡуп балаларын) азат итеп, миңә биреп ебәр» - тине»** (Әғрәф сүрәһе, 7:158).

Алдағы пәйғәмбәрҙәргә ҡарағанда Мөхәммәт пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бөтә замандарҙағы кешелеккә ебәрелгән: **«Әйт: «Әй, кешеләр, дөрөҫтән дә мин күктәрҙең һәм Ерҙең хужаһы булған Аллаһ тарафынан һәммәгеҙгә ебәрелгән Илсемен. Унан башҡа Илаһи ҡөҙрәткә эйә һәм тәңре булырҙай һис бер кем юҡ. Ул терелтә лә, үлтерә лә. Шулай булғас, өмми Пәйғәмбәр булған Илсеһенә, Аллаһҡа һәм уның аяттарына инанып, иман килтергәндәр Аллаһҡа йүнәлер һәм тура юлды табыр, - тип»** (Әғрәф сүрәһе, 158-се аят).

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Әйт: «Аллаһҡа һәм Пәйғәмбәргә итәғәт итегеҙ» - тип. Әгәр тағын йөҙ сөйөрөп китһәләр, Илсенең вазифаһы бары тик Аллаһтың хөкөмдәрен уларға ирештереү генә, уларҙың бурысы иһә Илсе әйткәндәргә эйәреү. Шулай ғәмәл ҡылһағыҙ, тура юлды табасаҡһығыҙ. Пәйғәмбәргә (Аллаһтың әмерҙәрен) ирештереүҙән башҡа вазифа йөкләтелмәгән».

(Нур сүрәһе, 54-се аят)

Икенсе аятта әйтелә: **«Беҙ һине бөтөн кешеләргә бары тик һөйөнөслө хәбәр бирер өсөн һәм киҫәтер өсөн генә күндерҙек. Ләкин кешеләрҙең күбеһе был турала һис нимә белмәй»** (Сәбә сүрәһе, 28-се аят).

Аллаһу тарафынан һайланған бөтә пәйғәмбәрҙәр ҙә кешеләргә хәҡиҡәткә һәм ике донъя бәхетенә юл күрһәтергә килгәндәр. Улар байлыҡ, дан-шөһрәт эҙләмәгәндәр. ***Бер ҡасан да хеҙмәттәре өсөн кешеләрҙән хаҡ һорамағандар.*** Улар әйткәндәр: **«Әжере бары Раббыбыҙҙан ғына»**. Аллаһтың ризалығынан тыш бер ниндәй ҙә хаҡ теләмәгәндәр.

Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ошолай итеп халҡына мөрәжәғәт иткән: **«Аллаһтан ҡурҡмайһығыҙмы? Шик юҡ, мин һеҙгә күндерелгән пәйғәмбәр булам. Инде Аллаһтан ҡурҡығыҙ һәм миңә эйәрегеҙ. Был эштәрем өсөн мин һеҙҙән түләү һорамайым. Миңә тигән бүләк бары тик Аллаһ хозурында ғына»** (Шүғәрә сүрәһе, 106-109-сы аяттар).

Аллаһ Пәйғәмбәренә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтә: **«Әйт: «Мин был ғәмәлдәрем өсөн һеҙҙән һис бер түләү һорамайым, бары Аллаһҡа тоғро юл тоторға теләгән кешеләрҙе генә эҙләйем, - тип»** (Фурҡан сүрәһе, 57-се аят). Мөхәммәт Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһтың һүҙҙәрен кешеләргә еткерергә йөкмәтелгән вазифаны намыҫлы башҡара һәм тарихта Сәғәҙәт Дәүере (Ғасру Сәғәҙәт) булараҡ билгеле - тәҡүәле, иманлы кешеләрҙән торған иң яҡшы өммәт тәрбиәләй.

Аллаһ пәйғәмбәрлекте иҫбатлап, үҙенең илселәренә ***мөғжизә ҡылыу һәләте*** биргән. Мәҫәлән, Муса пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм) – йыланға әүерелгән таяҡ, Сөләймән пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм) - ҡоштар менән хайуандарҙың телен аңлау һәләте һб. РРаббыбыҙ тарафынан иң ҙур мөғжизә Пәйғәмбәребеҙгә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бүләк итеп бирелгән - ул Ҡөрьән. Алдағы пәйғәмбәрҙәрҙең мөғжизәләре улар үлгәс тамамланған. Ҡөрьәндең мөғжизәһе Мөхәммәт пәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һуң туктамаған һәм Ҡиәмәт Көнөнә ҡәҙәр дауам итәсәк.



Мөхәммәт пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ***алдағы пәйғәмбәрҙәрҙең тормошонан миҫалдар килтергән***. Уларҙың изгелекле тормошон һәм юғары әхлағын өммәтенә өлгө итеп ҡуйған. Мәҫәлән, кешеләрҙе тир түгеп тапҡан килемгә йәшәргә өндәгәндә, Дауыт / Давид пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) тарихын һөйләгән.

Бер ваҡыт Дауыт (ғәләйһис-сәләм) үҙе хаҡындағы халыҡ фекерен белергә теләгән. Шул мәлдә уға Ябраил / Гавриил фәрештә (ғәләйһис-сәләм) кеше ҡиәфәтендә төшә лә әйтә: *«Дауыт Аллаһтың бик яҡшы бәндәһе, ләкин уның бер етешһеҙлеге бар: ул үҙен иманлыларҙың дөйөм ҡаҙнаһынан аҫрай, ә Раббыбыҙ үҙ көндәрен үҙҙәре күргән ҡолдарын ярата». Шунан пәйғәмбәр күҙ йәштәре менән Аллаһҡа ялбара: «Йәә Раббым! Үҙемде ҡарай алған берәй төрлө һөнәргә өйрәт».* Аллаһ, тимерселек һөнәренә өйрәтеп, уға тимерҙе күндерә. Тимерҙе ул, ҡыҙҙырмайынса, бейәләйһеҙ, утһыҙ, сүкешһеҙ, ҡулы менән ҡамыр кеүек әүәләгән. Иң бөйөк батшаларҙың береһе булыуына ҡарамаҫтан, Дауыт пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм), һаймандар (тимер ҡулдәк) ҡойоп, уларҙы һатып, икмәклек аҡса эшләгән.

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәте өсөн ауыр мәлдәрҙә Аллаһтың диненә өндәгән саҡтағы пәйғәмбәрҙәр кисергән һынау-михнәттәрҙе иҫенә төшөргән. Мосолмандар ҙа, Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙе лә ошо күркәм тарихтарҙан көс, сабырлыҡ, йыуаныс тапҡан.

Пәйғәмбәрҙәрҙең бурысы - кешеләргә ҡотолоу юлын күрһәтеү. ***Пәйғәмбәрҙәргә буйһоноуҙың һәм илаһи бойороҡтарҙы үтәүҙең мөһимлеге хаҡында:***

*«Ут яҡҡас, уға уҡталған күбәләк менән бөжәктәрҙе туктатырға тырышҡан кешегә оҡшаған беҙҙең хәлебеҙ. Һеҙҙе уттан һаҡлар өсөн, билегеҙҙән тотам. Ә һеҙ, ҡулымдан ысҡынып, утҡа ташланырға теләйһегеҙ»* - тиеп әйткән Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм). (Мөслим, Фәҙаил, 19).

# ҺОРАУҘАР

## Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ

| | | | |
|---|---|---|---|
| **1** | Пәйғәмбәрҙәрҙе инҡар итеү | | һәм Уға ғына табынырға өндәгәндәр. |
| **2** | Пәйғәмбәрҙәр Аллаһтың бойороҡтары буйынса йәшәргә | | изгелекле тормошон һәм юғары әхлағын өммәтенә өлгө итеп ҡуйған. |
| **3** | Пәйғәмбәрҙәр, михнәттәр кисерһәләр ҙә, | | ярлыҡау һорауҙың күркәм өлгөһө булып тора. |
| **4** | Пәйғәмбәрҙәр халҡын Бер Аллаһҡа иманырға | | Йософ пәйғәмбәр (ғәләһиссәләм) күркәм өлгө булып тора. |
| **5** | Аллаһ беҙгә пәйғәмбәрҙәрҙе | | һәм уларҙы кешеләргә еткерергә бурыслы. |
| **6** | Әҙәм пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) тәүбәһе Аллаһтан | | кешеләрҙең иң күркәм өлгөһө итеп ебәргән. |
| **7** | Мөхәммәт пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) алдағы пәйғәмбәрҙәрҙең | | миссияларын атҡарыуҙан баш тартмаясаҡтар. |
| **8** | Беҙҙең менән насар мөғәмәләлә булғандарҙы кисереп, уларҙың яуызлығына изгелек менән яуап ҡайтарыуҙа | | диндә инҡар итеү менән бер. |

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

1. **Аллаһтан үәхи алып, Уның бойороктары менән тыйыуҙарын еткергән кеше нисек атала?**
   А) Мөғәлим
   Б) Ғалим
   В) Пәйғәмбәр
   Г) Мосолман

2. **Пәйғәмбәрҙәрҙең бер сифатын һыҙатландырған «сыдк» һүҙе ни аңлата?**
   А) Һүҙ һәм ғәмәлдәге хаҡлыҡ
   Б) Гонаһ ҡылмау
   В) Илаһи асыштар тапшырыу
   Г) Ышанысла булыу

3. **Мөхәммәт пәйғәмбәргә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бирелгән иң ҙур мөғжизә.**
   А) Исра
   Б) Изге Ҡөрьән
   В) Айҙы ике өлөшкә бүлеү
   Г) Миғраж

4. **Ниндәй һыҙат пәйғәмбәрҙәрҙең аҡылы менән зирәклеген асыҡлай?**
   А) Аманат
   Б) Фатанат
   В) Исмәт
   Г) Сыдк

5. **Аллаһтың ирке менән пәйғәмбәрҙәр күрһәткән тылсымдар нисек атала?**
   А) Мөғжизә
   Б) Сихыр
   В) Кәрамәт
   Г) Кәхәнәт

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(буйһоноғоҙ / бурысы; пәйғәмбәрҙәрҙән/иҫкәртеү; хаҡ юлдан / етәксе; хаҡ һүҙ / бармаған; яҡшы өлгө / өмөт иткән)**

1. «Уларҙы, Беҙҙең әмер буйынса, ......... алып бара торған ......... (пәйғәмбәр) иттек» (Әнбиә сүрәһе, 73-сө аят).

2. «Беҙ һине киҫәтеп өгөтләүсе итеп, ......... еткерергә ебәрҙек. Өгөтләп киҫәтеүсе ......... бер халыҡ та ҡалманы!» (Фәтир сүрәһе, 165-се аят).

3. «Улар ......... булды һеҙгә – Аллаһты, Ҡиәмәт көнөн осратырына ......... кешеләргә» (Мөмтәхәнә сүрәһе, 6-сы аят).

4. «Яҡшы һүҙ еткереп, өгөтләгән ......... һуң, кешеләр Аллаһҡа ҡаршы дәлил булмаһын өсөн ......... ебәрҙек» (Нисә сүрәһе, 165-се аят).

5. «Әйт: «Аллаһҡа итәғәт ҡылығыҙ, рәсүлгә .........! Йөҙ сөйөрәһегеҙ икән, уға - үҙ йөгө, һеҙгә - үҙ йөгөгөҙ. Уға буйһоноғоҙ, хаҡ юлдан барырһығыҙ. Рәсүлдең ......... - асыҡ итеп еткереү генә» (Нур сүрәһе, 54-се аят).



# ЯУАПТАР

## Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Пәйғәмбәрҙәрҙе инҡар итеү | 4 | һәм Уға ғына табынырға өндәгәндәр. |
| 2 | Пәйғәмбәрҙәр Аллаһтың бойороҡтары буйынса йәшәргә | 7 | изгелекле тормошон һәм юғары әхлағын өммәтенә өлгө итеп ҡуйған. |
| 3 | Пәйғәмбәрҙәр, михнәттәр кисерһәләр ҙә, | 6 | ярлыҡау һорауҙың күркәм өлгөһө булып тора. |
| 4 | Пәйғәмбәрҙәр халҡын Бер Аллаһҡа инанырға | 8 | Йософ пәйғәмбәр (ғәләһиссәләм) күркәм өлгө булып тора. |
| 5 | Аллаһ беҙгә пәйғәмбәрҙәрҙе | 2 | һәм уларҙы кешеләргә еткерергә бурыслы. |
| 6 | Әҙәм пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) тәүбәһе Аллаһтан | 5 | кешеләрҙең иң күркәм өлгөһө итеп ебәргән. |
| 7 | Мөхәммәт пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) алдағы пәйғәмбәрҙәрҙең | 3 | миссияларын атҡарыуҙан баш тартмаясаҡтар. |
| 8 | Беҙҙең менән насар мөғәмәләлә булғандарҙы кисереп, уларҙың яуызлығына изгелек менән яуап ҡайтарыуҙа | 1 | динде инҡар итеү менән бер. |



## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1)** В

**2)** А

**3)** Б

**4)** Б

**5)** А

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

1. хаҡ юлдан/етәксе
2. хаҡ һүҙ/бармаған
3. яҡшы өлгө/өмөт иткән
4. пәйғәмбәрҙәрҙән/иҫкәртеү
5. буйһоноғоҙ/бурысы





### ЫСЫН ТОРМОШ

# ӘХИРӘТКӘ ИНАНЫУ

- *Донъяуи ниғмәттәр*
- *Тормош сәйәхәте*
- *Ахрызаман һәм терелеү*
- *Әхирәт осоро*
- *Әхирәткә инаныуҙың киммәте*





# БЕҘ ЯРАТҠАНДАРЫБЫҘ МЕНӘН ОСРАШАСАҠБЫҘ

Бөгөн ял көнө Тимур һуң ғына уянды. Йоҡа ҡорған аша бүлмәгә яҙ ҡояшының яҡтылығы төшә, ә асыҡ тәҙрә аша еләҫ ел, ҡоштар һайрауы, кешеләрҙең шат тауыштары килеп инә. Тимурҙың, йәһәтерәк өйҙән саф һауаға сығып, тәбиғәттең ҡыштан һуң уяныу шатлығын барлыҡ ҡоштар, ағастар, бөжәктәр һәм кешеләр менән уртаҡлашҡыһы килде. Улар бөгөн атаһы һәм Азамат менән эргәләге урман паркында яңы һауа йыланын осорорға килешкәйне.

Урынынан ырғып торҙо, йыуынырға һәм ашарға йүгергән ыңғайы:

– Әсәй, – тиеп ҡысҡырҙы ла өйҙә үҙе генә икәнен аңланы.

«Атай, күрәһең, әсәйем менән ҡустым Даниярҙы аҙналыҡ аҙыҡ-түлек алырға машинала магазинға алып киткән. Ярай, атайым бушағас, беҙгә ҡушылыр,» - тиеп уйланы ла, тиҙ генә йыйынып, урамға йүгереп сыҡты. Ун минуттан





һабаҡташ дуҫы Азамат менән бергә, йыландарын тотоп, аҙаҡ уны зәңгәр һауаға ебәреп, кем бейегерәк осорасағын ярышып күҙәтер өсөн, урман паркы яғына йүнәлделәр.

Ваҡыт һиҙелмәй үтеп китте, ҡояш байыу яғына тәгәрәй башланы, малайҙар, уйнап туйып, ҡыуанышып, өйҙәренә тарала. Дуҫы менән: «Әссәләмү ғәләйкүм!» - тиеп хушлашты ла Тимур, парктан алып сыҡҡан һуҡмаҡ буйлап атлағанда, ҡаршыһына килгән атаһын күреп ҡалды. Атаһының ҡаршыһына йүгереп барып, ҡосаҡлап алып, бензин еҫе аңҡып торған курткаһына һыйынды:

– Атай!

Атаһы күңелһеҙ һәм йонсоу күренә ине. Эскәмйәгә ултырып, бер аҙ тын торғас, шым ғына әйтте:

– Ғәфү ит, улым, һин йоҡлай инең. Миңә ашығыс китергә кәрәк ине. Әсәйеңә лә. Бөгөн һинең менән йөрөргә вәғәҙә иткәйнем, әммә иртәрәк килеп сыҡманы.

– Ниҙер булдымы, атай?

– Эйе, Тимур. Һин хәҙер ҙур малай һәм кешеләрҙең тыуып, үҙ ғүмерен йәшәп, мәрхүм булғандарын беләһең. Һәр кемдең Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тарафынан билгеләнгән үҙ мөҙҙәте (ваҡыты) бар. Кәрим ҡартатайың, әсәйеңдең атаһы вафат булғанын әсәйең менән миңә төнөн хәбәр иттеләр һәм беҙ уға барҙыҡ.

Бөгөн ерләнеләр. Әсәйең менән Данияр ҡустың өләсәйең янында ҡалып торҙолар.

Тимурҙың күкрәгә ҡыҫылды, күҙҙәренә йәш эркелде, әсе төйөр тамағына торҙо. Ҡапыл үҙен япа-яңғыҙ тойҙо. Ҡартатаһын ныҡ яратты һәм айырылышыу сәғәте былай тиҙ булырын уйламай ине. Атаһының янына ултырҙы ла:

– Атай... башҡа ҡартатайҙы күрмәйемме?

– Ин шәә Аллаһ, улым, күрерһең. Мәңгелек тормошта кемдәрҙе яратабыҙ, шулар менән күрешәбеҙ.

– Ә кешеләр үлгәс ҡайҙа китәләр?

– Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ихтыяры менән һәр кешенең билгеләнгән мөҙҙәте үткәс, йәне тәнен ташлап китә. Уны ерләгәс, йәне әйләнеп ҡайта һәм ул йоҡлаған кешегә оҡшап ҡала. Уға ике фәрештә килә – Мөнкәр менән Нәкир һәм унан һорайҙар: **«Раббың кем? Динең ниндәй? Пәйғәмбәрең кем?»** Мосолман фәрештәләрҙең һорауҙарына дөрөҫ итеп былай яуап бирә: **«Раббым – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, динем – Ислам, пәйғәмбәрем – Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм)».** Фани донъялағы ғәмәлдәренә ҡарап, ҡәбер бирәүҙәр өсөн ожмах баҡсаһына, икенселәргә тамуҡ упҡынына әйләнә. Аҙаҡ кешенең йәне Барзах донъяһына күсә һәм унда Ҡиәмәт Көнөнә ҡәҙәр була. Ҡиәмәт Көнө башланғанын Исрафил исемле фәрештә Сорғо исемле оло торбаһына өрөп еткерә. Ул икенсе тапҡыр өргән саҡта, Раббыбыҙ Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бөтә кешеләрҙе терелтер һәм улар, ошо яҙғы сәскәләр кеүек, ҡәберҙән ҡалҡып, **Мәхшәр майҙанына** Раббыларына хисап бирер өсөн йыйылыр.

Иҫән саҡта һәр ваҡыт кешенең уң һәм һул яурындарында булған ике фәрештә - **Кирамән Кәтибин** - гонаһтарыбыҙ менән изге ҡылыҡтарыбыҙҙы **ғәмәл китабыбыҙға** яҙалар. **Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙгә мәрхәмәтле булып, барыбыҙҙы ла Үҙенең ҡулдарынан ҡылһын һәм ғәмәл китабыбыҙ уң яҡтарыбыҙҙан бирелһен! Һул яҡтан бирелмәһен! Әмин.** Йәғни Ожмах әһелдәре китабтарын – уң, ә Тамуҡ әһелдәре – һул яҡтарынан алырҙар!

Аҙаҡ һәр кешенең бөтә ғәмәлдәре күләме ошо донъя ҡәҙәре булған **Мизан үлсәүҙәрендә** үлсәнәсәк. Һәр кеше ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер **Сират күпере** аша үтәсәк. Яҡшы кешеләр, был күпер аша тиҙ үтеп, ожмахҡа eлгәсәк. Ә насар кешеләр, Сират күпере аша үтә алмайынса, тамуҡҡа ҡолаясаҡ.

Әйҙә, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә, Кәрим ҡартатай өсөн доға ҡылайыҡ. Ул яҡшы мосолман булды, мәңгелек тормошҡа ышанып, Ожмах баҡсаларына инергә теләне. **Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, салих ғәмәлдәрен ҡабул итеп, гонаһтарын ярлыҡаһын, Мөнкир менән Нәкир фәрештәләре алдында хисаптарын еңеләйтһен, ҡәберен яҡты һәм иркен ҡылһын, Ожмахҡа илтеп, уны Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән осраштырып, әжер-сауаптарын насип итһен! Әмин!**

Тимур атаһына эйәреп:

– Әмин, – тиеп ҡабатланы, йөҙөн ҡулы менән һыпырҙы.

Күкрәгендә ҡыҫҡан ауыртыу ебәргәнен тойҙо. Атаһы менән ҡайтырға атланылар. Уның көслө ҡулдарын тотҡан килеш Тимур уйланы: «Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә минән риза булып, миңә Йәннәт бүләкләһен. Унда Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Кәрим ҡартатай һәм, кемдәрҙе яратам шулар менән күрешер өсөн, мин яҡшы мосолман буласаҡмын».

Сафия Хәбибуллаһ

# МӘҢГЕЛЕК ТОРМОШ ҠАПҠАҺЫ

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һәр кешегә ғүмеренең мөҙҙәтен билгеләй. Был мөҙҙәт тамамланғас, беҙ икенсе тормошҡа күсәбеҙ. Үлем – был донъялағы ғүмер тамамланып, мәңгелектәге тормош башланыуы; ул донъя ғәрәп телендә «әхирәт», тип атала. Кем Раббыбыҙға инанып салих ғәмәлдәр ҡыла, унан ҡурҡырға тейеш түгел. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә алдында етерлек кимәлдә бурыстарыбыҙҙы үтәмәгәнебеҙ өсөн ҡурҡыу кәрәк.

Был донъяға Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең бойороғо буйынса киләбеҙ һәм Уның бойороғо буйынса ҡалдырып китәбеҙ. Кем Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә менән мәңгелек тормошҡа инанмай, барыбер үлемдән, хисаптан ҡаса алмай, ләкин үҙҙәренең Ожмах юлын бикләй.



Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ихтыяры менән был донъя һәр ваҡыт яңырып тора, әүәлге быуындарға алмашҡа наҫелдәре килә. Әйҙәгеҙ, күҙ алдына килтерәйек, әгәр кешеләр үлмәһә, ни булыр ине икән? Ер тулып, унда урын ҡалмаясаҡ. Ҡарт, сырхау, көсһөҙ, ҡеүәтһеҙ кешеләрҙең тормошо иң тәүҙә үҙҙәре өсөн түгеһеҙ һынау-михнәткә әйләнәсәк. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ниғмәте булған үлем кешеләрҙе был донъялағы михнәт-ыҙаларҙан арындыра.

Фани донъяға алмашҡа мәңгелек тормош килә. Орлоҡ тупраҡҡа эләккәс, һәләк булыр төҫлө. Әммә ысынбарлыҡта үҫеш осорондағы билдәле ҡатламдарҙы үтеп, ул яңы ағасҡа әүерелә. Ошо рәүешле «үлем» орлоғо ла, яңы ағасҡа, күпкә камилыраҡ ҡатламға башланғыс булып тора. Шулай булғас, ғүмеренең бейек баҫҡысындағы кешенең үлеме лә, йәнә лә гүзәлерәк һәм мөһимерәк, сөнки кеше, ергә китеп, һис шикһеҙ, мәңгелек тормошҡа эйә була.

Йоҡо – үлемдең бәләкәй ҡустыһы, тиҙәр. Үлем йоҡоһона тарыған кеше, был донъяға күҙҙәрен йомоп, яңы тормошта уяна. Үлем - тормоштоң яҡтылығын алып, ерҙәге тырышлыҡтарҙы өҙгән кеүек тойолһа ла, ысынбарлыҡта был донъя михнәттәренән арыныу. Ул - буласаҡ урындың тәнәфесе, икенсе хәлгә күсеү һәм Мәңгелек тормоштоң ҡапҡаһы. Үлем тыуыуҙы аңлата. Әсәһенең ҡарынын ҡалдырып, кешеләр был донъяға тыуа, Ерҙәге тормошто ҡалдырып, әхирәттә тыуа.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«(Үлем түшәгендәге кешенең) йәне боғаҙына еткәс, һеҙ уға ҡарап тораһығыҙ. Беҙ уға һеҙҙән дә яҡын торабыҙ. Әммә һеҙ күрмәйһегеҙ генә. Әгәр ҙә һеҙ (Аллаһтың) язаһынан азат икәнһегеҙ, әгәр һеҙ хаҡлы икән, (йән биреүсенең) йәнен кире ҡайтарығыҙ?»

(Вакиға сүрәһе, 83-87-се аяттар)

# ДОНЪЯУИ НИҒМӘТТӘР

### Фани донъя - сәйәхәт

Был донъяға Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең тәҡдире менән килеп, һәр кеше мәңгелек юлындағы мосафирға әйләнә. Был юл оҙон йә ҡыҫҡа, ауыр, михнәттәр менән тулы, йә кереһенсә еңел һәм ҡайғыһыҙ булыуы мөмкин. Кемгәлер Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә байлыҡ, матурлыҡ, абруй тәҡдир итә, ә кемгәлер ауырлыҡтар аша үтергә яҙған. Әммә бер кире ҡаҡҡыһыҙ хәҡиҡәт бар – был тормош мәңгелек түгел. Берәү ҙә был донъяға мәңге ҡалырға килмәй.

Ерҙәге тормош – ваҡытлыса туҡталыш ҡына, мәңгелеккә юлланған мосафирҙың юлындағы ҡунаҡхана. Ғабдуллаһ ибн Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) тапшырғанса, Пәйғәмбәр Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер мәл уның яурындарынан ҡосаҡлаған да әйткән: *«Был донъяла мосафир кеүек бул!»* (Бохари, Риҡаҡ, 3).

### Донъяуи ниғмәттәр ваҡытлыса бирелә

Ниндәй гүзәл һәм мөғжизәүи иткән был донъяны Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә! Ерҙе икһеҙ-сикһеҙ ниғмәттәр менән тултырып, бәхетле йәшәү өсөн барлыҡ кәрәкле уңайлыҡтарҙы яралтҡан. Был ниғмәттәрҙе биреүсебеҙ хәләл һәм саф ниғмәттәрҙе ҡулланыуыбыҙҙы, Уға шөкөр ҡылыуыбыҙҙы теләй.

**«Ул һеҙгә нимә теләһәгеҙ, шуны бирҙе. Аллаһтың ниғмәттәрен һанарға ни ҡәҙәр тырышһағыҙ ҙа, осона сыға алмаҫһығыҙ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, кеше ул - залим, уйы гел кәферлектә булыр (булғанына шөкөр итмәүсе зат)»** (Ибраһим сүрәһе, 34-се аят).

Ерҙәге ниғмәттәр беҙгә ваҡытлыса ҡулланырға бирелгән. Был донъяла беҙҙе Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә байлыҡ, һаулыҡ, аҡыл, ғилем

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

**«Донъялағы тормош Күктән яуған ямғырға оҡшаш. Шул ямғыр кешеләр, йәнлектәр ашай торған үҫемлектәр менән аралаша. Ниһайәт, Ер йөҙө шулай гүзәллек менән ҡапланғас, кешеләр үҙҙәрен ошо гүзәллектең хужаһы, тип һанай башланылар. Төн ваҡытындамы, көндөҙөнмө әмеребеҙ (ғәрәсәт) килер, Ер йөҙөн, кисә генә бер ниндәй ҙә гүзәллеге булмаған кеүек, тамырынан ҡутарып, харабалар хәленә килтерербеҙ. Бына, Беҙ зиһене булғандарға аяттарыбыҙҙы шулай аңлатабыҙ».**



(Юныс сүрәһе, 24-се аят)

кеүек ниғмәттәре менән һынай. Әгәр беҙ, был ниғмәттәрҙе Кем биргәнен иҫебеҙҙә тотоп, уларҙы тәғәйенләнеше буйынса ҡулланһаҡ, Раббыбыҙға шөкөр итеүселәрҙән булабыҙ. Ә инде был барлыҡ ниғмәттәрҙе Кем биргәнен онотоп, кешеләргә һәм башҡа мәхлүкәтәргә зыян килтереп, кәрәкмәгән юҫыҡта ҡулланһаҡ, бөйөк Яралтыусыбыҙҙың игелекһеҙҙәренән иҫәпләнербеҙ.

### Ерҙәге тормош – ул имтихан

Был донъя – ҙур аудитория, ә ерҙәге тормош – имтихан. Үткән һәр көн кеше ғүмере айһанлығының (календарҙың) бер битен йыртa. Шуға күрә, мөҙҙәттең ҡиммәтен белеп, көндәрендe Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә хуш килерлек салих ғәмәлдәр менән тултырыу лаҙым. Кем үҙенә бүләк итеп бирелгән көндәрен, йылдарын, һулаған һулышын мәғәнәһеҙ уткәрә, тормоштоң асылын төшөнмәй, ныҡ үкенәсәк. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә иҫкәртә:

**«Ниһайәт, уларҙың берәйһен әжәл тотһа, әйтер: «Раббым, мине донъяға кире ҡайтар; эшләй алмай ҡалған изгелектәрҙе башҡарасаҡмын, — тип, ҡабат-ҡабат ялбарыр. Юҡ! Был уның ауыҙынан сыҡҡан буш һүҙ генә. Ҡиәмәткә саҡлы уларҙы терелтмәйенсә тота торған барзах (ҡорма) бар»** (Мөьминүн сүрәһе, 99-100-се аяттар).

Йәл, ебәрелгән мөҙҙәттәрен дөрөҫ ҡулланмаған, имтихандарын тапшыра алмағандарҙың үкенеүҙәре бер ниндәй ҙә файҙа килтермәйәсәк. Ваҡыттарын бушҡа уҙғарып, мөмкинлектәрен ыҫҡындырғандарҙы иҫкәртеп, Раббыбыҙ әйтә:

**«Һеҙгәуйлапаңларлыҡғүмербирмәнекме? Һеҙгә киҫәтеүсе (Ҡөрьән, Пәйғәмбәр) килмәнеме? (Ни өсөн инанманығыҙ!) Хәҙер инде (яҙаһын) татығыҙ! Залимдарға ярҙам итеүсе булмаҫ»** (Фәтыр сүрәһе, 37-се аят).

### Фани донъя – ул әхирәт баҫыуына сәселгән орлоҡ

Был донъя – Ожмах ҡаҙана торған урын. Ысынында ла, был тормошта беҙ Ожмахты йә яулайбыҙ, йә юғалтабыҙ. Кешенең фани донъяла ҡылған ғәмәленең бер өлөшө лә иҫәпһеҙ ҡалмаясаҡ. Барлыҡ салих ғәмәлдәребеҙ өсөн әжерен аласаҡбыҙ. Әгәр беҙ был донъяла ғүмеребеҙ баҫыуына изгелек орлоҡтары сәсһәк, Әхирәттә уңышын йыясаҡбыҙ. Изге ғәмәлдәребеҙ өсөн Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә күп тапҡырға арттырып әжер-сауаптарын ҡайтарасаҡ. Ә гонаһтар һәм насар ҡылыҡтарҙың әжере яҙа буласаҡ. Беҙҙең бурыс – салих ғәмәлдәребеҙ гонаһтарыбыҙҙан ауырыраҡ тартһын өсөн, эштәребеҙҙе кәрәкле юҫыҡҡа йүнәлтеү.



**Аллаһү Тәғәлә бойора:**

«Аллаһ кемдең изгелек ҡыла-сағын һынап ҡарар өсөн, үлемде, йәшәйеш-тормошто бар итте».

(Мүлк сүрәһе, 2-се аят)

**Аллаһү Тәғәлә бойора:**

«(Аллаһ хозурына) кем изгелектәр менән килә, уның изгелектәре ун тапҡыр арттырылыр. Кем иһә яманлыҡтар менән килә, ул бары тик шул яманлыҡтары өсөн генә яҙа аласаҡ. Улар хаҡһыҙлыҡҡа дусар булмаясаҡ».

(Әнғәм сүрәһе, 160-сы аят)

# ТОРМОШ СӘЙӘХӘТЕ



**Юҡлыҡ**
(йәндең тәнһеҙ йәшәйеше)



**Әсә ҡарынындағы тормош**


Ерҙәге тормош


Әхирәттәге тормош

# ВАФАТ БУЛҒАН БЕРЕНСЕ КЕШЕ

Ер шары киңлектәрендә йәйрәгән океандарға йылғалар үҙенең һыуҙарын ағыҙған. Ҡарлы бүректәрен кейгән мөһәбәт тауҙар тынлыҡ һаҡлаған. Япраҡтарын елберҙәтеп, урмандар шаулаған. Әммә бер кем дә был донъяның матурлығына һоҡланмаған, ағастарҙың ботаҡтарынан һалынып төшкән төрлө һутлы емештәрҙе тәмләмәгән, йылғаларҙан саф һыуҙарҙы эсмәгән, ботаҡтарға ҡунып өҙөлөп-өҙөлөп һайраған ҡоштар моңон тыңламаған, сәскәләрҙең хуш еҫен еҫкәмгән. Ерҙә кеше булмаған. Бөтә был матурлыҡ һәм муллыҡ Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тарафынан бушҡа ғына яратылған кеүек тойола.

Һәм Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә фәрештәләргә әйтә:

– Мин Ерҙә хәлиф ҡуям.

Улар яуаплайҙар:

– Яуызлыҡ сәсеүсе һәм ҡан ҡойоусыны ҡуяһыңмы ни? Беҙ һине данлап, тәсбих әйтәбеҙ.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уларға:

– Мин һеҙгә мәғлүм булмағанды беләм.

Фәрештәләр Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә ҡаршы әйтмәйҙәр, тик үҙ-ара шыбырлашалар:

– Ысынлап та, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һәр әйбер хаҡында белә. Ул бер мәхлүкте лә файҙаһыҙ яралтмаҫ.

Һәм Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, кешене саф балсыҡтан яралтып, уға һын бирә. Тәненә Үҙенән Йән өрөп, уны терелтеп, бөтә атамаларҙы өйрәтә. Шулай итеп Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) – беренсе кеше, пәйғәмбәр һәм бөтөн кешелектең атаһы ярала.

Тәүҙә Әҙәм менән Һауа Ожмахта йәшәйҙәр, аҙаҡ ергә төшөрөләләр. Әсәбеҙ Һауаның балалары тыуа башлай. Беренсе улдарына Ҡабил исемен ҡушалар.

Бер йылдан икенсе улдары тыуа. Уны Һабил тип атайҙар. Атабыҙ Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) һәр тыуған балаһына ҡыуана, унын менән бергә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә шөкөр ҡылып, Уны данлаған кешеләр арта бит. Улар, ерҙе эшкәртеп, үҙҙәренең тауыштары менән уны йәнләндерәләр.

Иблис, Әҙәм менән Һауаны Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең тыйыуын боҙорға ҡотортоп, уларҙы Ожмахтан ҡыуҙырыуға ирешкән кеүек үк, уларҙың балаларынан был донъяла ла ҡалмаҫҡа Раббыбыҙға вәғәҙә биргән:

– Һинең Бөйөклөгөң менән ант итәм – барыһын да аҙҙырам. Һинә ихлас табыныусыларҙан, Һинең хәстәрлегең менән таҙарынғандарынан башҡаларын.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйткән:

– Шулай булыр. Хәҡиҡәттә, Тамуҡты һинең хәйләнә әйәргән һәр береһе менән тултырырға вәғәҙә итәм.

Әҙәмдең улы Ҡабил көслө, мыҡты кәүҙәле һәм ҡаты, еңмеш холоҡло була. Һабил кереһенсә, тыумыштан изге, йомшаҡ күңеле менән айырыла.

Балалары бәлиғ булғас, Әҙәм пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) уларҙы өйләндерә һәм һәр ҡайһыһына холоҡ-фиғеленә ярашлы эш билдәләй. Бирек, көслө Ҡабилды ер һөрөп эшкәртергә, сыҙамлы Һабилды һарыҡтар үрсетеп көтөргә өйрәтә.

Бер мәл Әҙәм пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) улдарын саҡырып алған да әйткән:

– Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ниғмәттәре менән күмгәненә күрә, һеҙ Уға күп шөкөрҙәр ҡылырға тейешһегеҙ. Шуға күрә тапҡан-таянғанығыҙҙың бер өлөшөн һыйға булергә кәрәк. Табышығыҙҙың өлөшөн һайлап, анау убаға

һалығыҙ. Һеҙ һалған менән мохтаж булғандар туҡланһындар.

Ҡабил менән Һабил убаға алып барырға тейеш булған ризыҡ-мөлкәт хәйер-саҙаҡа була. Ҡабил атаһының нәсихәтен ризаһыҙлыҡ менән тыңлай. «Ни өсөн мин башҡаларҙы, әлһерәп, тир түгеп тапҡан ризығым менән һыйларға тейешмен? Етмәһә мин бер файҙа ла күрмәйәсәкмен, ә зарары ап-асыҡ,»– тиеп уйлай ул. Һабилды атаһының һүҙҙәре ҡыуандыра. Атаһы бит уға яңы ғилем асты: Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә биргән нигмәттәр өсөн шөкөр ҡылып, ул башҡаларға ярҙам итәсәк. Һабил көтөүенән иң яраҡлы, иң көр һарығын һайлап алып, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең исеме менән ҡорбан салып, атаһы әйткән урынға алып бара.

Ҡабил бай йәшәй, мөлкәте күп була, әммә йөрәгендә йомартлыҡҡа, изгелеккә, мәрхәмәтлелеккә урын булмай. Ул насар ғына йәшелсә-емештәр менән башаҡтарҙы һайлай һәм Һабилдың һарығы янына һала.

Икенсе көндө ағалы-ҡустылы убаға менәләр һәм Һабилдың ҡорбаны юҡлығын күрәләр. Ә Ҡабилдың һыйы һулып, сереп, әүәлге урынында ята. Һабил Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә шөкөр ҡыла:

– Ғаләмдәр Хужаһы Аллаһҡа дан!

Ҡустыһына ҡараған Ҡабилдың күҙҙәрендә нәфрәт сағыла. Шайтан уның янына килеп тә етә – күптән көткән мәле етте бит! Ҡабилдең ҡолағына эйелеп шыбырлай:

– Үлтер уны, Ҡабил. Уның байлығы һиңә күсер. Үлтер уны, үлтер.

Шайтандың ҡотҡоһона бирелеп, Ҡабил Һабилдың ҡулынан эләктерә лә ярһып ҡысҡырып ебәрә:

– Үлтерәм!

Ағаһының сәйер ҡыланышына аптыраған Һабил һорай:

– Ни булды һиңә? Ни өсөн мине үлтерәһең?

– Атай һине нығыраҡ ярата. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә лә, ҡорбаныңды ҡабул ҡылып, һине минән өҫтөн ҡуйҙы.

Һабил асыуланмай, тыныс ҡына яуап ҡайтара:

– Яңылышаһың. Мине үлтереп, бер ни ҙә үҙгәртә алмаясаҡһың. Атай һине кисермәйәсәк. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һине язалаясаҡ. Тәүбәнә кил. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә шөкөр ҡыл. Хатаңды төҙәт һәм һинең ғәмәлдәрең ҡабул булыр.

Әммә Шайтан бер мәлгә лә Ҡабилдән ҡалмай, ҡустыһына ҡаршы ҡоторта. Ҡабил ярһыуын тота алмай ҡысҡыра:

– Һине үлтермәйенсә, миңә тыныслыҡ юҡ!

Һабил йәнә тыныс ҡына:

– Һин мине үлтерергә ҡулыңды һуҙһаң да, мин үҙемдекен күтәрмәйем. Ғаләмдәр Раббыһы Аллаһтан ҡурҡам, – тиеп яуап ҡайтара ла әйләнеп китә.

Асыуынан ярһыған Ҡабил Шайтаны менән яңғыҙ ҡала... Шайтан һис кенә лә Ҡабилды ҡалдырмай, бөтә ерҙә лә уға эйәреп, енәйәткә вәсүәсә ҡыла. Ҡабилдың ҡустыһы өнәмәгән һыҙҙаттарын матур итеп күрһәтә һәм үлтерешкә этәрә.

Төнө буйы йонсотҡан яман уйҙарынан арынырға башҡа ысул тапмайынса, ҡустыһын үлтерергә була Ҡабил. Иртәнсәк, өйөнән сығып, Һабилды эҙләп китә. Юлда ағас аҫтында ятҡан үлгән ишәктең түшкәһенә осрай. Йыртҡыс ҡоштар суҡып бөтөп барған ит ҡалдыҡтары аҫтында ишәктең һөлдәһе күренә.

Донъяның бөтә ерендә лә йәшәү өсөн көрәш бара. Ишәктең үлеме йыртҡыс ҡоштар өсөн тереклек итергә бик таман булып ҡалған. Ҡустыһының үлеме Ҡабил өсөн донъяуи уңыштар

алып киләсәк. Шундай уйҙар менән Ҡабил йәнә ишәктең үләкһәһенә ҡарай ҙа, эргәһенә барып, ергә ҡайырылып төшкән яңаҡ һөйәген ала. Шулай итеп, тәүге енәйәтсенең ҡулына беренсе үлем ҡоралы эләгә...

Ә Һабил төнө буйы ҡатыны тирәләй йөрөп сыға. Һөйгәне таңға ҡарай ике игеҙәк таба. Йонсоған Һабил, көтөүен ебәреп, йыраҡ булмаған мәмерйәгә урынлашып йоҡлап китә. Шул ваҡыт, Һабилдың көтөүен күреп, Ҡабил мәмерйәгә күҙ һала һәм уның үҙен таба. Һаҡ ҡына инә. Шашҡан Шайтан кеше өҫтөнән был донъялағы тәүге еңеүен байрам итергә әҙерләнеп көтә. Кешелек тарихында беренсе туғандар араһында ғәйепһеҙгә ҡойоласаҡ ҡан менән бер мәл генә уны айыра.

Һабилдең йоҡоһо көнсөл, бәғерһеҙ Ҡабилды ҡыуандыра ғына. Һөйәк менән бер-бер артлы киҙәнеп, йоҡлап ятҡан ҡустыһының башына һуға башлай. Ауыртыуҙарға түҙмәйенсә, Һабил уянып китә. Күҙҙәре ағаһының һынын шәйләй:

– Аһ, ағай, ни өсөн нәфсеңә бирелеп, Шайтанға буйһонаһың? Ни өсөн яңы ғына тыуған балаларҙы атайһыҙ ҡалдыраһың? Үҙеңде һәләкәткә этәрмәйһеңме ни?

Һабилдың ҡаны һөйәкте, уны ҡыҫҡан Ҡабилдың ҡулын ҡыҙартып, ер буйлап аға.

Һабил үлә. Моратына ирешкән Шайтан Ҡабилды ҡалдырып юғала. Ҡабил, уянып киткәндәй, ҡанланған ҡулына, хәрәкәтһеҙ ятҡан ҡустыһының кәүҙәһенә һиҫкәнеп ҡарай, ҡылған ғәмәленән ҡото оса. Ҡустыһы башҡаса юҡ. Бер ҡасан да насарлыҡ күрһәтмәгән, изге, йомарт, алсаҡ ҡустыһы юҡ. Көнсөллөгө уны енәйәткә этәрҙе. Ни эшләнең һин, Ҡабил? Үкенергә һуң инде.

Ел шаулауы, япраҡ ҡыштырлауы, туғайҙағы һарыҡтар баҡырыуы бөтә яҡтан да бер шаңдау булып яңғырай төҫлө:

– Ҡатил (үлтереүсе)! Туғанының ҡанын ҡойоусы! Мосолмандарҙың дошманы! Шайтандың хеҙмәтсеһе! Ҡатил! Ҡатил! Ҡатил!

Һабилдың яурынына ҡағылып, Ҡабил уны саҡыра:

– Һабил! Һабил ҡустым!

Тик тән үҙен үлтереүсегә яуап ҡайтара алмай. Ерҙә үлтерелгән беренсе кеше Һабил була.

Ҡабил ҡустыһының кәүҙәһе менән ни эшләргә белмәй. Йыртҡыс ҡоштарға йолҡҡоларға ҡалдырырғамы? Юҡ! Уйлап, уйылып китерҙәй булып, Һабилде үҙе менән алып йөрөүҙән башҡа юл тапмай. Ҡустыһын арҡаһына йөкмәй ҙә алйот кеүек китә. Хәле бөткәнсе йөрөй. Арып, кәүҙәне ергә һала һәм янына ултыра. Үкенеп, әсенеп ҡабатлай:

– Аһ, үлтермәһәм икән!

Аҙаҡ ҡабат күтәрә лә ҡустыһының кәүҙәһен йәнә әлһерәгәнсе йөрөй, ергә һалып, ял итә. Йөгөнән нисек арынырға белмәй.

Ҡапыл Ҡабил баш осонда көслө ҡанаттар ҡағыуын ишетә. Һиҫкәнеп, башын күтәрһә, тырнаҡтарына ниҙер эләктереп, башы осонда әйләнгән ҡарғаны күрә. Төшөңкөрәй биргәс, ҡарғаның икенсе ҡарға үләкһәһен эләктергәнен төҫмөрләй. Аяныслы ҡарҡылдау менән ергә төшөп, ҡарға тәпәйҙәре менән ерҙе соҡой башлай. Ерҙе соҡоп, үлгән ҡарғаны шунда төшөрөп күмеп ҡуя. Эшен тамамлағас, ҡарға ҡарҡылдауынан туҡтамайынса осоп китә.

Тетрәнгән Ҡабил ентекләп күҙәтә. Ҡаушауы менән ҡурҡыуы тағы арта. Ҡустыһының тәне ауырайыуын һиҙә. Тау йөкмәгән төҫлө тойола.

Шикләнеүҙәре тынғы бирмәй:

– Оят миңә! Ошо ҡош ҡылғанды ла эшләй алмайым. Ҡустымды ерләй алмайым. Ҡарға бит туғанын ерләне!

Ҡарғанан шулай һабаҡ ала Ҡабил. Мәрхәмәтлелек йәһәтенән ҡарғанан күпкә ҡайтыш икәнлеген аңлай.

Үкенеп, соҡор ҡаҙа башлай. Барыһы ла әҙер булғас, ҡустыһын төшөрә һәм тупраҡ менән күмә. Аҙаҡ унан ҡарайған йөҙ һәм үкенес тулы йөрәк менән китә.

Был ваҡытта Әҙәм пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм), тынысһыҙланып, балаларын эҙләй башлай. Яҡынлашып килгән атаһын күреп, Ҡабил ҡурҡа. Атаһы Һабилдың үлтерелгәнен белһә, уны кисермәйәсәк. Асырғанып, ситкә ташлана Ҡабил.

Атабыҙ Әҙәм (ғәләйһис-сәләм), ҡасып барған улын күреп, ҡаза килгәнен төшөнә. Ауыртыуҙан йөрәге ҡыҫыла. Әҙәм (ғәләйһис-сәләм), тирә-яғына ҡаранып, Һабилдың ҡанын күрә. Улын юғалтыу тетрәтә уны... Сикәләре буйлап йәштәре аға. Ул Ҡабилдың артынан ҡыҫҡыра-ҡыҫҡыра йүгерә:

– Ҡабил!.. Ҡустың менән ни эшләнең?..

Ҡабилға бөтә донъя ҡыҫҡырған кеүек тойола:

– Ҡабил!.. Ҡустың менән ни эшләнең?..

Ҡурҡыуы Ҡабилды арыраҡ ҡыуа, ул ҡасыуын дауам итә.

Әҙәм пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) уға артынан ҡыҫҡырып ҡала:

– Ҡабил! Бер ҡасан да тынғылыҡ тапмаясаҡһың. Үҙ-үҙеңә хәүеф ҡапҡаһын астың. Кит!.. Һәм бер ҡасан да күҙемә күренмә!.. Бар тирә-яҡтағы тереклек һиңә онотолорға бирмәһен!.. Яҡты донъяң ҡара гүргә әйләнһен!..



# ӘХИРӘТ ДӘҮЕРҘӘРЕ

Әхирәт – ул киләсәк тормош, ерҙәге тормош тамамланғандан һуң башланып, мәңге дауам итәсәк. Ахрызаман еткәс, бөтә үлгән кешеләр терелеүенә, бөтә ғәмәлдәренә әжерен киләһе тормошта алырына мосолман ышанырға тейеш - был Исламдың бер нигеҙе булып тора, унһыҙ кешенең иманы дөрөҫ булмай. Ысын мосолмандар – «**…** (Ий, Мөхәммәд) **улар һиңә индерелгән һәм Һиңә саҡлы индерелгәндәргә** (Ҡөрьәнгә, унан алдағы изге китаптарға) **инаналар, Әхирәт көнөнә лә ысын күңелдән ышаналар»** (Бәҡара сүрәһе, 4-се аят).

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә был донъяны беҙҙең өсөн яралтҡан, кешеләрҙе салих һәм яман ғәмәлдәренә ҡарап айырыр өсөн, һәр береһенә ғүмер биргән. Кеше был донъяны ҡалдырғанда, үҙе менән салих ғәмәлдәре һәм гонаһтарынан башҡа бер нәмә лә алмай. Шуға күрә беҙ иман менән йәшәп йән бирергә тырышырға тейешбеҙ. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бойора: **«Әй, иман килтергәндәр, Аллаһтың яҙаһынан нисек ҡурҡырға кәрәк булһа, шулай ҡурҡығыҙ. Һаҡ булығыҙ, мосолманлыҡтан башҡа хәлдә йән бирмәгеҙ!»** (Ғимран сүрәһе, 102-се аят). Ғүмере тамамланғас, кешенең Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә алдындағы был донъяла йөкмәтелгән вазифалары ла тамамлана. Ҡылған ғәмәлдәре өсөн хисап һәм әжере генә Әхирәткә ҡаласаҡ.

*Кеше йәне **Барзах тормошона** күсәсәк һәм Ҡиәмәт Көнөнә ҡәҙәр көтәсәк. Иманһыҙҙарҙың йәндәре ғазапланасаҡ. Иманлыларҙың йәндәре бәхетле буласаҡ.*

## Ҡәбер һәм Барзах тормошо

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең билгеләгән мөҙҙәте еткәс, кешенең йәне тәнен ҡалдыра. Уны ергә тапшырғас, йәне тәненә ҡайта һәм ул йоҡо хәлендә ҡала. Уға Мөнкәр менән Нәкир исемле ике фәрештә килә лә унан һорай: «Раббың кем?



**Аллаһү Тәғәлә бойора:**

«Күк ярылған саҡта, йондоҙҙар сәселеп ҡойолған ваҡытта, диңгеҙйылғалар ағып бөткәс, ҡәберҙәр аҡтарылып, аҫты-өҫкә килгәндә, һәр кем киләсәге өсөн нимә әҙерләгәнен беләсәк».

(Инфитар сүрәһе, 1-5-се сүрәләр)

Пәйғәмбәрең кем? Динең ниндәй?» Кемдәр был донъяла инанған һәм салих ғәмәлдәр ҡылған, был һорауҙарға дөрөҫ яуап бирәсәк һәм, уларға Ожмахҡа тәҙрә асылып, ундағы ниғмәттәрҙе күрәсәк. Динһеҙҙәр менән монафиҡтар һорауҙарға яуап бирә алмаясаҡ. Уларға Тамуҡҡа тәҙрә асылып, барлыҡ михнәттәрен күрәсәктәр. Аҙаҡ кеше йәне **Барзах тормошона** күсәсәк һәм Ҡиәмәт Көнөнә ҡәҙәр көтәсәк. Иманһыҙҙарҙың йәндәре ғазапланасаҡ. Иманлыларҙың йәндәре бәхетле буласаҡ.

## Ахрызаман (Ҡиәмәт Көнө)

*Ғаләмдәге тәғлимәт боҙоласаҡ. Ҡояш һүнәсәк, йондоҙҙар ҡойоласаҡ, диңгеҙҙәр, ҡайнап, бер-береһенә ҡушыласаҡ, тауҙар һәм ер ел менән ҡыуылғандай осасаҡ.*

Был донъяны Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә мөҙҙәт менән яралтҡан. Уның Үҙенә генә билгеле булған ваҡыт еткәс, был донъя юҡҡа сығасаҡ. Ахрызаман еткәнен, диаметры күк менән ер дәүмәлендәге Сорғоһона өрөп, Исрафил фәрештә (ғәләйһис-сәләм) еткерәсәк. Ул тауыш ете ҡат күктәге һәм ете ҡат ерҙәге барлыҡ мәхлүҡтәрҙең ҡотон аласаҡ. Кешеләр, ҡурҡып, төрлө яҡҡа ҡасасаҡ. Йәштәрҙең сәсе ағарасаҡ. Йорт һәм ҡырағай хайуандар, ҡоштар, бөжәктәр һәм ендәр кешеләргә йүгереп киләсәк. Исрафил фәрештә (ғәләйһис-сәләм) икенсе юлы Сорғоһона тәүгеһенә ҡарағанда мең тапҡыр көслөрәк өрәсәк. Ғаләмдәге тәртип боҙоласаҡ. Ҡояш һүнәсәк, йондоҙҙар ҡойоласаҡ, диңгеҙҙәр, ҡайнап, бер-береһенә ҡушыласаҡ, тауҙар һәм ер ел менән ҡыуылғандай осасаҡ. Барлыҡ тереклек һәләк буласаҡ. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә генә ҡаласаҡ.

## *«Ҡариға» сүрәһе*

Көрьәндә киләсәк тормош һәм Ҡиәмәт Көнө тураһында һөйләүсе 101-се сүрә бар. «Ҡариға» (Афәт) тип атала ул. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Ҡиәмәт Көнө, саҡырылмаған ҡунаҡ кеүек, ҡапыл киләсәге, уны әҙерләнеп көтөргә тейешлегебеҙ хаҡында иҫкәртә. Кемдәрҙең салих ғәмәлдәре күберәк, улар киләһе тормошта әжер-сауаптарына, юғары дәрәжәгә ирешәсәктәре хаҡында ла изге хәбәр еткерә, ә яуызлыҡ һәм ғәҙелһеҙлек тараҡкандарҙың нык үкенәсәге һәм яман ғәмәлдәре өсөн язаһын аласағы хаҡында әйтә.


سُورَةُ الْقَارِعَةِ
بِسْمِ اللَّهِ الرَّحْمَٰنِ الرَّحِيمِ
الْقَارِعَةُ ﴿١﴾ مَا الْقَارِعَةُ ﴿٢﴾ وَمَا أَدْرَاكَ مَا الْقَارِعَةُ ﴿٣﴾ يَوْمَ
يَكُونُ النَّاسُ كَالْفَرَاشِ الْمَبْثُوثِ ﴿٤﴾ وَتَكُونُ الْجِبَالُ
كَالْعِهْنِ الْمَنفُوشِ ﴿٥﴾ فَأَمَّا مَن ثَقُلَتْ مَوَازِينُهُ ﴿٦﴾ فَهُوَ فِي
عِيشَةٍ رَّاضِيَةٍ ﴿٧﴾ وَأَمَّا مَنْ خَفَّتْ مَوَازِينُهُ ﴿٨﴾ فَأُمُّهُ هَاوِيَةٌ
﴿٩﴾ وَمَا أَدْرَاكَ مَا هِيَهْ ﴿١٠﴾ نَارٌ حَامِيَةٌ ﴿١١﴾

**Рахмән һәм Рахим Аллаһ исеме менән**

**(1)** Афәт ҡапҡа ҡаға! **(2)** Нимә - ул ҡапҡа ҡағыусы афәт? (Ҡиәмәт). **(3)** Афәттең ҡасан ҡапҡа ҡағасағы тураһында һиңә кем әйтә алыр? **(4)** Ул көндө кешеләр ҡыуып таратылған күбәләктәр кеүек булыр. **(5)** Тауҙар ҙа ул көндө тетелеп бөткән йөн пәрәүеҙҙәре кеүек булыр. **(6)** Бына изгелектәр яғы ауыр баҫһа, **(7)** ул кеше рәхәт тормошта йәшәр. **(8)** Төпсәнең гонаһтар яғы ауыр баҫҡан бәндәнең урыны - хәтәр **(9)** Һәүийә исемле йәһәннәм упҡыны уға әсәһе булыр. **(10)** Нәмә ул Һәүийә, һин беләһеңме? **(11)** Ул - хәтәр ҡыҙған ут.

# ЯҘҒЫ ЙӘНЛӘНЕҮ

Ерҙә әле бер ниндәй ҙә йәшәү билгеләре тойолмай. Һыуыҡ ҡышҡы айҙар башланғас йәшеренгән ҡуңыҙ, үрмәкселәр ышыҡ урындарынан сыҡмағандар. Былтырғы үлән, ҡойолған япраҡтарҙың ерҙә эҙе лә ҡалмаған. Ағастарҙың олондары һыуыҡ һәм терекһеҙ кеүек тойола. Ҡара селтәрле яланғас ботаҡтары аша көлһыу-зәңгәр күктә йөҙгән болоттар күренә. Барыһы ла тын, өнһөҙ. Барыһы ла үлгән.

Бына яҙғы елдәр ҡыуаныслы хәбәр килтерҙе. Күктәрҙә ул шандау булып яңғыраны. Ҡояш уны ишетеп йылмайҙы. Ер йәйләп-йәйләп ҡына ҡышҡы бығауынан ысҡына башланы.

Юҡтан бар ҡылынған тормоштоң билгеләре бер-бер артлы күренә башланы. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Мәрхәмәтени ҡәҙәр сикһеҙ - ҡара, ана ул үләләрҙе нисек терелтә!

Ағастар әкренләп тормошҡа ҡайта. Ҡоро ботаҡтары йәшел япраҡ менән ябыла, хуш еҫле сәскәгә бөрөләнә, ниһайәт, емештәренең ауырлығынан бөгөлә. Һәр береһе үҙ телендә үҙҙәренә ғүмер Бүләк итеүсене данлай. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең мәрхәмәтенә ҡара - Ул ерҙе терелтә, биҙәй!

Күбәләктәргә һәр сәскә һөйөү тулы ҡоласын йәйә. Көн һайын һәр береһе үҙендә йөҙәрләгән ҡунаҡты һыйлай. Һәр береһенә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең мәрхәмәт хазинаһы - шәрбәтен тәҡдим итә. Ә күбәләктәр осоп киткәндә, ер киләһе йәнләнгәндә яңы төҫтә йылмайһын өсөн, уларҙы һыйындырған сәскәләрҙең һеркәһен – киләсәк быуын вәкилен алып китә.

Һеҙ күҙәткән сәскә менән күбәләктәрҙең дәүере ҡыҫҡа. Улар юҡҡа сыға, урындарына яңылары барлыҡҡа килә. Алдан киткәндәре һәм уларҙан аҙаҡ киләсәктәре, барлыҡ мәхлүҡтәр өҙлөкһөҙ бер тауыштан Ғүмер биреүсеһенә тәсбих әйтә. Ҡәлебтәрен Мәңгелек булған Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә төбәп: «Беҙ фани ғына,»- ти.

Һәр бер ер йәнләнгән һайын, донъяла Ҡөрьән һүҙҙәре яңғырай:

**«Ҡара һин Аллаһ Тәғәләнең ниғмәттәренә! Ҡороп, үлгән тупраҡ нисек яңынан терелә? Шик юҡтыр, Ул мәйеттәрҙе лә шулай терגеҙәсәк, Аллаһтың бар нәмәгә лә ҡөҙрәте етә»** (Рум сүрәһе, 50-се аят).



*Кемдәрҙең йәне бар, барыһы ла терeләсәк.*

## Терелеү (Бәғс)

**«Ул: «Был серегән һөйәктәргә кем йән өрә алһын?» - тип, һорау бирә. Әйт һин: «Уларҙы иң беренсе ялтҡан (Аллаһ) терелтәсәк. Ул һәр яралтылғанды асылы менән белеүселер» - тип»** (Йәсин сүрәһе, 78-79-сы аяттар). Аллаһ Сүбхәнәһү уә Тәғәлә ергә ямғыр ебәрер, барыһы ла йәнләнә башлар. Ҡеүәтле Исрафил фәрештә (ғәләйһис-сәләм) Аллаһ Сүбхәнәһү уә Тәғәләнең бойороғо буйынса Сорғоға өсөнсө мәртәбә өргәндә, кемдәрҙең йәне бар, барыһы ла терeләсәк. Аллаһ Сүбхәнәһү уә Тәғәлә кешеләргә яңы тән яралтасаҡ һәм һәр бер йән үҙ тәнен табып инәсәк. Терелгән кешеләр, үҫкән үлән кеүек ҡәберҙәренән сығып, Аллаһ Сүбхәнәһү уә Тәғәләнең алдына барып баҫып, Бөйөк Хөкөмдө көтәсәк. Беренсе булып Мөхәммәт пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи уә сәлләм) тергеҙелер һәм үҙенең 70 мең фәрештә уратып алған лайыҡлы урынына оҙатылыр.

### *Ибраһим пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм) күрһәтелгән мөғжизә*

**Ибраһим: «Йә, Раббым, мәйеттәрҙе нисек итеп терелткәнеңде миңә лә күрһәт, зинһар,» - тине. Аллаһ уға: «Әллә Миңә ышанмайһыңмы?» - тине. Ул: «Ышанам. Ләкин күңелемде тынысландырғым килә».**

Әлбиттә, Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) Аллаһтың үлгәндәрҙе терелтеүенә бер ҙә шикләнмәгән. Ныҡлы ышанған быға. Әммә ул, Аллаһтың һәр ҡоло кеүек, күңеле түрендә ышанғанын үҙ күҙҙәре менән күреп, Яралтыусыһының ҡөҙрәте менән кинәнеп, иманын арттырырыу ниәте менән мөғжизә һораған.

Аллаһ Ибраһимға (ғәләйһис-сәләм) дүрт ҡош тотоп эйәләштерергә, һуңынан уларҙы, өлөштәргә бүлеп, бутап, төрлө тауҙарға илтеп һалырға бойора. Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) әтәсте, тауисты, ҡарғаны һәм күгәрсенде ала ла Аллаһ бойорғанса эшләй. Аҙаҡ уларҙы исемдәре менән саҡыра - ҡоштарҙың бүленгән өлөштәре ҡабат бергә ҡушыла, ҡоштар терелә, юлдан яҙлыҡмайынса, пәйғәмбәрҙең саҡырыуына осоп ҡайта.

**«(Аллаһ) әйтте: «Дүрт ҡош тот. Уларҙы үҙеңә эйәләштер. (Һуңынан уларҙы һуйып, бот-саттарын айырып, һәр берһенән берәй киҫәк алып), айырым-айырым тау башына илтеп ҡуй. (Өйөңә ҡайтҡас, ҡоштарыңды) саҡыр. Улар һинең янға осоп ҡайтыр. Шуны белеп тор: Аллаһ — мотлаҡ ҡөҙрәт, хөкөм һәм хикмәт Эйәһе»** (Бәҡара сүрәһе, 260-сы аят).

Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) үҙ күҙҙәре менән Аллаһтың үлгәндәрҙе терелткәнен күрә. Сәждәгә китеп, Аллаһты данлай.



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Ул: «Был серегән һөйәктәргә кем йән өрә алһын?» - тип, һорау бирә. Әйт һин: «Уларҙы иң беренсе ялтҡан (Аллаһ) терелтәсәк. Ул һәр яралтылғанды асылы менән белеүселер» - тип».

(Йәсин сүрәһе, 78-79-сы аяттар)

Был тарихта ҡоштар, уларҙы әҙ генә ваҡыт эсендә эйәләштергән кешенең тауышын ишетеп, шул мәлдә үк янына осоп ҡайталар. Хәҡиҡәттә, кеше был ҡоштарҙың яралтыусыһы ла, хатта ысын хужаһы ла түгел. Бар ғаләмдең Яралтыусыһы һәм Хужаһы – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә. Унын саҡырыуы буйынса бөтә үлгәндәрҙең Уға ашҡыныуы шик тыуҙырыуы мөмкинме ни?

**«Ҡиәмәт көнөндә һәр ҡәүемде үҙенең өндәүсеһе менән бергә саҡырырбыҙ..»** *(Исра сүрәһе, 71-се аят)*

## Кешеләрҙе йыйыу (Хәшр)

Терелгәндән һуң, барлыҡ йән эйәләре үҙҙәренең ерҙәге тормошта ҡылған эштәре һәм ғәмәлдәре өсөн яуап бирергә Мәхшәргә йыйылаҫаҡ. «Мәхшәр» һүҙе «Бөйөк йыйылыш урыны» тиеп тәржемә ителә. Кешеләр был тормошта кемгә ышанған, кем артынан эйәргән, шулар менән бергә буласаҡ. Мосолмандар һәм динһеҙҙәр, гонаһлылар һәм монафиҡтар – барыһы ла үҙҙәренең лидерҙары һәм башлыҡтары менән йыйыласаҡ: «Ҡиәмәт көнөндә һәр ҡәүемде үҙенең өндәүсеһе менән бергә (хисап тоторға) саҡырырбыҙ...» (Исра сүрәһе, 71-се аят). Ул көндә берәүҙәрҙең йөҙө - нурлы, көләс, шат, ә икенселәрҙең ҡайғынан янған булыр. Икенселәре - динһеҙ гонаһлылар.



## Ғәмәл китабын тапшырыу

*«**Киәмәт көнөндә китап кешенең алдына (асылып) килеп ҡунасаҡ**» (Исра сүрәһе, 13-14-се аяттар).*

Һәр береһенә ерҙәге тормошта ҡылған ғәмәлдәре яҙылған китап тапшырыласаҡ. Кемдәр Ожмахҡа инә, уларға ғәмәл китаптары уң яҡтан һәм алдан, ә кемдәр Тамуҡҡа эләгә – һул яҡтан һәм арттан тапшырыласаҡ. «Һәр кешенең муйынына үҙ Ҡошон (ғәмәл китабын) сорнаныҡ. Киәмәт көнөндә китап кешенең алдына (асылып) килеп ҡунасаҡ. Үҙ дәфтәреңде уҡы. Үҙ-үҙеңде хөкөм итергә ошо ғәмәл дәфтәрең етер» (Исра сүрәһе, 13-14-се аяттар).

Әхирәттәге иҫәп-хисапта ғәҙелһеҙ-лек булмаясаҡ. Барыһына ла әжере ҡайтарыласаҡ. Яуыздар менән кәмһетелгәндәр бер-береһенә йөҙмә-йөҙ торасаҡ. Ерҙәге тормошта кемдәр кешеләргә насар мөғәмәләлә булған, уларҙың хисабы ҡыйын һәм ауыр буласаҡ. Рәнйетелгәндәргә әжере ҡайтарыласаҡ, ә яуыздар үҙҙәренең яуызлыҡтары өсөн яҙаһын аласаҡ.

## Хисап

*Киәмәт Көнө - хаҡты хаҡһыҙлыҡтан, изгене яуызлыҡтан айыра торған көн.*

Аллаһ - Бөйөк Хикмәт һәм Ғәҙеллек Эйәһе - ғәмәл китаптарын тапшырғас, кешеләрҙе хисапҡа саҡырасаҡ. Мөхәммәт пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәләм) ул Көндө кешегә биш һорау бирелгәнен әйткән:

1. **Бирелгән ғүмерен нисек ҡулланған?**
2. **Йәшлеген нисек уҙғарған?**
3. **Мөлкәтен нисек тапҡан?**
4. **Мөлкәтен нисек тотонған?**
5. **Ғилемен нисек ҡулланған?** (Тирмиҙи, Киәмәт, 1).

Кешенең ғәмәлдәре хаҡында үҙенең үк теле, ҡулдары һәм аяҡтары, телмәргә эйә булып, шаһитлыҡ ҡыласаҡ. Киәмәт Көнөндә хатта кон һайын өҫтөнән атлап йөрөгән ер ҙә сәғәт һайын кеше ғүмерендә нимә ҡылғанын еткерәсәк.

Кешеләр бөтәһе лә үҙҙәренең яҡшы һәм яман эштәрен күрәсәк. «Кем туҙан бөртөгө (зәррә) ҡәҙәрле генә изгелек ҡылған булһа, хатта шул да күренер. Кем туҙан бөртөгө (зәррә) ҡәҙәрле әшәкелек ҡылған булһа, ул да күренер» (Зилзилә сүрәһе, 6-8 аяттар).

Киәмәт Көнө – хаҡты хаҡһыҙлыҡтан, изгене яуызлыҡтан айыра торған көн. Кемдәрҙең хоҡуҡтары боҙолған, хаҡһыҙлыҡ күрһәткәндәр шуларҙан әжерҙәрен аласаҡтар. Башҡаларҙы кәмһетеүселәр изге ғәмәлдәрен үҙҙәре кәмһеткән, рәнйеткән кешеләргә бирәсәк. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәләм) әйткән:

«Әгәр кемдер икенсе кешенең намыҫына, мөлкәтенә тейеп золомлоҡ ҡылһа, алтын менән көмөш булмаған Киәмәт Көнө еткәнгә ҡәҙәр уның менән татыулашһын. Әгәр уның салих ғәмәлдәре өсөн әжер-сауаптары булһа, был сауаптарынан золомлоҡ ҡылған ҡәҙәр әжере алыныр (һәм кемде кәмһеткән шуға бирелер). Әгәр салих ғәмәлдәре булмаһа, йәберләнгән кешенең гонаһтары йөкмәтелер» (Бохари, Мәҙәлим, 10; Рикәк, 48).

**Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ әйткән:**

«Тәүҙә намаҙҙарыбыҙ өсөн яуап бирәсәкбеҙ».

(Әбү Дауыт, Саләт, 145)

*«Ҡиәмәт көнөндә Беҙ ғәҙеллек бизмәндәре ҡороп ҡуясаҡбыҙ...» (Әнбийә, 47-се аят).*

## Үлсәү (Мизан)



«Ҡиәмәт көнөндә Беҙ ғәҙеллек бизмәндәре ҡороп ҡуясаҡбыҙ. Ул Көндө инде һис бер кемгә ниндәй ҙә булһа ғәҙелһеҙлек ҡылынмаç... Иçәп-хисап өҙәр өсөн, Минең Үҙемдең дә булыуым еткән» (Әнбийә сүрәһе, 47-се аят).

Мизан һауыттарына әйтелгән «Әлхәмдүлүлләһ» һәм «Сүбхәнәлләһ» һүҙҙәребеҙ, ынтылыштарыбыҙ, тырышлыҡтарыбыҙ, Аллаһ юлындағы ауырлыҡтарыбыҙ һалынасаҡ. Хатта изге ғәмәл атҡарыу ниәте менән барған саҡта күтәрелгән саң бөртөгө лә үлсәнәсәк. Көләс йөҙ менән кешеләрҙе ҡаршы алыуыбыҙ; дуçыбыҙҙы һыйлаған шоколадыбыҙ; ауырыуға биргән бер стакан һыуыбыҙ; берәҙәк бесәй менән бүлешкән бутербродыбыҙ ҙа иçәпләнәсәк.

Мизан – ғәмәл үлсәгесе, эске асылы һәм формаһы, тик Аллаһҡа ғына билгеле ғәҙеллек Үлсәме. Беҙ күҙ алдына килтергән ябай үлсәмдәр кеүек түгел ул. Әгәр ғәмәлдәрҙе үлсәгән саҡта Мизан һауытында салих эштәре ауыр тартһа, кеше ҡотолоусылар иçәбенә инә. Әгәр насар ғәмәлдәре ауыр тартһа, өмөттәре өҙөлөр. Был хаҡта Раббыбыҙ әйтә:

Кем белә, бәлки, беҙ иғтибар бирмәгән ҙур булмаған изге ғәмәлебеҙ Мизан һауытында беҙҙең файҙаға ауыр тартыр. Шуға күрә, Ҡиәмәт Көнөндә Мизандарыбыҙ ауыр тартһын өсөн, фани донъя-ла изге ғәмәлдәрҙе арттырырға тырышыу кәрәк. Телебеҙҙә һәр саҡ шәһәҙәт, истиғфәр (тәүбә), доға һәм зекер булһын. Әйҙәгеҙ, Аллаһ риза булған бер генә кескәй ғәмәлебеҙҙән дә ситләшмәйек.

*Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беренсе булып Кәүçәр шишмәһенә барыр ҙа унда үҙенең өммәтен көтәр.*

## Кәүçәр шишмәһе

Ҡиәмәт Көнөндә бөтә пәйғәмбәрҙәрҙең дә үҙ шишмәһе була. Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Кәүçәр шишмәһе буласаҡ. Ул әйткән: «Һыу яткылығымдың бер ярын ай дауамында үтеп була. Һыуы һөттән аҡ, еçе хушбуйҙан татлыраҡ, кәсәләре күктәге йондоҙҙарҙан күберәк. Һыуын бер тәмләгән кеше бер ҡасан да башҡа сарсамаясаҡ». Пәйғәмбәребеҙ беренсе булып Кәүçәр шишмәһенә барыр ҙа унда үҙенең өммәтен көтәр.

**Изгелек ҡыл да һыуға һал -<br>халыҡ күрер, халыҡ күрмәһә, балыҡ күрер**

## Күпер (Сират)

*Сират – сәстән нәҙек, ҡылыстан үткер күпер. Икенсе осонда Ожмах урынлашҡан.*



Сират – ул Тамуҡ өҫтөнән бөтә кеше үтәсәк күпер. Сәстән нәҙек, ҡылыстан үткер күпер. Икенсе осонда Ожмах урынлашҡан. Мосолмандар имандары һәм ғәмәлдәренә ярашлы үтәсәк. Берәүҙәре йәшен тиҙлегендәй, икенселәре күперҙе йүгереп, ә өсөнсөләре бәләкәй генә аҙымдар менән үтәсәктәр. Ә ҡайһылары күперҙә имгәкләп шыласаҡ. Динһеҙҙәр һәм кемдәрҙең гонаһтары ауырыраҡ тартҡан, улар, күперҙе үтә алмайынса, Тамуҡҡа ҡолаясаҡ.

## Тамуҡ (Йәһәннәм)

«Тамуҡ әһелдәре Ожмах әһелдәренә былай тип әйтер: «Зинһар, һыу бирегеҙ, йә булмаһа Аллаһ һеҙгә биргән ризыҡтан бер аҙ ғына өлөш» (Әғраф сүрәһе, 50-се аят)

Тамуҡ - ул динһеҙҙәр, мөшриктәр, монафиҡтар, залимдар һәм гонаһлылар яза ала торған урын.

Кемдәр Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә менән Ҡиәмәт Көнөнә фани донъяла инанмаған, улар унда мәңгелеккә ҡаласаҡ. Һәм Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уларға рәхимлеген күрһәтмәйәсәк. **«Тамуҡ әһелдәре Ожмах әһелдәренә былай тип әйтер: «Зинһар, һыу бирегеҙ, йә булмаһа Аллаһ һеҙгә биргән ризыҡтан беҙгә лә бер аҙ ғына өлөш сығарығыҙ», - тип ялыныrҙар. Улар (йәннәт әһелдәре) иһә: «Аллаһ быларҙы кәферҙәргә харам ҡылды», - тип әйтәсәк»** (Әғраф сүрәһе, 50-се аят).

Гонаһлы мосолмандар (әгәр уларҙы Аллаһ ярлыҡамаһа) Тамуҡта гонаһтарына ярашлы язаһын аласаҡтар. Язаһын алғас, гонаһтарҙан таҙарынғас, Йәһәннәмдән сығып, Ожмахҡа инәсәктәр. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙҙе Үҙе аралаһын Тамуҡ Утынан!



Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уҡыған доға:

«Йә Аллаһ!
Һәр эшемде һаҡлаусы булған динемде дөрөҫ ҡыл!
Тормошомдо тәьмин иткән донъямды минең өсөн төҙөк үә хәйереле ҡыл!
Ҡайтыу урыным булған әхирәтемде лә минең өсөн хәйерле ҡыл!
Тормошомдо хәйерле генә эштәр өсөн оҙон ҡыл!
Үлемде лә минең өсөн бөтөн насарлыҡтарҙан ҡотола торған рәхәтлек итеп ҡыл!»

(Мөслим, Зикр, 71)



Ожмахта моңайыу ҙа, нәфрәт тә, дошманлыҡ та юҡ. Барыһы ла, бер-береһен яратып, хөрмәт итәсәк.

## Ожмах (Йәннәт)

Ожмах - ул гүзәл урын, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә иман килтергән ҡолдарына әжер итеп әҙерләгән. Ожмах әһелдәре мәңге йәшәй, унда үлем юҡ. Унда барыһы ла йәне теләгәнен табасаҡ.

Ожмахта ерҙәге кеүек емеш-еләктәр күп, тик улар ерҙәгегә оҡшаған ғына буласаҡ. Төрлө-төрлө һыйҙар, эсемлектәр, һарайҙар, аҫтынан йылғалар ағып ятҡан баҡсалар, беҙ күҙ алдына килтерә алмаған ниғмәттәр һәм мөғжизәләр булыр. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйтә:

**«Һәй, аяттарыбыҙға инанған мосолмандарым! Ул Көндө (Ҡиәмәттә) һеҙгә ҡурҡыныс булмаç. Һеҙгә, аяттарыма инанып, мөьмин булғандарға ҡайғы иңмәç, шатлыҡ урыны - йәннәткә һөйөнөшөп, ҡатындарығыҙ менән бергә керерһегеҙ. Уларға алтын һауыттар (менән татлы ризыҡ) һәм алтын каса-лар (менән татлы эсемлектәр) таратылыр. Күңелдәре нимә теләһә, күҙҙәренә (зәүҡи) ләззәт биреүсе нимә булһа, барыһы ла шунда булыр. Һеҙ йәннәттә мәңгегә ҡаласаҡһығыҙ. Ҡылған изгелектәрегеҙгә күрә, һеҙгә мираç итеп ҡалдырылған йәннәттер ул. Шунда һеҙҙең өсөн төрлө-төрлө емештәр бар. Улар һеҙгә ризыҡ булыр»** (Зухруф сүрәһе, 68-73-сө аяттар).

Ожмахта моңайыу ҙа, нәфрәт тә, дошманлыҡ та юҡ. Барыһы ла, бер-береһен яратып, хөрмәт итәсәк. Кешеләр бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөйәсәк, хозур урындарға урынлашып, әңгәмә ҡорасаҡ. Мөхәммәт Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: «Ожмахта кешеләрҙең йөрәктәре бер бөтөн буласаҡ һәм бер үк хистәр тоясаҡтар, үҙ-ара аңлашылмаусанлыҡтар, ыреш булмаясаҡ» (Мөслим, Йәннәт, 17).

Фани донъялағы ғәмәлдәренә ҡарап, барыһы ла йә Ожмахҡа, йә Тамуҡҡа юлланасаҡ. Ожмахҡа инеп, Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күршеһе булыу өсөн, беҙ, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бойорғанса, ғәҙел булырға, изгелек ҡылырға, яуызлыҡтан йыраҡайырға тейешбеҙ. Ул саҡта Әхирәттә Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм һөйгәндәребеҙ менән бергә буласаҡбыҙ. Ләкин изгелек ҡылмаһаҡ, ғәҙел булмаһаҡ, намаҙҙар уҡымаһаҡ, Ожмахты юғалтасаҡбыҙ. Был хәл була ҡалһа, Аллаһ һаҡлаһын, ҡайғыбыҙҙың иге-сиге булмаясаҡ.

Мосолман үҙенең фани донъялағы тормошон Ожмахҡа әйләндерә ала һәм ул осраҡта мәңгелек тормошо ла Ожмах булыр. Ғәмәлдәре һәм ҡылыҡтары менән үҙҙәренең ғүмерҙәрен күркәмләндереүселәр, Ожмахҡа лайыҡлы булыусылар:

- Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә төшөргән Ҡөрьәнде уҡып, унда ҡушылғанды үтәүселәр;

- Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өлгөлө тормошона эйәреүселәр;

- намаҙ уҡыусылар;

- ата-әсәһен хөрмәт итеүселәр һәм тыңлаусылар;

- башҡаларға ярҙам итергә яратыусылар һәм изге ғәмәл ҡылыусылар;

- ололарҙы һәм кесеһәҙҙәрҙе ҡайғыртыусылар;

- дуçлаша белеүселәр;

- кешеләргә ихлас һәм игелеклеләр;

- һәр ваҡыт хаҡты һөйләүселәр;

- хайуандарға шәфҡәтлеләр.

# КЕШЕ АҠСАҺЫ

Кластан сығып барғанда, Артурҙың кеҫәһенән аҡсаһы төшкәненә иғтибар итте Дамир. Беренсе уйы был хаҡта Артурға әйтеү булды, ләкин эстән ниҙер тотҡарланы һәм ул өндәшмәне. Синыфташтарының кластан тәнәфескә сыҡҡанын көттө лә Дамир, аҡсаны алып, кеҫәһенә йәшереп ҡуйҙы.

Ҡулына көтмәгәндә килеп эләккән аҡсаларҙы нимәгә сарыф итәсәген дә уйлап ҡуйҙы. Әммә шатлыҡлы хистәре тиҙҙән борсолоу менән алмашынды. Хәүефле уйҙар тынғы бирмәне.





Ҡыңғырау шылтыраны. Барыһы ла класҡа инде. Дамир кеҫәһендә ятҡан Артурҙың аҡсаһынан башҡа бер ни тураһында ла уйлай алманы. Уҡытыусы дәрес башланы, ә ул һаман фекерен тупларлыҡ хәлдә түгел. «Ә әгәр ул аҡсаны мин алғанды белһә? Бәлки, берәйһе күргәндер, ул башҡаларға һөйләп ҡуйһа?»- тиеп уйланы. Күберәк уйланған һайын, күңелендәге тынғылыҡ та юғала барҙы.

Өләсәһенең китабындағы хикәйә иҫенә төштө. Ислам дине өйрәтеүе буйынса, һәр кеше иңендәге ике фәрештә барлыҡ ғәмәлдәрҙе яҙып тороуы хаҡында бәйән ителә ине унда. Фани донъянан һуң, кешегә ғәмәл китаптары тапшырыласаҡ, ҡылған эштәре өсөн яуап тотасаҡ мәңгелек тормош бар - Әхирәт. Барыһы ла әжерен аласаҡ унда: яҡшы ғәмәлдәре өсөн - сауап, ә яман ғәмәлдәре өсөн - яза.

Шул хаҡта уйлай торғас, кеше аҡсаһы ятҡан Дамирҙың кеҫәһе, ҡапыл ғына ауырайып, иретелгән ҡурғаш тултырғандай, ҡайнар булып тойолдо. Инде тыныс ултыра алманы, түҙемһеҙләнеп, дәрес тамамланыуын көттө.

«Ҡасан дәрес бөтә инде? Бер ҡасан да дәрес былай оҙаҡ булғаны юҡ ине, - тиеп уйланы Дамир. - Шунда уҡ Артурға барып аҡсаһын бирәм.»

Ниһайәт, көтөп алған ҡотолдорғос ҡыңғырау шылтыраны. Дамир ярһыны. Ҡылған ҡылығынан үкенеүҙән дәрес буйы яфаланды, ғазапланды.

Синыфташына килде лә шым ғына тауыш менән әйтте:

- Артур! Был аҡсаларҙы һин үткән тәнәфестә төшөрҙөң. Мин алдым, ләкин шунда уҡ бирә алманым. Кисер мине.

Кире ҡайтарылған аҡсалар өсөн, Артур рәхмәтен белдерҙе. Ә Дамир, уны әшәке ғәмәлдән аралап, хатаһын төҙәтергә мөмкинлек биргәне өсөн, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә шөкөр итте. Өҫтөнән ауыр йөк төшкәндәй, еңеллек тойҙо һәм, тәрән итеп тын алып, йылмайып ебәрҙе. Башҡа ундай хаталар ҡылмаҫҡа үҙенә һәм Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә һүҙ бирҙе.

**М. Йәшәр Ҡандәмир**

# АЛЛАҺТЫҢ СИКҺЕҘ МӘРХӘМӘТЕ ҺӘМ ШӘФҠӘТЕ



Ниндәй генә эшкә тотонһаҡ та, «бисмилләһир-рахмәнир-рахим»ды әйтеп башлайбыҙ. «Шәфҡәтле (мәрхәмәтле) һәм рәхимле булған Аллаһ исеме менән» тигәндә аңлата ул.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә - әр-Рахмән. Ерҙәге мәхлүктәргә мәрхәмәтле. Тәҡүәлеләр менән динһеҙҙәргә, гонаһлылар менән иманлыларға айырмайынса, барыһына ла сикһеҙ ниғмәттәренән өлөш сығара, Мәрхәмәтенә бар йыһан солғанған.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә - әр-Рахим. Ҡиәмәт Көнөндә мәрхәмәтен бары тәҡүәле ҡолдарына ғына күрһәтер.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең мәрхәмәте фани донъяға ҡарағанда Әхирәттә күп тапҡырға күберәк буласаҡ. Күңелдәрендә ярма бөртөгөләй булһа ла имандары булғандар Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең рәхимлегенә ирешер һәм Ожмахҡа инер. Мөхәммәт Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

*«Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең йөҙ төрлө мәрхәмәте бар, шуларҙың береһен генә фани донъяға төшөргән. Бер-береһенә шәфҡәтлелек һәм миһырбанлыҡ хистәре күрһәткән кешеләр, ендәр, ҡоштар, ҡырағай хайуандар - былар барыһы ла Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ергә төшөрөлгән бер мәрхәмәте. Туҡһан туғыҙ өлөшөн баҡыйлыҡта Үҙенең ҡолдарына күрһәтер өсөн ҡалдырған»* (Бохари, Әҙәп, 19; Мөслим, Тәүбә, 17).

Шуны ла онотмау лазым: иманлы булып ғүмер кисергән кеше генә иман менән йән бирә ала. Юғиһә шайтан һәм нәфесебеҙ хәҡиҡәттән яҙҙырыуы мөмкин: «Йөрәгеңдә иманың бар, Аллаһ ярлыҡар. Әҙерәк Тамуҡта ыҙаларһың да ҡотолорһоң.» Ошондай ҡотҡолар менән шайтан ғибәҙәткә, салих ғәмәлдәргә ҡамасаулап, гонаһлы юлға этәрә. Кеше, үҙе лә абайламайынса, кәфер булып китеүе ихтимал. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙҙе Үҙе араһалаһын.

Икенсе яҡтан, ниндәй генә хәл булмаһын, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә мөрәжәғәт итеп, ярлыҡауын һорап, Уның мөхәббәтен юғалтыуҙан ҡурҡып һәм гонаһтар өсөн тәүбә ҡылып, мәрхәмәтенә өмөт итеп йәшәргә кәрәк.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Әйт һин: «Һәй, үҙ нәфселәре арҡаһында хаттин ашҡандар! Аллаһтың рәхмәтенән өмөт өҙмәгеҙ. Аллаһ барса гонаһлыларҙы ярлыҡаусы. Хаҡтыр, Ул Ярлыҡаусы, Мәрхәмәтле».

(Зүмәр сүрәһе, 53-сө аят)

# ӘХИРӘТКӘ ИНАНЫУҘЫҢ ҠИММӘТЕ

Барлыҡ эштәребеҙ һәм ҡылыҡтарыбыҙ өсөн Әхирәттә яуап бирәсәгебеҙгә, яҡшы ғәмәлдәребеҙ өсөн - сауап, ә насарҙарына язаһын алыуыбыҙға **инаныу уйҙарыбыҙға, хистәребеҙгә, ғәмәлдәребеҙгә яуаплылыҡ өҫтәй**. Изге ғәмәлдәр ҡылырға, ә ярамағандан арынырға тырышасаҡбыҙ.

Әгәр Әхирәткә ныҡлы инанабыҙ икән, **кешеләрҙең хоҡуҡтарын хөрмәт итәбеҙ, һанлайбыҙ**. Алама һәм рәнйешле һүҙҙәр ҡулланмайбыҙ. Кеше әйберенә рөхсәтһеҙ теймәйбеҙ. Башҡаларҙың мөлкәтенә зыян килтермәйбеҙ. Кеше ғүмеренә, намыҫына, хоҡуғына һәм ирегенә ҡул һуҙмайбыҙ. Беҙҙең яуаплылыҡҡа тапшырылған аманатты һаҡлайбыҙ. Башҡаларға һүҙе менән дә, ғәмәле менән дә зарар итмәгән ышаныслы кешеләр булырға тырышабыҙ.

**Әхирәткә инаныу нәфсенән (эгоизм) ҡотҡара.** Үҙебеҙҙән тыш башҡаларҙың нужаһы хаҡында ла уйланасаҡбыҙ, фәҡирҙәргә, мохтаждарға ярҙам итәсәкбеҙ. Үҙебеҙҙән һуң ҡаласаҡ салих ғәмәлдәр ҡылырға ынтыласаҡбыҙ.

Әхирәткә инаныу арҡаһында, вәҡыфтар (хәйриәт фонды) ойошторолған. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ризалығын өмөт итеп, хәлле мосолмандар барлыҡ мохтаждарға тәғәйенләнгән ашханалар, хәстәхәналар, етемдәргә йорттар төҙөгәндәр, ҡоҙоҡтар ҡазығандар. Хайуандарҙы ҡарар өсөн, вәҡыфтар асҡандар. Фани донъяла саҡта, мәңгелек хаҡында уйлап, саҙаҡа джәриә (өҙлөкһөҙ саҙаҡа) булырлыҡ ғәмәлдәр ҡылғандар.

Әхирәткә инаныу булғанына шөкөр итергә өйрәтә. Тир түгеп табылған ризыҡ рухи ниғмәт менән һуғарыла. Инаныуыбыҙ хәләл ризыҡ табырға һәм, бының өсөн мотлаҡ киләһе тормошта сауаптарына ирешәсәгебеҙгә өмөтләндереп, ҡайғы-хәсрәттәребеҙҙе күтәрергә көс бирә. Әхирәткә инаныу **харамдан тыйылыуға һәм хәләлде табыуға йүнәлтә**, һаранлыҡтан арыныуға, кешеләргә изгелек ҡылыуға әйҙәй.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Аллаһтан язаһынан ҡурҡҡан кешегә, Аллаh (ҡыйынлыҡтарҙан) сығыу юлын күрһәтер. Һәм уға көтөлмәгән ерҙән ризыҡ бирер».

(Талаҡ сүрәһе, 2-3)

Мөхәммәт Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иҫкәрткән: «Өммәтемдең мөфлисе (банкроты) - ул Ҡиәмәт Көнөндә ҡылынған намаҙҙары, ураҙалары, түләнгән зәкәте менән килеп, шул уҡ ваҡыт береһен әрләп, икенсене рәнйетеп, рөхсәтһеҙ өсөнсөһөнөң мөлкәтенә хужа булып, кемделер туҡмап, кемделер үлтергән кеше. Кемдәрҙе кәмһеткән шуларға үҙенең сауаптарын бирер. Сауаптары бөтһә, кәмһетелгәндәрҙең гонаһтары уға яҙылыр. Аҙаҡ ул Тамуҡҡа ташланыр».

(Мөслим, Бирр, 59)

# ҺОРАУҘАР

## Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Ерҙәге ниғмәттәр тормошоборҙа | | уның ғүмерендә көн һайын, сәғәт һайын ни менән шөғөлләнгәнен белдерер. |
| 2 | Изгелек ҡыл да һыуға һал - | | Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ҡушҡанды үтәп, намыҫлы булып, изгелек ҡылып, яуызлыҡтан ситләшергә тейешбеҙ. |
| 3 | Бурысыбыҙ - салих ғәмәлдәребеҙ гонаһтарыбыҙҙан ауырыраҡ тартһын өсөн, | | фекерҙәребеҙгә, хистәребеҙгә, ҡылыҡтарыбыҙға ҡарата яуаплылыҡ тойғоларын арттыра. |
| 4 | Кемдәр Ожмахҡа инә, ғәмәл китаптары уң яғынан һәм алдынан, | | ваҡытлыса файҙаланырға бирелгән. |
| 5 | Ҡиәмәт Көнөндә хатта кеше өҫтөнән йөрөгән ер ҙә | | һәм хәләл ризыҡҡа йүнәлтә. |
| 6 | Бөтә ғәмәлдәребеҙ өсөн яуап бирәсәгебеҙгә инаныу | | халыҡ күрер, халыҡ күрмәһә, балыҡ күрер. |
| 7 | Әхирәткә инаныу беҙҙе тыйылғандарҙан тыя | | эштәребеҙҙе кәрәкле юҫыҡҡа йүнәлтеү. |
| 8 | Ожмахҡа инеп, Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күршеһе булыу өсөн, беҙ | | ә Тамуҡҡа эләккәндәргә һул яғынан һәм артынан тапшырыла. |

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(һынап ҡарар / бар итте, һанарға / залим, өмөт өҙмәгеҙ / ярлыҡаусы, туҡтала / саҙаҡа-джәриә, хәйләле / белеүселәр).**

1. «Ул һеҙгә нимә теләһәгеҙ, шуны бирҙе. Аллаһтың ниғмәттәрен ........... ни ҡәҙәр тырышһағыҙ ҙа, осона сыға алмаҫһығыҙ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, кеше ул - ...........» (Ибраһим сүрәһе, 34-се аят).
2. «Аллаһ кемдең изгелек ҡыласағын ........... өсөн, үлемде, йәшәйеш-тормошто ...........» (Мүлк сүрәһе, 2-се аят).
3. «Ул: «Был серегән һөйәктәргә кем йән өрә алһын?» - тиеп, Беҙгә ........... һорау бирә. Әйт һин: «Уларҙы иң беренсе яралтҡан (Аллаһ) терелтәсәк. Ул һәр яралтылғанды асылы менән ............,» - тип» (Йәсин сүрәһе, 78-79-сы аяттар).
4. «Әйт һин: «Һәй, үҙ нәфселәре арҡаһында хаттин ашҡандар! Аллаһтың рәхмәтенән ............ Аллаһ барса гонаһлыларҙы ............ Хаҡтыр, Ул Ярлыҡаусы, Мәрхәмәтле» (Зүмәр сүрәһе, 53-сө аят).
5. «Кеше үлгәс, өс ғәмәленән башҡа эштәренең әжере ............ Ул да булһа: ............, файҙалы ғилем һәм уның өсөн доға ҡылыусы балалары» (Мөслим, Васыят, 14).

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1. «Бәғсү бәғдәл-мәүт» әйтелеше ни аңлата?**

а) Аллаһтан башҡа илаһ юҡ.

б) Мәрхәмәтле һәм Рәхимле булған Аллаһ исеме менән башлайым.

в) Үлгәндән һуң терелеү.

г) Бер Аллаһҡа ҡына ғибәҙәт ҡылыр кәрәк.

**2. Түбәндә килтерелгән ҡайһы әйтелеш хаталы?**

а) Гонаһлы мосолмандар мәңгелеккә Тамуҡта ҡаласаҡ.

б) Тамуҡ өҫтөнән үткән күперҙең атамаһы - Сират.

в) Сорғоноң өсөнсө тауышына кешеләр ҡабат терелә.

г) Беренсе Сорғо тауышына Ахрызаман башлана.

**3. Һаналғандарҙың ҡайһыһы Әхирәткә инаныуҙың файҙаһын сағылдырмай?**

а) Алама ғәмәлдәр ҡылырға тотҡарлай.

б) Сәлих ғәмәлдәр ҡылырға дәртләндерә.

в) Нәфсенән арындыра.

г) Ахрызаман өсөн аҡса йыйырға өйрәтә.

**4. Ниндәй раҫлау Ислам күҙлегенән ҡарағанда дөрөҫ түгел?**

а) Фани һәм баҡый донъя икеһе лә бер бөтөн булып ҡушылған, береһен дә түбәнһетергә ярамай.

б) Был тормоштан башҡа ғүмер юҡ.

в) Фани донъялағы эҙерлегебеҙгә Әхирәттәге бәхетебеҙ бәйле.

г) Фани донъяла тамамланған ҙур ваҡиғаның атамаһы - Ҡиәмәт Көнө.

## Салих ғәмәлдәрҙе мизандың уң, ә аламаларын һул кәсәһенә һалығыҙ

| | ҒӘМӘЛ | Һул | Уң |
|---|---|---|---|
| 1 | Намаҙ ҡылған. | | |
| 2 | Дуҫын йылмайып ҡаршы алған. | | |
| 3 | Синыфташының ручкаһы оҡшатып, рөхсәтһеҙ үҙенә алған. | | |
| 4 | Атаһына тупаҫ мөғәләмә иткән. | | |
| 5 | Ураҙа тотҡан. | | |
| 6 | Сәскәләргә һыу һипкән. | | |
| 7 | Өләсәһенең һауығыуын теләп доға ҡылған. | | |
| 8 | Автобуста оло кешегә урын биргән. | | |
| 9 | Аллаһтың исеме менән ашай башлаған. | | |
| 10 | Дуҫын ауыр һүҙҙәр менән үсеклəп үпкәләткән. | | |
| 11 | Өйҙө йыйыштырып, таҙалаған. | | |
| 12 | Һағыҙын мәктәп иҙәненә төкөргән. | | |
| 13 | Арыған әсәһенә сынаяҡ менән һыу алып биргән. | | |
| 14 | «Ихлас», «Фәләҡ», «Нәс» сүрәләрен ятлаған. | | |
| 15 | Эсеп бөткән һутының ҡабын ергә ташлаған. | | |
| 16 | Ҡустыһы менән һеңлеһен ҡыуандырып, улар менән уйнаған. | | |
| 17 | Үҙҙәренең йортондағы лифтҡа маркер менән һүрәт төшөрөп бөткән. | | |
| 18 | Шаярыуы менән бер дуҫын үпкәләткән. | | |
| 19 | Саҙаҡа биргән. | | |
| 20 | Берәҙәк бесәйгә типкән. | | |

*Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә барыбыҙҙың да мизандағы уң кәсәбеҙҙе Ҡиәмәт Көнөндә ауырыраҡ ҡылһын!*

# ЯУАПТАР

## Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Ерҙәге ниғмәттәр тормошобоҙҙа | 5 | уның ғүмерендә көн һайын, сәғәт һайын ни менән шөғөлләнгәнен белдерер. |
| 2 | Изгелек ҡыл да һыуға һал - | 8 | Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ҡушҡанды үтәп, намыҫлы булып, изгелек ҡылып, яуызлыҡтан ситләшергә тейешбеҙ. |
| 3 | Бурысыбыҙ - салих ғәмәлдәребеҙ гонаһтарыбыҙҙан ауырыраҡ тартһын өсөн, | 6 | фекерҙәребеҙгә, хистәребеҙгә, ҡылыҡтарыбыҙға ҡарата яуаплылыҡ тойғоларын арттыра. |
| 4 | Кемдәр Ожмахҡа инә, ғәмәл китаптары уң яғынан һәм алдынан, | 1 | ваҡытлыса файҙаланырға бирелгән. |
| 5 | Ҡиәмәт Көнөндә хатта кеше өҫтөнән йөрөгән ер ҙә | 7 | һәм хәләл ризыҡҡа йүнәлтә. |
| 6 | Бөтә ғәмәлдәребеҙ өсөн яуап бирәсәгебеҙгә инаныу | 2 | халыҡ күрер, халыҡ күрмәһә, балыҡ күрер. |
| 7 | Әхирәткә инаныу беҙҙе тыйылғандарҙан тыя | 3 | эштәребеҙҙе кәрәкле юҫыҡҡа йүнәлтеү. |
| 8 | Ожмахҡа инеп, Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күршеһе булыу өсөн, беҙ | 4 | ә Тамуҡҡа эләккәндәргә һул яғынан һәм артынан тапшырыла. |

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**1.** һанарға / залим

**2**. бар итте / ярлыҡаусы

**3**. хәйләле / белеүселер

**4**. өмөт өҙмәгеҙ / ярлыҡаусы

**5**. туҡтала / саҙаҡа-джәриә

## Ғәмәлдәрҙе мизанға һалығыҙ

| Һул | Уң |
|---|---|
| 3 | 1 |
| 4 | 2 |
| 10 | 5 |
| 12 | 6 |
| 15 | 7 |
| 17 | 8 |
| 18 | 9 |
| 20 | 11 |
| | 13 |
| | 14 |
| | 16 |
| | 19 |

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1)** В **2)** А **3)** Г **4)** Б





## ИЛАҺИ ПРОГРАММА

# ТӘҠДИР (ҠАДӘР)

- *Тәҡдир һәм уның үтәлеше (тәҡдир һәм яҙмыш)*
- *Ихтыяр (ирада)*
- *Хеҙмәт, ризыҡ һәм тәүәккәл ҡылыу*
- *Тәҡдиргә инаныуҙың ҡиммәте*
- *Пәйғәмбәребеҙҙең* r *тәҡдир һәм яҙмыш хаҡында нәсихәте*





# БЫНА ОШОНДА ЯҘЫП ҠУЯМ!

Асия бик ҡыҙыҡһыныусан бала. Тынғыһыҙ ерән башында тыуған бөтмәҫ-төкәнмәҫ һорауҙарын ҡартатаһына бирергә, ә аҙаҡ, ҡыҙыҡһынып, уның яуаптарын тыңларға ярата. Асияның ҡыҙыҡһыныусанлығы ҡартатаһына ныҡ оҡшай. Һорауҙарға яуап бирергә белеме менән тормош тәжрибәһе ярҙам итә. Ҡайһы ваҡыт шаталаҡ ейәнсәренең яуаптары ҡартатаһын элекке хәтирәләренә ҡайтара һәм ул, кисергән ваҡиғаларҙы уйлап, оҙайлы ваҡытҡа шымып ҡала.

Бер шулай ихлас әңгәмә ваҡытында ҡыҙыҡай һораны:

- Ҡартатай, ә яҙмыш нимә ул?



- Ооо! Ниндәй етди һорау бирҙең. Яҙмыш - ул кешенең ғүмерендә бирелгән тәҡдире, уны шулай уҡ атайҙар - тәҡдир. Кешегә яҙмышты Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бирә, кеше ғүмерендә нимә булыры, ә нимә булмаҫын бер Ул ғына билдәләй. Ә «яҙмыш» һүҙе ғәрәп телендә «ҡадәр» була.

Ҡартатаһы уйға батты ла күп йылдар үткән хәтирәләрҙе иҫләп йылмайып ебәрҙе:

- Һиңә бер хәтирәне һөйләйем, тыңла әле. Кескәй сағымда мин дә һинең кеүек үтә лә ҡыҙыҡһыныусан булдым. Хатта, әйтәйем әле һиңә, тыйнаҡһыҙ инем. Арыу-талыу белмәй көнө буйы урамда, йә яҡындағы туғайҙа йүгерә торғайным, ҡыуаҡлыҡтар араһында осҡан ҡоштарҙы ҡурҡыттым, йылғыр кеҫәрткеләрҙе тоттом, ағастарға мендем, тиҫтерҙәрем менән төрлө уйындар уйнаным, йә ырҙын (йәшелсә баҡсаһы) артындағы быуала балыҡ ҡармаҡланым. Үҙемдең уйындарымдан һәм мажарларымдан һуң, һәр ваҡыт өйгә йәрәхәтләнеп, бәшәкләнеп ҡайта инем. Шуға ҡарамаҫтан, мине урман аша уҙып, офоҡта юғалған алыҫтағы тауҙарға тартты. Ләкин бәләкәй инем, яңғыҙыма улай алыҫҡа йөрөргә рөхсәт юҡ.

Бәлиғ йәшенә еткән ике туған ағайым Ильяс булды, ул да минең кеүек мажаралар ҡыуыусы ине. Тауҙарға йыйынғанын белгәс, үҙе менән алыуын һораным. Ул:

- Ярай, Рәшит! Иртәгә таң менән әҙер бул! Һуңлама!

Ҡыуанысымдан әсәйемә йүгереп барып, Ильяс менән килешеүебеҙҙе һөйләнем. Атайым талапсан һәм ҡырыҫ кеше булды һәм уға мөрәжәғәт итергә баҙнат итмәнем, шуға күрә мине ебәрһен өсөн, атайым менән килешеүен әсәйемдән һораным.

Башын сайҡап, әсәйем яуапланы:

- Улым, был бик ауыр ... шулай ҙа һөйләшеп ҡарайыҡ.

Иртәгә мин быға ҡәҙәр булмаған урындарға барам, быға тиклем күтәрелмәгән тауҙарға менәм. Һорама ла минең нисек тулҡынланғанымды! Минең хаҡта атайым менән һөйләшергә әсәйем өйгә инеп китте. Сыҙамһыҙланып, ишеккә яҡынланым һәм тыңлай башланым. Эстән атайымдың асыуланған тауышы ишетелде:

- Юҡ, ҡәҙерлем! Урам буйында кешесә уйнай белмәгән баланы тауға ебәреүе мөмкинме ни?! Әгәр йылан күрһә, ҡулына урап алыр, айыуҙы осратһа, һыбай менергә тырышыр.

Бахыр әсәйем (уға Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә рәхимле булһын) тыныс ҡына һәм йомшаҡ итеп атайымдың ризалығын алырға тырышты. Күҙ алдына килтер минең хәлемде. Уларҙың һөйләшеүен иғтибарлап тыңлап, атайымдың кире ҡағыуын көттөм. Ниһайәт, ул әсәйемә әйтте:

- Бик теләй икән, барһын! Ҡара уны! Алдан әйтә алам ни менән тамамланырын. Аҙаҡ миңә «әйтмәнең» тимә. Ул менмәгән бер ағас, тикшермәгән бер өң ҡалмаясаҡ. Ахырында ул өйгә быснанып, саңланып, туналып, күгәреп һәм тырналып, шеш менән ярылған маңлай, йыртылған күлдәк һәм ыштан менән ҡайтып инәсәк.

Әсәйем шул уҡ тигеҙ һәм тыныс тауыш менән атайымды йыуатыуын дауам итте:

- Юҡ, улай булмаясаҡ. Рәшит ул ҡәҙәр аңһыҙ бала түгел дә.

Атайым ҡысҡырып ебәрҙе:

- Мотлаҡ шулай буласаҡ! Бына ошонда яҙып ҡуям!

Атайымдың ғәҙәте булды - бармаҡтары менән диуарға һүҙҙәрен яҙған кеүек ҡылана ине. Ахырында атайым тауҙарға барырға миңә рөхсәт итте. Ҡыуанысымдан һикергеләнем. Иртәгәһе көндәге мажараларҙы уйлап ләззәтләнеүҙән йоҡлай алманым. Сабырһыҙланып, таң атҡанын көтөп алдым.

Ильяс һәм уның иптәштәре менән бик иртә юлға сыҡтыҡ. Барыуы ҡыҙыҡ һәм мауыҡтырғыс булды, шуға ла еңел генә бер нисә саҡрымды үткәнебеҙҙе лә һиҙмәнек. Урман ҡуйыланғандан-ҡуйыланды. Битләүҙәр буйлап бер өҫкә мендек, бер аҫҡа төштөк, ел-дауыл ауҙарған ағастар ярҙамында тау түбәләренән аҡҡан йылға киүек һыу ҡаршылыҡтарын үттек. Йығылған ағастағы бөжәктәрҙең тормошо менән ҡыҙыҡһынып, ағастар араһында күренеп ҡалған ҡуянды һағалап, ҡарт имәндәге ҡыуышты тикшереп арығанымды ла тойманым. Был минең көнөм ине. Кейемдәрем теткеләнеп һәм сәнскәктәр менән ҡаҙалып, туҙған сәстәремә – ҡый, ау уралып, аяҡ-ҡулдарым ҡыуаҡтарҙағы сәнскеләргә һыҙырылып бөткәйне, ләкин быларҙы мин һиҙмәнем дә. Атайымдың һүҙҙәре дыуамал башымдан бөтөнләй осҡайны.

Беләһеңме, Асия, атайымдың һүҙҙәрен ҡасан иҫләнем? Кискеһен, алдыбыҙҙа ауыл һыҙаты күренеп, өйгә ҡайтып барғанда. Өҫтөмә ҡарап, атайым һүрәтләп биргәнгә ҡарағанда ла ҡурҡыныс ыраҡ булыуымды аңланым. Атайыма ни әйтәм мин хәҙер? Әсәйемә ни әйтермен? Үҙемде аҡлар өсөн, нимә уйлап табырға? Атайым менән әсәйем ҡаршы алырға сыҡҡанда, мин ҡыҙғаныс һәм төшөнкө ҡиәфәттә инем.

Атайым әсәйемә мөрәжәғәт итеп:

- Ҡара улыңа! Кисә мин һиңә ентекләп һүрәтләп бирмәнемме ни?!

Шул ваҡыт башыма иблис уйы килде, әммә атайымдың йөҙөнә ҡарап әйтергә ҡыйманым. Дөрөҫөрәге намыҫым ҡушманы.

Асия, түҙемһеҙләнеп, ҡартатаһының ҡулынан тартты:

- Ҡартатай, ә нимә әйтергә теләгәйнең?

- Мин әйтергә теләгәйнем: «Атай, бында минең ғәйебем юҡ! Һин алдан белдең минең менән ни булырын. Хатта һүҙҙәреңде бармағың менән диуарға ла яҙған киүек йөрөттөң. Нимә әйткәнеңде барыһын да ишеттем. Минең ғәйебем бар икән, ул – бары тик әсәйем менән һөйләшкәнегеҙҙе генә тыңлауым».

Асия көлөп ебәрҙе:

- Ҡартатай, был әлбиттә һинең балалыҡ һылтаныуҙарың. Атайың уларҙы һин шулай эшләһен өсөн әйтмәгән. «Шулай эшлә!»- тиеп, ул бит һине мәжбүр итмәгән, бойормаған.

Ейәнсәренең тапҡырлығына ҡартатаһы һоҡланып, маҡтап ҡуйҙы:

- Афарин, ейәнсәрем! Тап шуны аңлатырға теләгәйнем һиңә. Күрәһеңме, хәтирәләрем был мәсәләне систе.

Балаҡайым, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ғилеме сикһеҙлеген һәм барсаһын да солғап алғанын беләбеҙ. Шулай ҙа Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең киләсәк ғәмәлдәребеҙҙе белеүе, беҙҙе уны башҡарыуға мәжбүр итмәй. Ул беҙгә аң, фекер һәм нимә яҡшы, ә нимә насар икәнлеге хаҡында белем биргән. Ул беҙгә көс һәм был ғәмәлде ҡылыу йәки ҡылмау мөмкинлеген биргән. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙгә йәнә бер Мәрхәмәтен иҫкәртеп күрһәткән:

«Алама ғәмәлдәр ҡылмағыҙ! Риза түгелмен уларҙан! Әгәр ҡылһағыҙ, насар буласаҡ!»

Насар ғәмәл ҡылып, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә япһараҡ, дөрөҫ буламы? Кем ышана, әгәр шулай әйтһәк: «Ә мин нимә эшләй алам? Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә белгәнгә лә шулай эшләнем. Яҙмышымдың ҡушҡаны!» Иң беренсе быға үҙебеҙ ышанмайбыҙ. Шулай түгелме ни?

Асия ышаныслы итеп ҡысҡырып ебәрҙе:

- Эйе, шулай! - шунда уҡ өҫтәне, - Ҡартатай! Ә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, әгәр теләһә, беҙҙән насар ғәмәл ҡылдырмаҫҡа мөмкин, ләкин быны эшләмәй. Ул беҙҙе яратҡас, ниңә бындай мәрхәмәтен күрһәтмәй?

Ҡартатаһы йылмайҙы ла:

- Ейәнсәрем! Был мәрхәмәтен Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һайлау ирке биреп күрһәткән.

Әгәр Ул беҙгә күркәм сауаплы ғәмәлдәр һәм гонаһтар ҡылғанда һайлау ирке бирмәһә, ул сағында Ожмах менән Тамуҡ булмышының мәғәнәһе лә, пәйғәмбәрҙәр (ғәләйһис-сәләм) менән илаһи Китаптарҙа мохтажлыҡ булмаҫ ине. Былар барыһы ла бер-береһе менән бәйле.

Әгәр Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бик ныҡ теләгәнебеҙҙе үтәргә мөмкинлек бирмәһә, ризаһыҙланып һөйләнер инек: «Тоҡтондармы ни беҙ? Ни өсөн аяҡ-ҡулдарыбыҙ быҒаулы? Ни өсөн теләгәнебеҙҙе үтәй алмайбыҙ?»- тиеп.

Шулай, ҡәҙерлем! Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙҙе ошолай яралтҡан һәм шулай эшләгән, барыһы ла ғәмәлдәребеҙҙән тора һәм ғәмәлдәребеҙҙең яҡшыһын да, насарын да әжерһеҙ ҡалдырмаҫҡа вәғәҙә иткән. Шул инде «ҡадәр», йәғни «яҙмыш». Ә хәҙер бар, уйна.



Асия һораны:

- Ҡартатай! Бөгөн мин һинән шул тиклем күпте белдем. Мөмкинме, йәнә бер һорау ғына бирәм? «Яҡшыһы ла, насары ла Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән»,- ти әсәйем. Дөрөҫмө? Улайһа, әгәр беҙҙе Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә алама ҡылығыбыҙ өсөн яҙалай икән, ғәҙеллек ҡайҙа?

Ҡартатаһы башын сайҡаны:

- Ейәнсәрем! Хаҡ һүҙҙәр, ләкин уны дөрөҫ аңламайҙар. Тыңла әле, кешеләр нимәлә яңлышҡанын аңлатайым. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә - берҙән-бер Илаһ һәм барлыҡ ғаләмде Яралтыусы. Шулаймы?

- Әлбиттә, ҡартатай!

- Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә берҙән-бер Яралтыусы булғас, тимәк барлыҡ яҡшылыҡты һәм яманлыҡты ул ғына яралтҡан. Һәм бында һин әйтә алмайһың: «Бында беҙҙең ни ғәйеп?»- тиеп, сөнки Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә барлыҡ яҡшылыҡ менән насарлыҡты теләктәребеҙҙән сығып яралта. Беҙ йәнә һөйләшкәнгә әйләнеп ҡайттыҡ, йәғни Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә аҡыл менән фекерләү биргән. Аҙаҡ ул ике юл күрһәткән: Ожмахҡа һәм Тамуҡҡа, шуның менән беҙҙе һынауға этәргән һәм бойорған:

«Әгәр салих ғәмәл ҡылырға теләһәгеҙ, Мин быны яралттым һәм һеҙҙән риза булып ҡалдым.

Әгәр гонаһ ҡылырға теләһәгеҙ, уны ла яралттым, сөнки Мин - берҙән-бер Яралтыусы, ләкин һеҙҙең гонаһтарығыҙ менән риза була алмайым».

Хәҙер аңлайһыңмы, матурым, «Яҡшыһы ла, яманы ла Аллаһтан» һүҙҙәренең мәғәнәһен. Йәғни Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә теләктәребеҙгә, маҡсаттарыбыҙға ярашлы изгелекте лә, яуызлыҡты ла яралта. Шуға күрә ғәмәлдәребеҙ өсөн барлыҡ яуаплылыҡты беҙҙең өҫтөбөҙгә һала.

Ҡыҙыҡһындырған барлыҡ һорауҙарына яуап ишетеп, Асия тынысланды. Ҡартатаһын ҡосаҡланы һәм үҙ эштәре менән йүгерҙе. Хәҙер ул яҡшы ҡылыҡтарының мөһимлеген һәм ни өсөн насарлыҡ ҡылмаҫҡа кәрәклеген белә. Һәр бер кеше Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә алдында үҙенең һайлағаны өсөн яуап бирә.

**М. Йәшәр Ҡандәмир**

# ТӘҠДИР ҺӘМ УНЫҢ ҮТӘЛЕШЕ

| | | |
|---|---|---|
| Һыу диңгеҙ тәңгәлендә 100 градуста ҡайнай. | Һәр үҫемлектең дә үҙ мөҙҙәте. | Әхлаҡһыҙлыҡ менән ғәҙелһеҙлек идара иткән йәмғиәттә тыныслыҡ булмай. |
|  |  |  |
| Бейектән ташланған әйбер ерҙең тартым ҡануны буйынса оса. | Һәр мәхлүктең холҡо уның фитратына тура килә. | Сығымдар тигеҙһеҙ һәм ғәҙелһеҙ бүленгән йәмғиәттә, бола тыуа. |
|  |  |  |
| Һыу этәреү көсөнә эйә. | Һәр йәшәүсе үлә. | Ғилемгә һәм тәрбиәгә иғтибар бирмәгән йәмғиәт артта ҡаласаҡ. |
|  |  |  |

Был рәтте артабан да йөҙәрләгән миҫалдар менән дауам итеп булыр ине. Улар Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Йыһандағы барлыҡ мәхлүктәрҙе үҙенең махсус планы һәм проекты буйынса яралтҡанын күрһәтә.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә барыһын да кәмселекһеҙ яралтҡан һәм һәр ҡайһыһына яралтылыш маҡсатына ярашлы һыҙаттар биргән. Донъяла осраҡлы, файҙаһыҙ бер нәмә лә юҡ. Барыһы ла Уның Хикмәте һәм Ҡөҙрәте менән бара. Аллаһ Тәғәлә булған һәм буласаҡ нәмәләрҙең ваҡытын, урынын билдәләгән. Донъяла бөтә нәмә лә Аллаһтың теләге, тәҡдире буйынса булған һәм буласаҡ, йәғни бар мәхлүктәргә һалынған план атамаһы – «тәҡдир» (ҡадәр), ә был план үтәлешенең атамаһы «яҙмыш» (ҡадә).

Әйҙәгеҙ, ямғыр нисек барлыҡҡа килгәнен иҫкә төшөрәйек. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә төрлө сәбәптәр менән бәйләп, ямғыр өсөн программа билдәләгән.

- Ҡояш аҫтында һыу парға әйләнә һәм атмосфераға күтәрелә.
- Парҙың киҫәксәләре, атмосферала һыуыҡ һауа ҡатламы менән осрашып, бергә туплانып, ямғыр тамсыһына әүерелә.
- Һыу тамсылары йыйыла һәм болоттар барлыҡҡа килә.
- Һыу тамсылары эреләнеп, айырым дәүмәлгә еткәс, ерҙең тартым ҡануны буйынса айырылып, ергә яуа башлай.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ямғыр өсөн яралтылған был программаһы - уның яҙмышы. Ер яралтылғандан алып ямғыр ошо планға ярашлы яуа. Ямғыр өсөн был планды төҙөгән Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уның ҡасан һәм ҡайҙа яуырын яҡшы белә.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Шик-шөбһәлә булмағыҙ, Беҙ һәр нәмәне үҙ тәҡдире менән яралттыҡ».

(Ҡамар сүрәһе, 49-се сүрә)



# ЯҘМЫШТАН УҘМЫШ ЮҠ

Мансур дәрестәрен әҙерләп ултырған саҡта, атаһы менән әсәһенең күрше бүлмәлә үҙ-ара шым ғына нимә хаҡындалыр һөйләшкәндәрен ишетте. Буш түгел ине, әңгәмәләренә ҡолаҡ һалманы, ләкин атаһының ҡапыл асыҡ итеп ҡысҡырып әйткән бер кәлимәһе иғтибарын йәлеп итте. Атаһы әсәһенә:

- Кәләш, был Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең тәҡдире! Нимә эшләп була? Яҙмыштың ҡушҡаны!



Мансур китабын ситкә һалды һәм асыҡ ишек аша атаһына мөрәжәғәт итте:

- Атай, нимә әйттең ул?

Бүлмәгә инеп, атаһы һораны:

- Нимә? Илаһи тәҡдир хаҡында һорайһыңмы?

- Эйе, тап шул хаҡта!

- Һөйләй алам да ул, ләкин тема һинең өсөн ауырыраҡ булырмы икән?

- Эйе, атай ... Яңыраҡ күршеләгә Ләлә инәйзең дә ихатаһында кемгәләр: «Яҙмыштан уҙмыш юҡ,»- тигәнен ишеттем. Уның һүҙҙәре хаҡында уйлана башланым. Аҙаҡ китап кәштәһендә торған «Ислам энциклопедияһын» алдым да яҙмыш хаҡындағы теманы таптым. Баштан алып аҙағынаса ентекләп уҡып сыҡтым, әммә нимә тураһында яҙылғанын аңлап етмәнем.

- Бар әле, ул китапты алып кил. Ҡана, уҡыйым!

Мансур атаһына китапты алып килде. Ул иғтибарлап «тәҡдир» менән «яҙмыш» хаҡында уҡып сыҡты ла:

- Эйе, Мансур! «Тәҡдир» менән «яҙмышҡа» бынан да ябайыраҡ аңлатма юҡ һәм булыуы мөмкин дә түгел. Әммә һинең аңламауыңдың сәбәбе насар аңлатмала түгел, ә теманың ауырлығында.

- Килешәм, ләкин минең төшөнгөм килә.

- Ярай, улым. Ярҙам итеп ҡарайым, - тине лә атаһы, бер аҙ уйланып өҫтәне: - Бар әле, Мансур, диуар айһанлығын (календарь) алып кил. Һинең менән бер әҙ тикшереү эштәре үткәрәйек. Бир әле миңә! Шулай итеп, бөгөн ниндәй көн?

- Йәкшәмбе.

- Яҡшы! Ни өсөн бөгөн һин мәктәпкә барманың?

- Сөнки бөгөн йәкшәмбе. Ә йәкшәмбе көнө ял итмәйбеҙме ни?

- Ә иртәгә ниндәй көн?

- Дүшәмбе. Иртәгә мин мәктәпкә, ә һин эшкә бараһың.

- Яҡшы. Ә бөгөн һиңә мәктәпкә, ә миңә эшкә бармаҫҡа икәнен, ләкин иртәгә барырға кәрәклеген нисек белдең?

Мансур, был һорауға яуап бирә алмайынса, атаһына: «Был бөтәһенә лә билгеле түгелме ни?»- тиеп һорарға теләгән төҫлө аптырап ҡараны.

Атаһы уға ярҙамға килде:

- Ярай, икенсерәк итеп һорайым. Һин бөгөн мәктәпкә барманың, сөнки айһанлыҡта йәкшәмбе яҙылған?

- Эйе!

- Яҡшы! Ә был айһанлыҡты төҙөгән кешеләр бөгөн йәкшәмбе булырын ҡайҙан белеп яҙғандар?

- Күрәһең, ниндәйҙер иҫәпләүҙәр алып барғандар, шунан яҙғандар.

- Тә-ә-әк. Ә нисек уны иҫәпләгәндәр? Белемде ҡулланғандар, эйеме?

- Әлбиттә, атай! Бер ни белмәйенсә айһанлыҡты тултырып буламы ни?

- Йәнә бер һорау бирәм. Әгәр айһанлыҡтың бар биттәрендә лә «йәкшәмбе», «йәкшәмбе», «йәкшәмбе» һүҙе яҙылып бөтһә? Ул сағында барыһы ла эшләмәй ял итер инеме?

Мансур көлөп ебәрҙе:

- Нисек улай булһын инде? Әлбиттә, юҡ?

- Нимәгә?

- Сөнки һәр бер көн икенсеһенең артынан эйәргән һәм был тәртип боҙолмай. Әгәр айһанлыҡта һәр көн йәкшәмбе булһа, был календарь дөрөҫ булмай. Айһанлыҡ төҙөүселәр был хаҡта белергә тейеш.

- Афарин, улым! Дөрөҫ әйтәһең! Беҙ айһанлыҡта йәкшәмбе һүҙе яҙылғанға ял итмәйбеҙ. Айһанлыҡ төҙөүселәр бер йыл алдан иҫәпләп билдәләгәндәр ҙә бөгөн йәкшәмбе бу-

лырын яҙғандар. Бөгөн шул көн еткән һәм һин ял итәһең. Айһанлыҡ буйынса иртәгә дүшәмбе етә һәм һин мәктәпкә дәрестәреңә бараһың. Бына шулай, ошо айһанлыҡтағы кеүек, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тарафынан беҙҙең алдан уҡ билдәләнгән күрсәсәгебеҙ «тәҡдир» (ҡадар) тиеп атала. Көнө менән сәғәте еткәс, тәҡдир ителгән ваҡиғаның тормошҡа ашыуы - «яҙмыш»(ҡада). Теләһәң, йәнә бер миҫал килтерә алам.

- Ниндәй?

- Айһанлыҡта ҡояш ҡалҡҡан ваҡыт яҙылған. Ҡояш ысынында ла шул ваҡытта ҡалҡа. Айһанлыҡта ваҡыты яҙылғанға түгел, ә шул мәлдә ҡалҡырға ваҡыты еткәнгә ҡалҡа. Кешенең тормошо ла шуның кеүек. Шуға ла халыҡта Ләлә инәйеңдән ишеткән кеүек әйтемдәр бар: «Күрәсәген күрмәй кеше гүргә инмәй». «Яҙмыштарҙан юҡтыр уҙмыштар».

Мансур:

- Рәхмәт, атай, аңланым шикелле!

- Улым, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә аҡылыңды зирәк ҡылһын!

Атаһы сәстәренән һыйпаны ла китте. Мансур, йылмайып, китаптарына ҡабат сумды.

**Мостафа Оджәл**



## Аллаһтың ғилеме һәм тәкдир

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә хәҙерге ваҡытта ни барын да, киләсәктә ниҙәр булырын да белә. Ул - Ғилем Эйәһе. Барсаһы Уның Ғилеменә сорналған. Был донъяла бер нәмә лә Уның Ғилеменән һәм Ихтыярынан тыш ҡылынмай.

Беҙҙең ғилем менән Уның Ғилемен сағыштырып булмай. Беҙҙең белем ваҡыт һәм урын йәһәтенән сикләнгән. Үткән һәм хәҙерге ваҡиғаларҙың беҙгә килеп еткән өлөшөн генә беләбеҙ, киләсәктә ни булырын белә алмайбыҙ. Аллаһ Тәғәлә бар, барлығы һис бер затҡа мохтаж түгел. Үҙенән-үҙе бар. Барлығының башы ла ахыры ла юҡ, йәғни донъя мәхлүкәте кеүек әүәле юҡ булып, һуңынан барлыҡҡа килмәгән. Илаһи ғилем - ни булғанын, ни барын һәм ни буласағын бер юлы белеү ул. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә хәҙергене, үткәнде һәм киләсәкте, Ахырзаман менән Мәңгелек тормошто ла белә, сөнки быларҙың барыһын да ул яралтҡан.

Кеше - Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә яралтҡан Йыһандың өлөшө, башҡа мәхлүктәр кеүек үк, Уның ихтыяры менән тереклек итә. Барыһы хаҡында тулы ғилемгә Эйә булған Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уға ихтыяр бүлгән, теге йәки был ғәмәлде ҡылыу өсөн һайлау хоҡуғы биргән. Бының маҡсаты - кешене һынау, унан имтихан алыу...

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Йәшерен серҙәрҙең асҡыстары Аллаһ хозурындалыр, уларҙы Аллаһтан башҡа һис кем белмәҫ. Ул ҡоро ерҙә, диңгеҙҙә нимәләр бар, һәммәһен дә белер. Уның ихтыярынан башҡа хатта бер генә япраҡ та өҙөлөп төшмәҫ. Ул тупраҡтағы туҙан бөртөгө хәтле нәмәләрҙе лә белеп тора. Барыһы тураһында да Ләүхүл-Мәхфүҙдә яҙылып ҡуйылған».

(Әнғәм сүрәһе, 59-сы аят)

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Уға яҡшылыҡ һәм яманлыҡ ҡылырға ирекле иткәндең исеме менән әйтәм: йәнен паҡ тотҡан кеше сәғәҙәткә ирешәсәк. Выжданын кер ҡаплаған кеше, әлбиттә, хәтәр зыян күрәсәк».

(Шәмс сүрәһе, 8-10-сы аяттар)

## Кешенең ихтыяр азатлығы

Ҡылыҡтарыбыҙҙы һәм ғәмәлдәребеҙҙе ике төркөмгә бүлеп була:

1. Ихтыярыбыҙҙан тыш булған ғәмәлдәр.
2. Үҙ ихтыярыбыҙҙан сығып ҡылған ғәмәлдәр.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тәнебеҙҙе, уның ағзаларын яралтҡан һәм һәр береһенә үҙенә хас төҙөлөш менән эшмәкәрлеген тәғәйенләгән.

Ихтыярыбыҙ таралмай:

йөрәк эшмәкәрлегенә,

аш һеңдереү трактына,

ҡан йөрөшө системаһына.

Һәр бер ағза үҙенә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тарафынан йөкмәтелгән эште башҡара.







Киләһе мөмкинлектәр беҙҙең ихтыярға бәйләнмәгән. Бында беҙҙең ниндәйҙер һайлау мөмкинлеге юҡ:

ата-әсәне һайлау,

тыуған көнөңдө һайлау,

тән төҫөн һайлау.

Үҙебеҙҙең ихтыяр ирекле булмаған шарттарға яуаплы түгелбеҙ.

Әммә үҙ ихтыярыбыҙ менән ҡылған ғәмәлдәр бар. Теге йә был ғәмәлдәрҙе ихтыяр иркенән сығып ҡылыу, йә ҡылмау мөмкинлегенә эйәбеҙ. Мәҫәлән, ризыҡланыу, атлау, хеҙмәт һәм ғибәҙәт ихтыярыбыҙға бәйле. Теләгебеҙгә ҡарап, төрлө ваҡытта ашай-эсә, тора йә атлай, ултыра йә ята алабыҙ. Һөйләү йә өндәшмәү, алдашыу йә дөрөҫөн әйтеү мөмкинлегебеҙ бар. Ҡыҫҡаһы, кеше булараҡ хаҡлыҡҡа ла, хаҡһыҙлыҡҡа ла, игелеккә лә, гонаһҡа ла ихтыяр азатлығыбыҙ бар. Үҙебеҙҙең ихтыярҙан сығып һайлай алмаған ғәмәлдәр өсөн яуаплылығыбыҙ юҡ.

Ихтыяр менән яуаплылыҡты киләһе миҫалдарҙан аңлатып була.

Параллель синыфта уҡыған малай тарафынан онотолған сәғәтте йыуынғыста тапҡанһығыҙ, тиеп күҙ алдына килтерәйек. Был осраҡта һеҙҙең һайлау хоҡуғығыҙ бар:

1. «Был әйбер минеке түгел, шуға күрә мин уны ала алмайым», - тиеп, хужаһына ҡайтарып бирергә.

2. Сәғәтте үҙләштерергә.

Теге йәки был ғәмәлде һайлау хоҡуғы, был һайлау өсөн яуаплылыҡ беҙҙең өҫтә. Әгәр беренсе вариантты һайлаһаҡ, дөрөҫ һәм яҡшы ғәмәл башҡарған булабыҙ. Бындай ғәмәл өсөн Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән сауаптарын алабыҙ. Әгәр икенсе вариантты һайлаһаҡ, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең бойороғон боҙоп, гонаһ ҡылабыҙ һәм Ҡиәмәт Көнөндә уның өсөн яуап бирергә тура киләсәк.



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Аллаһ бер кемгә лә көсө етмәҫлекте йөкләмәҫ. (Кеше) изгелек ҡылһа, үҙ файҙаһына; яманлыҡ ҡылһа, үҙенең зарарына ҡылыр».

(Бақара сүрәһе, 286-сы аят)

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙҙе үҙ ихтыярыбыҙ менән ҡылған ҡылыҡтар, ғәмәлдәр һәм иманыбыҙ өсөн яуаплы иткән.

# АЛЛАҺТЫҢ ТӘҠДИРЕНӘН УНЫҢ ТӘҠДИРЕНӘ ҺЫЙЫНАМ

Бер заман мосолман дәүләтенең әмире хәлиф Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) Сүриәгә юлланған. Мәмләкәткә ингән ерҙә уны мосолман ғәскәренең башлығы Әбү Ғөбәйҙә (разыйаллаһу ғәнһү) хәрби отряды менән ҡаршы ала ла Сүриәлә тағун (чума) үләтенең ҡоторғанын еткерә.

Быны ишетеп, Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) ярандарын кәңәшмәгә йыйған. Тәүҙә ансар һәм мөһажир иҫәбенән булған аҡһаҡалдарҙы саҡырған. Күптәрҙең ғүмерен өҙгән тағун хаҡында хәбәр иткән һәм уларҙан кәңәш һораған: ҡалаға инергәме, әллә кире әйләнеп ҡайтырғамы.

Фекерҙәр айырылған. Берәүҙәре, күпме юл үтеп, маҡсатҡа еткәндә, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ихтыярына тәүәккәлләп ҡалаға инергә кәрәк, тиеп иҫәпләгән. Икенселәре ҡаршы төшкән, Мәҙинәгә ҡайтырға тәҡдим иткән. Шул саҡ Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) ярандарына әйткән:

- Иртәнсәк мин ҡайтырға сығам, һеҙ ҙә минең менән бергә ҡайтаһығыҙ.

Был һүҙҙәрҙе ишетеп, Әбү Ғөбәйҙә (разыйаллаһу ғәнһү) ҡысҡырып ебәрә:

- Әй, хәлиф! Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең тәҡдиренән ҡасаһыңмы? Әгәр Ул һеҙҙең был ауырыуҙан үлеүегеҙҙе теләһә, барыбер үләсәкһегеҙ. Әгәр быны теләмәһә, һеҙҙең менән бер ни ҙә булмаясаҡ.

Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) ҡаршы килгән:

- Эй, Әбү Ғөбәйҙә! Был һүҙҙәрҙе әйтмәһән икән.

Әбү Ғөбәйҙәне хәлиф яратҡан, хөрмәт иткән, уның менән әйтешкеһе килмәйенсә, дауам иткән:

- Эйе, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең тәҡдиренән, Уның тәҡдиренә һыйынабыҙ. Әйт әле, әгәр дөйәләрең көтөүе бер яғы күпереп үҫкән үлән менән ҡапланған, ә икенсе яғында бер ни үҫмәгән үҙәндә булһа, көтөүеңде ҡайҙа көтөр инең? Бер яғында көтһәң дә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең тәҡдиренә ярашлы ашатыр инең, икенсе яғында көтһәң дә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең тәҡдиренә ярашлы ашатыр инең. Икеһе лә тәҡдир буйынса, әммә һөҙөмтәләре төрлө.

Былдай хикмәтле яуапҡа Әбү Ғөбәйҙә (разыйаллаһу ғәнһү) бер ни әйтә алмай шымып ҡалған. Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) һөйләп бөтөп барғанда, улар янына кәңәшмә алдынан үҙ эштәре менән киткән Ғабдрахман бин Ғәүф (разыйаллаһу ғәнһү) килә. Бәхәстең сәбәбен һорай ҙа әйтә:

- Был мәсьәләгә ҡағылышлы хәҙисте беләм. Бер заман Мөхәммәт Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткәнен ишеттем: «Әгәр һеҙгә берәй ерҙә тағун үләте барғаны хаҡында хәбәр килеп етһә, бармағыҙ унда. Әгәр тағун һеҙ йәшәгән ерҙә башланһа, бер ҡайҙа ла китмәгеҙ».

Был хәҙисте ишетеп, Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) кәңәшмә һөҙөмтәһендә сығарылған ҡарар тулыһынса Пәйғәмбәрҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткәненә тап килеүенә ҡыуанып, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләне данлай. Хәҙискә һәм ҡылған ҡарарына таянып, хәлиф Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) юлдаштары менән Мәҙинәгә әйләнеп ҡайта. (Бохари, Тыбб, 1).



# ХЕҘМӘТ, РИЗЫҠ ҺӘМ АЛЛАҺҠА ТӘҮӘККӘЛ ИТЕҮ

## Хеҙмәт һәм ризыҡ

Ерҙә барыһы ла Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә билгеләгән программа буйынса тереклек итә. Һәр береһе яратылыу маҡсатына ярашлы үҙенең вазифаһын башҡара: тыуа, үҫә, нәҫелен ҡалдыра, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тарафынан тәҡдир ителгән ризығын эҙләй. Ояларынан һәр иртә асығып осҡан, кискеһен туйып ҡайтҡан ҡоштар. Эш көнө тәүге асылған сәскәнән ҡояш байығансы дауам иткән тырыш, уңған бал ҡорттары. Ғүмере буйы төҙөүсе һәм үҫемлектәрҙе зарарлы бөжәктәрҙән һаҡлаусы ҡырмыҫҡалар. Иҫәпсел һәм көслө һунарсы арыҫлан. Ҡояшта янған дала-ла ризыҡ эҙләп, яй ғына хәрәкәт итеүсе ташбаҡа. Ризыҡ табыр өсөн, әллә күпме саҡрымдар үткән диңгеҙҙәге балыҡтар. Бар тереклек даими хәрәкәттә, тырышлыҡта.

Барса мәхлүк үҙ вазифаһын үтәргә тырышҡан саҡта, һинә ялҡаулыҡ күрһәтеү килешәме? Әлбиттә, юҡ!

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә барлыҡ мәхлүктәргә ризыҡ бирәсәген әйткән, ләкин уны алыр өсөн, билдәле бер шарттарҙы үтәү кәрәк. Аллаһ тырышып эҙләгәндәргә ризығын ебәрә. Изге Ҡөрьәндә Раббыбыҙ бойора: **«Дәхи (йәнә) кешегә һис нәмә юҡтыр, мәгәр үҙе кәсеп иткән нәмәһе генәлер»** (Нәжем сүрәһе, 39-сы аят). Тимәк, килем сығанағын табыу өсөн, бәндә тырышлыҡ һалырға, Аллаһ тәҡдир иткән ниғмәтте эҙләргә тейеш.

**Аллаһ Илсеһе бойора:**

«Үҙе тир түгеп тапҡан ризыҡтан да бәрәкәтлерәк ризыҡты берәү ҙә ауыҙына ҡапмағандыр. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең илсеһе Дауыт (ғәләйһис-сәләм) үҙе эшләп тапҡан ризыҡ менән туҡланған».

(Бохари, Әнбиә, 37)



### Иҫәнлектең, балам, ҡәҙерен бел!

Ҡайғырма һин, балам, иртәгәһен уйлап,
Иҫәнһең бит, шатлан, уйна, көл!
Алда ниҙәр көтә, уныһын яҙмыш белә,
Иҫәнлектең, балам, ҡәҙерен бел!
Ҡайғырма һин, балам, аҡса етмәгәнгә,
Иҫән башҡа яйы табылыр!
Мал артынан ҡыуып, намыҫыңды юйһаң,
Ожмах ишектәре ябылыр!

Байып китһәң әгәр, ярлыларҙы уйла,
Улар мохтаж һинең ярҙамға!
Йыйған байлыҡ һәр саҡ ерҙә ҡала,
Мал кәрәкмәй ҡуҡтә әҙәмгә!
Етһә ваҡыт, кеше алып китер
Йыйған сауаптарын, намыҫын,
Донъялыҡта ҡылған изгелеген,
Хәйер-саҙаҡаның барыһын.
Ярҙам итер улар үткән саҡта,
Ҡылдан нескә сират күперен.
Онотмаһын ине һәр бер бәндә
Шул күперҙе алда үтерен!

*Нәсимә Әминева*

# ИКЕ ТАПҠЫР ЕМЕШ БИРГӘН ҮҪЕНТЕ

Ғәббәси дәүләтенең хәлифе Харун Рәшит бер бабайҙың емеш ағасы ултыртып йөрөгәнен күрә һәм уға мөрәжәғәт итә:

- Олатай, һин бик ҡартһың. Был үҫентенең емештәрен дә күрмәйәсәкһең. Нимәгә көс түгәһең?

Бабай:

- Әй, улым, улым! Беҙгә тиклем йәшәгән кешеләр ағас ултыртҡан, ә беҙ емештәрен ашайбыҙ. Киләсәк быуынға емештәре өлгөрһөн өсөн, хәҙер беҙ ултыртырға тейешбеҙ.

Бабайҙың яуабы Харун Рәшитте ҡыуандыра һәм ул уға алтын тәңкәләр менән янсыҡ бирә. Бабай йылмайып:

- Күрәһеңме, улым! Үҫентем емештәрен дә бирә башланы.

Солтан Харун Рәшиткә бабайҙың шаяртыуы оҡшай һәм ул йәнә тәңкәләр менән янсыҡ бирә. Бабай көлөп ебәрә. Харун Рәшит аптырап:

- Нимәгә көләһең һин, олатай?

- Ҡара әле, улым, бөтә үҫентеләр ҙә бер тапҡыр ғына бирә емеш, ә минеке инде икене бирҙе.



### Сәбәп һәм нәтижә

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә фани донъяны яралтҡан һәм унда буласаҡ ваҡиғаларҙы сәбәп-эҙемтә ҡанундарына буйһондорған.

Сәбәп-эҙемтә бәйләнеше - ул ике күренеш араһындағы бәйләнеш, ниндәйҙер эш-хәлде башлап ебәргән күренеш шуның эҙемтәһе, нәтижәһе булған икенсе күренеште тыуҙыра. Йәғни, икмәк үҫтереү өсөн, бойҙай сәсеү кәрәк. Еләк-емеш йыйғың килһә, баҡса үҫтерергә кәрәк. Берәй һөнәргә эйә булам тиһәң, ғилем алырға кәрәк. Ожмахҡа инер өсөн, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә инанырға, ҡушылған ғибәҙәттәрҙе ҡылырға, Илаһи бойороҡ менән тыйыуҙарҙы үтәргә кәрәк.

Кеше, фани донъяла уңышҡа өлгәшер өсөн, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә билгеләгән шарттарҙан сығып, айырым ғәмәлдәргә ихтыярын йүнәлтергә һәм тырышлығын һалырға тейеш. Кем дә кем хеҙмәт һәм Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә күндәмлекте һайлай, ул нәтижәһен мотлаҡ татыр.

Барыһы ла илаһи тәҡдир буйынса барғанына инанабыҙ, шуға ла, маҡсатыбыҙға ирешер өсөн, хәлебеҙҙән килгәндең барыһын да эшләргә, ә аҙаҡ Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән һөҙөмтәһен көтөргә кәрәк. Теләктәребеҙҙе тормошҡа ашырған саҡта, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә генә тәүәккәлләйбеҙ һәм Унан ғына ярҙам һорайбыҙ.



**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Әйт: «Раббым теләгәнҡолдарына ризыҡ бирер, теләмәгәненең ризығын кәметер. Күпме хәйер бирһәгеҙ, Аллаһ уның урынына һеҙгә ниғмәт бирер. Ризыҡландырыусыларҙың иң хә-йерлеһе - Аллаһ».

(Сәбә сүрәһе, 39-сы аят)

### Хеҙмәт һәм тәүәккәл итеү

Тәүәккәллек - маҡсатыңа ирешер өсөн, үҙеңә бәйле бар ғәмәлдәрҙе үтәп, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ихтыярына инанып эш итеү. Теләгәнеңде тормошҡа ашырыу өсөн барыһын да эшләгәс, Раббыбыҙҙың һәр ваҡыт эргәбеҙҙә, нимә эшләгәнебеҙҙе күреп, белеп торғанын иҫәбеҙҙә тоторға, шуға ла хеҙмәтебеҙҙең нәтижәһен бары Унан ғына көтөргә кәрәк.

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Аллаһтың рәхмәте менән һин уларға миһырбанлы булдың, әгәр ҙә һин уларға рәхимһеҙ булһаң, һис шикһеҙ, улар һинән ҡасыр ине. Уларҙы һин кисер инде. Уларҙың гонаһтары кисерелһен, тип доға ҡыл, улар менән кәңәшләшеп эш башла. Ныҡлы бер ҡарарға килһәң дә, Аллаһҡа тәүәккәллә. Сөнки Аллаһ Үҙенә тәүәккәлләгәндәрҙе ярата».

(Ғимран сүрәһе, 159-се аят)

Тәүәккәллек - үҙеңдән яуаплылыҡты төшөрөп, хеҙмәттән ситләшеп, барыһын да Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә япһарыу түгел. Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) килгән бер бәҙәуи, дөйәһен Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ҡарамағына тапшырып, бағанаға бәйләмәгәнен әйткән. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) кәңәш биргән: «Тәүҙә дөйәңде бәйлә, шунан ғына Хаҡҡ Тәғәләгә тәүәккәлл!» (Тирмиҙи, Ҡиәмәт, 159). Бәҙәуиҙең «тәүәккәллек»те дөрөҫ аңламауын ул аңлатып бирә.

Мәҫәлән, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ихтыярына тәүәккәлләгән фермер ваҡытында баҫыуҙы һөрөргә һәм сәсеүгә әҙерләргә бурыслы. Аҙаҡ, үҙ мәлендә баҫыуға орлоҡтар сәсергә, кәрәкһә ашларға һәм һыу һибергә тейеш. Ошоларҙың барыһынан һуң, эшеңдең нәтижәһен Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә тапшырырға һәм мул уңыш биреүен һорарға була. Эше - беҙҙән, һөҙөмтәһе - Аллаһтан.

Был ваҡиға Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) хәлифлек иткән осоро булған. Мәсеттә бер төркөм кеше, түңәрәк яһап, әңгәмәләшеп ултырған. Шул ваҡыт Ғүмәр (разыйаллаһу ғәнһү) күҙ һалған һәм уларҙан мәсеттә ултырыуҙарының сәбәбен һораған. Улар, үҙ бәҫен белеп, былай тигән:

- Әй, хәлиф! Беҙ бар эшебеҙҙе Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә тәүәккәлләүселәр. Раббыбыҙ ризыҡтарыбыҙҙы алдыбыҙға сығарып һалырына инанабыҙ.

Был һүҙҙәр хәлифте асыуландыра. Тырышып эшләп, ризыҡ табаһы урынға, үҙҙәрен ауырһындырмайынса, мәсеттә ялҡауҙарса ултырған кешеләргә мөрәжәғәт итеп әйтә:

- Һеҙ «мүтәүәккил»дәр (Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә тәүәккәлләүселәр) түгел. Киреһенсә һеҙ «мүтәәкил» (әҙергә бәҙер генә торған ялҡауҙар).



Ратмир тәүлек әйләнәһенә эшләгән мәҙрәсәлә уҡый. Тәрбиәләнеүселәр бында уҡыйҙар ҙа, йәшәйҙәр ҙә, ә ял һәм байрам көндәрендә өйҙәренә таралалар. Нисектер бер көн Ратмир иптәштәренә былай тине:

- Изге Ҡөрьәндә әйтелә: *«Ер йөҙөндә йәшәүсе һәр йән эйәһенең ризығы бары тик Аллаһ ихтыярында»* («Һуд» сүрәһе, 11:6). Шулай булғас, ниңә миңә үҙемде йонсотоп ризыҡ эҙләргә? Минең өлөшөмә ни яҙылған, шул мотлаҡ миңә буласаҡ. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә тәүәккәлләүем мөһим.

Иптәштәре уның хаталы фекерен иҫбат итергә тырышһалар ҙа, ул береһен дә тыңламаны. Иртәнге аш мәле еткәс, иптәштәре батмустар алып, ашнаҡсы тәрилкәләргә аш һалып таратып торған урынға сиратҡа теҙелеште. Тик үҙ өлөшөн барыбер алырына ышанған Ратмир ғына барыһы менән бергә сиратҡа баҫманы. Иртәнге ашты таратып бөткән ашнаҡсы ҡысҡырып һораны: «Кем үҙенең өлөшөн алманы?»

Яуап ишетелмәгәс, бөтә кәстрүлдәрен йыйып, арбаһына тейәне лә алып китте. Аш бүлмәһенә илткән ҙур тимер ишек уның артынан ныҡ итеп талғын ғына ябылды. Ә Ратмир ас ҡалды. Шул уҡ хәл төш мәлендә лә ҡабатланды. Йәнә ас ҡалған Ратмир кис килер ризығын уйлап ҡуйҙы. Кискеһен ашнаҡсы сиратта тороусыларға аш таратты ла ҡабат һораны: «Кем киске ашты ашаманы?»

Ратмир йәнә өндәшмәне. Ашнаҡсы киске аштың ҡалдыҡтарын йыя башлағас, был юлы ла ас ҡалырын аңлап, Ратмир йүтәлләне. Ашнаҡсы уға ҡараны ла етди генә һораны: «Нимә йүтәлләйһең? Туйманыңмы? Тәрилкәңде ал да кил! Йыймаҫ борон тефтели менән гарнир һалып бирәйем!»

Ратмир үҙенә тәғәйенләнгән ризыҡты алды һәм тәмләп ашай башланы, көнө буйы асыҡҡайны шул. Иптәштәре быны күреп йылмайышты. Ратмир ҙа яуап итеп йылмайҙы ла әйтте: «Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ризыҡ бирермен, тигән, уны алыр өсөн, йүгерергә булһа ла кәрәк икән!»



# АРЫҪЛАН МЕНӘН ТӨЛКӨ

Бер кеше, тыуған ауылын ҡалдырып, тамағын туйҙырырлыҡ эш эҙләп сығып китә. Юлы урман аша үтә. Ҡояш офоҡҡа тәгәрәп, кис яҡынайып, ҡараңғы төшә башлай. Был кеше урманда ҡунырға була. Йыртҡыс хайуандарҙан һаҡланып, бейек ағасҡа менә. Ботаҡтар араһында үҙенә төңгөләккә уңайлы ғына урын ҡулайлаштырып ала һәм таң атҡанын көтә башлай. Ҡолағына йөрәкте әрнетеп ыңғырашҡан тауыш салынғандай була. Кеше, аптырап, тирәяғына ҡарай, ерҙә хәлһеҙ ятҡан төлкөнө күреп ҡала. Ауырыу йәки яралы күрәһең. Уйлап ҡуя:



«Ни менән туҡлана икән был төлкө? Нимә ашап-эскән була икән?»

Ҡапыл сатырҙарҙы һындырып яҡынлашҡан тауыш ишетелә.

Ниндәйҙер ҙур йәнлек, кеше ултырған ергә туп-тура килә ята. Бына ағаслыҡтар араһынан үлгән боланды һөйрәгән арыҫлан күренә, үҙенең табышын кеше ултырған ағас төбөнә һала. Боландың түшкәһен ҡайырып, ашыҡмай ғына туйына был, аҙаҡ, тәпәйҙәрен ялап, йылға яғына юллана. Арыҫлан күҙҙән юғалғас, яралы төлкө, арыҫлан табышының ҡалдығына шыуышып килеп, ас тамағын туйҙыра. Ваҡиғаның шаһиты, хайран ҡалып, үҙ-үҙенә әйтә:

- Ҡара һин Аллаһтың мәрхәмәтенә! Аллаһ Тәғәлә хәлһеҙләнгән йәнлегенең алдына уҡ ризығын килтереп һала һәм уны ас ҡалдырмай. Ул сағында ниңә мин үҙемде таң һарыһынан ҡара төнгә ҡәҙәр эш менән бөтөрәм? Ошо төлкөгә өлөшө алдына килгән кеүек, минең дә өлөшөм үҙе килер әле. Ғөмүмән алғанда, Аллаһҡа тәүәккәлләүҙе ошо төлкөнән өйрәнеү лазым. Хәҙер миңә аулаҡ урын табырға, көтөргә кәрәк».

Таңды көтөп алып, ағастан төшә лә кеше, юлын дауам итә. Юлдан йыраҡ булмаған тауҙарҙа, мәмерйә табып, шунда урынлаша һәм ризығын көтә башлай. Өс көнөн мәмерйәлә үткәрә. Ләкин эргә-тирәлә тауыш та, тын да сыҡмай. Берәү ҙә күренмәй, берәү ҙә уға ашап-эсергә алып килмәй. Аслыҡтан иҫен юғалта. Йоҡо аралаш тыштан тауыш ишетә:

- Әй, тор, ялҡау! Аяҡ-ҡулдарың теүәл булғас, нимә ятаһың? Ауырыу төлкө хәлендә ҡалғың киләме? Бар, арыҫлан кеүек эшлә. Һинең табышыңдан ҡалғаны башҡаларға ла етһен!

Ишеткән һүҙҙәре теге кешегә хәҡиҡәтте асырға ярҙам итә. Ул мәмерйәнән сыға һәм, тырышып эшләп, үҙенә ризыҡ табыр өсөн, юлын дауам итә.

**Сәғди Ширази**



Яратҡан кешеләр менән осрашыу беҙҙе бәхетле итә. Ә уларҙан айырылыу һағышҡа һала. Был донъяла Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә кешеләрҙе шатлыҡ менән дә, һағыш менән дә һынай, был донъя - һынау урыны. Тормошобоҙҙа ошо хәҡиҡәтте иҫәбеҙҙә тотһаҡ, шатлығыбыҙ ҙа, һағышыбыҙ ҙа Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ризалығын алыу ысулы буласаҡ. Биргән ниғмәттәре өсөн, Уға шөкөр ҡылабыҙ. Башыбыҙға ҡайғы-хәсрәт төшкәндә сабырлыҡ һаҡлайбыҙ. Яҙмышыбыҙҙан ризабыҙ. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә биргәнгә шөкөр итеү беҙҙә баҫалҡылыҡ, талымһыҙлыҡ тәрбиәләй. Иманыбыҙ беҙҙе көнсөллөк, һаранлыҡ, кеше һөймәү кеүек алама сифаттарҙан арындыра. **Тәҡдиргә инаныу, Раббыбыҙ биргәненә ҡәнәғәт булыу, шөкөр итеү Уның ризалығын алырға мөмкинлек бирә.**

**Аллаһү Тәғәлә бойора:**

«Сыҙам булғандар, баштарына берәй бәлә килһә: «Беҙ - Аллаһтың бәндәләре, Аллаһ хозурына барасаҡбыҙ», - тип әйтәләр».

(Баҡара сүрәһе, 156-сы аят)

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә тәүәккәлләмәгән кеше һәр ваҡыт киләсәге өсөн борсоласаҡ. Булғанын юғалтыуҙан ҡурҡасаҡ. Байлығын онотоп, фәҡирлектән ҡурҡып йәшәйәсәк. Һаулығын онотоп, ауырыу хаҡында уйланасаҡ. Пландарын тормошҡа ашырып, маҡсатына етеү тураһында ғына фекер йөрөтәсәк. Киләсәгенән ҡурҡыуы, төн йоҡоларынан яҙҙырып, тыныслығын өҙәсәк.

**Тәҡдиргә инаныуыбыҙ Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә өмөт уята һәм киләсәгебеҙ өсөн толҡаһыҙ борсолоуҙар менән тулҡынланыуҙарҙан арындыра.** Тәҡдиргә инаныусы фани донъяла һәммәһе Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ихтыярына буйһонғанын белә. **«Аллаһ һинең башыңа берәй бәлә ебәрһә, Унан башҡа ул бәләне бер кем дә ала алмаҫ. Әгәр һиңә бер изгелек килһә, уны ла һинән тартып ала алмаҫтар. Ул Үҙе ихтыяр иткән ҡолдарына изгелек бирер һәм ярлыҡап ғәфү итер»** (Юныс сүрәһе, 107-се аят). Төрлө тормош хәлдәрендә сабырлыҡ, тотанаҡлылыҡ һәм тырышлыҡ күрһәтергә, Раббыбыҙға рәхмәтле булып, Уға өмөт бағларға, Унан ярҙам һорарға тейешбеҙ.

**Аллаһү Тәғәлә бойора:**

«Әйт һин: «Аллаһ яҙғандан башҡа нимә өҫтөбөҙгә килмәҫ. Ул - беҙҙең ярҙамсыбыҙ. Шуға күрә, һеҙ - мосолмандар, бары тик Аллаһҡа инанығыҙ», - тип».

(Тәүбә сүрәһе, 51-се аят)

# ТӘҠДИРГӘ ИНАНЫУҘЫҢ ҠИММӘТЕ



## ТӘҠДИРГӘ ИНАНЫУ

- **Һәр бер ваҡиғала хикмәт йәшеренгәнен аңларға өйрәтә.**
- **Йыһанда барыһы ла Аллаһтың ғилеме, ихтыяры һәм ҡөҙрәте менән барлыҡҡа килгәнен иҫкә төшөрә.**
- **Аллаһ биргәненә шөкөр итеү, ҡәнәғәт булыу Унның мәрхәмәтен яуларға ярҙам итә.**
- **Аллаһҡа өмөтуята һәм киләсәгебеҙ өсөн толҡаһыҙ борсолоуҙар менән тулҡынланыуҙарҙан арындыра.**

Тормошобоҙҙа булған ваҡиғалар хаҡында, үҙебеҙҙең сикләнгән белемебеҙҙе һәм мөмкинлегебеҙҙе файҙаланып, фекер йөрөтөргә тырышабыҙ. Ләкин ваҡиғаларҙың беҙгә күренгән һәм аңлашылған яғынан тыш беҙ күрә һәм аңлай алмаған йәшерен яғы ла бар. Уларҙың асылы бер Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә генә билгеле. Тәҡдиргә инаныуыбыҙ ваҡиғаларҙың бөтәһен дә белеп торған һәм барыһына ла ҡөҙрәтле булған Хаҡҡ Тәғәләбеҙ ихтыяры менән барғанлығына төшөндөрә. **Был инаныу һәр ваҡиғала тәрән хикмәт йәшерелгәнен аңлата.**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Шулай ҙа була: һеҙ берәй нәмәнән нәфрәтләнәһегеҙ, ә ул һеҙҙең өсөн файҙалы; ҡайһы саҡ һеҙ үҙегеҙгә зарарлы булғандарҙы ла яратаһығыҙ. Быларҙың барыһын да Аллаһ белә, һеҙ белмәйһегеҙ».

(Баҡара сүрәһе, 216-се аят)

Йайлап донъяға ҡарашыбыҙ үҙгәрә. Ваҡиғаларҙы башҡаса баһалай башлайбыҙ. Мәҫәлән, ҡумтаға бик оҙаҡ аҡса йыйҙығыҙ һәм бик яҡшы велосипед һатып алдығыҙ, ти. Унның менән әсәйегеҙҙең йомошон йомошлар өсөн магазинға, ниндәйҙер фәһем алырлыҡ сәйәхәткә юлланырға һәм шул рәүешле үҙеңә сауап алырға мөмкин, әммә шул уҡ әйберҙе, дуҫтарығыҙ алдында үҙегеҙҙе өҫтөнөрәк тотоп, ләззәтләнер, маҡтаныр, ғорурланыр өсөн дә файҙалана алаһығыҙ. Ләкин Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тәкәбберҙәрҙе һәм эреләнеп маһайғандарҙы яратмай.

Шуға күрә Аллаһ Субхәнәһү үә Тәғәләнән бәрәкәтле, хәйерле нәмәләрҙе һорарға кәрәк. Яфа, ғазап, һыҙланыу кеүек ҡабул ителгән баш ауыртыуы, температура, бөлки, беҙҙе тағы ла ҡатыраҡ ауырыуҙарҙан аралайҙыр. Беҙҙең менән булған бәлә-ҡаза, бөлки, күпкә ҡатыраҡ бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалайҙыр. Беҙҙә барлыҡ ваҡиғаларға шундай мөнәсәбәт тыуһа, Яралтыусыбыҙға ихлас күңелдән тәшәккер (рәхмәт хистәре) кисерәбеҙ һәм, бынан да ауырыраҡ һынауҙарҙан аралағаны өсөн, тәсбих әйтәбеҙ.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә сикһеҙ ғилем һәм ҡөҙрәт Эйәһе, ғаләмдә тәртип, үлсәү, тигеҙлек урынлаштырыусы. Ул ғәләмдә булған бөтөн ваҡиғалар һәм күренештәр хаҡында белеп тора. Барыһы ла Уның ихтыяры һәм ҡөҙрәте менән башҡарыла. Ерҙең тартыу ҡануны (закон притяжения) һәм һыуҙың этәреү көсө ҡануны үҙгәрмәгән кеүек, донъяны яралтҡан көндән алып ҡояш та, көнсығыштан ҡалҡып, көнбайышта байый. Ғаләмдә урынлаштырылған Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең был ҡанундары беҙҙең өсөн ҙур ниғмәт. Донъяның ошо физик, биологик һәм социаль ҡанундарға буйһоноуы арҡаһында ерҙә кешеләр уңайлы һәм бәхетле йәшәһен өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған. **Тәҡдиргә инаныуыбыҙ, ғаләмдә барыһы ла Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ғилеме, ихтыяры һәм ҡөҙрәте менән яралтылғанын иҫкәртә.**

**Аллаһу Тәғәлә бойора:**

«Әйт: «Әгәр Аллаһ Ҡиәмәт көнөнә саҡлы өҫтөгөҙҙә төн ҡараңғылығын тота ҡалһа, Аллаһтан тыш һеҙгә яҡтылыҡ килтерәсәк башҡа тәңре булырмы? (Булһа, күрһәтегеҙ.) Әле шунан һуңда һеҙ ҡолаҡ һалмайһығыҙмы?» — тип. «Әйт: «Әгәр Аллаһ Ҡиәмәткә ҡәҙәр өҫтөгөҙҙә яҡтылыҡ тота ҡалһа, истирәхәт (ял, йоҡо) өсөн төндө Аллаһтан башҡа кем килтерәсәк? (Булһа, күрһәтегеҙ.) Әле шунан һуң да (Хәҡиҡәтте) күрмәҫһегеҙме? — тип. Рәхмәте менән, Ул һеҙ тыныслап ял итһен өсөн, истирәхәт ҡылыр өсөн төндө, ниғмәттәр ҡаҙаныр өсөн көндө яралтты. Моғайын, шөкөр итерһегеҙ!»

(Ҡасас сүрәһе, 71-73-сө аяттар)



# ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘҘЕҢ r ТӘҠДИР ҺӘМ ЯҘМЫШ ХАҠЫНДА НӘСИХӘТЕ

Ни генә булмаһын, һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тыныслыҡ һаҡлаған, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә тәүәкәлләп, Уның тәҡдиренә риза булған. Ул һәр ваҡыт әйткән: *«Хәсбунәллааһу үә ниғмәл үәкил»* (ҡурсалаусы булараҡ беҙгә Аллаһ етә). Һәр ваҡиғаны Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең мәрхәмәтен яулау мөмкинлеге итеп ҡабул иткән. Шуға ла әйткән:

*«Мөьминдең хәле ни ҡәҙәр ғәжәп һәм ғүзәл, сөнки уның менән нимә генә булһа ла был яҡшылыҡҡа сәбәп. Тик мөьмингә генә шундай сифаттар хас: мөьминде шатландырырҙай бер хәл булһа, ул рәхмәтле, һәм был уның өсөн сауап булыр. Әгәр уға бәлә килһә, ул түҙемлелек күрһәтә, был да уның өсөн сауап булыр»* (Мөслим, Зөһд, 64).

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡарап үҫтергән һәм иртә йәштән унан исламды өйрәнгән ике туған ҡустыһы ибн Ғәббәс (разыйаллаһу ғәнһү) иҫләр булған:

*«Бер заман һыбай килеш Рәсүлуллаһ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) артында ултырғанымда, ул миңә әйтте: «Әй, ҡустым, һиңә бер әҙ фәһем өйрәтәм: Аллаһты иҫеңдә һаҡла (тот), Ул да һине һаҡлар (ҡурсалар); Аллаһҡа зикерҙә бул һәм Ул да һинең менән булыр. Иҫән-һау сағыңда Аллаһҡа шөкөр итһәң, ҡайғы-хәсрәтеңдә Ул да һине онотмаҫ. Берәй нәмәне теләһәң, Аллаһтан һора; ярҙам һорарға теләһәң, Аллаһтан һора. Белеп ҡуй: әгәр барыһы ла (кешеләр менән ендәр) бергә йыйылып, һиңә файҙа килтерергә теләһә, улар һиңә Аллаһ тәҡдир иткән ҡәҙәр генә ярҙам итә алыр; әгәр һиңә зыян итергә йыйылһалар, тик Аллаһ тәҡдир иткән ҡәҙәр генә зыян итерҙәр, сөнки Ләүхүл Мәхфүздең ҡаурыйҙары күтәрелгән, битттәрендәге яҙыуының ҡараһы кипкән. Бел:*



*һиңә ҡағылмай урап үткәне, һиңә ҡағылмаҫҡа, ә ҡағылғаны урап үтмәҫкә тейеш булған. Шулай уҡ бел: сабырлыҡ еңеүгә илтә, ҡайғынан һуң - шатлыҡ, ауырлыҡтарҙан һуң, еңеллек килә»* (Тирмиҙи, Ҡиәмәт, 59).

Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ваҡиғаларға йоғонто яһай алмаған буш һүҙҙәрҙән һәр ваҡыт ҡасҡан. Сәхәбәләренә ошондай кәңәш биргән: *«Көслө мөьмин (Аллаһ алдында) көсһөҙ мөьмингә ҡарағанда яҡшыраҡ та, һөйкөмлөрәк тә. Шулай ҙа уларҙың икеһендә лә бәрәкәт бар. Бәрәкәткә эйә булырға тырыш. Ярҙамды Аллаһтан һора һәм бер ҡасан да көсһөҙлөгөңдө күрһәтмә. Үҙең менән берәй хәл булһа, бошонма һәм: «Эх, шулай йәки былай эшләһәм ине,» – тип зарланма. «Был Аллаһтың тәҡдире! Нисек теләй, шулай эшләй!» - тиеп әйт. Сөнки «мин былай, йә тегеләй эшләр инем» кеүек һүҙҙәр, шайтанды ҡыуандырған ғәмәлдәрҙең ҡапҡаһын аса»* (Мөслим, Ҡадәр, 34).

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ауырыу, михнәт һәм ҡайғыларҙың гонаһтар өсөн кәффәрәт булыуы, кешене паклауы хаҡында әйткән. Һынауҙар мәлендә сабырлыҡ күрһәтәтеүселәрҙең Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә алдында дәрәжәһе, әжер-сауаптары артыуы хаҡында ла әйтеп ҡыуандырған: *«Мосолман ниндәй хәлгә генә тарымаһын: йонсоумы, ауырыуымы ул, хафа, һағыш, күңелһеҙлек, ҡайғы эсендәме, хатта сәнскенең энәһе сәнселһә лә, Раббыбыҙ Аллаһ быны өсөн уның берәй гонаһын мотлаҡ ярлыҡар»* (Бохари, әл-Мәрда, 3).

Яҙмыш, тәүәккәлләү һәм сабыр итеү бер ҙә генә һуҡыр буйһоноу һәм өмөтһөҙлөктө аңлатмай. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) берәй хәлдең хәйерһеҙ тамамын алдан күрһә, быны туктатыр өсөн бөтөн мөмкинлектәрҙе ҡулланыр булған. Хәленән килгәндең барыһын да эшләгәндән һуң, һөҙөмтәһен Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән көткән һәм тәҡдирен буйһоноп ҡабул иткән.

Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм сәхәбәләренең тәҡдирҙе ҡабул итеүгә һәм Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә тәүәккәлләүе кеүек күркәм миҫалды Хәндәк (соҡор янында) һуғышы ваҡиғаларында күрергә була. Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөшриктәрҙең Мәҙинәгә һөжүм итергә йыйыныуы хаҡында хәбәр ала. Ҡаланы дошмандарҙан һаҡлау тураһында ҡарар сығарыр өсөн, кәңәшмәгә сәхәбәләрен йыя. Сығышы менән Ирандан булған Сәлмән Фәриси (раҙыйаллаһу ғәнһү) Мәҙинәне уратып соҡор ҡаҙып сығырға тәҡдим итә. Ул ваҡыттағы ғәрәптәргә был бөтөнләй таныш булмаған тактика икән. Бик ауыр эш була ул. Рәсүлуллаһ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләре менән бергә соҡор ҡаҙыуҙа ҡатнаша. Көн һыуыҡ була, ашарға булмай. Асығыуын тойоп йонсомаҫ өсөн, Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) эсенә таш бәйләп ала.

Мәҙинәне дошмандарҙың көслө ғәскәре уратып алырын белһә лә, Хаҡ Тәғәләгә өмөтөн өҙмәй. Хәленән килгән бөтә мөмкинлектәрҙе лә ҡулланғандан һуң, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә ярҙам һәм еңеү һорап мөрәжәғәт итә. Ҙур ғәскәре менән мөшриктәр Мәҙинәгә килә, әммә ҡаланы алыр өсөн соҡорҙо үтә алмай. Оҙайлы көндәр дауам иткән ҡамауҙан һуң, Аллаһтан ярҙам килә. Көслө ғәрәсәт күтәрелеп, мөшриктәрҙең сатырҙарын ҡолатып, осороп алып китә.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бер ҡасан да Үҙенә өмөт бағлаған мосолмандарҙың тырышлығын, доғаларын яуапһыҙ ҡалдырмай. Пәйғәмбәребеҙ Хәндәк һуғышындағы һәм башҡа донъяуи мәсьәләләрҙәге һынауҙар мәлендә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә инаныуы, сабырлығы, тырышлығы, көрәше, өмөтө Ахрызаманға ҡәҙәр бөтә мосолмандарға гүзәл өлгө булып тора.

Бәра ибн Әҙиб (раҙыйаллаһу ғәнһү) исемле йәш бер сәхәбә Пәйғәмбәрҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нык яратҡан. Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Бәраны ошо доғаға өйрәткән, көн һайын йоҡлар алдынан уны уҡырға кәңәш иткән:

«Йәә Аллаһ! Үҙемде тулыһынса һиңә тапшырҙым, йөҙөмдө һиңә борҙом, һинең бойороғоңа буйһондом, һинән ҡурсалау эҙләйем. Ынтылышым һиңә генә, ҡурҡыуым да һинән генә, тәүәккәлләүем дә һиңә һәм ҡайтыуым да һиңә. Һин беҙгә ебәргән Китабыңа һәм Пәйғәмбәреңә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) инандым».

(Бохари, Дәғүәт, 6).



# ҺОРАУҘАР

## Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Киләсәгебеҙ хаҡында буш борсолоуҙарҙан һәм тулҡынланыуҙарҙан | | ғәмәлебеҙ, инаныуыбыҙ өсөн Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә яуаплы иткән. |
| 2 | Фани донъяла Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә кешеләрҙе шатлыҡ һәм ҡайғы менән һынай, | | уға һалған программаға ярашлы тереклек итә. |
| 3 | Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бер үк ваҡытта хәҙергене, үткәнде, киләсәкте, Ахрызаманды, мәңгелекте белеп тора, сөнки | | тәҡдиргә инаныу арындыра. |
| 4 | Үҙе тир түгеп тапҡанына ҡарағанда, | | тәҡдиргә инаныуыбыҙ төшөндөрә. |
| 5 | Кеше ынтылышына ҡарап | | Ул быларҙың барыһын да яралтҡан һәм билгеләгән. |
| 6 | Һәр бер ваҡиғала тәрән хикмәт барлығын | | был донъя бит - һынау урыны. |
| 7 | Үҙебеҙҙең ихтыяр менән ҡылынған | | бирәү ҙә хәйерлерәк ризыҡ ҡапмағандыр. |
| 8 | Ерҙәге бар мәхлүктәр Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә | | теләгәнен алыр. |

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1.** I. «Ысын, Беҙ һәр нәмәне үҙ тәҡдире менән яралттыҡ» (Ҡамар сүрәһе, 49-сы аят).

II. «Ҡояш менән Ай теүәл үлсәп хисапланғанса хәрәкәт итә» (Рахман сүрәһе, 5-се аят).

**Түбәндә килтерелгән фекерҙәрҙең ҡайһыһы аяттарҙың мәғәнәһенә ҡаршы килә?**

А. Барыһы ла Аллаһ тарафынан яратылған.

Б. Ҡояш менән Ай билдәләнгән траектория буйынса бара.

В. Йыһан осраҡлы буталсыҡ процестар теҙмәһе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән.

Г. Йыһандағы барлыҡ мәхлүктәр билдәләнгән тәртип-ҡанундарға буйһона.

**2.** I. Үҙенең көсөнән килгәнсә эшләй һәм Аллаһ биргәненә ҡәнәғәт.

II. Аллаһтың тәҡдиренә һәм үҙе һис бер ни ҙә үҙгәртә алмауына инана.

III. Уңышһыҙлыҡтар, бәхетһеҙлектәр мәлендә өмөтөн өҙмәй, күп эшләй һәм сыҙамлылыҡ күрһәтә.

**Тәҡдиргә инанған кешегә ниндәй сифат хас?**

А. I-II

Б. I-III

В. II-III

Г. I-II-III

**3. Үҙебеҙ нимә һайлай алабыҙ?**

А. Тыуған көндө.

Б. Ата-әсәйҙе.

В. Дуҫтарҙы.

Г. Ҡан төркөмөн.

**4.** *«Кеше, маҡсатына ирешер өсөн, мөмкинлегенән килгәндең һәм үҙенә бәйле булғандың барыһын да үтәгәндән һуң, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә инаныуы һәм өмөтләнеүе - ул ...»*

**Түбәндә килтерелгән фекерҙәрҙең ҡайһыһы был тәғрифкә тап килә?**

А. Яҙмыш.

Б. Һиҙәйәт.

В. Тәҡдир.

Г. Тәүәкәлләү.

**5. Түбәндә һаналған ҡайһы ғәмәлгә кеше яуаплы түгел?**

А. Нахаҡ.

Б. Иҫте юғалтыу.

В. Нәфрәт.

Г. Ялған.

**6. Әнүәр үҙенең ҡылған ғәмәлдәренең эҙемтәләрен хәстәрләмәй йыш ҡына яңылыша. Унан быны сәбәбен һораһалар, ул: «Ни яҙылған, шул булыр,» - ти. Әнүәрҙең бындай позицияһы, иман нигеҙҙәренең береһен дөрөҫ аңламауын күрһәтә. Иман нигеҙҙәренең ҡайһыһын дөрөҫ аңламай?**

А. Пәйғәмбәрҙәргә инаныу.

Б. Фәрештәләргә инаныу.

В. Тәҡдиргә инаныу.

Г. Илаһи Китаптарға инаныу.

## ? Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**(мосолман / ярлыҡар; көсө / йөкләмәҫ; файҙалы / зарарлы; бәлә / бәндәләре; нәмәне / тәҡдире).**

1. «Ысын, Беҙ һәр ......... үҙ ......... менән яралттыҡ» (Ҡамар сүрәһе, 49-сы аят).

2. «Аллаһ бер кемгә лә ......... етмәҫлекте .........» (Бәҡара сүрәһе, 286-сы аят).

3. «Сыҙам булғандар, баштарына берәй ......... килһә: «Беҙ - Аллаһтың ........., Аллаһ хозурына барасаҡбыҙ, - тип әйтәләр» (Бәҡара сүрәһе, 156-сы аят).

4. «Шулай ҙа була: һеҙ берәй нәмәнән нәфрәтләнәһегеҙ, ә ул һеҙҙең өсөн ......... ; ҡайһы саҡ һеҙ үҙегеҙгә ......... булғандарҙы ла яратаһығыҙ. Быларҙың барыһын да Аллаһ белә, һеҙ белмәйһегеҙ» (Бәҡара сүрәһе, 216-сы аят).

5. «......... ниндәй хәлгә генә тарымаһын: йонсоумы, ауырыумы ул, хафа, һағыш, күңелһеҙлек, ҡайғы эсендәме, хатта сәнскенең энәһе сәнселһә лә, Раббыбыҙ Аллаһ бының өсөн уның берәй гонаһын мотлаҡ ......... « (Бохари, әл-Мәрдал, 3).



# ЯУАПТАР

## Эргәһендәге бағанан һөйләмдең аҙағын табығыҙ

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Киләсәгебеҙ хаҡында буш борсолоуҙарҙан һәм тулҡынланыуҙарҙан | 7 | ғәмәлебеҙ, инаныуыбыҙ өсөн Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә яуаплы иткән. |
| 2 | Фани донъяла Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә кешеләрҙе шатлыҡ һәм ҡайғы менән һынай, | 8 | уға һалған программаға ярашлы тереклек итә. |
| 3 | Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бер үк ваҡытта хәҙергене, үткәнде, киләсәкте, Ахрызаманды, мәңгелекте белеп тора, сөнки | 1 | тәҡдиргә инаныу арындыра. |
| 4 | Үҙе тир түгеп тапҡанына ҡарағанда, | 6 | тәҡдиргә инаныуыбыҙ төшөндөрә. |
| 5 | Кеше, ынтылышына ҡарап, | 3 | Ул быларҙың барыһын да яралтҡан һәм билгеләгән. |
| 6 | Һәр бер ваҡиғала тәрән хикмәт барлығын | 2 | был донъя бит - һынау урыны. |
| 7 | Үҙебеҙҙең ихтыяр менән ҡылынған | 4 | бирәү ҙә хәйерлерәк ризыҡ ҡапмағандыр. |
| 8 | Ерҙәге бар мәхлүктәр Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә | 5 | теләгәнен алыр. |

## Үҙебеҙҙе тикшерәбеҙ

**1)** В  
**2)** Б  
**3)** В  
**4)** Г  
**5)** Б  
**6)** В

## Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырабыҙ

**1.** нәмәне / тәҡдире

**2.** көсө / йөкләмәҫ

**3.** бәлә / бәндәләре

**4.** файҙалы / зарарлы

**5.** мосолман / ярлыҡар